Ә. Әсфәндиәров

# ОЛАТАЙҘАРҘЫҢ БАР ТАРИХЫ




КАРТА
РОДОВЫХ ГРУПП И ЗЕМЕЛЬНЫХ
БАШКИРСКИХ ДАЧ
К работе С. И. Руденко "Башкиры"
Институт истории языка и литературы Башкирского филиала
Академии Наук СССР
РОДОВЫЕ ГРУППЫ:
1–14 Минцы
15–24 Табынцы
Юрматынцы
Кипчаки
Бурзяне
43–46 Усергане
Тамьяно-табынцы
Катайцы
Кудейцы
Таныпцы
Айлинцы
Кара-барын-табынцы и куваканцы
Катайцы
Кайлино-каршинцы
93–97 Ельдятцы и гарейцы
Енейцы и байлярцы
Иланцы и киргизы
Булярцы
Тазларцы и ирехтинцы
120,123 Уранцы и гайнинцы
Красноуфимск
Кама
Вятка
Уфа
Бирск
УФА
Белебей
Белая
Златоуст
ЧЕЛЯБИНСК
Миас
Верхнеуральск
Урал
Сакмара
ЧКАЛОВ
Орск



ӘНҮӘР ЗӘКИР улы ӘСФӘНДИӘРОВ

1934 йылда Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында тыуған. Иртә етем ҡалып, 1944 — 1953 йылдарҙа балалар йортонда тәрбиәләнә. Өфөлә 9-сы башҡорт мәктәбен һәм 1958 йылда Мәскәү дәүләт университетын тамамлай. Хеҙмәт юлын үҙ мәктәбендә башлай, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй. 1974 йылдан бирле БДУ-ла Ватан тарихын уҡыта. Башҡортостан тарихына бағышланған 10-дан артыҡ китаптары уҡыусыларҙа киң танылыу тапты.

Ә.Әсфәндиәров

# ОЛАТАЙҘАРҘЫҢ БАР ТАРИХЫ



ӨФӨ
«КИТАП»
1996

ББК 63.3 (2 Рәс. Баш)
Ә 68

Әсфәндиәров Әнүәр
Ә 68 Олатайҙарҙың бар тарихы... — Өфө: «Китап», 1996.
— 224 бит.

ISBN 5-295-01672-2

Башҡортостан тарихы буйынса мәҡәләләр йыйынтығы уҡыусыларға, талиптарға, ғөмүмән үҙ халҡының үткәне менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

Ә $\frac{4402000000—164}{М\ 121\ (03) — 96}$ 144 —96 ББК 63.3 (2 Рәс. Баш)

**АСФАНДИЯРОВ Анвар Закирович**

**ЕСТЬ ИСТОРИЯ У ДЕДОВ...**

Редакция мөдире *С. Мөхтәруллина*
Мөхәррире *С. Рәхимова*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *А. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Н. Пятаева*
Корректоры *Ә. Дәүләтшина*

ИБ 5413

Йыйырға бирелде 14.06.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.10.96. Ҡағыҙ форматы 84 × 108$^{1}/_{32}$ Тип. ҡағыҙы № 2. Таймс гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 11,76 + 0,21 форзацы. Шартлы буяу отт. 12,92. Иҫәп-баҫма таб. 12,36 + 0,38 форзацы. Тиражы 10000 дана. Заказ № 246. Хаҡы 4400 һум.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

ISBN 5-295-01672-2 © Әсфәндиәров Ә. З., 1996

## *Авторҙан бер кәлимә һүҙ*

Һуңғы йылдарҙа йәмғиәттәге ҙур һәм мөһим үҙгәрештәр нигеҙендә халҡыбыҙҙың үҙ тарихы, атай-олатайҙарҙың ҡанлы көрәше һәм данлы үткәне менән ҡыҙыҡһыныуы бермә-бер артты. Республикабыҙҙың «Китап» нәшриәтендә, матбуғатта ошо ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү йәһәтенән бик күп тарихи материалдар баҫтырып сығарылды.

Бер нисә уҡыу йылы инде мәктәптәрҙә «Башҡортостан тарихы», «Башҡортостан мәҙәниәте тарихы» кеүек яңы фәндәр уҡытыла башланы. Тәүгеһе буйынса 1917 йылға тиклемге осорҙо үҙ эсенә алған дәреслек тә донъя күрҙе. Ләкин Башҡортостандың тарихы һәм мәҙәниәте буйынса бөтә синыфтарға ла әлегә дәреслектәр баҫылып сыҡманы.

Был йыйынтыҡҡа төрлө йылдарҙа баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрем тупланған. Хронологик яҡтан улар Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылған ваҡытынан — XVI быуаттың уртаһынан алып хәҙергәсә осорҙо үҙ эсенә ала.

Ошо китапты асып ҡараусы халыҡтың Рәсәйгә ҡушылыуға мөнәсәбәте, үҙ ерен, һыуын, динен, ғөрөф-ғәҙәтен һаҡлап ҡалыу өсөн уның берҙәм көрәше, ҡайһы бер ауылдарҙың нигеҙләнеү ваҡыты, башҡорттар араһынан сыҡҡан мәғдәнсе-промышленниктар, уларҙың поташ заводтары, кантон осорондағы айырым башҡорт йырҙарының тарихы, халыҡтың 1812 йылдағы Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы, башҡорттар араһынан сыҡҡан уҡымышлылар, халыҡтың арҙаҡлы улдарының нәҫел-нәсәбе, элек башҡорттарҙа күп ҡатынлылыҡ, шулай уҡ Башҡортостанға һыйынған мишәр һәм типтәрҙәр тураһында документаль сығанаҡтарға нигеҙләнгән бик күп мәғлүмәттәр табасаҡ.

Рәхим итеп, китап биттәрен ас, хөрмәтле уҡыусым!



*«Берлектә — тереклек»*

*Халыҡ мәҡәле*

## АТА-БАБАЛАРЫБЫҘ АМАНАТЫ

Һуңғы ваҡытта Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына шик белдергән һүҙҙәр, икеләнеүле һорауҙар ишетелә.

Илдә барған үҙгәрештәрҙе (социализмдан капитализмға ҡайтыу, Совет власын юҡ итеү, кем нимә теләй, шуны һөйләү һәм ҡылыу һ. б.) иҫәпкә алып башҡорттарҙың батшаға баш һалыуының асыл-рәүешен ҡайтанан ҡарап сығыуҙы талап итеүселәр ҙә юҡ түгел.

Совет осоронда, ысынбарлыҡҡа тура килмәһә лә, ҡайһы бер халыҡтарҙы Рәсәйгә көсләп индереү ғәжәп бер ыңғай күренеш, хатта уларҙың теләге, ихтыяры тип аңлатылды. Был мәсьәләне тарихсылар элек нисек хәл иткән һәм башҡорттар үҙҙәре быға ниндәй баһа биргән тигән һорау тыуа.

Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуының ни рәүешле атҡарылыуы тураһында күптән инде ике фекер йәшәп килә. Уларҙың береһе — Рәсәйҙең Башҡортостанды һуғышып баҫып алыуы. Ошондай ҡараштш *В. Н. Витевский, В. И. Филоненко, А. П. Чулошников, П. Ф. Ищериков, Ш. И. Типеев* һ. б. тарихсылар яҡлап сыҡты. Башҡорттарҙың рус батшаһына үҙ теләге менән ант биреүҙәре тураһындағы фекерҙе XVIII быуатта уҡ рус тарихсыларынан *В. Н. Татищев, П. И. Рычков,* XIX быу-

аттың тәүге яртыһында — *Н. М. Карамзин,* шул быуаттың аҙағында — XX быуат башында — *Д. Н. Соколов, В. А. Новиков* һәм башҡорттарҙан мәғрифәтсе ғалим *М. И. Өмөтбаев* әйтте.

Ә инде башҡорттарҙың батшаға үҙ ирке менән ант биреүен төрлө тарихи сығанаҡтарға таянып, ошо мәсьәлә буйынса ике монография яҙған *Ә. Н. Усманов* һәм шулай уҡ үҙенең күп һанлы хеҙмәттәрендә, китаптарында, мәҡәләләрендә тарихсы *Р. Г. Кузеев* яҡлап сыҡты, яңы дәлилдәр менән раҫланы.

Юрматы шәжәрәһендә әйтелгәнсә, *Иван Грозный,* Рәсәйгә ҡушылырға саҡырып, төрлө халыҡтарға мөрәжәғәт итә. Шунан һәр ырыу үҙ илсеһен Ҡазанға ебәрә. Артабан юрматылар бейе *Тәтегәс* исеменән шәжәрәлә былай тиелә: «Хәлайыҡларымызны жыйуб алдым да дидем: ай, яранларым, без Аҡ биң бадшаһға бардуҡ, баш салдыҡ, ҡол булдуҡ... Йөз сусар ясаҡ түләмәк булдыҡ. Имде сез дә ҡәбул ҡыләмусыз, диб сорадым. Һәммәсе шул хәлайыҡлар: яхшы, барчаларымыз жанделдән ыразый (бөтә күңелдән риза — *Авт.*) булдыҡ, диделәр».

Башҡа ҡәбилә-ырыу башлыҡтары ла үҙ ихтыярҙарын белдереү өсөн Ҡазанға барған. Шулар араһында Тамъяндан — *Шәғәле Шаҡман бей,* Үҫәргәндән — *Бикбау бей,* Бөрйәндән — *Иҫке бей,* Ҡыпсаҡтан — *Мәшәүле Ҡарағужаҡ бей,* Уран аҫабаларынан (Илеш, Баҡалы, Туймазы, Шаран ерҙәре. — *Авт.*) — *Ҡошоҡ бей,* Мең ҡәбиләһенән *Ҡәнзәфәр бей* һәм башҡалар булған.

Рәсәйгә ҡушылыу һөйләшеү нигеҙендә барған һәм уның һөҙөмтәһендә килешеү — договор төҙөлгән. Уның беҙгә билдәле шарттарының иң әһәмиәтлеләре түбәндәгеләр: беренсенән, батша башҡорттарҙың, юрматылар шәжәрәһендә әйтелгәнсә, динен («үҙ динендә торсон») һәм ғөрөф-ғәҙәтен («үҙ ҡағыйҙәсен тотсон») һаҡлауҙы үҙ өҫтөнә алған. Икенсе бер шәжәрәлә былай тиелгән: «Динләремез илә айрә языб, ислам диндә булған башҡырт жәмәғәтларын һис бер ғәйре (икенсе, башҡа. — *Авт.*) дингә көсләмәскә».

Икенсенән, рус батшаһы башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең ергә аҫабалыҡ хоҡуғын (вотчинное право) һаҡлап ҡалдырған һәм уларҙың ер-биләмәләрен ярлыҡтар (грамоталар) менән нығытып ҡуйған. Ер биләмәһенә алынған ҡағыҙ «жалованный» (аҫабалыҡ) йә «оберегательный» (һаҡлау) грамоталар тип аталып, уларҙы батшанан алыуға һәр бер олоҫ (волость) ирешкән. Ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында (һуғыш-күтәрелеш-бола ваҡытында уларҙы юғалтыу, ҙур олоҫтоң бүлгеләнеүе.— *Авт.*) үҙ ер-биләмәләрен һаҡлау-ҡурсалаусы яңы грамоталар алыуға килтергән. Мәҫәлән, Йылан олоҫо 1574, 1626 йылдарҙа, шунан Ҡыр-Йылан, Эске-Йылан һәм Йылан олоҫтарына бүленеп,

тағы ла 1653, 1658, 1685, 1766, 1793 йылдарҙа яңы грамоталар алған.

Батша хөкүмәте һуңғы осорҙа ла башҡорттарҙы ғына аҫаба тип таныған һәм шуны законларҙа нығытып ҡуйған. Мәҫәлән, 1832 йылғы «Ер биләмәләре тураһында»ғы законда былай тиелгән: «Вотчинниками считаются все башкирцы к одной волости или тюбе (подразделение волости) принадлежащие, хотя бы они разделялись на разные команды (т. е. юрты, состоящие каждый из нескольких деревень) и даже состояли в разных уездах».

Кантон системаһын бөтөргән ваҡытта, хәрби ҡатламдан гражданлыҡ хәленә күсереүгә ҡырҡа ҡаршы сығып, Бәләбәй өйәҙе башҡорттары Себергә күсеп китәсәктәрен белдергәс, Ырымбур хәрби губернаторы *А. П. Безак* 1864 йылда түбәндәге һүҙҙәрҙе әйткән: «Беҙҙең бөтә дәүләтебеҙҙә тик башҡорттар ғына аҫаба хоҡуғында ер биләйҙәр. Уларға башҡа урында бушлай ер бирелмәйәсәк. Хатта урыҫ казактарының да үҙ ере юҡ, улар йәшәгән ер — ҡаҙнаныҡы. Казактар ул ерҙе һата һәм ҡортомға ла бирә алмайҙар, ә башҡорттарға быларҙың бөтәһе лә закон менән рөхсәт ителгән».

Ләкин башҡорттарҙың аҫабалығын таныу батша хөкүмәтенең башҡорт ерҙәренә ҡул һоноуын тыймаған, киреһенсә, ул аҫабалыҡ хоҡуғын ҡыҫа барған, ләкин уны бөтөнләй үк юҡ итергә баҙнат итмәгән. Быға башҡорттарҙың ҡырҡа ҡаршы тороуы, өҙләкһеҙ көрәшкә күтәрелеүе булышлыҡ иткән. *П. И. Рычковтың* 1774 йылда яҙыуынса: «Башҡорт халҡы үҙенең аҫаба ер биләмәләренән башҡа бер нәмәне лә шул тиклем ихтирам итмәй һәм һаҡламай... уны үҙенең аҫаба биләмәһе һанап һәм уны яҡлап, йыш ҡына баш күтәрҙе һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбан бирҙе».

Башҡорт халҡының Рәсәйгә ҡушылған ваҡытта аҫаба ер биләмәһенең күләме, үлсәнмәү сәбәпле, беҙгә билдәһеҙ. Ерҙе межалау тик XIX быуаттың башында ғына башҡарылған. Шул ваҡытта Ырымбур губернаһында (Минзәлә, Бәләбәй, Бөрө, Өфө, Троицк, Силәбе, Ырымбур, Үрге Яйыҡ (Верхне-Уральск), Стәрлетамаҡ, Бөгөлмә, Быҙаулыҡ, Боғорослан өйәҙҙәре) бөтәһе 28 миллион дисәтинәнән (1 дисәтинә 1,09 гектарға тигеҙ. — *Авт.*) артыҡ ер булған. Башҡорттар йәшәгән Пермь губернаһының биш өйәҙе (Шадрин, Красноуфимск, Екатеринбург, Пермь, Уса), Вятка губернаһының ике (Алабуға, унда 12 башҡорт ауылы һәм Сарапул — 5 ауыл) өйәҙе, Һамар һәм Һарытау башҡорттарының ер биләмәләре сама менән — 10 млн дисәтинәгә тиң булған. Тимәк, башҡорттар ҡулында XVI быуат уртаһына сама менән 33—38 млн дисәтинә ер булған.

XVI—XIX быуаттар араһында Башҡортостанда промышленностың, алпауыт һәм монастырь ер биләмәләренең үҫеүе, ҡала-нығытмаларҙың ҡалҡып сығыуы, төрлө милләт крәҫтиәндәренең күсеп килеп ултырыуы башҡорт аҫаба ер биләмәһен бик ныҡ кәметкән. XIX быуат башында Ырымбур губернаһында дөйөм ер күләменең өстән бер өлөшө генә улар ҡулында ҡалған. Ваҡыт үтә килә ул өлөштөң дә байтағын башҡалар үҙләштергән. Дворян һәм заводсылар ҡулына — 4 млн, рус крәҫтиәндәренә — 3 млн, татар, мишәр, мари, сыуаш, удмурт, мордва крәҫтиәндәренә 2 млн дисәтинә ер эләккән. Ҡалғандары башҡорттарҙан тартып алынған ҡаҙна биләмәләрен тәшкил иткән. Ә шулай ҙа батша башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғына теймәгән.

*Иван IV* менән төҙөлгән килешеүҙә башҡорттар ер өсөн яһаҡ түләү, батша подданныйҙары булараҡ, уға тоғро булырға һәм хәрби хеҙмәт үтәргә йөкләмә алғандар. Улар анттарына һәр ваҡыт тоғро булған.

Һүҙ ыңғайында әйтеп үтәйек: әгәр батшалар килешеү шарттарын йыш ҡына боҙорға ынтылһа, башҡорттар уның дөрөҫ үтәлеүен талап итеп, уға ҡаршылыҡ күрһәткән, баш күтәргән. Ләкин Рәсәйҙән сығыу мәсьәләһен, бер-ике осраҡты ғына иҫәпләмәгәндә, улар көн тәртибенә һис тә ҡуймаған. Мәкәләне уҡыусыларҙа ниндәй генә фекер тыумаһын, әммә *Иван IV* менән төҙөлгән килешеүгә беҙҙең ата-бабалар тоғро булып ҡалған, тип ныҡлап әйтеп була. Был башҡорт халҡының законға ярашлы эш итеүе, ата-бабалар ҡул ҡуйған килешеүҙе саманан тыш ихтирам итеүе, бөгөн шул традицияны дауам итеп, үҙ республикаһының Рәсәй менән, Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтар менән хоҡуҡи мөнәсәбәттәр урынлаштырырға ынтылыуында ла тойола һәм күренә.

Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыу рәүешен башҡорттарҙың үҙҙәрендә һаҡланған башҡа тарихи сығанаҡтарҙа ла күҙәтергә мөмкин. Был бигерәк тә батша тарафынан ике яҡтың килешеү шарттарын боҙоу һәм уға ҡаршы башҡорттарҙың мөнәсәбәтен күрһәткән ҡағыҙҙарҙа асыҡ сағыла.

1709 йылда батша *Петр Беренсегә* яҙған һораунамәһендә *Арыҫлан Аҡҡолов* (*Пугачевтың* буласаҡ полковнигы һәм уның иң яҡын көрәштәше *Кинйә Арыҫлановтың* атаһы. — *Авт.*) һалымдарҙы уйлап сығарыусы — прибыльщиктар *Андрей Жихарев* («Әндрәй ҡаҙнаһы» һүҙенең тыуыуы уға бәйле) һәм *Михаил Доховтың* яңы түләүҙәр индереп, халыҡты бөлдөрөүе *Иван IV* менән төҙөлгән килешеүгә ҡырҡа ҡаршы килеүен һыҙыҡ өҫтөнә алған. Бына нәмә яҙа ул: «Великим государям деды и отцы их поклонились без спору и без войны и, приехав, из своей воли покорились, и которыми вотчинами при царях

своих владели и ясаки платить договорились, чтоб их веры не нарушить и как ясаки платили деды и отцы их изначала, и им бы платить так же, как и наперед сего плачивали при прежних царях, против прежнего без прибавки, и они же великому государю покорны». Һүҙен дауам итеп, ул өҫтәп һалым һалыусыларҙың ҡомһоҙлоғон шул килешеүҙе боҙоу тип ҡарай. Килешеү шарттарын ошолай боҙоу 1661—1664, 1681—1684, 1704—1711 йылдарҙағы башҡорт күтәрелештәренә килтергән.

1735—1740 йылдарҙа тағы бер ҡораллы ҙур күтәрелеш була. Баш күтәреүселәрҙең етәксеһе Себер юлы батыры *Йосоп Арыҡов* та Рәсәйгә ҡушылыу шарттарының батша властары тарафынан боҙолоуын улар биләмәһендә ҡалалар (мәҫәлән, Үрге Яйыҡ) төҙөлөүендә күрә. Ихтилал баҫтырылып, әсиргә эләккәс, ул 50 тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырыла һәм бер сәғәт буйына ҡабырғаһынан ырғаҡ менән аҫып ҡуйыла. Шунан һуң һорау алғанда: «Мы, башкирские народы, наши отцы, деды, прадеды великому государю в подданство пришли своими волями, оставя своих ханов, и великие государи нас содержали по нашей воле, а не под саблею, и даны нам земли, за которые положены на нас ясаки... в знак того, что мы подданные, платили ясак. И нам на земли даны от государей крепости и за платеж ясака отписи... А ежели по-прежнему содержаны не будем, то хотя пропасть, хотя смерть принять готовы, а в другие места идти нам некуда», — тип яуап бирә.

Башҡорттарҙың 1736 йылдағы ихтилалы осоронда уның етәкселәренең береһе Себер юлы Ҡыр-Көҙәй олоҫонан *Юлдаш мулла Һөйәрембәтов* бригадир *М. С. Хрущев* аша Екатеринбург тау заводтары етәксеһе *В. Н. Татищевҡа* ошо турала бына нәмә яҙған: «Башҡорттар батшаларҙы һәм бөйөк кенәздәрҙе табып, уларҙың ғали йәнәптәре ҡулы аҫтына үҙҙәре килде, ә башҡа дәүләттәр кеүек көс һәм һуғыш менән подданныйлыҡҡа күсмәне».

Өфө провинция кәнсәләре тәржемәсеһе *Килмөхәммәт Ураҡовтың* башҡорттарҙың тарихы һәм хужалары тураһында императрица *Елизавета Петровнаға* тәғәйенләп 1746 йылдағы яҙыуында ла һүҙ шул турала бара: «И через несколько время, как блаженные и вечно достойные памяти государь, царь и великий князь *Иоанн Васильевич — Иван IV* завоевал Казанское, Болгарское царства, оной башкирский народ своим желанием, без всякого принуждения, оставя своего хана, пришли к нему в подданство, перенели на себя платить в казну подати, называемой ясак. Для владения оных земель и угодья пожалованы были им грамоты, которые платили реченной ясак в Казане несколько лет. Потом... в город Уфу».

1767—1768 йылдарҙа *Екатерина II* Закондар йыйынтығы әҙерләү өсөн комиссия төҙөй. Һәр бер ҡатламдан һәм халыҡтан депутаттар һайлана. Улар *Әбей батшаға* халыҡтың үтенестәрен алып барған. Бына шунда башҡорттарҙан Ғәйнә олоҫонан (Пермь яғы. — *Авт.*) *Туктамыш старшина Ишбулатов* (Ҡажмаҡты-Барҙы ауылынан) һәм Исәт провинцияһынан Мәкәте олоҫо башҡорто *Баҙарғол Юнаев* (аҙаҡ *Пугачев* фельдмаршалы) алып барған халыҡ үтенестәрендә «Беҙҙең башҡорт халҡы *Иван Васильевичҡа* үҙ ирке менән баш һалған» тип яҙылған.

Ырымбур губернаһы идаралығының төрлө халыҡтары тураһындағы 1800 йылдағы «Яҙма»һында түбәндәге хаҡ һүҙҙәрҙе уҡып белергә була: «Башкирский народ считается здесь самым первым. России известен стал с шестого на десять столетия. В подданство пришел во время царя *Иоанна Васильевича*, спустя четыре года после взятия Казани».

*Байыҡ сәсән Әбләев* (1734—1815 йылдар, улы *Әхтәм*, 1785 йылғы, Монай-Арҡауыл ауылынан Мәхмүткә күскән, хәҙерге Салауат районы) беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәсьәләгә ифрат ыңғай ҡараштаа булған. Бына уның «ни өсөн башҡорт батшаға баш эйгән» тигән һорауына үҙенең яуабы:

Быуын-быуын үткәндә,
Хандар килеп киткәндә,
Хандан илгә ни ҡалды?
Эркелеп ҡандан һаҙ ҡалды,
Ил таланып таҙ ҡалды (йәғни бөлдө. — *Авт.*)
Өҫтөндә бөтмәҫ зар ҡалды,
Олатайҙар дихайға (бушҡа. — *Авт.*)
Мәскәүгә баш эймәгән,
Яҡла, тип Аҡ батшаға
Бушҡа тик ант бирмәгән.

«Сыңғыҙҙай эт» Наполеон килеп яу асҡан саҡта антын боҙғанға ни булыр» тигән икенсе һорауға яуабының төбө лә XVI быуатҡа барып тоташалыр:

Мәскәү бит оран һалған:
«Аҡ батшаға ант биргән
Ирҙәр менһен ат!» — тигән.
Батша бит һөрән һалған:
«Илде баҫты ят!» — тигән,
Минең дә һүҙем шул булыр:
Ант боҙғанға ни булыр? —
Таяныр терәге юҡ булыр,
Ҡаңғырып йөрөр Байыҡтай,
Тынлыҡ тапмай хур булыр.

Рәсәйҙең хәрби министрына 1820 йылда Үрге Йайыҡ өйәҙе башҡорттары исеменән хорунжа *Зөлҡәрнәй Буранбаев* (сәсән *Буранбай Ҡотосовтың* улы, хәҙерге Баймаҡ районы Буранбай-Кинйәбулат ауылынан) һәм башҡалар һораунамә менән мөрәжәғәт иткән. Шунда башҡорт халҡының, Наполеон яуына ҡаршы Байыҡ сәсәндең саҡырыуына яуап иткәндәй, 28 атлы полк ебәреүе һәм уларҙың ҡаһарманлығына ғорурлыҡ белдереп, сал тарихты — Рәсәйгә ҡушылыу осорон да унда иҫкә алып, башҡорттарҙың үҙ теләктәре менән батшаға ант итеүҙәрен ныҡлап әйтеп үткәндәр. Бына нисек яҙылған был һораунамә: «Самодержец царь *Иван Васильевич* по взятии Казанского царства высочайше пожаловал предкам нашим те земли, коими мы владели, но и даровал преимущество родового княжеского и тарханского происхождения, видевши таковое... монаршее благоволение, не бывши покорены оружием, большая часть башкирского народа охотно преклонилась под мудрое управление венценосца».

Рәсәйгә үҙ теләге менән ҡушылыу башҡорттарҙың аңында оҙаҡ һаҡланған. Аҫаба биләмәләрен талауҙар осоронда улар һәр ваҡыт шул нигеҙле дәлилгә таяныр булған. Беренсе Дәүләт думаһы трибунаһынан ер мәсьәләһе тикшерелгәндә башҡорттарҙан һайланған депутат *Ш. Ш. Сыртланов* «башҡорттар баҫып алынған халыҡ түгел» тип, шул хәҡиҡәтте аңламағандарҙың ҡолағына еткергән.

Заманында был берҙән-бер дөрөҫ юл булғанына ата-бабаларыбыҙ ышанған. Башҡортостан һәм Рәсәй тарихында был ысынлап та ыңғай күренеш булған һәм XVI—XX быуаттарҙа башҡорт илендә яҡлау тапҡан.

Ләкин Рәсәйгә ҡушылыуҙың һөҙөмтәһен үтә ыңғай баһалау бөгөн үҙгәртелергә тейеш. Рәсәй эсендә йәшәгән халыҡтың төрлө өлкәлә ирешкән уңыштары саманан тыш шапыртып күрһәтелде.

XVI быуатта *Иван IV* менән төҙөлгән килешеүҙең халыҡтар араһында тиңлек килтерәсәгенә, ер биләмәләренең, диндәренең, ғөрөф-ғәҙәттәренең һаҡланасағына башҡорттар бик ныҡ ышанған. Рәсәйгә ҡушылған осорҙа үҙәкләштерелгән берҙәм һәм ҡеүәтле Рус дәүләтендә вассаллыҡ урынына яңы подданныйлыҡ мөнәсәбәте урынлашҡанын башҡорттар әлегә белмәгән. Шул осорға тиклем вассаллыҡ хәле өҫтөнлөк иткән һәм теге йәки был рус кенәзлегендә бөйөк кенәздең бойороғо унан түбән тороусылар тарафынан бик үк үтәлмәгән, ваҡ кенәздәр (бей, тархандар. — *Авт.*) бөйөк кенәз менән тиң булырға ынтылған. Улар теләһә, бөйөк кенәзгә хеҙмәт иткән, теләмәһә — хатта күрше кенәзлектәргә күсенеп тә киткән. (Был принциптың ҡалдығы һаман барыуын *Андрей Курб-*

*скийҙың Иван IV-гә* хыянат итеп, Литва кенәзлегенә күсеп китеүе лә күрһәтеп тора.) Башҡорт ырыу-ҡәбилә бейҙәре тәүге осорҙа ошо вассаллыҡ нигеҙендә генә батшаға хеҙмәт итергә теләй. Ләкин башҡорттар *Аҡ батшаға* баш һалған саҡта Рәсәй күптән инде подданныйлыҡ мөнәсәбәтенә күскән булған. Ул батшаға буйһоноуҙы талап иткән һәм башҡорт бейҙәре (Рәсәйгә ҡушылғас, староста-старшиналары. — *Авт.*) шуға мәжбүр ителгән. Тимәк, тиңлеккә ынтылыу феодализм осоронда улар өсөн хыял ғына булып ҡалған. Шул уҡ хәлде буржуаз ҡоролош законадары хөкөм һөргән саҡта ла күрәбеҙ. Әгәр халыҡ үҙенең талауҙан ҡалған әҙ-мәҙ ерен, кәмһетелгән динен, ғөрөф-ғәҙәтен, телен һәм милли аңын һаҡлап алып ҡалған икән, был уның ҡанлы көрәше һөҙөмтәһе.

Ул көрәштең нигеҙен аҫаба хоҡуғын һаҡлау талабы тәшкил иткән. Аҫабалыҡ башҡорт халҡының милли аңының таянысы ла булған һәм башҡортто халыҡ булараҡ һаҡлаған, ҡурсалаған. Хатта феодал ҡоролошта ла башҡорттар, аҫаба булараҡ, үҙҙәрен ифрат берҙәм, ныҡ тупланған халыҡ итеп хис һәм эш иткән. Октябрь революцияһынан һуң «халыҡ» власының аҫаба хоҡуғын бер һелтәүҙә юҡ итеүе башҡорт халҡының тәркөмдәргә тарҡалыуына төп сәбәпсе, динен ҡоротоуға, ғөрөф-ғәҙәттәренән, тимәк, теленән яҙҙырыуға ла этәргес көс булды. Бына нәмә булған ул башҡорт өсөн аҫабалыҡ! Советтар килгәс, Рәсәй менән икенсе килешеүгә мөкиббән киткән башҡорт халҡы икенсе тапҡыр алданыуға дусар ителгән. Совет власы башҡорттарҙың аҫаба хоҡуғын ғына юҡ итеү менән сикләнмәгән, ә киң хоҡуҡлы автономияны юҡҡа сығарған. «Халыҡ» власы ярандарының совет осоронда башҡортто «һыпырып» ҡырыуы батша заманындағы Рәсәйҙең теләһә ниндәй ҡырағай ысулдарынан һәм эшенән уҙып киткән.

Хәҙер өсөнсө тапҡыр Башҡортостан «демократик» федератив Рәсәй менән тиң хоҡуҡтар алыу өсөн ҡурҡа-өркә генә көрәшә башланы. Федератив килешеү тиңдәр араһындағы килешеү түгел, сөнки уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте метрополия һәм колонияны ныҡ хәтерләтә. Был Федерация ла тәүге совет федерацияһы кеүек халыҡ мәнфәғәтен инҡар итәсәге күренеп тора. Суверенлы Рәсәй эсендә суверенлы Башҡортостандың булыуы мөмкин түгеллеген, бының һүҙ буҡаһы икәнлеген һәр кем белһен ине. Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы Башҡортостандың яулап алған автономияһын юҡҡа сығарыуҙы күҙҙә тота. Халыҡтың тыуған еренә, иленә хоҡуғын инҡар итә. Ә был уның милли йөҙөн, асылын юҡ итәсәк. Әгәр халыҡ өсөнсө тапҡыр алданһа, ул колония ҡоллоғонан ҡотолоу юлын эҙләйәсәк. Әгәр бөгөн Башҡортостан республикаһы халыҡтары вәкилдәре Верховный Советта ата-бабаларының аманатына

таянып, уның Рәсәй эсендә ҡалыуын хуп күргән икән, был уларҙың Рәсәйгә ҡарата һаман ышанысы барлығын күрһәтә.

Әгәр ышаныс аҡланмаһа, тәү ҡараштa ят күренгән, ләкин үҙенә тартып торған яңы дәүләттәр ойошмаһы — конфедерация барлыҡҡа килеүе ихтимал.

Башҡортостандың 439 йыл буйына Рәсәй эсендә булыу һабаҡтары бына ошолар.



*«Үҙ аҫаба ер биләмәһен яҡлап, башҡорттар йыш ҡына баш күтәрҙе һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбан бирҙе»*

*П. И. Рычков*

## 1. ӘНДРӘЙ ҠАҘНАҺЫ

Халҡыбыҙҙың күңел һандығында ҡанатлы бер һүҙ бар — «Әндрәй ҡаҙнаһы». Бала-сағаның теге йәки был әйберҙе алып биреүҙе һорап мыжығанында ата-әсәһенең «Миндә Әндрәй ҡаҙнаһы юҡ, бары ла еткән» тип әйтеүҙәрен һәр кем ишеткәне барҙыр. Шунан һуң ғына был һүҙҙең мәғәнәһенә иғтибар итеп ҡуйғандай булабыҙ. Шул ваҡытта Әндрәй ҡаҙнаһы — һәр кемгә бөтмәҫ-төкәнмәҫ бер байлыҡ сығанағы булып күренгәндәй кеүек. Иң беренсе был һүҙгә аңлатманы профессор *З. Ғ. Урахсин* бирҙе. Үҙенең монографияһында ул ике яҙыусының әҫәренән миҫал да килтергән. Уларҙың береһе яҙыусы *Шакир Янбаев* әҫәренән: «Я, хоҙа! Ғәфүргә аҡса, квартираға аҡса, һиңә аҡса! Миндә Әндрәй ҡаҙнаһы бар тип уйлайһығыҙмы?»

Был һүҙ *Петр Беренсе* батша заманынан бирле билдәле.

Феодал-крепостник Рәсәй дәүләтенең үҫеүе, хәрби-бюрократик дәүләт аппаратының нығыуы, Балтик диңгеҙенә сығыу өсөн алып барылған бик оҙаҡҡа һуҙылған Төньяҡ һуғышы (1700—1721 йылдар) илдең бөтә кеше һәм матди сығанаҡ байлыҡтарын туплауҙы талап иткән. Бының өсөн аҡса кәрәк булған. Петр хөкүмәте ошо ауыр хәлдән сығыу юлын феодал һалым-налогтарҙы артабан арттырыуҙа күргән. Рус крәҫтиән-

дәренең һалымы ике тапҡырға артҡан. Башҡорттар ҡаҙнаға ҡиммәтле йәнлек тиреләре һәм бал менән яһаҡ түләгән, хәрби хеҙмәт үтәгән. Бынан тыш уларға өҫтәлмә төрлө һалымдар индерелгән.

Бына ошо маҡсат менән 1704 йылда Башҡортостанға яңы һалымдарҙы уйлап сығарыусылар (прибыльщиктар. — *Авт.*) *Андрей Жихарев* һәм *Михаил Дохов* килгән. Улар башҡорттарға ошоға тиклем уларҙың ата-бабалары белмәгән 72 төрлө яңы һалымдар иғлан иткән. Шулар араһында һәр кешенең күҙ төҫөнә ҡарап айырым түләү (ҡара булһа — 12 тин, һоро булһа — 4 тин), мәсет, мунса, балыҡ тотоу урындары һ. б. яңы төр һалымдары индергәндәр. Өҫтәмә һалымдар йыйыуҙан тыш *Андрей Жихарев* уҡыған указда мосолмандарҙың дини тойғоларына ла тейгән талаптар булған. Мәҫәлән, мәсетте христиандар сиркәүенә оҡшатып төҙөү, мәсет эргәһендә зыярат урынлаштырыу, никах уҡығанда мулланан башҡа поптың да булыуы күҙ уңында тотолған.

Указды *Андрей Жихарев* Өфөлә 5 октябрь көнө Ағиҙелдең ҡомло һул ярында Башҡортостандың Ҡазан, Нуғай, Уса һәм Себер өлкәләренән (юлдарынан, йәғни даруғаларынан. — *Авт.*) йыйылған башҡорттарҙың ышаныслы вәкилдәренә уҡыған. Тылмас уны тәржемә иткән.

Указды уҡып ишеттергәс, тыңлаусылар бындай хәлдең батшанан сығыуына ышанмаған һәм иғлан ителгән һалымдарҙан баш тартҡан. Улар үҙҙәренең бөтә асыуын *Андрей Жихарев* һәм уның юлдаштарына йүнәлткән. Халыҡ һалым һалыусыларға ташланған һәм уларҙы туҡмаған. Ә указды *Андрейҙан* тартып алып, Ағиҙелгә ағыҙып ебәргән. Үҙәк властар халыҡтың күтәрелешенән ҡурҡып, һалым һалыусыларҙы бик ашығыс рәүештә кире саҡыртып алған. Шул ваҡыттан алып Башҡортостанда башҡа яңы һалымдар уйлап сығарыусылар булмаған. Бына ошо хәл-ваҡиға бөгөнгә тиклем йәшәп килгән ҡанатлы һүҙҙе барлыҡҡа килтергән.

Ләкин халыҡтың был тантанаһы оҙаҡҡа бармаған. Төньяҡ һуғышын дауам итеү өсөн аттар һәм һалдаттар талап ителгән. Шуларҙың бер өлөшөн йыйыу өсөн, һалымсыларҙың китеүенә бер нисә ай тулғас, Башҡортостанға Ҡазан комиссары *Александр Сергеев* килеп тә еткән. Ул башҡорттарҙан ғәскәри көстәр өсөн 5—6 мең ат һәм 1 мең кеше биреүҙәрен талап иткән. Бынан тыш башҡорттар араһында артыҡ һалым арҡаһында башланған сыуалыштарҙы баҫтырыуҙы ла уға йөкмәткәндәр. Бының өсөн уның ҡарамағына Минзәләлә урынлашҡан алты полк бирелгән. Минзәләнән Өфөгә, шунан Табын яғында урынлашҡан Тоҙ ҡайнатыу (Соловар) ҡаласығына барғанда, унан киренән Өфөгә ҡайтҡан юлда *Сергеев* башҡорттарҙы бик

ҡаты йәберләгән. Почта стансаларында уларҙан 600-шәр ылау талап иткән. Халыҡты ҡурҡытыу өсөн туптар аттырған. Шунан һуң бөтә башҡорт йәмғиәтенең ышанысл кешеләрен Өфөгә саҡыртҡан. Халыҡтың был вәкилдәренән *Сергеев* 5 мең ат һәм бер мең кешене һалдатҡа биреүҙе һәм уларҙың ризалығын белдергән тамғалары ҡуйылған ҡағыҙ ҙа талап иткән. Ләкин халыҡ быға ризалыҡ бирмәгән. Шуға күрә уның вәкилдәре *Сергеевтың* талабын кире ҡаҡҡан. Бына шунан һуң уларҙы туҡматыу һәм мыҫҡыл итеү башланған. Экзекуция һөҙөмтәһендә бер нисә кеше үлгән, ә ҡалғандары һаҡ аҫтына алынған. Һәр бер башҡортто айырым саҡыртып, аҫыу һәм йортон яндырыу менән ҡурҡытып, Сергеев үҙ талаптарына ризалыҡ белдергән ҡағыҙға тамғаларын һуҡтырған. Бынан тыш Сергеев Өфөгә төрлө йомош менән килгән бөтә башҡортто йыйҙырып, уларҙы үҙенә саҡыртҡан. Тирә яҡтарына һаҡсы ҡуйылған нығытманы хәтерләткән баҡсаға саҡырылған «ҡунаҡтар» бикләп ҡуйылған. Бер аҙ ваҡыт уҙғас, хужа уларҙы бал һәм хәмер менән «һыйлай» башлаған. Эсеүҙән баш тартҡандарға ҡамсы тейгән. Ә шулай ҙа араҡыны көсләп эсерткән. Элек хәмерҙең нимә икәнен белмәгән һәм бер нәмә лә белмәй иҫереп ятҡандарын киренән уятҡан һәм тағы ла эсерткән. Был меҫкендәрҙән көлөү, мыҫҡыл итеү шулай дауам иткән: иҫеректәрҙең бармаҡ араларына һалам, май шәме ҡыҫтырып, ут төрткән. Хатта уларҙың кеҫәләренә дары һиптереп, уға йәнә ут ҡабыҙғандар.

Әҙәм аҡтығы *Сергеевтың* кешенән ошолай көлөүе бының менән генә сикләнмәгән. Иң һуңында ул һәр иҫеректең янына килеп, ҡулындағы көҙгө аша ҡояш нурҙары төшөрөп, уның сәсен өткән һәм битен яндырған. Әгәр был бисара урынынан ҡуҙғалһа, уның башын күтәреп, ауыҙына хәмер ҡойҙортҡан. Был «һый» барышында «ҡунаҡтарҙың» ҡотон алыу өсөн көнө буйы туптар гөрһөлдәп торған. Садист *Сергеевтың* ошондай «ҡунаҡсыллығы» арҡаһында ете кеше донъя ҡуйған.

Сергеев, баш ҡалаға барып ҡайтҡас та, баш-баштаҡлығын дауам иткән. Бүләр һәм Йәнәй олоҫтарынан саҡыртып алған ун бер башҡортто аслыҡта интектергән. Уларҙың бер нисәһен үлтергән һәм ауылдарын утҡа тотҡан.

Шулай итеп, һалымсыларҙың «эшмәкәрлеге», *Сергеевтың* яуызлығы, баш-баштаҡлығы, халыҡтан көлөү 1704—1711 йылдарҙа барған башҡорттар ихтилалының башланыуына сәбәп булған.

1708 йылдан алып 1722 йылға тиклем бер нисә тапҡыр бөтә башҡорт халҡы исеменән Ҡыпсаҡ олоҫонан *Арыҫлан батыр Аҡколов* менән бик күп старшиналар яһаҡ йыйыусыларҙың баш-баштаҡлығы, йәберләүҙәре өсөн уларҙы

язаға тарттырыуҙы һорап юғары власҡа мөрәжәғәт итәләр. Хаттар һөҙөмтәһендә ҡылынылған енәйәтте тикшереү өсөн Өфөлә комиссия төҙөлгән. Оҙаҡ йылдар *Андрей Жихарев* һәм *Сергеевтан* һорау алғандар. Уның эшенә башҡорттар ҙа саҡырылған. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, шулар араһынан тик *Сергеев* ҡына ҡаты яуапҡа тарттырылған.

Ырымбур ҡалаһын төҙөү өсөн булдырылған Ырымбур экспедицияһының етәксеһе *Иван Кириллов* яһаҡсыларҙың һәм *Сергеевтың* енәйәтен танырға мәжбүр булған. Был ғына ла түгел, ул хатта башҡорттарға батша тарафынан үҙ ерҙәренә бирелгән жалованный грамоталарҙың, йәғни аҫабалыҡ ярлыҡтарының, ысынлап та булыуын раҫлай. Шуның менән бергә теге енәйәтселәрҙең был документты юҡҡа сығарырға уйлауҙарын һыҙыҡ өҫтөнә алған.

Шулай итеп, Әндрәй ҡаҙнаһы тигән ҡанатлы һүҙҙе батша *Петр Беренсе* тарафынан үткәрелгән эске һәм тышҡы, бигерәк тә социаль сәйәсәт тыуҙырған. Был һүҙ халыҡтың ауыр тормошоноң, көрәшенең шаһиты буларак, уның күңелендә бер ҡомартҡы булып һаҡлана.

## 2. БАТША ҺӘМ ИСЛАМ ДИНЕ

Батша хөкүмәтенең колониаль сәйәсәте Рәсәйҙең рус булмаған халыҡтары араһында төрлө рәүештә үткәрелә. Ул сәйәсәттә дин мәсьәләһе күп урын биләмәй. Хөкүмәт теге йәки был осорҙа, алдына ҡуйылған маҡсаттан сығып, колониаль сәйәсәттең ысулдарын да, ағыштарын да үҙгәртеп тора.

Батша хөкүмәтенең Башҡортостанда бөтә феодализм осорондағы (XVI быуаттың икенсе — XIX быуаттың беренсе яртыһы) дини сәйәсәте ошоға тиклем махсус өйрәнелмәне. Революцияға тиклем йәшәгән тарихсылар тарафынан был мәсьәләнең Ырымбур-Өфө епархияһы эшмәкәрлеге, Өфөлә мосолман Дини собраниеһын (Диниә назаратын) асыу, Иҙел (Волга) буйы һәм Башҡортостан мәжүсиҙәре менән мосолмандарын суҡындырыу кеүек яҡтары ғына тикшерелде.

Был мәҡәләлә батша хөкүмәтенең дини мәсьәләләр буйынса сәйәсәтенең мәғәнәһен асыу, уны тормошҡа ашырыу юлдарына туҡталмаҡсымын.

Батша хөкүмәтенең дини мәсьәләләр буйынса сәйәсәтен дүрт осорға бүлергә була. XVI быуаттың икенсе яртыһын — XVII быуаттың 80-се йылдарын үҙ эсенә алған беренсе осорҙоң йөкмәткеһе: башҡорттарҙың рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылған саҡта *Иван IV-нең* башҡорт ырыу башлыҡтары менән килешкән шарттарын хөкүмәттең бер һүҙһеҙ үтәүе.

Быға, күрәһең, Башҡортостандың үҙ ирке менән ҡушылыуы ғына сәбәпсе түгел, ә төп сәбәп — батшаларҙың ул ваҡытта әле дәүләттә абсолют йәки сикләнмәгән власҡа эйә булмағанлығы. Әкренләп, самодержавие ойоша башлаһа ла, сиркәү власының батша власына ҡаршы тороуы дауам итә.

Крайҙы колонизациялаштырыу башлана ғына әле, бер нисә ҡәлғә-ҡала ғына төҙөлгән саҡ. Дворяндар ҙа көсһөҙ, улар ҡалалар тирәһен генә биләй. Православие сиркәүе лә дүрт монастырь һәм 30 — 40 ғибәҙәтхана ғына һалып өлгөргән. Шулай уҡ крәҫтиәндәр ҙә күпләп күсенә башламаған. Быларҙың бөтәһе лә башҡорттарҙың аҫабалығын нығытырға мөмкинлек бирә. Халыҡтың йыйындары, аҡһаҡалдар идараһы һаҡланып килә. Шул уҡ ваҡытта ислам дине лә ныҡлап тамыр йәйә.

Икенсе осор 1681 йылда *Сәйет Садир* етәкселегендәге ихтилал башланғандан алып 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалына тиклемге ваҡытты үҙ эсенә ала. Был осор Башҡортостанда батша хөкүмәтенең әүҙем дини сәйәсәтенең башланыуы, Рәсәйҙә самодержавиеның нығыныуы, батшаның сикләнмәгән власҡа эйә булыуы менән ныҡ бәйле.

Дини иҙеүҙең башы дәүләт закондарында яҡшы күренә. 1681 йылдың 15 февралендәге указ менән суҡынғандарға өҫтөнлөктәр бирелә, өҫтәүенә эш хаҡы ла вәғәҙә ителә. 1681 йылдың 16 майындағы указ суҡыныуҙан баш тартҡан татар мырҙаларын ер биләмәләренән мәхрүм итә. 1681 йылда Өфөлә махсус епископ тәғәйенләнеүе лә ошолай ҡабул ителә. Башҡа дин кешеләрен христианлыҡҡа күсерергә бойороҡ бирелеүе хаҡындағы хәбәр 1681—1684 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының башланыуына төп сәбәп була.

Башҡорттарҙың хәрәкәтен һүлпәнәйтеү маҡсатында батша хөкүмәте 1682 йылдың 6 июнендә махсус грамота баҫып сығарырға мәжбүр була: «...такого нашего указа о крещении, чтоб крестить неволею, не бывало и ныне нет. И вам бы о том ни о чем не сумневатца».

Ихтилалды тар-мар иткәс тә, христиан миссионерҙарының эше уңышлыраҡ барһын өсөн, суҡынғандарға өҫтөнлөктәр биреүҙе дауам итәләр. Атап әйткәндә, бер указ буйынса яңы суҡынғандарҙы холоплыҡҡа күсереү тыйыла. Шул уҡ ваҡытта батша хөкүмәте христиан булмаған халыҡтарҙың дини тойғоларын рәнйетмәй генә, «изге динде» ирекле рәүештә ҡабул итеү йүнәлешен тоторға тырыша: «которые крестятся, и к тем держать ласку и привет, чтобы на тех смотря и иные православной веры пожелали».

Төньяҡ һуғышы осоронда — 1700—1721 йылдар — аҡсаға мохтажлыҡ кисергән хөкүмәт дәүләт ҡаҙнаһы файҙаһына иҙеүҙе көсәйтә. Шул осорҙа Башҡортостанда яңы һалым уйлап

табыусылар — *Андрей Жихарев* менән *Михаил Дохов* барлыҡҡа килә.

Башҡорттар, һалымдарҙың 72 статьяһы тураһында указға ышанмай, табыш йыйыусылар (прибыльщиктар) менән талашып китәләр, быға тиклем бынан да насарыраҡ мыҫҡыл иткәндәре юҡ ине әле, тиҙәр. Түҙемлеге бөткән халыҡ табыш йыйыусыларҙы туҡмап ҡайтара һәм баш күтәрә. Властарыларҙың һалымсыларҙы кире саҡыртып алыуы ла көткән һөҙөмтәне бирмәй. Башҡорттарҙың милли азатлыҡ хәрәкәте һигеҙ йылға (1704—1711) һуҙыла. Баш күтәреүселәр, нигеҙҙә, православие ғибәҙәтханаларын ҡыйрата. 1709 йылға тиклем Ҡазан һәм Өфө өйәҙҙәрендә улар тарафынан 75 сиркәү яндырыла. Ахырҙа батша хөкүмәте башҡорттар өсөн яңы һалымдарҙан баш тартырға мәжбүр була.

Бер үк ваҡытта православиены ҡабул иткәндәргә өҫтөнлөктәр булдырыла: улар (1720 йылдың 15 сентябрендәге указ менән) өс йылға йән башына һалынған һалымдан һәм (1722 йылдың 1 ноябрендәге указ менән) ғәскәргә алыныуҙан азат ителә. Шулай ҙа миссионерҙар бик ҙур уңышҡа өлгәшә алмай: XVIII быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда суҡындырылғандар 300 йорт ҡына тәшкил иткән.

Мосолман руханиҙарының мәжүсиҙәр араһындағы эшмәкәрлеген туҡтатыу өсөн, 1729 йылдағы указ менән мосолмандарҙың миссионерлыҡ эше үлем язаһы менән тыйыла.

Өсөнсө осор 1736—1789 йылдарҙы үҙ эсенә ала, йәғни 1736 йылдың 11 февралендәге указ баҫылғандан алып Өфөлә Ырымбур мосолман Дини собраниеһы (хәҙерге Диниә назараты) асылғанға тиклем осор. Батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы ислам дине һәм уның институттарына ҡаршы һөжүменең иң ҡыҙыу мәле ошо осорға тап килә. Әйтергә кәрәк, мәжүси һәм мосолмандарҙы суҡындырыу тыныс юл менән дә, көсләү юлы менән дә үткәрелә.

Батша хөкүмәтенең 1736 йылдың 11 февралендәге указы Башҡортостанда үҙенең сикһеҙ хакимлығын нығытыу өсөн программа булды. Ошо маҡсатҡа өлгәшеү һәм башҡорттарҙың баш күтәреүенән һаҡланыу ниәтендә, Башҡортостанды хәрби нығытмалар менән уратып алыу өсөн Яйыҡ, Зәй, Шишмә йылғалары буйлап һәм Себерҙә нығытылған сик буйы селтәрен төҙөү көсәйтелә.

Шулай уҡ үрҙә әйтелгән указ һәм башҡа акттарҙа мәжүсиҙәр араһында ислам динен таратыу һәм яңы мәсеттәр төҙөү, дини мәктәптәр асыу тыйыла. Иң юғары мосолман руханиҙары һаны ла ҡыҫҡартылып, һәр юлға (даруғаға) берәр ахун ғына ҡалдырыла. Шәриғәт хоҡуҡтары ла ҡыҫыла. Мосолман руха-

ниҙарының эшмәкәрлеге урындағы администрация күҙәтеүе аҫтына алына.

Башҡорттарҙың 1735—1740, 1755 һәм 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдары барышында ла, улар аяуһыҙ баҫтырылғас та, хөкүмәт дини мәсьәлә буйынса программаһын тормошҡа ашырыуын дауам итә, хатта көсәйтә төшә. Атап әйткәндә, баш күтәреүселәрҙең балаларын һәм ҡатындарын суҡындырыу һәм Башҡортостандан ситкә алып китеү хоҡуғы менән һатыу һәм һатып алыу рөхсәт ителә. Башҡорттарҙы суҡындырыу 1738 һәм 1776 йот йылдарында айырыуса көсәйә. Ихтилалдарҙы мәрхәмәтһеҙ баҫтырыу һөҙөмтәһендә башҡорттар бөлгөнлөккә төшә, аслыҡ башлана, ә власть әһелдәре һәм миссионерҙар ошонан файҙалана ла инде: беренсенән, суҡынған өсөн бушлай икмәк бирелә, икенсенән, фәҡир башҡорттар суҡындырыу шартына ризалашып, балаларын һәм ҡатындарын икмәккә алыштыра, өсөнсөнән, үҙҙәрен-үҙҙәре һатып христианға әйләнеү осраҡтары күҙәтелә. Шулай уҡ карателдәргә суҡындырыу хоҡуғы менән әсир ихтилалсылар таратып бирелә.

1736 йылда генерал-поручик Фонделден ике башҡорт малайын үҙ диненә ҡарата, береһенә *Петр* (9 йәш), икенсеһенә *Томас* (7 йәш) тип исем бирә. Оҙаҡламай улар икенсе бер немецтың — *Вахромей Миллерҙың* «милкенә» әйләнә. Уларҙы Боровский өйәҙендәге тимерселек заводы эргәһендәге немец мәктәбендә уҡыта. Ләкин улар аҙаҡ генерал-фельдмаршал *И. А. Шувалов* ҡулына күсә, ә ул 1762 йылда уларҙы православие диненә ҡарата.

Сенаттың 1742 йылдың 9 ноябрендәге указы менән яңы мәсеттәрҙең бөтәһен дә емерергә бойороҡ бирелә. Һөҙөмтәлә, 536 мәсеттең 418-е юҡҡа сығарыла. Ә 1743 йылдағы указ менән яңы суҡындырылғандар йәшәгән ауылдарҙа мәсет төҙөү бөтөнләй тыйыла.

Миссионерлыҡ эшмәкәрлеге уңышлыраҡ булһын өсөн, ҡайһы саҡта көсләп суҡындырыуҙы туҡтатып торалар, 1744 йылдан христиан миссионерҙарына берәү ҙә ҡаршылыҡ күрһәтергә тейеш булмаған. Улар мосолман һәм мәжүсиҙәр ауылдарында йөрөп, Мөхәммәт менән Иисус Христосты, Ҡөрьән менән Тәүратты сағыштырып, тәүгеләрен яманлап, икенсеһен маҡтап йөрөгәндәр.

Әйтергә кәрәк, суҡындырылған башҡорттарҙы, ғәҙәттә, Башҡортостандан ситкә сығарып, крепостной крәҫтиән сифатында алпауыттарға таратып йә һатып биргәндәр. Шул сәбәпле Рәсәйҙең күп төбәктәренә таратылған керәшен башҡорттар билдәле бер этнос вәкиле булараҡ юҡҡа сығырға — русҡа әйләнергә мәжбүр ителгән. Ә бына керәшен татарҙар

һәм мәжүсиҙәргә мөнәсәбәт башҡасараҡ булған. Керәшен татарҙарын Ҡазан губернаһынан ситкә сығарһалар ҙа, йыш ҡына Башҡортостанға килтерер булғандар һәм уларҙан ҙур-ҙур ауылдар ойоштороғандар. Мәҫәлән, Ноғайбәк ҡәлғәһе, Баҡалы, Бөгөлсән, Мәләүез һәм Петровское ауылдары. Уларҙы казактар сословиеһына индергәндәр һәм башҡаларҙан айырғандар. Улар бер төрлө эш башҡарып, бер идара аҫтында булғандар.

1735—1740 йылдарҙа ғына башҡорттар араһынан, язаланғандарынан тыш, 3 236 кеше флотҡа ебәрелә, 8 380 ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға Рәсәйҙең эске губерналарына оҙатыла.

Шулай итеп, өсөнсө баҫҡыста хөкүмәт ислам диненә һәм мәжүсилеккә ҡаршы көрәште көсәйтә, христиан миссионерҙары эшмәкәрлектәрен киң йәйелдерә. Мосолман руханиҙарының ҡаршылығы һындырыла һәм улар элекке кеүек ҡаршы тора алмай башлай. Батша хөкүмәтенә Башҡортостанда тулыһынса үҙ хакимлығын урынлаштырыу мөмкинлеге тыуа.

XVIII быуаттың 80-се йылдарына батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы дини сәйәсәтенең һуңғы осоро башлана, ул 1861 йылға тиклем дауам итә. Ошо осорҙа хөкүмәт, ислам диненә ҡарата мөнәсәбәтен ҡырҡа үҙгәртеп, 1789 йылдың декабрь башында Өфөлә Ырымбур мосолман Дини собраниеһын асып, мосолман руханиҙарының эшмәкәрлеген законлаштыра.

Дини сәйәсәттең былай үҙгәреүенә эске һәм тышҡы факторҙар ҙа йоғонто яһай. Йәғни башҡорт һәм мишәрҙәрҙең хәрби казачий сословиеға күсеп, батша хөкүмәтенең эске (каратель) һәм тышҡы (баҫып алыу) сәйәсәтен эүҙем үткәреүсегә әйләнеүе. Түрәләренең хәрби һәм граждандар чиновниктары булып китеүе, XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы рус-төрөк һуғыштары илдәге дини сәйәсәттең үҙгәреүендә үҙ ролен уйнай. Екатерина II хөкүмәте Төркиәнең Рәсәй мосолмандарына дини һәм сәйәси йоғонтоһон юҡҡа сығарырға ынтыла. Уның ирекле дин тотоу тураһында указ сығарыуы һәм Өфөлә Диниә назаратын асыуы күрше ҡаҙаҡ халҡын Рәсәйгә ылыҡтырыу маҡсатында эшләнә. Ирекле дин тотоу тураһында указ сыҡҡас, яңы мәсеттәр төҙөлә, улар эргәһендә мәҙрәсәләр асыла. Батша хөкүмәтенең бер нисә баҫҡыс итеп ҡайта-ҡайта үткәрелгән дини сәйәсәте башҡорттарҙың ҡаты ҡаршылығына осрай. Әммә халыҡтарҙың суҡыныуҙан баш тартып, христианлаштырыу сәйәсәтенә ҡаршы барыуын уларҙың дини фанатиклығы менән генә аңлатырға ярамай. Башҡорттарға, мәҫәлән, башҡа дин тотҡан кешеләргә ҡарата дошманлыҡ мөнәсәбәте бөтөнләй ят булған. Суҡынырға теләмәү — үҙҙәренең рухи донъяһын һаҡларға ынтылыу ул. (Әлбиттә, бында дини тойғолар ҙа ниндәй ҙә булһа роль уйнағандыр.) Рус булмаған ха-

лыҡтар өсөн христианлаштырыуға ҡаршы көрәш — рухи һәм социаль иҙелеүгә лә ҡаршы көрәш ул.

Башҡорттарҙың ҡораллы көрәше уларҙың динен генә түгел, телен дә, мәҙәниәтен дә, халыҡ булараҡ үҙаллылығын да һаҡлап алып ҡалырға ярҙам итте.

## 3. ПУГАЧЕВ ПОЛКОВНИКТАРЫ

*В. И. Пугачев* етәкселегендәге 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының ни ҡәҙәр киң төҫ алыуын күрһәтеү өсөн бер нисә һан килтереү ҙә етә кеүек. Шул дәүерҙәге иҫәпләүҙәргә ҡарағанда, рус крәҫтиәндәренән тыш, Өфө провинцияһынан *Пугачев* ихтилалында 14 038 башҡорт һәм 2352 мишәр йорто, яһаҡ түләүсе 37 365 татар, мари, удмурт, сыуаш ҡатнаша. Тарихсы *А. Андрущенконың* мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ошо төбәктәге рус булмаған 88 мең ир кешенең 86,6 мене 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына ылыҡтырылған.

Был һуғышта ябай халыҡ менән бергә күп кенә старшиналар ҙа ҡатнаша. Өфө провинцияһында ғына ла, мәҫәлән, 77 башҡорт, 37 мишәр һәм яһаҡ түләүсе татар, мари, сыуаш старшинаһы пугачевсылар байрағы аҫтына баҫа. Уларҙың күбеһе ахырға тиклем шул байраҡҡа тоғро ҡала һәм Пугачев ғәскәрендә айырым отрядтарға етәкселек итә. Шуларҙың иң күренеклеләренә полковник исеме бирелә.

Беҙҙең милли ғорурлығыбыҙ — халҡыбыҙҙың данлыҡлы улы — Пугачев ғәскәре бригадиры *Салауат Юлаев,* баш күтәреүселәр ғәскәрҙәренең баш полковнигы *Кинйә Арыҫланов, Пугачевтан* Башҡортостандың баш атаманы исемен алған *Юлай Аҙналин,* баш полковник *Ҡәнзәфәр Усаевтарҙың* исемдәре лә, уларҙың ул ваҡыттағы ҙур эшмәкәрлектәре лә уҡыусыларға күптән таныш инде. Ә был мәҡәләлә иһә һүҙ уҡыусыларға бик үк таныш булмаған, әммә 1773—1775 йылдағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында баш күтәргән башҡорт отрядтарының ҙур етәкселәре хаҡында барасаҡ.

«Емельян Пугачев» китабының авторы *М. В. Жижканың* иҫәпләүҙәренә ҡарағанда, *Пугачев* ғәскәре һәм уның айырым отрядтары менән 200-гә яҡын кеше (полковниктар, йөҙ баштары, «Хәрби коллегия» аппараты ағзалары) етәкселек иткән. Шуларҙың сама менән 52-һе казак, 38-е крепостной крәҫтиән, 35-е завод крәҫтиәне һәм крепостной эшсе, 30-ы башҡорт, 20-һе татар, 12-һе ҡалмыҡ була.

*Пугачев* ихтилалында айырым отрядтар менән етәкселек иткән ошо 30-ҙан ашыу башҡорттоң ҡайһы берҙәре бөтөнләй

билдәле түгел. Тимәк, беҙ әлегә уларҙың исемдәрен дә, эшмәкәрлектәрен дә белмәйбеҙ. Беҙ бында киң ҡатлам уҡыусыларҙы тарихи хеҙмәттәрҙә билдәле булған һәм булмаған *Пугачев* полковниктары менән таныштырыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ.

Ошондай күренекле пугачевсылар араһында Ырымбур башҡорто *Иҙеркәй Баймәков* та бар. Ул *Пугачевтың* яҡын кәңәштәше, Йәшерен совет ағзаһы һәм тәржемәсе була.

1773 йылдың 17 сентябрендә *Толкачевтар* утарына 80-гә яҡын казак, ҡалмыҡ, башҡорт һәм татар йыйыла. Тап бына ошо көндә *Пугачев* Яйыҡ ҡаласығына табан юл тота һәм шуның менән Крәҫтиәндәр һуғышы башланып китә. Шунда 20-ләп башҡортто *Иҙеркәй Баймәков* етәкләй.

1773 йылдың октябрь айында ул *Пугачев* ҡушыуы буйынса ҙур ғына ғәскәр туплай һәм уны Ырымбур эргәһенә килтерә. Башында генерал-майор *В. А. Кар* торған хөкүмәт ғәскәрҙәре баш күтәреүселәр ҡамап алған Ырымбурға табан юл тотҡас, *Пугачевтың* күренекле көрәштәштәре *А. А. Овчинников* һәм *И. Н. Зарубин-Чика* отрядтары уға ҡаршы ташлана һәм Бикҡол ауылын һуғышып ала. Улар араһында *Иҙеркәй Баймәков* етәкселек иткән ҙур ғына башҡорт отряды ла була. Һуңынан уларға *Пугачев* полковнигы *А. Соколов-Хлопуша* отряды ла килеп ҡушыла. 9 ноябрҙә Үҙәй (Юзеево) ауылы эргәһендә *Кар* ғәскәре тулыһынса тар-мар ителә. Бөтә тарихи сығанаҡтарҙа иҫбат ителеүенсә, пугачевсыларҙың был еңеүендә башҡорттарҙың, тимәк, *Иҙеркәй Баймәковтың* да өлөшө ҙур була.

*Иҙеркәй Баймәков*, баш күтәреүселәрҙең баш полковнигы *Кинйә Арыҫланов* менән бер рәттән, *Пугачевтың* Йәшерен советы составына инә. Был совет *Пугачевтың* Хәрби коллегияһы менән бер дәрәжәлә йөрөй, ә пугачевсылар Волганың уң яҡ ярына сыҡҡас, уның дәрәжәһе тағы ла арта. Советтың һәр ултырышы йәшерен үткәрелә.

1774 йылдың 12 июлендә *Иҙеркәй Баймәков* башҡа полковниктар менән бергә *Пугачевтың* Йәшерен советы ултырышында ҡатнаша. Был ултырышта Ҡазанға һөжүм итеү мәсьәләһе ҡарала. Ошо кәңәшмәнән һуң пугачевсылар Ҡазанды яу менән алалар. Шунан һуң инде был күренекле пугачевсының яҙмышы билдәле түгел.

*Иҙеркәйҙең* аҫрау улы төркмән *Балтай Иҙеркәев* тә үҙен күренекле пугачевсы итеп таныта. Һорау алыу ваҡытында ул үҙе хаҡында: «Миңә 25 йәш. Яйыҡта тыуғанмын, атам *Ауәз*, милләте буйынса төркмән, Яйыҡ казагы булды», — тип күрһәтә. Кире Төркмәнстанға киткәндә, *Ауәз* үҙенең улы *Балтайҙы* отставкалағы казак *Иҙеркәй Баймәковҡа* ҡалдыра, ә теге уны үҙ улы итеп ҡарап үҫтерә, шуға күрә *Балтай Иҙер-*

*кәйев* фамилияһын ала. Бер аҙҙан уның үҙ атаһы *Ауәз* Яйыҡҡа ҡайта һәм *Иҙеркәй Баймәковтарҙа* тора.

*Пугачевтың* Яйыҡҡа килеп сығыуының тәүге көндәренән үк *Балтай* үҙен тәрбиәгә алған атаһы *Иҙеркәй* менән баш күтәреүселәргә ҡушыла. Ул, сәркәтип булып, *Пугачев* штабындағы көнсығыш телдәрендәге бөтә корреспонденция менән етәкселек итә. *Пугачевтың* раҫлауы буйынса, уның башҡорттарға, казактарға, татарҙарға тигән указдары «русса Почиталин тарафынан, ә татарса Иҙеркәй улы Балтай тарафынан яҙылған».

Был ысындан да шулай. 1773 йылдың 1 октябрендә *Кинйә Арыҫлановтан Пугачевҡа* алты башҡорт килә. Улар: «Әгәр ҙә беҙгә үҙеңдең указыңды ебәрһәң, бөтә башҡорттар һинең менән булыр», — тип белдерәләр. *Балтайҙың* һөйләүенсә, шуға яуап итеп *Пугачев* уға старшиналарҙан *Кинйә Арыҫланов, Әлибай Мырҙағолов, Ҡотлогилде Абдрахманов* исеменә указ яҙырға ҡуша. Был указда уларҙы командалары менән бергә үҙенә хеҙмәткә саҡыра, башҡорттарға ер, һыу һәм бөтә булған азатлыҡтарҙы бирергә вәғәҙә итә. Манифест тип аталған был документ шунда уҡ *Кинйәгә* ебәрелә, шунан һуң оҙаҡ та тормай, *Кинйә Арыҫланов*, «баш полковник» тигән чин алып, үҙенең отряды менән *Пугачев* яғында һуғыша башлай.

1774 йылдың мартында, ҡаты һуғыш ваҡытында, *Балтай* 25 пугачевсы менән әсиргә эләгә һәм оҙаҡ ҡына ваҡыт Ҡазанда Йәшерен комиссия тикшереүе аҫтында тотола.

Ғәйнә яғынан ябай ғына бер башҡорт егете *Батырҡай Иткинин* да баш күтәреүселәрҙең ҙур хәрби етәксеһенә — полковник дәрәжәһенә күтәрелә.

Ул Ғәйнәнән килгән бүтән башҡорттар менән бергә 1773 йылдың декабрендә Өфө эргәһендәге Чесноковка лагерында була һәм *Пугачев* полководецы *Зарубин-Чика* тарафынан ҡабул ителә. *Зарубин-Чика* уға старшина исемен бирә һәм, башҡорттарҙы йыйып, *Пугачев* янына килтерергә кәңәш итә. Тыуған яҡтарына ҡайтып, *Батырҡай*, башҡорттарҙан, рустарҙан һәм татарҙарҙан ҙур отряд йыйып, Кама буйҙарында завод хужаларына һәм батшаның урындағы власть эйәләренә ҡаршы әүҙем көрәшә башлай.

Шул уҡ *Батырҡайҙы Зарубин-Чика* Тулва йылғаһы буйындағы Тонтор Тамаҡ (Усть-Тонтор) ауылының старшинаһы итеп тә ҡуя. *Иткинин*, Тулва буйы башҡорттарынан отряд йыйып, 1773 йылдың 14 декабрендә уларҙы Өфөнө ҡамап торған пугачевсыларға ярҙамға ебәрә. Ә *Иткининдың* үҙ отряды Уса ҡалаһы тирәһендә хәрәкәт итә.

Әйткәндәй, *Батырҡай Иткинин* урындарҙағы власть органдарын ойоштороуҙа ҙур эштәр башҡара. Баш күтәреүселәр

булып үткән һәр ерҙә ауыл кешеләре: «Йәмәғәт эштәрен башҡарыу өсөн беҙ һайлап ҡуйған кешеләрҙе раҫла», — тип *Батырҡай Иткининға* мөрәжәғәт итер булғандар. Үҙенең отряды менән Уса олоҫона ингәс, полковник *Батырҡай Иткинин* 1773 йылдың 25 декабрендә Усалағы пехота һалдаттарына яҡшы һәм намыҫлы кешене үҙегеҙгә командир итеп һайлап ҡуйығыҙ, тип яҙма рәүештә тәҡдим яһай. Шул уҡ Уса олоҫо старостаһы *Илья Дьяковтан* һәм земство писары *Михаил Голдобиндан* бөтә олоҫ кешеләренең да *Пугачевты* «батша Петр III» тип таныуҙарын һәм нахаҡҡа бер кемде лә йәберләмәүҙәрен талап итә.

Декабрҙең 22-һендә Пугачев полковниктары *Батырҡай Иткинин*, *Әбди Абдулов* һәм башҡалар Усаға килеп инәләр. Унан бер аҙ элегерәк барлыҡҡа килгән Уса земство йорто баш күтәреүселәрҙең власть органы итеп таныла. *Батырҡай Иткинин* яҙып биргән күрһәтмәлә баш күтәреүселәрҙең власть органы булған был земство йортоноң бурысы түбәндәгеләргә ҡайтып ҡалған:

1) Ҡазанға барыу юлын ҡулға төшөрөргә һәм *«Петр III»-Пугачевтан* яҙма рөхсәт булмай тороп, Ҡазандан килеүсе һәм Ҡазанға барыусы бер әҙәмде лә, уның кем булыуына ҡарамаҫтан, был юлдан үткәрмәҫкә;

2) Указ буйынса, элеккесә, араҡы һәм тоҙ һатырға, ә унан алынған килемде «батша милке» итеп һаҡларға;

3) Тирә-яҡ халыҡты «батша Петр III» буйһоноуында тоторға;

4) Ошо бөтә мәсьәләләр буйынса, айырата «батша мәнфәғәтен» боҙоу осраҡтарында, өс көн эсендә сапҡынсы менән рапорт ебәреп, ғәскәргә хәбәр итергә;

5) Бөтә буйһонмаусыларҙы, бигерәк тә Ҡазан юлында тотолған шикле кешеләрҙе, сапҡынсы менән шунда уҡ баш күтәреүселәр ғәскәре ҡарамағына ебәрергә;

6) Император ғали йәнәптәренең асыуын ҡуҙғатмаҫ өсөн, бер кемде лә юҡҡа рәнйетмәҫкә һәм йәберләмәҫкә.

Күреүебеҙсә, пугачевсы ғәскәр башлығы бында баш күтәреүселәр тураһында ла, тыныс халыҡ хаҡында ла ҡайғыртып эш иткән.

Ихтилал мәнфәғәттәре ашығыс рәүештә көслө һуғышсан отрядтар ойошторолоуын һәм уларҙың әүҙем хәрәкәттә булыуын талап иткән. Быны шулай икәнлеген башҡорт полковниктары ғына түгел, халыҡ та аңлап тора. Йөҙ баштары ауылдар буйынса йөрөп, кешеләрҙе оборона тоторға йәки походҡа сығырға әҙер торорға өндәйҙәр, булғандарҙан ҡорал йыйып алалар. *Батырҡай Иткинин* менән *Әбди Абдулов* отрядтарын-

да байраҡтар, мылтыҡтар, уҡ-йәйәләр, ҡылыстар һәм башҡа ҡоралдар була.

Баш күтәреүселәрҙең ҡайһы яҡҡа походҡа сығырға тейешлектәре, Усаны алып, унда власть органдары ойошторғандан һуң ғына асыҡлана. Тонтор Тамаҡ ауылы кешеһе полковник *Әбди Абдулов* һәм *М. Мазжерин* етәкселегендәге отряд Кама буйлап өҫкә менә, унда еңгәндән һуң Көңгөргә йәки Соликамскиға барырға тейеш була. *Батырҡай Иткинин* етәкселегендәге икенсе отряд *Салауат Юлаев* әмере буйынса туп-тура Көңгөргә табан юл тота. Көңгөр йәки Ягошиха заводы (хәҙерге Пермь ҡалаһы) эргәһендә ике отряд та бергә ҡушылырға һәм Соликамскиға йүнәлергә тейеш була.

1773 йыл аҙағында һәм 1774 йыл башында Көңгөр ҡалаһы өсөн көрәш Пермь яҡтары халҡының тормошонда төп ваҡиға була. Завод ҡасабалары, ҡәлғәләр һәм ауылдар бер-бер артлы *Батырҡай Иткинин* отрядына ҡушылалар. Ирән йылғаһы буйындағы татар ауылдары 100 кешене *Иткининға* «казаклыҡҡа» бирә.

1773 йылдың 29 декабрендә пугачевсылар Әшә заводын алалар, ә 1774 йылдың ғинуар башында *Осокиндың* Йоҡ заводы ла *«Петр III»-Пугачевҡа* тоғролоғо хаҡында ант бирә.

30 декабрҙән алып ғинуар баштарына тиклем пугачевсылар Көңгөрҙән 17—20 саҡрым алыҫлыҡта торған. Бында рустар ҙа, башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа йыйыла. Башта бында полковник *Иткининдың* ғәскәрендә 1000 кеше иҫәпләнгән. Уларҙа 5 туп, 100 мылтыҡ булған. Ә күбеһе һөңгө, йәйә, ҡылыс менән генә ҡоралланған. 1774 йылдың 4 ғинуарында инде уның ғәскәре 2000 кешегә еткән.

Йоҡ заводында *Батырҡай Иткинин* әмере буйынса, баш күтәреүселәрҙең власть органы булараҡ, земство йорто һәм хәрби ҡорамалдар эшләп сығарыу өсөн тимерлек ойошторола.

Полковник *Батырҡай Иткинин* Пермь яҡтарының ул ваҡыттағы административ үҙәге булған Көңгөр ҡалаһын һуғышһыҙ ғына, тыныс юл менән алмаҡсы була. Ул унда һөйләшеү өсөн биҫтә кешеһе *А. Журавлевты* һәм ике руханиҙы ебәрә. Әммә улар әйләнеп ҡайтмай. 1774 йылдың 4 ғинуарынан алып 20 ғинуарға ҡәҙәр *Батырҡай Иткинин* ҡаланы ҡамауҙа тота. Баш күтәреүселәр ҡалаға бәреп керергә ниәт итәләр, әммә ҡаршы яҡтан туптарҙан ата башлағас, сигенергә мәжбүр булалар. Шулай итеп, *Иткинин* ҡалаларҙы һуғышмай-нитмәй һөйләшеү юлы менән алыу, ә ҡарышһалар һөжүм итергә кәрәклеге хаҡында 1773 йылдың 29 декабрендә Пугачевтың Хәрби коллегияһы сығарған күрһәтмәне ныҡ тота.

Ғөмүмән, *Пугачев* үҙе, уның Хәрби коллегияһы һәм баш күтәреүселәрҙең күпселек етәкселәре хәрби тәртипкә бик нык әһәмиәт бирә. 1774 йылдың 1 ғинуарында, мәҫәлән, полковник *Батырҡай Иткинин* Йоҡ заводы йөҙ башы *Г. Ситниковҡа* тәртип боҙоуҙа ғәйепле булған кешеләрҙе ҡаты язаға тарттырыу хаҡында махсус күрһәтмә тоттора.

*Илсеғол Этҡолов* та ул ваҡытта үҙен ысын пугачевсы, Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле етәксеһе итеп таныта. Ихтилал башланғанға тиклем ул Себер юлының Ҡошсо олоҫонда икенсе старшина булып хеҙмәт итә. Ә олоҫтоң беренсе старшинаһы *Иҫәкәй Садыров* та баш күтәреүселәр етәксеһе була һәм һуғыш баҫтырылғас та әле, үҙен ғәйепле итеп танып, батша властары ҡулына бирелеүҙән баш тартып йөрөй.

Полковник *И. Этҡолов* Красноуфимск нығытмаһы тирәһендә хәрәкәт итә. Красноуфимск казактары, 1774 йылдың 9 ғинуарында үҙҙәренең йыйылыштарында махсус ҡарар ҡабул итеп, *Этҡоловҡа* туптар һәм дары ебәрәләр, ә инде баш күтәреүселәр был нығытмаға яҡынлаша башлағас, казактар уларҙы, байраҡтарын елберләтеп, ихлас ҡаршылайҙар, үҙҙәренең воеводаһын улар инде нык һаҡ аҫтына алғандар, ә бөтә ҡоралды тоҙ амбарҙарына йыйып, бикләп ҡуйғандар. Казактарҙың баш күтәреүселәр яғында булыуына ышанғас, *И. Этҡолов* бүтән башҡорт хәрби башлыҡтар менән бергәләп инде атаҡлы полководец тип дан тотҡан *Салауат Юлаевты* үҙҙәренә саҡыралар.

1774 йылдың 15 ғинуарында *Салауат* һәм *Илсеғол* ғәскәрҙәре Красноуфимскиҙан Көңгөргә табан юл тота һәм, унда етергә 15—20 саҡрым ҡалғас, *Иван Васев* һәм баш полковник *Ҡәнзәфәр Усаев* отрядтары менән ҡушыла. Көңгөр өсөн полковник *Батырҡай Иткинин* башлаған көрәш дауам итә.

Нуғай юлының Бөрйән олоҫо, Ҡаранай ауылы йөҙ башы *Ҡаранай Моратов* та баш күтәреүселәрҙең күренекле етәксеһе була. Уның үҙенсәлеге шунда: ул үҙ яҡтарында түгел, ә ситтә көрәшә. Башҡортостанды төрлө яҡтан байҡап сыға.

*Ҡаранай Моратовты Пугачев* башта поход старшинаһы итеп билдәләй, унан полковник итеп үрләтә. Тәүҙә ул үҙенең отряды менән Өфөнө ҡамауҙа ҡатнаша. Һуңынан уны, Өфө эргәһендә урынлашҡан штаб менән бәйләнеш тотоп, халыҡ хәрәкәтенә етәкселек итергә ебәрәләр.

Ул башта Ҡазан юлында әүҙем хәрәкәт итә, ә Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе этабында (1774 йылдың мартынан алып июлгә ҡәҙәр) Дим буйына күсә һәм тағы ҙур көрәш йәйелдереп ебәрә. Уның менән осрашырға тип Юрматы олоҫо старшинаһы *Көҫәпҡол Азатбаев* һәм полковник *Ҡәнзәфәр Усаев* отрядтары ашыға.

Батша ғәскәрҙәре *Ҡаранайҙы* оҙаҡ эҙәрлекләйҙәр, әммә тота алмайҙар. 1929 йылда баҫып сығарылған «Пугачевщина» китабының икенсе томында күрһәтелгәнсә (450-се бит), әле 1774 йылдың 10 ноябрендә лә каратель *П. С. Потемкин:* «Үҙҙәренең төп ғәйептәрен танып, миңә 200 старшина килде инде, ә билдәле башҡорт боласыларынан тотолмаған алты кеше генә, йәғни *Кинйә* (Арыҫланов) *Салауат* (Юлаев), *Ҡаранай* (Моратов), *Күркәй* (?), *Һәнәкәй* (?) һәм *Илсеғол* (Этколов) ҡалды», — тип күрһәтә.

Крәҫтиәндәр һуғышы инде тамам һүрелеп бара тигәндә генә *Ҡаранай* ноябрь аҙаҡтарында көрәште туҡтатырға мәжбүр була. 25 ноябрҙә Сәйет биҫтәһенән (Ырымбур эргәһендә) *Ғәбиҙулла Азаматов* тигән бер һатлыҡ йән *Ҡаранай Моратовты* властарға тотоп бирә һәм ошо «хеҙмәте» өсөн 100 һум аҡса ала*. Пугачевсы полковник *Ҡаранай Моратов* үҙенең көрәшен бына шулай тамамлай.

Ғәйнә башҡорттарынан, *Батырҡай Иткинин* менән *Ғәҙел Әшмәновтан* тыш, баш күтәреүселәр хәрәкәтенең бынамын тигән етәкселәре үҫеп сыға. Улар араһында полковник *Әбди Абдулов*, Ғәйнә олоҫо старшинаһы *Көсөкбай Абдуллин*, ябай бер башҡорттан полковник дәрәжәһенә күтәрелгән *Сәйфулла Сәйҙәшев* һәм мулла *Әҙиғот Тәмисов* (һуңғыһы поход атаманы дәрәжәһендә отряд менән етәкселек итә). Был ғәскәр башлыҡтары баш күтәреүселәрҙең Усалағы земство йорто менән тығыҙ бәйләнештә торалар. Карателдәрҙең рәхимһеҙ терроры-на ҡарамаҫтан, Уса олоҫонда рус һәм башҡорт отрядтары берҙәм һәм әүҙем сығыш яһай.

*Абдулов* һәм *Сәйҙәшев* отрядтары бер-бер артлы Ҡултай ауылын, *Шаховскийҙың* Кама буйы заводын, Беляевский ауылын һуғышып алалар. *Абдулов* кешеләре Ҡазанға, Мәскәүгә һәм Петербургка бара торған почтаны ҡулға төшөрәләр. Ундағы хаттар күп ерҙәрҙә пугачевсыларҙың еңеүҙәре хаҡында һөйләй.

Пугачевтың күренекле көрәштәше, баш күтәреүселәр ғәскәренең баш полковнигы *Кинйә Арыҫлановтың* улы *Һеләүһен Кинйин* дә, ихтилалға әүҙем ҡушылып, полковник дәрәжәһенә күтәрелә. Атаһы уны Башҡортостанда өгөт-нәсихәт таратыусы итеп файҙалана.

Кинйә улының эшмәкәрлеге һәм яҙмышы хаҡында төрлө сығанаҡ төрлөсә һөйләй. Берәүҙәр атаһына эйәреп Волганың уң яҡ яры буйлап китмәйенсә, Башҡортостанда ҡалған *Һеләү-*

---

* В. И. Ленин исемендәге дәүләт китапханаһының ҡульяҙмалар бүлеге. 222-се фонд, 7-се эш, 718-се бит.

*һенде* властар ихтилал баҫтырғандан һуң ҡулға алғандар, тип раҫлайҙар. Ә башҡа сығанаҡтар, айырым алғанда губернатор *Рейнсдорптың* генерал-прокурор кенәз *А. А. Вяземскийға* 1774 йылдың 29 апрелендә яҙған хаты күрһәтеүенсә, Кинйәнең улы *Һеләүһен,* йәнәһе, боласылар араһында ара-тирә генә булғылаған һәм бөтәһенән дә элек үҙенең ғәйебен танып, властар ҡулына бирелгән. Ә өсөнсөләре, ул 1774 йылдың октябрендә генә властарға бирелә, тип раҫлайҙар. *Сөләймән* менән *Һеләүһен Кинйинды* ҡайһы бер сығанаҡтар бер үк кеше, тиҙәр. Был дөрөҫ булһа, уның яҙмышы *Салауат Юлаев* менән бик нығ бәйләнгән. Тарихсы *А. Андрущенконың* мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1774 йылдың 24 ноябрендә генә *Салауат* менән *Сөләймәнде* карателдәр ҡамай һәм ҡыҫҡа ғына һуғыштан һуң әсир ала. Унан һуң *Сөләймәнде* Ҡазанға Йәшерен комиссияға, ә 1775 йылдың 13 февралендә Мәскәүгә Йәшерен экспедицияға һорау алырға ебәрәләр. Унан уны башҡа күренекле пугачевсылар менән бергә, аяҡ-ҡулдарына бығау һалып, шул уҡ йылдың 16 апрелендә Ырымбурға оҙаталар.

*Кинйә Арыҫланов, Сөләймән-Һеләүһен* менән бергә, өгөтләүсе итеп үҙенең ике туған энеһен (ә башҡа сығанаҡтарға ҡарағанда бер туған энеһе) — Ҡумрыҡ-Табын олоҫоноң старшинаһы, баш күтәреүселәрҙең полковнигы *Ҡотлогилде Абдрахмановты* ла файҙаланған. Крәҫтиәндәр һуғышында ул бик әүҙем ҡатнаша. Ул ихтилал башланыу менән Бәрҙегә (Бердаға) килә һәм Пугачев менән бергә Ырымбурҙан Башҡортостанға күсеп, күп һуғыштарҙа ҡатнаша. Унан баш күтәреүселәр ғәскәре менән Ҡазанға ҡәҙәр барып, Михельсонға ҡаршы һуғыша. Ә 1774 йылдың октябрендә баш күтәреүселәрҙең төп көстәре еңелеүгә дусар булғас, властар ҡаршыһына барып баҫа.

*Ҡәйеп Зиәмбәтов, Тархан Ҡыҙрасов, Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов, Миҙәт Миндиәров, Үтәй Ярат ҡолов* һәм башҡа башҡорт полковниктары тураһында мәғлүмәттәр тағы ла аҙыраҡ ҡалған.

*Ҡәйеп Зиәмбәтов* Ҡара-Табын олоҫоноң икенсе старшинаһы булған. 1773 йылдың октябрендә үк әле Пугачев уға полковник исемен биргән һәм, баш күтәреүселәр армияһына кешеләр туплатырға тип, Башҡортостандың Себер юлына ебәргән. Унан ары был кешенең Нуғайбәк нығытмаһы тирәһендә хәрәкәт итеүе билдәле. 1774 йылдың 1 ноябренә ҡәҙәр властарға бирелмәй йөрөүе лә уның ҡыйыулығы һәм ныҡлығы хаҡында һөйләй.

Күбәләк олоҫоноң старшинаһы *Тархан Ҡыҙрасов* үҙенең отряды менән пугачевсы полковник *И. Н. Грязнов* командаһы аҫтында Силәбе ҡәлғәһен ҡамаған һәм уны һуғышып алған.

Ә 1774 йылдың апрелендә Белорет заводы тирәһендә баш күтәреүселәрҙең яңы көстәрен ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан. *А. Андрущенко* раҫлауынса, баш күтәреүселәрҙең үҙәге уны бөтә Башҡортостанға судья итеп билдәләгән.

Пугачев полковнигы *Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов,* мишәр полковнигы *Бәхтиәр Ҡанҡаев* тирә-яҡтағы ауылдарҙағы һәр йорттан берәр кешене, ә йортта өсәр ир булһа, икешәр кешене яуға әҙерләргә, тип әмер биргән.

Уса юлындағы Оло Яҙы йылғаһы буйында *Ҡәҙермәтовтың* ике мең кешелек отряды хәрәкәт итә. Үс алыусы команда менән өс ҡат бәрелешкәндән һуң отряд ҡыйратыла, ә үҙе 1774 йылдың 28 сентябрендә әсиргә төшә.

*Миҙәт Миндиәров, Әщмән Этҡолов, Айтуған Биктимеровтар* хаҡындағы мәғлүмәттәр бары 1774 йылдың майында Үргә Ҡыйғы ауылы тирәһендә ике мең кешенән торған баш күтәреүселәр отрядының хәрәкәт иткәнен раҫлауға ғына ҡайтып ҡала. Әй олоҫо йөҙ башы *Утәй Яратҡоловтың* 1774 йылдың ноябрендә лә язалаусыларға ҡаршы ҡаты һуғышыуы мәғлүм.

Башҡа милләт ғәскәр башлыҡтарынан мари егете *Иҙебай Ямбаевҡа Салауат Юлаевтың* Бөрө эргәһендәге һуғыштар ваҡытында полковник исемен биргәнлеге генә билдәле.

Себер юлынан сыҡҡан ябай башҡорт кешеһе, пугачевсы полковник *Әбйәлил Ырыҫҡолов* хаҡында уҡыусылар ғына түгел, эҙләнеүсе ғалимдар үҙҙәре лә әле бик аҙ белә. Крәҫтиәндәр һуғышының өсөнсө осоронда, *Пугачев* Волганың уң яҡ ярына күскәс, Уса юлында ихтилал дауам итә. Ә 1774 йылдың сентябрь башында ошо районға Себер юлынан 600-ҙән артыҡ кеше менән полковник *Ә. Ырыҫҡолов* күсә һәм етеҙ генә хәрәкәт итә башлай. Танып йылғаһының аръяғында тағы бер отряд барлыҡҡа килеп, ул башта *Ырыҫҡолов,* һуңынан *Салауат Юлаев* ғәскәрҙәре менән ҡушыла.

Бөрйән олоҫонан сыҡҡан пугачевсы полковниктар тураһында ла мәғлүмәттәр бик аҙ һаҡланған. *Морат Абзалов* исемле ябай башҡорт кешеһе, мәҫәлән, баш күтәреүселәрҙең яҡшы ойоштороусыһы булған. Ул үҙ-үҙен аямайынса көрәшә һәм шуның өсөн «батыр» тигән юғары исемгә лайыҡ була. Ябай халыҡты ихтилалға ылыҡтырыуҙа ул ҙур уңыштарға өлгәшкән һәм шуның өсөн уға «Морат Ҡашҡа» тигән маҡтаулы исем бирелгән.

Бөрйән олоҫо старшинаһы *Төрөкмән Йәнсәйетов* Пугачевтың ставкаһы Бәрҙегә бара, үҙенә полковник чины бирелгәс, отряды менән Урғаҙа нығытмаһын һуғышып ала. Ҡыҙыл нығытмаһын ҡамап тора, *Тимашевтың* язалаусы командаһы менән көс һынаша.

Шул уҡ олоҫтоң отставкалағы старшинаһы *Таулыҡай Сурәков* та *Пугачевта* хеҙмәт иткән, күп һуғыштарҙа ҡатнашҡан. 1774 йылдың ноябрь аҙаҡтарында уның, үлем хәлендә ятып та, үс алыусыларға баш эймәүе тураһында *Тимашевтың* рапорты бар*.

Ә Үҫәргән яҡтарынан баш күтәреүселәрҙең полковнигы *Муйнаҡ Сөләймәнов* күп кенә заводтарҙы һуғышып алған. Күбәләк олоҫонан поход старшинаһы *Юламан Ҡушаев*, ҙур көрәш юлын үтеп, Ҡазанға тиклем барып еткән. Әлеге *Тимашевтың* яҙыуынса, ул үҙ полкы менән оҫта етәкселек иткәне һәм үҙен батыр яугир итеп күрһәткәне өсөн хатта генерал чинына лайыҡ булған**.

Нуғай юлының Тамъян олоҫо поход старшинаһы *Ҡасҡын Һамаров* та Крәҫтиәндәр һуғышының тәүге осоронда үҙен тәжрибәле ғәскәр башлығы итеп таныта һәм Өфөнө ҡамауҙа ҙур батырлыҡ һәм тапҡырлыҡ күрһәтә. Исәт провинцияһында олоҫ старшинаһы *Бәҙерғол Юнаев* та, Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашып, полковник дәрәжәһенә күтәрелә. Әйткәндәй, ул 1767 йылда Яңы Уложение проекты төҙөү буйынса депутат итеп һайланған була. Һуңынан, ихтилал баҫтырылғас, уны депутатлыҡтан да, старшиналыҡтан да төшөрәләр. *Бәҙерғол Юнаев — Пугачевтан* фельдмаршал исемен алған башҡорт яугиры.

Башҡорттарҙың Крәҫтиәндәр һуғышында әүҙем рәүештә күпләп ҡатнашыуҙары киң билдәле. Улар араһынан халыҡҡа тәрән бирелгән етәкселәр, *Емельян Пугачевтың* һәм уның бригадиры *Салауат Юлаевтың* бынамын тигән көрәштәштәре үҫеп сыҡты. Крәҫтиәндәр һуғышы барышында ҡайһы бер пугачевсы полковниктарҙа икеләнеүҙәр һәм хаталаныуҙар булды. Ә шулай ҙа, дөйөм алғанда, крәҫтиәндәр үҙҙәре белгәнсә һәм үҙҙәре булдыра алғанса көрәштеләр. Тарихи шәхес тураһында фекер йөрөткәндә уның нимә эшләй алмауы түгел, ә нимә эшләгәне, ниндәй яңы нәмә биреүе буйынса баһаларға кәрәк. Ә был көрәшселәр биргән яңы нәмә — ул иң тәүҙә иҙелгән халыҡ массаларының дөйөм дошманға, феодал-крепостнойлыҡ иҙеүенә ҡаршы бергә көрәшеүҙәренән ғибәрәт.

## 4. КИНЙӘ АБЫҘ

Башҡорт халҡының быуаттар буйына дауам иткән милли азатлыҡ көрәше бик күп күренекле шәхестәрҙе күтәрҙе. Шулар араһында айырым бер яҡты йондоҙ булып 1773—1775

---

* Үҙәк дәүләт боронғо акттар архивы. 1 274-се фонд, 196-сы эш, 129—130-сы биттәр.

**Шунда уҡ, 130-сы бит.

йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы идеологы *Е. И. Пугачевтың* тоғро көрәштәше, баш полковнигы *Кинйә Арыҫланов* тора. *Кинйәнең* биографияһы, хатта ихтилал ваҡытындағы эшмәкәрлеге лә беҙгә бик әҙ билдәле. Шулай ҙа уның үҙен һәм уның көрәшен күҙ алдына килтерерлек тарихи сығанаҡтар һаҡланған. Был мәҡәләне әҙерләгәндә Пугачев хәрәкәте тураһында баҫып сығарылған бер нисә документтар йыйынтығын, шулай уҡ күренекле тарихсы *Әбүбәкер Усмановтың Кинйә* тураһындағы мәҡәләһен, Ленинград ғалимдары *В. А. Лимонов, В. В. Мавродин, В. М. Панеяхтарҙың* 1965, 1974 йылдарҙа сыҡҡан «Сподвижники Пугачева», «Пугачев и пугачевцы» тигән китаптарын һәм үҙем тапҡан архив материалдарын тағы бер тапҡыр байҡап сығырға тура килде.

Һүҙҙе *Кинйәнең* шәжәрәһенән башлайыҡ. Уның нәҫеле башҡорт халҡының ойошоуында ҙур урын тотҡан ҡыпсаҡтарҙың бошман-ҡыпсаҡ ырыуына барып тоташа. Бына уның ата-бабалары: *Лас бей — Ҡолһары бей — Атағай бей — Баби бей — Бабсаҡ бей — Кусәк бей — Сиркә бей — Кусмәк бей — Бусмаш (Бошман) бей — Борондоҡ бей — Һөйөндөк бей — Аҡбулат бей — Һарыбайсал бей — Дәүләтҡол — Миңлеғол — Аҡкош (Аҡкол) — Арыҫлан — Кинйә абыҙ —* мулла *Һеләүек (Һеләүһен).* Шәжәрәнән күренеүенсә, *Кинйәне* тарихи сығанаҡтарҙа билдәле *Бошман бей* исемле ҡыпсаҡ батыры менән нәҫел ебе бәйләй. *Бошман* (Бачман, Бошмаҫ) баҫҡынсы монгол-татарҙарға ҡаршы Оло Иҙелдең (Волганың) түбәнге ағымында оҙаҡ ваҡыттар буйына азатлыҡ көрәшен етәкләгән. Аҙаҡ көстәрҙең тиң булмауы арҡаһында әсирлеккә эләгә. Монголдарҙың *Меңгү* ханы, батырҙы үҙ яғына ауҙарырға теләп, уның теҙ сүгеүен талап иткән. Ошо турала башҡорт риүәйәтендә һәм фарсы тарихсыһы *Джувейн* әҫәрендә әйтелә. Ғорур ҡыпсаҡ батыры: «Мин үлемдән ҡурҡмайым. Теҙләнергә мин дөйә түгел» (Джувейнса), йәки «Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй» (башҡорт риүәйәтенсә), — тигән. Быны ишеткән ҡанһыҙ хан Бошманды ҡылыс менән тураҡлатҡан. Бына ошо сая батыр исеме уның ырыуында һаҡланған. Башҡорттарҙағы Гәрә, Һыуын, Сәңкем, Ҡарый-Ҡыпсаҡ ырыуҙары араһында Бошман-Ҡыпсаҡ тип аталғаны ла бар. 1763—1774 йылдарҙа шул ырыу-олоҫ старшинаһы булып *Кинйә Арыҫланов* торған. Ул ваҡытта уның ҡул аҫтында 210 башҡорт йорто иҫәпләнгән.

Тарихта Кинйәнең атаһы *Арыҫлан Аҡколов* та билдәле. 1708—1722 йылдарҙа ул бер нисә тапҡыр Ҡыпсаҡ олоҫтарынан башҡа старшиналар менән бергә яңы һалымдар уйлап сығарыусы *Андрей Жихарев* һәм *Михаил Дохов,* шулай уҡ Ҡазан комиссары яуыз *Сергеевты* башҡорттарҙан етмеш ике төрлө һалым талап итеүҙәре, халыҡты йәберләүҙәре өсөн

уларҙы язаға тарттырыуҙы талап итеп, батшаға мөрәжәғәт итеүҙә ҡатнашҡан. *Андрей Жихаревтарҙың* һәр кешенең күҙ төҫөнә ҡарап айырым түләү (ҡара булһа — 12 тин, һоро булһа — 4 тин), мәсет, йорт, мунса, балыҡ тотоу урындары һәм башҡаларға яңы төр һалымдар индереүе башҡорттарҙың 1704—1711 йылдарҙағы ҙур күтәрелешенә килтергән.

Хәҙерге Мәләүез районына ҡараған Арыҫлан (икенсе исеме Танып) — *Арыҫлановтарҙың* төп ауылы. *Арыҫлан Аҡколов* һәм уның нәҫеле ошонда көн күргән. Шул уҡ ваҡытта ошо яҡта Ағиҙел буйында Аҡкол ауылы ла булған. Был урын — *Аҡколдоң* ер биләмәһе. Һунғараҡ Нөгөш буйында *Арыҫлан* үҙ ауылын нигеҙләгән. Был ауыл 1795 йылда 16 йортло булып, унда 91 башҡорт йәшәгән. Хәҙерге Көйөргәҙе районындағы Кинйә ауылы 1770 йылдан бирле билдәле. Был инде *Кинйәнең* төп ауылдан айырылып сығыуы тураһында һөйләй. 5-се ревизия (кеше һанын иҫәпкә алыу. — *Авт.*) ваҡытында бында 18 йортта 130 кеше көн күргән. Шулар араһында *Кинйәнең* уландары, ейәндәре, бүләләре лә бар. Әгәр шәжәрәлә *Кинйәнең* бер *Һеләүһен* улы ғына күрһәтелһә, 1816 йылда уҙғарылған 7-се ревизия мәғлүмәттәрендә уның 4 улы барлығы күренә. *Һеләүһендең* тыуған һәм үлгән ваҡыты беҙгә билдәһеҙ. Ул XVIII быуатта уҡ вафат булған. Бына уның 1786 йылда тыуған *Абдрахман* исемле улы шул 7-се ревизияла теркәлгән. Унда уның уландары ла исемләп һанап бирелә. Бына улар: *Мөхәммәтрәхим, Мөхәммәтҡол, Мөхәммәтшәриф, Мөхәммәтшафиҡ.* Былар *Кинйәнең* ейәндәре. *Кинйәнең* 1745—1816 йылдарҙа йәшәгән *Ҡужәхмәт, Рәхмәтулла* (1750—1820) һәм *Сәғит* исемле улдары ла булған. Фамилиялары — *Кинйин.*

*Кинйиндар,* уларҙың улдары *Кинйәнең* нәҫелен туранантура дауам итеүселәр. Ә ҡалғандары *Кинйәгә* ата аша туғанлыҡ һаҡлаған. Улары — *Кинйәнең* бер туған ҡустылары йәки ағалары, уларҙың бала-сағалары. Уларын да исемләп һанап үтәйек. *Арыҫлан Аҡколовтың* шәжәрәлә күрһәтелмәгән уландары ла булған: *Юлбарыҫ* һәм *Ирназар.* Улар ҙа Кинйә ауылында йәшәгән. *Юлбарыҫтың Юлғотло* (1757—1816), *Юлдыбай* (1758 йылғы), *Аҡбирҙе* (1764 йылғы), *Аҡъюл* (1767—1812), *Аҡкужа* (1776 йылғы) исемле улдары 1816 йылғы 7-се ревизия ҡағыҙҙарында теркәлгән.

*Ирназар Арыҫлановтың* 1790—1859 йылдарҙа йәшәгән *Ҡотлоғәлләм* исемле улы билдәле. *Ҡотлоғәлләмдән* 9 ул ҡалған. Исемдәрен килтерәм: *Муса* (уның улы *Ҡотлорәжәп), Ҡотлоәхтәм, Ҡотломәһди (Ҡотлофәйруз), Ҡотлоәхмәт* (уның улы — *Ҡотлоҡасим, Ҡотләмбәт, Ҡотлозариф),* уряд-

ник *Ҡотлорәсул* (унан *Ҡотлозаман, Ҡотлосәйет, Сәхибгәрәй)* һәм *Ҡотлохәйҙәр.*

Крәҫтиәндәр хәрәкәте йылдарында Кинйә ауылы әһәмиәтле ваҡиғалар шаһиты була. Пугачев 1774 йылдың 1—2 апрелендә Һаҡмар ҡаласығында еңелеүгә дусар ителгәс, *Кинйә Арыҫлановтың* кәңәшен тотоп, Башҡортостанға, Кинйә ауылына йүнәлә. Яңы ғәскәр тупланғансы ул *Кинйәнең* өйөндә йәшеренергә мәжбүр булған. *Кинйәнең* «10 көндән 10 мең башҡортомдо һиңә йыйып бирәм» тип, *Пугачевҡа* вәғәҙә итеүе һәм яңы көстөң ысынлап та тиҙ тупланыуы башҡорт батырының ғәжәп һөҙөмтәле эшмәкәрлеге тураһында һөйләй.

1834—1850 йылдар араһында Кинйә ауылы аҫабаларының бер өлөшө үҙ ер биләмәләрен килмешәктәрҙән һаҡлау өсөн икенсе Кинйә ауылына нигеҙ һала. Ул 2-се Кинйәабыҙ тип аталған.

Һуңынан, беҙҙең заманда, меңәрләгән башҡорт ауылдарының яҙмышын ҡабатлап, Кинйә ауылдары ла юҡҡа сыға яҙҙы. Шунан, халыҡтың һорауы буйынса, БАССР Министрҙар Советы төп Кинйә ауылын аяҡҡа баҫтырырға ҡарар итте. Ләкин, ни ғиллә менәндер, унан айырылып сыҡҡан 2-се Кинйәне терғеҙҙеләр, ә төп Кинйәнең һуңғы усағы 1986 йылда һүнде.

*Пугачевты* ысын ирек килтереүсе итеп танып, милли һәм колониаль иҙеүгә ҡаршы башҡорт халҡы һәм уның старшиналары көрәшкә күтәрелгән. Шул старшиналар араһында егет ҡорона саҡ ингән *Салауат Юлаев* һәм ил ағаһы булып танылған *Кинйә Арыҫланов* та бар.

Пугачевҡа килеп ҡушылыусы башҡорт старшиналарынан *Кинйә* иң тәүгеләрҙән булған. Уларҙың осрашыуы 1773 йылдың 9 октябренә тап килә. Килер алдынан ул, *Пугачевҡа* үҙ исеменән алты кеше ебәреп, башҡорт халҡын көрәшкә саҡырған указ иғлан ителеүен һораған, шул кешеләр *Пугачевтың* башҡорттарға ирек вәғәҙә иткән мөрәжәғәтен алып килгән. *Пугачев* шунда уҡ *Кинйәгә* полковник дәрәжәһе биргән. Уның үрнәгенә эйәреп, бик күп старшиналар баш күтәреүселәр хәрәкәтенә ҡушыла.

Казактарҙың Ырымбур эргәһендәге Бәрҙе станицаһында Пугачев штабы ғәскәр туплау буйынса ҙур эш йәйелдереп ебәрә. Бына ошонда *Кинйә* үҙенең һәләтен күрһәтә лә инде.

Беренсенән, *Кинйә Пугачевтың* башҡалар араһында абруйын нығытыуға булышлыҡ иткән. Уның ялған батша түгел, ә ысын *Петр III* икәнлегенә штаб тирәһендәге етәкселәрҙе ышандырырға тырышҡан. Был йәһәттән *Кинйәнең Пугачев* менән бик ҡыҙыҡлы һөйләшеүе була. Тәүге осрашыуҙа уҡ юлбашсы Кинйәнән, имеш күптәнге танышы булыуына ишара яһап, һорау бирә: «Йә, Кинйә, мине таныйһыңмы?» Кинйә

нимә әйтергә белмәй уйланып торғанда, Пугачев бер ваҡытта ла улар араһында булмаған ҡайһы бер хәл-ваҡиғаларҙы хәтерләтергә тырыша: «Хәтерендәлер, мин һиңә камзул тегеү өсөн буҫтау бүләк иткәйнем. Әгәр һиндә шул буҫтауҙың бәләкәй генә бер остоғо ғына булһа ла, мин уны таныр инем», — тигән. Яҡындары алдында торған хәрәкәт етәксеһенең дәрәжәһен күтәреү маҡсатында *Кинйә* уны *Петр III* батша итеп таный һәм «Эйе, ғали йәнәптәре, мин һеҙҙе хәтерләйем һәм таныйым», — тигән. Был «таныуҙың» *Пугачев-Петр III* өсөн әһәмиәте ҙур була.

Икенсенән, русса һәм төркисә яҡшы белгәнлектән, *Кинйә* Пугачев штабында һәм Хәрби коллегияһында абруйлы ағза буларак, башҡорт, мишәр, татар, сыуаш, ҡаҙаҡ, мари, ҡалмыҡ халыҡтары араһында киң өгөт-нәсихәт эше йәйелдереп ебәргән. Шул халыҡтарҙың старшиналарынан ҡоралды көстәр ебәреүҙе һорап, хаттар талап иткән указдар яҙған.

Әйтергә кәрәк, *Пугачев* хәрәкәте башланыу менән, уның яҡлылар һәм властар араһында башҡорттарҙы үҙ яғына ылыҡтырыу өсөн көрәш башланған.

Ырымбур губернаторы *Рейнсдорп Пугачевҡа* ҡаршы Стәрлетамаҡта 1000 башҡорт һәм мишәрҙән торған ғәскәр төҙөүгә ирешә. Шул көстөң башлығы ярҙамсыһы Күлиле — мең старшинаһы *Әлибай Мырҙағолов Кинйәнән* хат алып өлгөргән була. *Пугачевҡа* ҡаршы барғас, генерал *Кар* ғәскәрен тулыландырасаҡ ошо ғәскәр Яңы Мәскәү юлында ултырған Бикҡол ауылына оҙатыла. *Кинйә* лә ул яҡҡа үҙенең эсә яғынан туғаны *Ҡотлогилде Абдрахмановты* ебәрә. Һөҙөмтәлә *Әлибай Мырҙағолов* һәм *Салауат Юлаев* етәкләгән был ғәскәр *Пугачев* яғына сыға. Өҫтәлмә һыбайлылар көткән *Кар* ярҙамсы көстән мәхрүм ителә һәм бәрелештә еңелә. *Пугачевтың* был еңеүе бөтә Башҡортостанға ишетелә һәм ихтилалдың артабан үҫеүенә ҙур йоғонто яһай. *Пугачевҡа* яңынан-яңы ҡоралды көстәр килә башлай. Бөтә Башҡортостан крәҫтиәндәр, халыҡтар хәрәкәте менән солғап алына. Пугачевтың 10 меңлек ғәскәренең теүәл яртыһы башҡорт була.

Өсөнсөнән, Кинйә баш күтәреүсе көстәр башлыҡтарын әҙерләүгә лә күп көс һалған. Ғәҙәттә *Пугачевҡа* килгән төрлө милләт старшиналары һәм йөҙ баштары хәрәкәт юлбашсыһының ҡарары буйынса әҙерлек үтеү өсөн *Кинйәгә* ебәрелгән. Уның етәкселегендә Ырымбурҙы ҡамауҙа, язалаусы көстәр менән бәрелештәрҙә был старшиналар тәжрибә туплаған. Шунан һуң улар халыҡты көрәшкә күтәреү өсөн Башҡортостандың төрлө төбәктәренә оҙатылғандар. Шулар араһында мишәр йөҙ башы *Ҡәнзәфәр Усаев* һәм Шайтан Көҙөй олоҫонан *Салауат Юлаев* та бар. Уларҙың икеһе лә *Кинйә* етәкселегендә

Бәрҙелә тәжрибә туплаған, шунан ғына тыуған яҡтарына ебәрелгәндәр.

Дүртенсенән, өгөтләү һәм ойоштороу эштәренән тыш, *Кинйә Арыҫланов*, баш полковник булараҡ, 500 кешенән торған полк менән дә етәкселек иткән, бәрелештәрҙә ҡатнашҡан.

Бишенсенән, ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡ халыҡтарын крәҫтиәндәр хәрәкәтенә йәлеп итеү эшен дә *Пугачев Кинйәгә* йөкмәткән.

Ихтилалдың икенсе осоронда ла (1774 йылдың 1 апреленән алып 12 июнгә тиклем) *Кинйә* ҙур эш башҡара. Бер аҙна эсендә (22 март — 1 апрель) *Пугачевҡа* яңынан 2 меңлек ғәскәр туплап ебәрә.

Һаҡмар ҡаласығында еңелеүгә мәжбүр булған *Пугачев* Ташлы ауылында кәңәшмә уҙғара. Ошонда *Кинйә Пугачевҡа* Башҡортостанға табан хәрәкәт итергә тәҡдим итә. Ул *Кинйәнең* тәҡдимен ҡабул итә һәм бәләкәй генә ғәскәре менән Башҡортостанға, Кинйә ауылына килә. Яңы ғәскәр ойошторолғас, *Пугачев* Вознесенск, Воскресен, Әүжән-Петровск, Белорет заводтарына китә. Бөтә Башҡортостан хәрәкәткә килә һәм Крәҫтиәндәр һуғышы үҙәгенә әйләнә.

Крәҫтиәндәр хәрәкәтенең өсөнсө осоронда ла (12 июндә башлана) *Кинйә Пугачевтың* иң яҡын, иң тоғро көрәштәше булып ҡала, Ҡазанды алыуҙа ҡатнаша. Волга буйы халыҡтарын Пугачев яғына йәлеп итеүҙә лә уның өгөтләү эше һөҙөмтәһеҙ ҡалмай.

1774 йылдың 24 авгусында үс алыу ғәскәре ихтилалсыларҙы Волганың уң яғында ҡыуып етә, Царицын һәм Ҡара Яр араһында ҡаты бәрелештә *Пугачев* еңелә. Уның ни бары 100 кешеһе тороп ҡала. Бай Яйыҡ казактары, эштең һәләкәткә барыуын һиҙеп, үҙ йәндәрен ҡотҡарып ҡалыу өсөн *Пугачевты* тотоп бирергә һүҙ ҡуйыша, уларҙың етәксеһе *Творогов,* аҙаҡ һорау алғанда үҙҙәренең *Пугачевтың* яҡындарынан бигерәк тә *Кинйәнән* ҡурҡыуҙарын белдергән, 15 сентябрь көнө улар *Пугачевты* тотоп, властарға тапшыра.

*Кинйәнең* артабанғы яҙмышы тураһында бер ниндәй ҙә документ юҡ. Берәүҙәр уның хыянатсылар тарафынан үлтерелеүе тураһында фараз итһә, икенселәре был ҡараштыкире ҡаға. Халыҡ күңелендә иһә *Кинйәнең* күп михнәттәр аша үҙ тыуған ауылына ҡайтыуы һәм шунда ерләнеүе хаҡында легендаyда йәшәй. Батша властары, оҙаҡ эҙләгәндән һуң, *Кинйәнең* хәбәрһеҙ юғалыуын иғлан итәләр. Ләкин халыҡ араһында *Кинйәнең* ғәскәре Ағиҙел башында, Һаҡмар, Ашҡаҙар, Дим буйҙарында тупланыуы тураһында күңелдәрен йыуатҡыс хәбәр йөрөй, халыҡ уның яңынан ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы күтәрелеренә бик оҙаҡ өмөтөн өҙмәй...

Нисек кенә булмаһын, башҡорттарҙың азатлыҡ өсөн көрәшендә *Кинйә Арыҫлановтың* эшмәкәрлеге ифрат ҙур урын тота, уның батырлығы, ойоштороу һәләте, таланты менән халыҡ хаҡлы ғорурлана һәм *Кинйә* исеме алдында баш эйә.

## 5. ҠАСҠЫН ПОЛКОВНИК ҺАМАРОВ

Рәсәй тарихында иң һуңғы Крәҫтиәндәр һуғышында *Ҡасҡын Һамаров* баш күтәреүселәрҙең күренекле етәкселәренең береһе була. Ул Нөгөш, Мәләүез һәм Ағиҙел буйын һыулаған Тамъян ырыуынан. Халыҡ көрәше башланғанға тиклем *Ҡасҡын Һамаров* үҙ олоҫонда абруйлы аҫаба була. Ул шулай уҡ олоҫ ерен сит кешеләргә ҡортомға (арендаға) биргән ваҡытта аҫабаларҙың ышанысл вәкиле лә. 1761 йылдан башлап йөҙ башы хеҙмәтен үтәп, 100 йортҡа етәкселек иткән. Иҙел — Нөгөш тамъяндары алты ауылды (Иҫке Муса, Иҫке Моҡас, Ҡотош, Смаҡ, Түләк, Мәмбәтҡол, шунан Иҫке Мусанан яңыһы, унан — Йомағужа, ә унан — Илкәнәй; Смаҡтан Исламғол айырылып сыҡҡан) тәшкил иткән. Шул уҡ ваҡытта тамъяндар ерендә сыуаш һәм суҡынған татарҙарҙан торған дәүләт крәҫтиәндәренең Мәләүез ауылы урынлашҡан. Халыҡ аҙ һаналһа ла (сөнки уларҙың күпселек өлөшө Урал аръяғында — Әбйәлил районында йәшәй), Иҙел — Нөгөш тамъяндарының 58 мең дисәтинә уңайлы ере булған.

Бына ошо олоҫтоң Мостафа (Һәйет) ауылы — *Ҡасҡын Һамаровтың* тыуған төйәге. Нөгөштөң Ағиҙелгә ҡушылған ерендә, йылғаның ике яғында Һәйет исемле ике ауыл булған. Шуларҙың береһен 1740 йылда үс алыусылар тарафынан язаланған ихтилалсы *Һәйет Алдағолов* нигеҙләгән. Аҙаҡ ауыл уның улы Мостафа исеме менән билдәле була.

XIX быуаттың 30-сы йылдарында Ҡотош ауылында *Ҡасҡындың* ейәне *Сәлих Хәлилов* йәшәгән. Уны нисектер яңылыш килмешәккә күсерәләр. (Ул саҡта аҫабалар еренә күсеп ултырғандарҙы килмешәк (припущеник) сословиеһына индергәндәр. — *Авт.*) Ә был уның ризаһыҙлығын тыуҙырған һәм үҙенең аҫаба башҡорто икәнен иҫбатлаған. Баҡтиһәң, уның ҡартатаһы — *Ҡасҡын Һамаров.* Уның улы *Хәлил Ҡасҡынов* Ҡотош ауылының аҫабаһы булған. Шулай булғас, Хәлилдең улы *Сәлих Хәлилов* та аҫаба икән. Уларҙың өсөһөнөң дә тамғаларында оҡшашлыҡ бар — Щ хәрефен хәтерләтә. Ә шулай ҙа был ауылда аҫабалар менән бергә килмешәк типтәрҙәр ҙә йәшәгән. Уларҙың һаны 1834 йылда 11 кешегә етә.

Ырымбур губернаһы сиген һаҡлаусы башҡорт командаларын алып барыусы һәм алып ҡайтыусы поход старшинаһы ла

булған ул *Һамаров*. 1771 йылда 3 мең башҡорт командаһын етәкләгән 11 старшина араһында *Ҡаҫҡын Һамаров* та рус ғәскәрҙәренең Польшалағы Бар конфедерацияһына ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан.

Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе осоронда (1773 йылдың 17 сентябренән алып 1774 йылдың 1 апреленә тиклем) поход старшинаһы *Ҡаҫҡын Һамаров* баш күтәреүселәрҙең күренекле етәксеһе булып әүерелеүгә ҡарамаҫтан, уға ҡайһы бер икеләнеүҙәр ҙә хас. Ул быны нимәлә күренә. Ырымбур губернаторы *Рейнсдорптың* әйтеүенсә, 1773 йылдың 18 октябренә тиклем *Ҡаҫҡын Һамаров* Пугачевтың 5 тапҡыр саҡырыу ҡағыҙын алып та, ауырыуға һылтанып уға бармаған. Үҙе уның яғында хәрәкәт итеп, 12 октябрь көнө Воскресен заводын алған. Завод крәҫтиәндәре уның отрядына ҡушылған. Бынан тыш *Пугачев* яғына 600 кеше йыйып оҙатҡан. Шулар менән 4 пушка, 700 йәҙрә, дары, мылтыҡ, заводтың 31 мең һум аҡсаһын да ебәргән. Заводтың иҫәп-хисап ҡағыҙҙарын туҙҙыртҡан. 18 октябрь көнө үҙе лә *Пугачевҡа* ашыҡҡан. Һуңынан Ҡазан йәшерен комиссияһында һорау алғанда әйткән һүҙенә ҡарағанда, *Ҡаҫҡын Һамаров Пугачев* янына Бәрҙе станицаһына килгәс, күптәнге таныш күрше Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы *Кинйә Арыҫланов* килеп инә. *Кинйә* уға *Пугачевтың* «ысын батша» икәнен әйткәс, *Һамаров* уны батша итеп таныясағын белдерә. *«Батша» Һамаровтан* унан ни өсөн ошоға тиклем уға килмәүенең сәбәбен һорай. *Һамаров* быны үҙе йәшәгән ергә яҡын Стәрлетамаҡ тоҙ пристанендә *Әбей батша* ғәскәре тупланыуы менән аңлата. Шунан ул полковник дәрәжәһе алып, халыҡты көрәшкә күтәреү өсөн тыуған яҡтарына ҡайтып китә.

*Пугачевтың* халыҡҡа мөрәжәғәте бөтә милләт крәҫтиәндәрен көрәшкә күтәрә, октябрь — ноябрь айҙарында бөтә Башҡортостан хәрәкәткә килә. Бер нисә урында уны етәкләү үҙәктәре барлыҡҡа килә. Өфө эргәһендәге Чесноковка ауылында ихтилалды етәкләү үҙәге лә шулар иҫәбендә. Үҙенең әһәмиәте буйынса ул Пугачевтың Бәрҙелә урынлашҡан штабынан ҡала икенсе үҙәккә әйләнә.

Ихтилалды етәкләү буйынса был үҙәк эшмәкәрлеге ике өлөштән тора. Уның беренсеһе — 12 декабргә тиклем, ә икенсе осоро ошо көндән һуң башланған. Башҡортостандың үҙәгендә — Өфө тирәһендә — хәрәкәтте йәйелдереп ебәреүгә шарттар булдырыла һәм Өфө өсөн көрәш башлана. Көрәштең ошо тәүге өлөшөндә пугачевсы *Ҡаҫҡын Һамаровтың* киң эшмәкәрлеге башлана.

Өфө төрлө халыҡтарға, шулай уҡ крәҫтиәндәргә феодал һәм милли иҙеү үҙәге булып күренгәнгә күрә, бөтә көстө уны

алыу өсөн йүнәлтәләр. Өфө — провинция үҙәге, уның 50 мең һум туплаған ҡаҙнаһы, 300 бот дары запасы һәм, әлбиттә, етерлек хәрби көсө лә була. 4889 ҡала кешеһенән 1434 ир-ат хәрби хеҙмәткә яраҡлы иҫәпләнгән. Ҡаланы һаҡлау сағыштырмаса ныҡ ойошторолған булған. Ҡаланың иң әһәмиәтле урынына 20 туп ҡуйылған. Уларҙың бер нисәһе санаға урынлаштырылып, ҡурҡыныс тыуған позицияға бик тиҙ күсереп йөрөтөлгән. Өфөнөң географик урыны ла уны һаҡлауға булышлыҡ иткән.

Өфө тирәһенә Башҡортостандың Нуғай (көньяҡ) һәм Ҡазан (көнбайыш) өлкәләренән бер нисә милләттән торған отрядтар ағылған. 1773 йылдың 24 ноябрь көнө 500 башҡорт яугиры Чесноковка ауылы рус крәҫтиәндәре тарафынан икмәктоҙ менән ихлас ҡаршы алына. Был тирәлә башҡорт, татар, рус, мари крәҫтиәндәре ихтилалға ҡушыла. Өфө тәүҙә көньяҡтан (Чесноковка ауылы яғынан), ә 27—28 ноябрҙә бөтә яҡлап тип әйтерлек ҡамауҙа ҡала.

Бына ошо ғәскәрҙе *Ҡасҡын Һамаров* етәкләгән. Уның штабы Чесноковкала урынлаша. Бәләкәйерәк ғәскәри көстәрҙе башҡорттарҙан йөҙ башы *Ҡаранай Моратов* (аҙаҡ уны *Чика-Зарубин* крайҙың көнбайышына халыҡ хәрәкәтен етәкләү өсөн ебәргән), поход старшинаһы *Ҡанбулат Юлдашев,* олоҫ старшиналары *Турай Ишалин, Ибраһим Мерәҫев,* татар старшинаһы *Ибраш Уразбахтин,* мишәр старшинаһы *Әбсәләм Мәмәдәлин* һ. б. етәкләгән. Өфөнөң төньяғында Черниковка ауылында урынлашҡан төрлө милләт отрядтары менән Өфө кешеһе *Иван Губанов* етәкселек иткән.

Пугачевсыларҙың һуғыш ысулы етеҙ хәрәкәт булған тип әйтеп булмай. Өфөгә һөжүм һирәк яһалған. Шулай уҡ ҡаланы бөтә яҡтан ҡамап ала алмағандар: көнсығыштан Ҡариҙел яғы асыҡ ҡалған. *Пугачевтан* туп көткән улар. Ул килгәнсе ҡалаға һөжүм итмәй, ә тик уны ҡуҙғытып ҡына торорға булғандар. Өфөнө, һуғышһыҙ, тыныс юл менән генә алырға ниәтләгәндәр. *Ҡасҡын Һамаров* пугачевсыларҙың сафын туплай, яңы отрядтар төҙөү эшен дә йәйелдерә. Ул Башҡортостандың төрлө яғына указдар ебәрә. Шундай саҡырыуҙы 6 декабргә Дим буйы олоҫтары ла ала. Унан һәр бер йорттан ҡоралланған берәр кеше ебәреү талап ителә. 12 декабрь көнө *Ҡасҡын Һамаров* көнбайыш олоҫтарынан (мәҫәлән, Йылан) *Пугачевты* батша итеп таныуҙы һәм уға ярҙам ебәреүҙе һораған.

12 декабрь көнө *Пугачевтың* әмере буйынса ихтилалдың икенсе үҙәген етәкләү өсөн *Чика-Зарубин* килә. *Һамаров* иһә үҙ отрядын етәкләй.

Полковник *Һамаров* 28 декабрҙә Себер юлы олоҫтарына (Әйле, Дыуан, Ҡошсо, Һарт) һәр өс йорттан бер һуғышсыны Өфө яғына ебәреүҙе талап иткән указын ебәрә һәм ул көткән

# ЧЕСНОКОВСКИЙ ЛАГЕРЬ

**НОЯБРЬ 1773– МАРТ 1774 г.**




Пугачев ихтилалы көрәшселәренең Чесноковкалагы штаб-лагеры.

ярҙам килеп тә етә. 11 мартта ла ул Йылан олоҫонан шундай ярҙам ебәреүҙе һораған. *Иван Чика-Зарубин* Өфөнө алыу өсөн әҙерлек эшен дауам итә. Шулай ҙа провинция үҙәген һуғышһыҙ алыу тактикаһын да күҙ уңынан ысҡындырмай. Зарубиндың үҙе килгәндән бирле 24 мартҡа тиклем пугачевсылар тыныс юл менән ҡаланы биреүҙе 18 тапҡыр талап итә. Ҡаланы ике мәртәбә 10—12 мең кеше һәм 16 туп менән штурмлап ҡарай. Ләкин был юл уңыш килтермәй. Ә 24 мартҡа Михельсондың язалау корпусы килеп етеп *Чика-Зарубин* отрядтарын туҙҙырып ебәрә. Был ваҡытта *Пугачев* ғәскәре лә ике тапҡыр еңелеүгә дусар ителгән була.

Ошондай уңышһыҙлыҡтарҙан һуң ҡайһы бер старшиналар бөтөнләйгә тиерлек көрәштән баш тарта. Шундайҙарҙың береһе — *Ҡасҡын Һамаров*. Ул хатта генерал *Фрейманға* килеп, унан үҙенең ғәскәрен көсәйтеүҙе һорай һәм *Пугачевты* эҙәрләргә һүҙ бирә. Ләкин үҙ олоҫона ҡайтҡас һүҙенән баш тарта. Был уның тактик маҡсатта эшләнгән эше тип уйларға кәрәктер. Язалаусыларҙы тынысландырыу өсөндөр инде 4 апрелдә *Ҡасҡын Әбей батшаға* тоғро буласағы һәм һуғышмаясағы тураһында тағы бер белдереү яһай. Ләкин ул үҙ көсөн пугачевсыларға ҡаршы йүнәлтмәй. Ә, киреһенсә, халыҡты властарға ҡаршы ҡоторта. Был турала тоғро старшина *Мәндей Түпәев* 10 май Өфө провинцияһы канцелярияһына биргән рапортында яҙа.

«*Ҡасҡын Һамаров* көс туплай, һөжүмгә әҙерләнә, был маҡсатта ул пугачевсыларҙың ғаиләләрен Ағиҙел аръяғына, тауҙар яғына сығара һәм 40 мең кешенән торған көс тупланыуы хаҡында *Пугачевҡа* хәбәр итте», — ти *Түпәев*. 18 май көнө шул уҡ Түпәев, Ырымбурға ебәрелгән аҙыҡ-түлек һәм уны оҙатыусы 10 кешемде *Ҡасҡын Һамаров* тотоп алды, тип хәбәр итә. Артабан дауам итеп былай ти: «Ул халыҡты көрәшкә күтәрә, төрлө ергә үҙ кешеләрен тарата, ә башҡалар уларҙы үҙ ылауында йөрөтә. 21 май көнө *Һамаров* башҡорт, мишәр, татар старшиналарын *Петр III*-тән килгән указ нигеҙендә уның дошмандарына ҡаршы торорға, көс етһә — уларҙы ҡырырға, ә көс мөшкөл саҡта дошманды ҡамап торорға саҡыра. Әбей батша указдарын таратыусыларҙы тотоп алған».

Май айында Башҡортостан язалаусылар ғәскәрҙәре менән уратып алына. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында, Нуғай һәм Ҡазан юлдарында *Пугачев* полковниктары *Ҡаранай Моратов, Ҡасҡын Һамаров, Ҡотлогилде Абдрахманов* ғәскәрҙәре әүҙем көрәш алып бара.

22 май көнө *Ҡасҡын Һамаров* Бөгөлсән тирәһендә 300 гусарҙы ҡамап тота. 25 майҙа дошман көсөнә ҡаршы 600 кешеһе менән һөжүм яһай. Июнь башында *Һамаров, Абдрахманов,*

*Өмәров* ҡулы аҫтындағы ғәскәри көстәр Воскресен заводының крәҫтиәндәре йәшәгән Ромадановкаға киләләр. Завод крәҫтиәндәре пугачевсылар яғына сығыу теләге белдермәгәс, икеләнгәс, завод хужаларының ҡаршылыҡ ойоштороуы арҡаһында был ауылды пугачевсылар ҡамауҙа тотоп, 8 июнь көнө бәреп инәләр. Август айында *Һамаров* һәм *Абдрахманов* башҡа старшиналарҙың (*Ҡәйеп Зиәмбәтов, Ибраһим Мерәҫев*) көстәрен берләштереп, үс алыусыларға ҡаршы сығыуҙы талап иткәндәр. Беҙҙең барған юл дөрөҫ, шуға күрә *Пугачевҡа* ярҙам итеп, йәндәребеҙҙе лә аямаясаҡбыҙ, тиҙәр улар.

*Әбей батша* яҡлылар ҙа йыш ҡына пугачевсылар араһында үҙ яҡтарына сығырға саҡырып ҡағыҙҙар һәм өндәмәләр тарата. Шундай ҡағыҙҙы 30 сентябрь көнө полковник *Шепелевтан Һамаров* та ала.

Сентябрь — октябрь айҙарында *Һамаров* көрәште һаман дауам итә. *Рейнсдорп* әйтеүенсә, октябрь аҙағында ул Нуғай юлына ингән үс алыу командаһына ҡаршылыҡ күрһәткән һәм һөжүм иткән. Ләкин ноябрь башында *Ҡаранай Моратов, Ҡотлогилде Абдрахманов, Муйнаҡ Сөләймәнов, Төрөкмән Йәнсәйетов* менән бергә *Һамаров* үҙен ғәйепле итеп таный һәм властарға бирелә. 1775 йылдың февралендә ул пугачевсыларҙың эшен тикшереү комиссияһы ҡарамағына — Ҡазанға оҙатыла. Был комиссияның ҡарары билдәле түгел, ләкин шуныһы асыҡ: *Һамаров* башҡа күпселек старшиналар һымаҡ аҡланған. Был турала бер факт һөйләй: 1777 йылдың аҙағында ул *Ҡотош Мортазин* менән бергә Тамъян олоҫоноң (Ағиҙел — Нөгөш буйы) старшинаһы вазифаһын үтәгән. Шул уҡ хәл *Ҡаранай Моратовҡа* ла ҡағыла. 1783 йылда *Ҡаранай* Бөрйән олоҫонда старшина булып торған.

Күренеүенсә, *Ҡасҡын Һамаров* — Ағиҙел — Нөгөш тамъяндары араһынан сыҡҡан киң билдәле пугачевсыларҙың береһе. Өфө эргәһендә барлыҡҡа килгән баш күтәреүселәрҙең икенсе үҙәген нигеҙләү һәм нығытыуҙа уның роле ҙур. Өфөнө ҡамау, уны алырға тәүге ынтылыуҙар ҙа *Һамаров* етәкселегендә башҡарылған. *Пугачевтың* күренекле полковнигына икеләнеүҙәр ҙә хас. Ләкин *Ҡасҡын Һамаров* ҡоралын халыҡҡа ҡаршы күтәрмәгән.

Күренекле башҡорт батыры *Ҡасҡын Һамаровтың* ҡыҫҡаса көрәш юлы бына ошо мәғлүмәттәрҙән ғибәрәт.

## 6. ЯҠУТСТАНДАҒЫ БАШҠОРТТАР

Билдәле булыуынса, батша хөкүмәтенең колониаль, социаль, дини һәм милли иҙеүенә ҡаршы башҡорт халҡы өҙлөкһөҙ баш күтәреп торған. Үткән быуаттарҙа башҡорттарҙың ҙур-ҙур

ихтилалдары байтаҡ төбәктәрҙе солғап алған. XIX быуатта ла йорт старшиналарына, рус алпауыттарына һәм завод хужаларына ҡаршы сыуалыштар һәм баш күтәреүҙәр йыш тоҡанған. Ләкин был хәрәкәттәр алдан уҡ еңелеүгә дусар ителеп, унда ҡатнашыусыларҙы иҫ киткес яуыз ысулдар менән ҡаты язаға тарттырғандар. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: халыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың ауылдарын утҡа тотоп, юҡ иткәндәр, ҡатын-ҡыҙҙарын һәм бала-сағаларын рус алпауыттарына өләшеп биргәндәр (мәҫәлән, 1735—1740 йылдарҙағы күтәрелеште баҫтырғандан тыш, төрмәләрҙә үлеү, язалау һәм ҡоллоҡҡа таратыу һөҙөмтәһендә башҡорттар 28 190 кеше юғалтҡан, быны өҫтәүенә, ике йыл эсендә 17 362 кеше суҡындырылған. Ж. «Вестник знания», Спб., 1909, № 8—9, 1560-сы бит), киң билдәле көрәшселәрҙе тән язаһына тарттырып, маңлайҙарына ҡыҙҙырылған тимер менән тамғалар ҡуйҙырып, тыуған иленән бик алыҫҡа — Балтиҡ буйы утрауҙарына, йә Себергә мәңгегә каторга эшенә ҡыуғандар, йәки полиция һағы аҫтында йәшәргә ситкә һөрә торған булғандар.

Әйтергә кәрәк, яҙыласаҡ был ваҡиға, бик һирәк осрай торған хәл булараҡ, тарихсыларҙың һәм үҙ халҡының үткән ауыр көрәш юлы менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың да иғтибарын йәлеп итергә лайыҡ булыр, тип ышанабыҙ.

Был мәҡәлә Башҡортостан һәм Яҡутстан Үҙәк дәүләт архивтары һәм «Восточное обозрение» гәзите материалдары нигеҙендә яҙылды. Яҙылғандар иһә башҡорт халҡының тарихи хәл-ваҡиғаларына, ҙур сығыштарына бәйләнмәгән. Сағыштырмаса тыныс шарттарҙа йыйым-һалымға, хәрби йөкләмәгә, ғөмүмән, социаль иҙеүгә туранан-тура йә пассив ҡаршылыҡ күрһәткән бер нисә мең башҡорттоң Себергә һөрөлөүе һәм уларҙың шундағы яҙмышы тураһында барасаҡ.

Был сыуалыштың башланыуына алда әйтелгән башҡа сәбәптәрҙән тыш түбәндәге хәл дә һылтау булған.

1865 йылда Башҡортостанда, кантон идара итеү системаһы бөтөрөлгәндән бирле, урындағы халыҡ вәкилдәрен хеҙмәткә алыу тик 1873—1874 йылдарҙа ғына башлана. Был хәрби йөкләмә яңы устав нигеҙендә башҡарылған һәм рекрут системаһынан айырылып торған. Хәҙер һәр бер һау егет ғәскәри көстәрҙә хеҙмәт итергә тейеш булған. Ләкин ябай халыҡ аңлап-төшөнөп етмәй. Шуға күрә улар араһында ризаһыҙлыҡ тыуа. Башҡорт аҫабалары рус дәүләт крәҫтиәндәренең хәленә күсеүҙән һәм ерҙән мәхрүм ителеүҙән ҡурҡып, ошо бурысты үтәүҙән баш тарта. Был хәл бигерәк тә Пермь губернаһы Уса өйәҙендәге башҡорттар араһында көсәйә. Олоҫ идаралыҡтары указлы муллаларҙан хеҙмәткә тәғәйенләнгән егеттәрҙең метрикаларын талап итә башлай. Ләкин һәр бер ауыл халҡы мул-

№ 1.

# БИЛЕТЪ

Гербъ.

Примѣты: 8)

*Лѣта*

*Ростъ*

*Волоса*

*Брови*

*Глаза*

*Носъ*

*Ротъ*

*Подбородокъ*

*Лице*

*Особыя примѣты*

Предъявит сего 1)

*отпущен* *отъ* 2)

для жительства въ разныхъ губерніяхъ, срокомъ отъ нижеписаннаго числа на 3) мѣсяц ; если же въ теченіе льготнаго мѣсяца послѣ сего срока не явится, то съ н поступлено будетъ какъ съ бродяг Данъ въ 4) сего 5) тысяча восемь сотъ тридцать 6) года.

МП

Подпись подлежащихъ лицъ 7)

№ 9)

*Примѣчанія:* 1) Здѣсь писать какого помѣщика, уѣзда и деревни, имя, прозваніе и лице, кому дается билетъ. 2) Здѣсь писать обстоятельно, отъ кого данъ билетъ. 3) Число, мѣсяцевъ писать прописью. 4) Здѣсь означить мѣсто, гдѣ подписывается билетъ. 5). Здѣсь писать прописью: мѣсяцъ и число. 6) Здѣсь писать прописью годъ. 7) Здѣсь должна быть подпись того, который выдаетъ билетъ, съ приложеніемъ печати. 8) примѣты писать какъ въ плакатныхъ паспортахъ. 9) Здѣсь писать нумеръ по исходящему реэстру.

Начальникъ штаба Полковникъ [illegible]

Сит губерналарға күсенеүселәр өсөн тейешле ҡағыҙ.

лаларҙың был эшенә ҡаршы сыға. Уса өйәҙендәге бер генә мулла ла үҙенә йөкмәтелгән был эште үтәй алмай. Хәрби хеҙмәт йөкләмәһенә ҡаршы хәрәкәт көстәрен күреп һәм уны өгөт-нәсихәт юлы менән баҫтырыу өсөн эске эштәр министры Пермь губернаһына Өфөнән мөфтөй *С. Ш. Тевкелевте* ебәрә. Уса өйәҙенә килеү менән ул метрикаларҙы тапшырмаған муллаларҙы яуапҡа тарттыра. Шуларҙың икәүһен указлы мулла исеменән мәхрүм иткән, тағы икәүһен эшенән ала, алтауһын бер йылға вазифаһынан бушата, өйәҙ ахунын алмаштыра, ә ҡалған бөтә муллаларға тип әйтерлек ҡаты шелтә бирә. Ә халыҡты батшаға тоғро булырға һәм уға хеҙмәт итергә саҡыра. Ләкин был өйәҙҙә халыҡ хәрәкәте дауам итә бирә. Тик эске эштәр министрының бойороғо буйынса өйәҙгә бер батальон һалдат индерелгәс кенә, сыуалыш туҡтатыла. Унда ҡатнашыусыларҙы шул уҡ министрҙың күрһәтмәһе буйынса административ рәүештә тыуған иленән Олонец (Карелия) губернаһына йә Себергә һөрәләр. Шулай итеп, төньяҡ башҡорттарының сыуалышы баҫтырыла.

XIX быуаттың 70-се йылдарынан башлап алыҫ Яҡутстанда Себергә һөрөлгән башҡорттарҙың колонияларын барлыҡҡа килтерергә ынтылыш яһалған. Уларҙың дөйөм һаны 1887 йылда өс меңгә тиклем еткән. Ошо һан эсендә ирҙәре менән ауыр яҙмышты үҙ теләктәре менән уртаҡлашҡан, декабрист ҡатындары юлы менән барған, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла булған. Сөнки кеше аяғы баҫмаған тип әйтерлек урындарҙа етерлек дәрәжәлә ярҙам күрмәгән меңәрләгән ярлы-ябаға бары үҙ көсө менән генә ни бары өс ауыл булдыра алған. Мәҫәлән, уларҙың береһе Вилюй округында Александровск исемле, икенсеһе унан 40 саҡрым алыҫта Сергелях йылғаһы буйында, өсөнсөһө Сунтар олоҫонда Мачесмар тип аталған.

Батша хөкүмәте бик еңел юл менән бер ниндәй сығымһыҙ һәм мәшәҡәтһеҙ Себергә һөрөлгән күп һанлы башҡорттарҙың үҙ-үҙҙәрен тәьмин итерлек хужалыҡлы төрлө тармаҡлы колония-ауылдар булдырмаҡсы булған. Ә бының өсөн Яҡутск ҡалаһынан Вилюй округына буласаҡ башҡорт колонистарына игенселек менән шөғөлләнергә мөмкин булған ерҙе һайлау һәм бүлеү өсөн ер үлсәүсе *Сороковников* ебәрелә. Округ буйлап оҙаҡ йөрөгәндән һуң, ул Олекминск округы сигендә Бочанай йылғаһы буйындағы Сунтар олоҫона туҡтала. Ер үлсәүсенең фекере буйынса, был ер игенселек өсөн уңайлы тип табыла, ләкин баҫыусылыҡ өсөн ерҙе урмандан таҙартыу кәрәк була. Был урындың икенсе уңай яғы ла була: Вилюйск һәм Олекминск ҡалаларын ошо ерҙән үткән сауҙа юлы тоташтырып торған. Яҡын-тирәлә — тик урындағы халыҡ, улар ҙа бик аҙ һанлы була: ни бары өс-дүрт яҡут ғаиләһе йәшәгән. Был ерҙән

буласаҡ колонияға урын бүленә, сабынлыҡ һәм мал көтөүлеге билдәләнә. Уның майҙаны 700 дисәтинәгә барып етә. Был ерҙең уңайһыҙ яҡтары ла була, кеше йәшәгән ауылдар һәм ҡалалар бик алыҫта урынлашҡан: мәҫәлән, Сунтар рус булмаған халыҡтар идараһынан 150, Олекминск ҡалаһынан 300 һәм Вилюйскиҙан 600 саҡрым булған.

Ер һайлау һәм бүлеү менән бер рәттән Яҡут губернаторы буласаҡ башҡорттар колонияһын тәүге кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү маҡсатында Вилюй округының исправнигына урындағы халыҡтан ярҙам йыйыу өсөн подписка асырға бойороҡ бирә. Әйтергә кәрәк: йөҙәрләгән, хатта меңәрләгән һөрөлгән кешеләрҙе Себерҙә урынлаштырыу өсөн батша хөкүмәте һәм ҡаҙнаһы бер тинлек тә сығым яһамаған. Барыһы ла иһә урындағы яҡут халҡының иҫәбенә үткәрелә. Бер йылдан да кәмерәк ваҡыт эсендә был подписка бик уңышлы һөҙөмтә бирә: аҡсалата 10 000 һум, 5 мең һумлыҡ 100 баш эш малы, 300 һумлыҡ 200 бот арпа һәм 5 мең һумлыҡ хужалыҡта кәрәк төрлө эш ҡоралдары йыйыла. Яҡут халҡының был эскерһеҙ бүләге батша хөкүмәте тарафынан иҙелеп йәшәгән ҡәрҙәш башҡорт халҡының ауыр яҙмышҡа дусар ителгән вәкилдәренә теләктәшлек һәм ярҙам билгеһе булған.

1873 йылдың яҙында Вилюйск ҡалаһына һөрөлгән башҡорттарҙың беренсе төркөмө килә. Ошонан шунда уҡ «Бочанай йылғаһы буйында уларға бүленгән ергә артабан оҙатыу өсөн» Сунтар рус булмаған халыҡтар идараһына ебәреләләр. Ләкин идара полицияның бойороғон ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында үтәй алмай һәм был турала Вилюйск ҡалаһына түбәндәгеләрҙе белдерә: «башҡорттарға бүленгән бер йылға буйындағы ерҙә йәшәү өсөн бер ниндәй ҙә шарттар юҡ: кейем дә, аҙыҡ-түлек тә, йорттар ҙа һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ҙа унда булмай. Етмәһә, ошо ер урындағы халыҡтың тәүге ауылынан 700—800 саҡрым алыҫлыҡта урынлашыу арҡаһында, яҡуттар уларға ярҙам ҡулы һуҙа алмаясаҡтар. Шуға күрә, идара башҡорттарҙы артабан оҙатмайынса ошонда уҡ — Сунтар олоҫонда һәр өйгә бер нисә кешене бүлеп бирергә мәжбүр булды». Был идараның ошондай рапортына ҡарамаҫтан, полиция Сунтар олоҫона башҡорттарҙы ебәреүен дауам итә. Аҙыҡ-түлеккә бик наҡыҫ булған олоҫта һөрөлгән башҡорттар араһында аслыҡ һәм ауырыуҙар башлана. Ә был хәл үҙ нәүбәтендә уларҙың ризаһыҙлығын һәм сыуалышын тыуҙырған. 23 октябрҙә полиция ҡапыл Сунтар олоҫона йыйылған башҡорттарҙың күбеһен Үрге Вилюй, Мархинск олоҫтарына һис кисекмәҫтән ебәреүҙе талап иткән. Тимәк, йәй буйына килгән 82 кешенең 50-нән артығын йөҙәр саҡрымдар аша төрлө олоҫтарға оҙатырға кәрәк була. Күсенеү мәшәкәттәре башҡорт-

тарға ғына түгел, бәлки урындағы халыҡҡа ла бик ҙур ауырлыҡ булып төшә, сөнки һуңғылары аҙыҡ-түлек һәм ылау бирергә мәжбүр ителәләр.

1874 йылдың апрель айында Сунтар олоҫо Бочанай йылғаһына башҡорттарҙың бер өлөшө оҙатыла. Улар менән бергә яҡут халҡы биргән 17 ат, 18 үгеҙ һәм 80 бот арпа, ә һөргөнсөләрҙе күҙәтеү өсөн ҡоралл ы ике казак ебәрелә. Ләкин юлда, ул тирәлә бер кемдең дә йәшәмәүе беленгәс, бөтә мал ҡар ирегәнгә тиклем бушлай көтөү һәм ашатыу өсөн яҡуттарға ҡалдырып кителгән.

Билдәләнгән урынға еткәс, башҡорттар казактар надзоры аҫтында үҙҙәренә урман таҙартып сәсеүлек әҙерләгәндәр, йорттар һәм икмәк һалыу мөгәзәйе төҙөгәндәр. Ҡар ирегәс, бер нисә дисәтинә ер һөрөп, арпа сәскәндәр. Ә йәй көндәре баҫыулыҡ өсөн урман таҙартҡандар, һунарға йөрөгәндәр. Башҡорт колонияһы үҫә барған, ләкин көҙгә тағы яңы ауырлыҡтар тыуған; тәүге баҫыу көҙгә бер ниндәй ҙә уңыш бирмәй — арпа һабағы буйға үҫһә лә, баш ҡоҫмай. Шулай итеп, һөргөнсөләрҙе тормоштоң яңы ғазаптары көтә. Урындағы хакимиәт ҡышҡа әҙерлек эшен башҡорттарҙың үҙҙәренә йөкмәтә, ләкин ҡаҙна бер ниндәй ҙә ссуда бирмәй. Шуға күрә был ерҙән күптәре кәсеп эҙләп, рөхсәт алып, приискыларға, ҡалаларға эшкә китәләр. Ләкин округ полиция идаралығы быны ишетеп, уларҙы кире борорға һәм ҡайтарырға бойороҡ бирә. 1874 йылда Бочанай буйындағы тәүге башҡорт ауылы — колонияһына Александровск тигән исем бирелә. Ауыл ҙурайған һайын, унда йәшәүселәр өҫтөнән күҙәтеү ҙә көсәйә. Уларҙың тәртибе, ҡылығы һәм тормошо казактар күҙәтеүенә тапшырыла. Һәр бер колонистың ҡылған эше хаҡында казактар полиция идаралығына түкмәй-сәсмәй еткереп торалар.

1875 йылда арпа сәсеүлеге арта, бөтәһе 68 дисәтинә баҫыуға иген сәселә. Ләкин был йылда ла башҡорттар уңышһыҙлыҡҡа осрай — сәселгән ер бер ниндәй ҙә уңыш бирмәй. Ә халыҡ астан үлмәҫ өсөн һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ һәм урман эше менән шөғөлләнә башлай. Шул арала Александровск ауылы ла үҫә бара. 1875 йылда был колонияла 150 йәнде үҙ эсенә алған 51 өй хужаһы барлыҡҡа килә.

Ошо уҡ йылда Сунтар еренән 7 саҡрым алыҫта башҡорттарҙың Мачесмар исемле икенсе ауылы төҙөлә. Унда 20 өй хужаһы булып, шул уҡ йылда 50 дисәтинә ер сәселә. Был ауылға бөтәһе 482 дисәтинә уңайлы ер бүленеп бирелгән була.

Тиҙҙән Яҡут губернаторы башҡорттарға бушлай ссуда биреүҙе һәм урындағы халыҡтың ярҙам итеүен тыя. Мәжбүри рәүештә һөрөлгән башҡорттар алыҫ һәм сит ерҙә тулыһынса үҙ ҡарамағына ҡалдырыла. Шуны ла әйтеү кәрәк: яҡуттарҙың

тәүге йылдарҙағы төрлө ярҙамы башҡорттарға тулыһынса теймәгән: урындағы батша ялсылары унын күп өлөшөн үҙ файҙаларына үҙләштергәндәр. Игендең уңмауы, йәшәү шартының көндән-көн насарланыуы, урындағы хөкүмәт әһелдәренең баш-баштаҡлығы башҡорт колонистарының ҙур ризаһыҙлығын тыуҙырған һәм был тәжрибә рәүешендә барлыҡҡа килтерелгән ҡаҙна өсөн мәшәҡәтһеҙ һәм сығымһыҙ яһалма колониялар юҡҡа сыҡҡан. Шуға күрә Себер хакимиәте мәжбүри тыуҙырылған колонияларҙың файҙаһыҙлығына ышанып, башҡорттарҙы төрлө биҫтәләргә, округтарға, ҡалаларға һаҡ аҫтында йәшәргә таратып бөткән. Мәҫәлән, 1887 йылда Олекминск округына 382, Амгинск биҫтәһенә 54 кеше ебәрелгән. 1895 йылға Александровск ауылында бер генә башҡорт та ҡалмаған, ә Мачесмарҙа ни бары 5 кешенән торған ике ғаилә йәшәгәне билдәле. Шулай итеп, батша хөкүмәтенең ҙур өмөт бағлаған алыҫ Себерҙәге башҡорт колонияларын тормош шарттары үҙе юҡҡа сығарған.

Ләкин шуны иҫтән сығарырға ярамай. Нисек кенә булмаһын, ниндәй генә ел-дауылдар үтмәһен, шул замандың зауҡы, минеңсә, эҙһеҙ ҡалмағандыр. Минең һорауға Яҡутстан архив хеҙмәткәрҙәре яуап итеп, хәҙерге көндә был республикала башҡорт ауылдарының һаҡланмауы тураһында хәбәр иттеләр. Ләкин 3 мең кешенең яҙмышы бер нисек тә эҙһеҙ ҡалыуы мөмкин түгел. Әгәр бөгөнгө көндә үрҙә күрһәтелгән райондарҙа уларҙың эҙен юллап ҡараһаҡ, минеңсә, бушҡа ғына көс түгеү булмаҫ ине. Кем белә, бәлки, шул заманда һөрөлгән башҡорттарҙың нәҫел-нәсәбендә халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенә ҡағылышлы (музыка, ауыҙ-тел ижады, милли кейем) беҙгә әлегә тиклем билдәле булмаған бына тигән ҡомартҡыларҙың һаҡланыуы ихтимал. Был тәңгәлдә иһә телселәр, этнографтар, фольклорсылар һәм башҡа белгестәр эҙләнеп ҡараһалар, бәлки, берәй асышҡа өлгәшерҙәр ине.

*P. S.*

Ошо мәҡәлә арабыҙҙан бик иртә киткән күренекле фольклорсы *Мөхтәр Сәғитовты* үтә ныҡ ҡыҙыҡһындырғайны. Ул 1977 йылда Яҡут-Саха иленә барып ҡайтыу мөмкинселеге тапты. Унан бик күп материалдар алып ҡайтты. Мине өйөнә саҡырып, Яҡутстанда йәшәгән башҡорттар менән осрашыуы тураһында һөйләп, магнитофон таҫмаһына яҙылған йыр-моңдарын тыңлаттырҙы. Мәҡәләмде дауам иткәндәй *Мөхтәр Сәғитовтың* Яҡутстанға сәйәхәте тураһында 1983 йылда «Ағиҙел» журналының 8—9-сы һандарында сыҡҡан юлъяҙмаларының бер өлөшөн уҡыусыларға тәҡдим итәм.

# ЯҠУТСТАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

*(Фольклорсы юлъяҙмалары)*

## ЭҘГӘ ТӨШӨҮ

Иртәгеһен мин бер аҙ ҡала менән танышып йөрөнөм, Бөйөк Себер йылғаһы Ленӓның һул яғына урынлашҡан Якутскиҙы йәш ҡала тип әйтеп булмай. Ул 1632 йылда нигеҙләнгән, хәҙерге көндә 150 меңдән ашыу халҡы бар. Ер аҫты мәңгелек туң булғанлыҡтан, күп ҡатлы ҙур йорттар тимер-бетон бағаналар өҫтөнә ҡоролған. Уны өй аҫтындағы туң иремәһен өсөн шулай эшләйҙәр икән.

Беренсе көндә үк уйламаҫтан шатлыҡлы хәлгә юлыҡтым. Төш ваҡытында үҙем туҡтаған ҡунаҡхана ресторанына ашарға инһәм, ҡаршыма урта буйлы, ҡара сәсле йәш егет килеп ултырҙы. Ул үҙенең тарихсы булыуын, әммә хәҙерге көндә «Алдан» совхозы эшселәре профсоюз комитеты рәйесе вазифаһын үтәүен, әле Якутскиға республика профсоюз активистары кәңәшмәһенә килгәнлеген әйтте.

— Яҡутстанда күптән йәшәгән башҡорттар бар ул. Мин үҙем Сунтар райкомында эшләүсе Ҡазарман тигән башҡортто күреп беләм. Тик уның фамилияһын ғына хәтерләмәйем. Беләһегеҙме, — тине ул, — мин һеҙҙе Сунтарҙан килгән *Давыдов Егор Петрович* тигән егет менән таныштырам. Ул да, минең кеүек, профсоюз эшмәкәре, кәңәшмәгә килгән.

*Давыдов* миңә Сунтар ҡасабаһынан 7 саҡрым алыҫлыҡта элек Мачесмар йәки Ново-Александровск тип аталған башҡорт ауылы булғанлығын, әммә 30-сы йылдар аҙағында уның халҡының бер өлөшө Сунтарға, бер өлөшө Яҡутстандың төрлө райондарына күсеп, таралып бөткәнлеген, хәҙерге көндә Сунтарҙа егермегә яҡын башҡорт ғаиләһе йәшәгәнлеген, ә *Павлов* әйткән *Ҡазармандың (Ҡаһарман Насиров)* райком аппаратында эшләгәнлеген һөйләне.

*Баишевтарға* шылтыраттым — яғымлы, матур тауышлы ҡыҙ трубканы күтәрҙе. Мин уға кем икәнлегемде һәм ниндәй ниәт менән шылтыратыуымды әйттем. Ул үҙенең *Людмила Сергеевна Баишева* булыуын һәм өлкә профсоюз ойошмаһында эшләүен әйтте.

— Беҙҙең нәҫелдә һөргәнгә килеп ҡалған башҡорттарға тоташа тип һөйләгәндәрен ишеткәнем бар. Мин үҙем уның тарихын яҡшылап белмәйем. Һеҙгә апайымдың телефон номерын

бирәм. Ул минән күберәк белә, Башҡортостан менән дә бәйләнеш тота, — тине һәм Өфөлә осрашҡан өс *Баишевтың* береһе — *Феврония Алексеевнаның* телефон номерын бирҙе.

Күп тә үтмәҫтән, мин *Феврония Алексеевнаның* бөхтә йыйыштырылған квартираһында ултыра инем инде. Беҙ Башҡортостан менән Яҡутстан бәйләнештәре, башҡорт-яҡут мәҙәни оҡшашлыҡтары хаҡында һөйләштек. Уның өҫтәлендәге *Таһир* ағай *Баишевтың* һүрәтенә ғәжәпләнеүемде күреп:

— Һеҙ *Таһир Ғәлләмовичты* беләинегеҙме? — тине.

— Мин уны күреп тә, башҡорт диалектологияһы буйынса яҙған хеҙмәттәре аша ла белә инем, — тинем.

— Минең өсөн атай урынына ҡалған хуш күңелле, мәрхәмәтле кеше ине. Үлер ваҡытын һиҙгәндер инде: 4 йыл буйына алышҡан хаттарҙан күсермәләрен, «Байыш» исеменең сығышы буйынса яҙған хеҙмәтен, яҡут башҡорттары хаҡындағы материалдарҙы иҫтәлек итеп ебәрҙе, — тине. Ул минең алдыма машинкала баҫылған, бик матур итеп төпләнгән ҡулъяҙма китапты һалды.

— Ә бына быныһы, — тине, бер фотографияны күрһәтеп, — атайымдың һүрәте. Ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған, яҡутҡа оҡшамаған, һары йөҙлө булды, 85 йәшенә етеп үлде. Олатайым яҡлап ул башҡорт булған. Мин үҙемдә башҡорт ҡаны барлығын бик һуңлап белдем. Тик атайым үҙе иҫән саҡта ентекләп һорашып ҡала алманым. Мин үҙем Мәскәү консерваторияһының хор бүлеген тамамланым, хәҙер Яҡут радиоһы хорының баш хормейстры булып эшләйем.

*Феврония Алексеевна* минең Сунтар районына башҡорттарҙы эҙләп барырға йыйыныуымды хуп күрҙе.

— Сунтар районы фольклорға бай. Бигерәк тә шул район яҡут йырҙарында пентатоника элементтары йыш осрай. Ғөмүмән, яҡут халыҡ йырҙарына диатоника хас. Мин Сунтар яҡуттары йырындағы пентатоника элементтарын башҡорт йыры йоғонтоһонда тыуған күренеш түгелме икән, тип уйлайым. Һеҙ Магино-Кангальск, Амга, Олекма райондарына ла барһағыҙ, яҡшы булыр ине. Унда башҡорттар күп булырға тейеш.

## ЯҠУТСТАН АРХИВТАРЫ НИ ҺӨЙЛӘЙ?

**14 июнь 1977 йыл.** Конференцияның ойоштороу комитетына барып теркәлдем, илебеҙҙең төрлө тарафтарынан килгән коллегаларым менән осраштым, СССР Фәндәр академияһы Себер бүлеге Яҡутстан филиалының Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты етәкселәрен күреп һөйләштем, уларҙы үҙемдең пландарым менән таныштырҙым.

Хужалар беҙҙе автобуска ултыртып, кала һәм уның музейҙарына алып барҙылар.

Төштән һуң мин каланың бер як ситендә урынлашкан Якут АССР-ы Үҙәк дәүләт архивына юл тоттом. Эште Үҙәк архив директоры урынбаҫары менән осрашыу, кәңәшләшеүҙән башларға тура килде. Ул иптәш, Башкортостандан килеүемде һәм максатымды белгәс, бер аҙ ғәжәпләнеп калды.

— Башкортостан тарихсылары нишләп беҙгә килмәйҙәр, башкорттар тураһындағы материалдар менән ниңә кыҙыкһынмайҙар икән, тип беҙ аптырай инек. Беҙҙең Якутстанда элек бик күп сәйәси тоткондар, декабристар, батша хөкүмәтенә каршы ихтилалдарҙа катнашыусылар, демократтар, народниктар, раскольниктар һөргөндә булған. Улар хакында бик күп архив материалдары һаклана. Ғалимдар, декабристар, һөргөндә булған *Н. Г. Чернышевский, В. Г. Короленко* һәм башка яҙыусылар, народниктар тормошон тикшереп, яҙып сыкты. Ә бына башкорттарҙы өйрәнергә әлегә кулдары етмәй, — тине. Ысынлап та, архив материалдары ифрат күп, башкорттарға карағандары төрлө «Дело»лар эсендә һибелеп яталар икән. Бер урынға тупланмағанлыктан, уларҙы тиҙ генә табып алыу мөмкин түгел. Ярты көн эсендә бер нисә делоны ғына карап өлгөрҙөм. Эске эштәр министерствоһының Якут өлкәһе Вилюй округы Хочинск рус булмаған халыктарҙың идараһына караған документтарҙа Хочинск олоҫо Александровск ауылы башкорттарының 1901—1904 йылдарҙы эсенә алған ауыл сходы приговорҙары, ғаризалары, билеттары, полиция идаралығы циркулярҙары һәм башка документтары табылды. (ЯАССР ҮДА, ф, 122, терк. I, һ. б. 1, 10-сы бит.) Шулай итеп, Ново-Александровск (Мачесмар) ауылында 1904 йылға тиклем башкорттарҙың йәшәгәнлеге беленде. Күрәһең, ул ауыл башкорттары тик Октябрь революцияһы алдынан ғына Якутстандың төрлө райондарына таралып бөткәндәрҙер. Бочанай (Сергелях) ауылы (колонияһы) хакында мәғлүмәттәр табып өлгөрә алманым. Ә бына Ново-Александровск (Мачесмар) ауылы башкорттары тураһында байтак кыҙыклы материалға юлыктым. Шуларҙың иң мөһимдәре: 1903 йылда Ново-Александровск ауылы башкорттарының ағас, урмандан таҙартылған, иген сәсеүгә һәм бесән сабыуға яраклы ерҙәрҙе йән башына бүлеү буйынса сход карары, 1914 йылғы Ново-Александровск ауылында йәшәүсе һәм ситтә эшләүсе башкорттарҙың исемлеге һәм башка сход карарҙары.

Мәҫәлән, 1903 йылғы ауыл сходы карарында былай тиелә: «Беҙ, түбәндә кул куйған Ново-Александровск ауылы башкорттары, ошо көндө ауыл сходында булып, иген сәсеү ерҙәрен бүлешеү мәсьәләһен үҙ-ара кәңәшләштек. Үҙ-ара кәңәшләшеп,

түбәндәге ҡарарға килдек: үҙ-ара һәр йәнгә (душҡа) икешәр дисәтинәнән ер бүлергә, шунан артығын ағаслыҡтан таҙартылған ерҙән бер кемгә лә һөрмәҫкә. Үҙ көсө һәм сығымдары менән ағастан таҙартып алынған ерҙәрҙе был иҫәпкә индермәҫкә. Ер бүлеүҙе быйылғы көҙ, баҫыу эштәре тамамланғас, үткәрергә. Әгәр ҙә берәйебеҙҙә йән иҫәбенән артыҡ кәртәләп алынған ере булһа, ул кеше артыҡ ерҙәге кәртәне һүтеп алырға тейеш». (ЯАССР ҮДА, ф, 122, терк. I, һ. б. 1, 50—51; 65—66-сы биттәр.)

1914 йылда Ново-Александровск ауылы халҡын, уның тормошон күҙ алдына килтереү өсөн архивта һаҡланған ике исемлектең береһен тулыһынса килтереү кәрәк булыр, тип уйлайым.

Сунтар йәмәғәтселеге Ново-Александровск ауылында йәшәгән һәм хужалыҡ менән шөғөлләнгән башҡорт крәҫтиәндәре исемлеге. (1914 йылдың 15 июнендә төҙөлгән.)

Башҡорт крәҫтиәндәре:

1. *Ғафар Насиров* — 4 йән.
2. *Ибраһим Насиров* — 2 йән.
3. *Ниғмәтулла Ишҡолов* — 4 йән.
4. *Сөләймән Нуриманов* — 1 йән.
5. *Иннокентий Матв.* — 1 йән.
6. *Имаметдин Ғайсин* — 3 йән.
7. *Шәмсетдин Зәйнуллин* — 3 йән.
8. *Хәтмулла Фәйрушин* — 5 йән.
9. *Ниғмәт Фәйрушин* — 5 йән.
10. (асыҡ яҙылмаған) — *М. С.* — 1 йән. Бөтәһе 21 ир йәне.

Башҡорттарға файҙаланыуға уңайлы һәм уңайһыҙ 408 дисәтинә ер беркетелгән. Шул иҫәптән һәр йән башына 2 дисәтинә һөрөнтө ер бирелгән. Ауыл малын көтөү өсөн 90 дисәтинә, шулай уҡ ауылда йәшәүсе йән башына тигеҙ бүленә торған 110 дисәтинә сабынлыҡ ере беркетелгән. (ЯАССР ҮДА, ф, 132, терк. I, һ. б. 1, 10-сы бит.) Ошо уҡ документтағы икенсе исемлек «Сунтар йәмәғәтселеге Ново-Александровск ауылы паспорт буйынса ситкә китеп эшләүсе башҡорт крәҫтиәндәре исемлеге» тип атала. Был исемлек тә, тәүгеһе кеүек үк, 1914 йылдың 15 июнендә төҙөлгән. Исемлеккә бөтәһе 33 йән ир теркәлгән. Шулай итеп, 1914 йылда Сунтар эргәһендәге Ново-Александровск ауылы булғанлығын архив материалдары дөрөҫләне.

Үкенескә ҡаршы, архивта бик аҙ ултырыуым сәбәпле, башҡорт һөргөнсөләренең дөйөм иҫәбе, Башҡортостандың ҡайһы төбәктәренән килгәнлектәрен, аҙаҡ уларҙың Яҡутстандың ҡайһы тарафтарына оҙатылыуҙары тураһындағы материалдар менән танышып өлгөрә алманым. Шуныһына ныҡлы ышан-

дым: Яҡут АССР-ының Үҙәк дәүләт архивында башҡорт халҡының тарихын, ижтимағи үҫешен, мәҙәниәтен өйрәнеүҙә яҡты бит асырҙай материалдар бар. Беҙ халҡыбыҙҙың азатлығы, бәхетле тормошо, ғәҙеллек яулап йән аямай көрәшкән һәм Тыуған иленән мәңгелеккә һөрөлгән, ауыр ғазаптарға дусар ителгән ата-бабаларыбыҙҙың яҙмышын өйрәнеүгә вайымһыҙ булырға тейеш түгелбеҙ. Мәҙәни һәм ижтимағи тормошобоҙҙа эҙ ҡалдырған *Буранбай, Вәсилев, Ғүмәров, Ихсан сәсән* һәм башҡаларҙың һөргөндә үткәргән тормошон беҙ белергә тейешлебеҙ.

## ТУЙМААДА БАЙРАМЫ

Фольклорсыларҙың Себер һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының эпик ижадын өйрәнеүгә арналған Бөтә Союз конференцияһы өс көн буйына барҙы. Был конференция үҙе бер ҙур ваҡиға-байрам төҫөн алды. Хужалар беҙҙе яҡут халҡының мәҙәниәте, уның тарихы, бөгөнгө тормошо менән таныштырыу өсөн ихлас тырышлыҡ күрһәтте. Беренсе көн кис яҡут халҡының героик эпосы нигеҙендә ижад ителгән «Нөргөн батыр» операһын ҡарап һоҡландыҡ. Икенсе көндө республиканың төрлө районданынан саҡырып килтерелгән яҡут эпосы — олонхоны башҡарыусы олонхосуттар, халыҡ йырсылары, ҡумыҙсылар ансамбле концертын ҡараныҡ.

16 июнь көнө партияның Өлкә Комитеты секретары *Юрий Николаевич Прокопьев* иптәштә булдым. Мин уға үҙемдең башҡорттарҙы эҙләп райондарға сығырға йыйыныуым хаҡында әйттем һәм был сәйәхәтемә булышлыҡ итеүен һораным. *Юрий Николаевич* ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлағандан һуң, үҙе үк башҡорттар йәшәгән райондарҙы һанарға кереште.

— Мегино-Кангаласкта Яҡутстандың тәүге тракторсыларының береһе *Ислам Шәйхуллович Мансуров* тигән башҡорт йәшәй. Ул — РСФСР-ҙың атҡаҙанған механизаторы. Бәлки, шунан башларһығыҙ, — тине ул.

Мин шулай ҙа эште Сунтарҙан башларға уйланым. *Юрий Николаевич* минең эшкә ярҙам итеү маҡсатында, бер инструкторын куратор итеп тәғәйенләне. Аҙаҡ мин, Өфөгә ҡайтып киткәнгә тиклем, ошо иптәштең ярҙамын ҡайҙа барһам да һәр саҡ тойоп йөрөнөм.

Конференция тамамланды. 18 июнь көнө хужалар, бөтә ҡунаҡтарҙы «Ракета» теплоходына ултыртып, ҡаланан 34 саҡрым алыҫлыҡтағы Лена йылғаһының «Туймаада» тигән ҙур туғайына хушлашыу мәжлесенә алып киттеләр. Яҡут йолаһы буйынса, ҡунаҡтар байрам хөрмәтенә серге (ат бағанаһы) ул-

тырталар. Ҡунаҡтар ултыра торған ергә дүрт яҡлап япраҡлы ҡайын ботаҡтары сәнсеп сыҡтылар. Серге янында байрам башланды. Ошо мәжлес табынында мәрхүм профессор *Жәлил Ғиниәт* улы *Кейекбаевтың* элекке аспиранты *Михаил Черосов* та бар ине. Ул, минең янға килеп:

— Әйҙә әле, мин һине бер башҡорт ҡыҙы менән таныштырам, — тине.

— Шаяртаһығыҙмы әллә? — тинем мин уға, ышанып етмәй.

— Шаяртмайым. Ана ул үҙе үк бында табан килә. Мин уға һинең турала әйттем инде, — тине ул.

Беҙ шатланып таныштыҡ.

Баҡтиһәң, ул — Тел, әҙәбиәт һәм тарих институтында машинистка булып эшләүсе, Сунтарҙа тыуып-үҫкән *Полина Сергеевна* исемле башҡорт ҡыҙы икән.

— Сунтарҙа минең әсәйем йәшәй. *Гөлсирә* исемле булыр. Ул Мачесмар ауылы кешеләренең барыһын да белә, шунда тыуған, йырға, бейеүгә лә оҫта. Һеҙ уны күреп сығырға тырышығыҙ, — тине һәм адресын бирҙе.

— Һеҙ башҡортса беләһегеҙме? — тип һораным.

— Башҡортса мин яҡшы аңлайым, әммә һөйләшеүе ҡыйынраҡ. Күберәк яҡутса, русса һөйләшәм. Мин әсәйем яғынан — башҡорт, атайым яғынан яҡут булам. Ике улым бар. Өйҙә яҡутса һөйләшәбеҙ, — тип яуапланы ул. Сунтарҙа башҡорттар барлығына шик ҡалманы.

— Туғанымды күргәндәй булдым. Райондарҙан йөрөп ҡайтҡас, мине күреп китерһегеҙ әле, — тине ул аҙаҡ. Иҫтәлек ҡалһын тип, мин уны фотоға төшөрөп алдым.

Туймаада мәжлесендә мине Сунтарҙан саҡырып килтерелгән халыҡ йырсылары, шулай уҡ яҡут фольклорын, йолаларын һәүәҫкәр йыйыусы *Георгий Евгеньевич Федоров* исемле ағай менән таныштырҙылар. *Георгий* ағай яҡут башҡорттары менән ҡыҙыҡһынған, күпте белгән кеше булып сыҡты. Беҙ иртәгә үк Сунтарға самолет менән бергә китмәк булып һөйләштек. Ул Сунтар башҡорттарын барыһын да үҙе күреп белә икән. Элек башҡорт колониялары йәшәгән өс ауылдың да нигеҙ урындарын күреп белеүен, ул ауылдарҙың зыяраттары һаҡланғанлығын әйтте.

Мин яңы танышым осрауына шатланып бөтә алманым.

Ялан мәжлесенән һуң беҙ ҡабырғаһына «Туймаада» тип яҙылған автобусҡа ултырып ҡайттыҡ. Миңә туғайҙың да, автобустың да Туймаада тип аталыуы Башҡортостандағы (Туймаза — Туймазы) атамаһын хәтерләтте. Туймазы башҡорттарының Туймаҙы, Туймаҙа тип әйтеүҙәрен иҫкә алһаҡ, яҡут

Туймаадаһы менән айырма бөтөнләй юғалып ҡала. Мин эргәмдә ултырып килгән *Георгий* ағайға:

— Туймаада яҡутса нимәне аңлата? — тип һораным.

— Асыҡ ҡына әйтә алмайым. «Туймаада» тигән бер яҡут риүәйәте бар. Ул риүәйәт буйынса, туй үткәргән урын булырға тейеш. Ул риүәйәт башҡорттарға бәйле, — тине ул. Әлбиттә, мин уның һөйләп биреүен үтендем. Русса һөйләнгән был риүәйәтте тулыһынса килтереп китеү урынлы булыр.

«Бик элгәре заманда, — тип башлап китте *Федоров* ағай, — Оноғой исемле яҡут байы йәйләүенә Уралдан Элләй исемле, батыр кәүҙәле йәш башҡорт егете килеп сыҡҡан. Ул Оноғойға хамначыт, йәғни ялсы, булып ялланған. Элләйҙең йылҡы, һыйыр көтөүҙәрен яҡшы һаҡлап ҡарап йөрөтөүен, хужалыҡ эштәрен белеп башҡарыуын Оноғой бик оҡшатҡан, ти. Элләй егерме йылға яҡын Оноғойға хеҙмәт иткән. Оноғойҙың ике ҡыҙы булған. Олo ҡыҙы — бик һылыу, ә кесеһе үҙе йыуан, үҙе йәмһеҙ булған, ти. Кесе ҡыҙы төндә йоҡлағанда яҡкан түшәген дә еүешләр булған икән. Оноғой Элләйгә ике ҡыҙының береһен һайлап алырға ҡушҡан. Элләй уның һылыу ҡыҙын алырға теләүен белдергән. Оноғой, быны ишетеп, бик ныҡ асыуланған һәм Элләйгә йәмһеҙ ҡыҙын кейәүгә бирергә ҡарар иткән.

Туй үткәргәндән һуң, Оноғой Элләй менән ҡыҙына бер бейә, быҙаулы һыйыр бирә лә үҙ йәйләүенән икеһен дә ҡыуып ебәрә.

Элләй ҡатыны, малы менән Лена йылғаһы түбәненә ҡарай юл тота. Улар, бара торғас, бер ҙур туғайға килеп туҡтап, ҡунып китмәк булалар. Элләй, малын себен-серекәй борсомаһын тип, туғай уртаһына төтөнлөк һала.

Бер аҙҙан төтөнлөккә йылҡы, һыйыр малдары йыйыла башлай. Элләй шунда ғына Оноғой байҙың йылҡы, һыйырының бер өлөшө улар артынан эйәреп килгәнлеген һиҙеп ҡала. Элләйҙең ҡатыны килеп ҡушылған һыйырҙарҙы һауа, бейә һөтөнән ҡымыҙ яһай.

Ҙур, иркен туғай Элләйгә оҡшай. Һәм улар, ошонда ҡалып, йәшәргә булалар.

Бер йылдан һуң уларҙың бер улы тыуа, уға Элгәй тип исем ҡушалар. Һуңғараҡ тағы бер улдары тыуа.

Элләй башҡорт улдары ир ҡорона етеү менән, уларҙы өйләндереү яғын ҡарай башлай. Байығып өлгөргән Элләй, ике улын да бер юлы өйләндереп, ҙур ысыах, туй яһай.

Эллэй туйҙан һуң ғаиләһе, бөтә малы менән Вилюй буйына күсеп китә. Ә кесе ул ғаиләһе, малы менән Амга буйына барып нигеҙ ҡора.

Эллэй менән ҡатыны бик оҙаҡ Лена буйындағы иркен туғайҙа бәхетле ғүмер һөрәләр. Эллэй бер юлы ике улына туй яһаған туғай яланына Туймаада тип исем бирәләр. Туймаада Лenaның һул ярына урынлашҡан».

Шулай итеп, *Георгий Евгеньевич* яҡуттарҙың ырыу башы һаналған Эллэй менән Оноғой хаҡындағы киң таралған тарихи риүәйәтенең бер версияһын һөйләп бирҙе. Күренекле яҡут ғалимы *Г. В. Ксенофонтов* 20—30-сы йылдарҙа Эллэй тураһындағы риүәйәттәрҙе өйрәнгән һәм туплаған. Уның материалдары тик 1977 йылда ғына Мәскәүҙә «Эллейада» исеме менән донъя күрҙе. *Г. В. Ксенофонтов* йыйған риүәйәттәрҙә ысынлап та Эллэй (Эллэй) бик алыҫтан,ситтән килгән батыр егет итеп һүрәтләнә. Ҡайһы бер варианттарҙа ул «татар», «татар ханы улы» тип йөрөтөлә. (Революцияға тиклем ҡайһы бер халыҡтар башҡорттарҙы шулай атар булған.)

## БЕҘ УРАЛДАН КИЛГӘНБЕҘ

**19 июнь.** Иртә менән «АН-24» самолетына ултырып, Нюрбак аша Сунтарға юлға сыҡтыҡ. *Георгий* ағай, иллюминаторҙан ҡарап, ниндәй йылға, ҡайһы район ере аша осоуыбыҙҙы аңғартып бара. Яҡутстан — ғәжәп ҙур территориялы ил: 3 млн квадрат километрҙан ашыу. Бында хатта бер ауылдан икенсе ауылға самолет менән йөрөү ғәҙәти күренешкә әйләнгән.

Байтаҡ осҡандан һуң, Нюрбаға килеп туҡтаныҡ. *Георгий* ағай миңә ҡарап:

— Бына ошо Нюрба поселогынан 10 саҡрым алыҫлыҡта ғына башҡорттарҙың төп колонияһы — Александровка ауылы булған. Хәҙер ул юҡ. Башҡорттар алтын приискыларына, райондарға, промыслаларға таралып бөткәндәр. Нюрбаның үҙендә йәшәүсе башҡорттар ҙа бар. Тик мин уларҙы яҡшылап белеп бөтмәйем. Мин шулай ҙа һеҙгә тәүләп Сунтарға барырға кәңәш итәм,— тине.

Сунтарҙа беҙҙе райком машинаһы көтөп тора ине. *Георгий* ағай минең ҡунаҡханала туҡтауыма ҡырҡа ҡаршы килде.

— *Мөхтәр* энем, һеҙ яҡут ауылы өйөндә булғанығыҙ бармы? — тине ул.

— Юҡ.

— Ул ваҡытта бәхәсләшмә, яҡут өйөн күрерһең. Райком секретары *Герасимов* минең энем ул,— тип ҡырт киҫте. Оло

кешенең һүҙенә ҡаршы килмәнем һәм шул тәҡдимгә риза булыуыма аҙаҡ бик ҡәнәғәт булдым.

*Георгий* ағай һөнәре буйынса финанс хеҙмәткәре булыуына ҡарамаҫтан, ғүмер буйына үҙ халҡының тарихы, мәҙәниәте, менән ҡыҙыҡһынған, археология экспедицияларында ҡатнашҡан. Өйөндә бик ҙур китапханаһы бар.

Сунтар — ошо уҡ исемде йөрөткән район үҙәге. Уның 7 мең халҡы бар. Ошонда уҡ Мачесмарҙан күсеп ултырған 20-ләп башҡорт ғаиләһе йәшәй икән.

*Георгий* ағай, ҡайтыу менән, өйөндә телефоны булған башҡорттарға шылтыратырға тотондо.

Бер сәғәт тә үтмәне, *Сара* тигән апай йүгерә-атлап килеп тә инде. Беҙ, уның менән күрешеп, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул 1921 йылда Ново-Александровск ауылында *Ғәлиулла Нариманов* тигән мулла ғаиләһендә тыуған, яҡут мәктәбендә уҡыған, күп йылдар медсестра булып эшләй икән. Әсәһе Олекмала һөргөнсө ғаиләһендә тыуған булған.

— Беҙҙең олатай, өләсәйҙәребеҙ Уралдан килгән башҡорттар булған. Уларҙы ни өсөндөр күпләп-күпләп ығаулап, этап менән ошо яҡҡа мәңгелеккә һөргөнгә ҡыуып килтергәндәр. Улар бер нисә ай буйына йәйәүләп бик интегеп килгәндәр. Бик күп кешенең юлда үлеп ҡалыуы тураһында һөйләгәндәре иҫемдә ҡалған. Башҡортостанда беҙҙең нәҫелдәр ҙә, бәлки, барҙыр. Тик беҙ уларҙы белмәйбеҙ.

Беҙҙең Мачесмар ауылы 1938 йылда ғына таралып бөттө. Ауылыбыҙ бик матур ине, колхоз төҙөп йәшәнек, унда хәҙер зыяратыбыҙ ғына ҡалды. Зыярат әле булһа ла бар. Үлһәк, шунда барабыҙ инде. Мәйетте шунда илтеп күмәбеҙ, үҙебеҙсә тәрбиәләп ҡуябыҙ,— тине ул.

*Сара Кривошапкина-Нариманова* апай үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә ҡатнаша икән. Башҡорт, яҡут, рус телдәрендә йырҙарҙы оҫта башҡарыуы менән уның был яҡтарҙа даны таралған. Мин унан бик күп башҡорт, шулай уҡ яҡут, рус халыҡ йырҙары өлгөләрен магнитофонға яҙып алдым.

Сунтарға килеүҙең икенсе көнөн райкомдың беренсе секретары менән әңгәмәнән башланым. Ул район, уның халҡы, иҡтисады, мәҙәниәте менән таныштырҙы. Шунда уҡ *Ҡаһарман Насиров* ағай менән осраштыҡ.

— Һеҙҙең килгәнегеҙҙе ишеттек, бөгөн кис һеҙҙең менән осрашырға уйлайбыҙ. Минең бер туған *Әһлиулла* ағайымдар өйөнә саҡырабыҙ,— тине.

*Әһлиулла* менән *Ҡаһарман* ағай *Насировтар* Мачесмарҙа тыуып-үҫкәндәр, икеһе бер юлы Ватан һуғышына киткәндәр, күкрәктәре тулы боевой орден, миҙалдар таҡып, Сунтарға ҡайтҡандар. *Әһлиулла* ағай Мәскәүҙәге еңеү парадында ҡат-

нашҡан, оҙаҡ йылдар кинофикацияла шофер булып эшләй, Сунтар районының почетлы гражданы һанала.

*Ҡаһарман* ағай Сунтар урта мәктәбе янында бик һәйбәт музей булыуы һәм унда Мачесмар ауылы халҡы, уның данлыҡлы кешеләре хаҡында материалдар барлығын әйтте. Унда беҙҙе музейҙың директоры, Ватан һуғышы ветераны *Николай Егорович Сергеев* ҡаршы алды. Батырлыҡ һәм хеҙмәт даны стендтарында Мачесмар ауылы башҡорттарына байтаҡ урын бирелгән. Революция һәм граждандар һуғышы ветераны *Ниғмәтулла Ишҡоловтың* батырлығын, эшмәкәрлеген һөйләүсе документтар музейҙың ғорурлығы һанала. Ауылдаштарының һөйләүҙәренә ҡарағанда, *Ниғмәтулла Ишҡолов* Өфөгә ҡайтып, 50-се йылдарҙа вафат булған. *Сергеев* иптәш Мачесмар һәм Сунтар ауылдары башҡорттарының бер нисә рәсемен бүләк итте. Батырлыҡ даны стендында *Әһлиулла* һәм *Ҡаһарман Насировтарҙың* да һүрәттәре ҡуйылғайны.

Кискә табан беҙ *Әһлиулла* ағайҙың өйөнә килдек. Өйҙә байтаҡ оло йәштәге ағайҙар, йәштәр ҙә бар ине. Танышыуҙар башланды.

Башҡортостан, минең нисек килеп сығыуым хаҡында һораштылар. Аш-һыу әҙерләнгән, эсемлектәр ҡуйылған.

— Әйҙәгеҙ, ашҡа рәхим итегеҙ. Ҡымыҙ килтерә алманыҡ. Ҡымыҙҙы ысыах байрамына алып китеп бөткәндәр. Һеҙҙе тик магазиндың «йылтыр ҡымыҙы» менән ҡунаҡ итергә тура килә инде,— тип шаяртты *Әһлиулла* ағай. Ул бер аҙҙан:

Ағиҙелкәйҙәрҙе, ай, кискәндә,
Бер йырланым ишкәк ишкәндә.
Бер йырланым, дуҫтар, бер иланым,
Тыуған илем иҫемә төшкәндә,—

тип оҙон көйгә йырлап ебәрҙе. Уны *Ҡаһарман* ағай алмаштырҙы. Йыр артынан йыр китте. Мин тиҙерәк магнитофонды ҡороп ҡуйыу яғын ҡараным.

— Уралдан килгән туғаным, бер йырла әле? — тип быуынға төшә башланылар. Йүнле тауышым булмаһа ла, ҡаршы килә алманым, «Шафиҡ»ты йырланым. Ул йыр менән дә ҡотолоп булманы, тағы берҙе йырлаттылар.

*Гөлсирә Остабунаева* апай:

— Эй, рәхмәт, энем. Һин беҙҙең йәш саҡта атай-инәйҙәр йырлаған йырҙарҙы иҫкә төшөрҙөң бит әле. Элек үҙе моңло, үҙе оҙон йырҙар йырлай инек. Хәҙер онотоп бөттөк, шаҡышоҡо таҡмаҡ ҡына ҡалып бара,— тине.

— Ҡайһы берҙә радио аша башҡортса йыр ишетәбеҙ, тик һүҙҙәрен отоп ҡала алмайбыҙ. Телде лә онотоп бөтөп барабыҙ инде. Хәҙер беҙ яҡут, урыҫ, башҡорт бергә аралашып бөттөк. Ҡайһы өйгә инһәң дә интернациональ ғаилә. Өйҙә күберәк

яҡутса йә русса һөйләшәбеҙ. Балаларға, килен, кейәүҙәргә башҡортса өндәшһәң, аңламайҙар,— тип дауам итте *Ҡаһарман* ағай.

Осрашыу бик күңелле үтте. Йөҙ йылдан элек Яҡутстан еренә килгән башҡорттарҙың нәҫелдәренән «Уйыл», «Йәмле Ағиҙел буйҙары», «Дим буйы», «Өфө» йырҙарын, шаян таҡмаҡтарын ишетеү миндә ныҡ тәьҫир ҡалдырҙы. Мин, әлбиттә, Сунтар башҡорттарының ата-бабалары Башҡортостандың ҡайһы ерҙәренән, ауылдарынан килеүҙәрен белеү-белмәүҙәрен һорашыуыма:

— Ата-бабалар яҙып ҡалдырмаған, белеп бөтмәйбеҙ. Шуныһы асыҡ: беҙ Уралдан килгәнбеҙ,— тип яуап бирҙеләр.

**21 июнь.** Иртәнге сәй эсеп бөтөүгә, *Гөлсирә Остабунаева* апай килеп, мине үҙҙәренә саҡырып китте. Улы, килене, торондары (ейәндәре) менән бергә тора икән. *Сара* апай, тағы бер нисә ҡатын да бар ине. Өҫтәлгә итле бәлеш, бауырһаҡ, ҡаҡланған балыҡ ҡуйылғайны. Сәй эстек. *Гөлсирә* һәм башҡа апайҙарҙан бер нисә йыр яҙып алдым. Ғөрөф-ғәҙәт, аш-һыу, ырым-йолалар, тарих, хужалыҡ, кәсеп эштәре тураһында һораштым.

— Мачесмарҙа йәшәгәндә бейә һауып, ҡымыҙ яһай торғайныҡ. Ҡышҡа етерлек итеп ҡорот эҙерләр, туй, байрам ашы итеп бауырһаҡ бешерер инек. Арпа, бойҙай талҡаны, эремсек яһаныҡ, көлгә һалып сөсө икмәк, ләпәшке бешерҙек,— тип һөйләнеләр ҡатындар. Минең килеүҙе Сунтар башҡорттары ҙур ваҡиға кеүек ҡабул иттеләр. Һәр береһе өйөн күрһәтергә, Башҡортостан хаҡында һорашырға, белеп ҡалырға тырышты.

## МАЧЕСМАРҒА СӘФӘР

**22 июнь.** Иртүк *Хәмит Фәйрушин* менән *Ҡаһарман* ағай мине Мачесмарға алып китергә килделәр. Беҙ унда Вилюй йылғаһынан моторлы кәмә менән юлға сыҡтыҡ. *Хәмит Фәйрушин* Сунтарҙа уҡытыусы булып эшләй икән. Мачесмарҙа йәшәгән саҡта *Хәмиттең* атаһы менән *Ҡаһарман* ағайҙар ут күрше булғандар. *Хәмит* Мачесмарҙан Сунтарға күскәндә бер йәшлек кенә булған.

Күп тә үтмәне, Джили йылғаһының Вилюйға ҡойған еренән саҡ ҡына үрҙәрәк туҡтаныҡ һәм ҙур ғына туғай яланына күтәрелдек.

— Бына ошо яланды беҙҙең ата-бабаларыбыҙ урмандан таҙартып, баҫыуға, сабынлыҡҡа әйләндергәндәр, иген сәскәндәр, картуф, йәшелсә үҫтергәндәр, мал көткәндәр,— тип һүҙ башланы *Ҡаһарман ағай.*— Ә бында ҙур бер урамлы ауыл

булды. Ана нигеҙ урындары әле лә беленеп ята. Беҙҙең өй урыны бына бында.— *Хәмит Фәйрушин* менән *Ҡаһарман* ағай үҙҙәренең өй урындарын ҡаранылар, бер аҙ тын ҡалып уйланып торҙолар. (Мин уларҙы шул саҡ фотоға төшөрҙөм.) Ялан ситендә урынлашҡан ауыл зыяратын күрһәттеләр. Зыяратта иҫке ҡәберлектәр ҙә, яңылары ла бар.

— Ҡәберҙе ләхетләп, тәрән итеп ҡаҙабыҙ: ҡатын-ҡыҙға — 2, ир-атҡа — 1,8 метр. Ярты метрҙан мәңгелек туң ер башлана. Күмгәс, тыңлаусы ҡалдырабыҙ. Күптән килгән йола. Ул ергә ҡолағын ҡуйып, йәнәһе, үлгән кешенең нисек яуап биргәнен тыңлап, туғандарына ҡайтып әйтә. Тыңлаусы, бер үҙе зыяратта төңгөлөккә ҡалырға ҡурҡып, ғәҙәттә, күмеүселәрҙең артынса уҡ: «яуап бирҙе, ҡабул иттеләр» тип ҡайтып килә,— тине *Ҡаһарман* ағай, көлөп. *Ҡаһарман* ағайҙың әйтеүенә ҡарағанда, зыяратҡа 150 йыл самаһы.

*Хәмит* менән *Ҡаһарман* ағай ауыл халҡының Мачес күле янындағы сабынлыҡтарын күрһәттеләр. Күлдең оҙонлоғо — 1 км, арҡырыһы 200 метр самаһы. Унда ҡош-ҡорт ҡайнап йөрөй. Мин серәкәйҙең күплегенә хайран ҡалдым. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, әлек ошо ауыл кешеләре йәй көнө һәр береһе өй ишеге алдында төтөнлөк һалған. Шулай итеп кенә серәкәйҙән ҡотолор булғандар. Һөргөнсөләр ҡулы менән тайганан яуланған яландың матурлығына һоҡландым.

## ОЛЕКМАЛА

**24 июнь.** Сунтар менән хушлашып, самолет менән Ленск аша Олекма ҡалаһына остом. Аэропортта райком секретары *Семенов* иптәш үҙе ҡаршы алды. Минең ниндәй маҡсат менән килеүемде уға хәбәр иткән булғандар икән.

Олекмала башҡорттарҙың 80-ләп ғаилә йәшәгәнен асыҡланым. Шуның ҡырҡлабының өйөндә булдым һәм Башҡортостандан килгән һөргөнсө нәҫелдәре икәнлеген асыҡланым. Миңә бигерәк тә 70 йәшлек *Рәхимов Хәйрулла* ағай менән осрашыу күп нәмә бирҙе. Ул — йырға, һүҙгә, скрипкаға оҫта кеше. Уның олатаһы *Ғәлиулла* Стәрлетамаҡ өйәҙе Усман ауылынан сыҡҡан һөргөнсө булған.

*Хәйрулла ағайҙан* «Йәмле Ағиҙел буйы», «Өфө», «Тәфтиләү», «Башмағым», «Наган», «Минзәлә» йырҙарын йырлатып та, скрипкала уйнатып та яҙып алдым.

Мин Олекмала байтаҡ ҡына оло йәштәге ағайҙар, апайҙар менән осраштым, сығыштарын һораштым. Күбеһе үҙҙәренең ата-бабалары Ағиҙел буйынан, Уралдан килеүен әйтәләр.

Мәктәп уҡытыусыһы *Зәки Шәфиев* үҙенең Минзәлә башҡорто нәҫеленән булыуын әйтте.

Олекмала Башҡортостандың Ҡарғалы ауылы түмән татарҙары нәҫеленән сыҡҡан *Еникеев, Саҡаев* фамилиялы ғаиләләр ҙә осраны. Яҡутстандағы башҡорттар ҙа, әйтеп китеүебеҙсә, татар аталып йөрөйҙәр икән.

— Һеҙ үҙегеҙ башҡортмо, татармы икәнлегегеҙҙе нисек беләһегеҙ? — тип һорауыма:

— Ата-инәһе мәңгегә һөргөнгә килгәндәрҙең нәҫеле ғәҙәттә, башҡорт була. Ә 1911 йылда күсеп килеүселәр (переселенецтар) тоҡомдары татар була,— тип яуап бирҙеләр.

Олекмала 20—30-сы йылдарҙа башҡорт-татар үҙешмәкәр драма театры эшләгән. Ул театрҙа *М. Буранғоловтың* «Ашҡаҙар», *Х. Ибраһимовтың* «Башмағым», *С. Мифтаховтың* «Зимагорҙар», шулай уҡ «Таһир — Зөһрә», «Ғәлиәбаныу» һ. б. драмалар ҡуйылған. Үҙҙәре араһынан пьеса яҙыусылар ҙа булған. Мәҫәлән, миңә авторы билдәһеҙ «Минең ҡатын» исемле бер шаршаулыҡ комедия ҡулъяҙмаһын биреп ҡайтарҙылар. Олеканан тыш, мин Нюрктәй ауылында йәшәүсе башҡорттар менән дә осраштым. Кемгә керһәм дә, туғандары кеүек, яҡшы ҡаршы алдылар, Башҡортостан менән ҡыҙыҡһындылар.

Ҡайтышлай Якутск ҡалаһында ике көн туҡтап киттем, ул ҡалала йәшәүсе башҡорттар араһында булдым, бик ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле материалдар тупланым. Яҡутстан башҡорттары яҡуттар, рустар һәм башҡа халыҡтар менән бер ғаилә булып, дуҫ йәшәйҙәр, бергәләшеп Тыуған илдең материаль һәм мәҙәни байлығын үҫтерәләр. Яҡутстан — уларҙың тыуған иле. Әммә ата-бабалары төйәге — Уралды ла онотмағандар, башҡорт халҡының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, кейемдәрен, аш-һыуын, йыр-көйҙәрен, бейеүҙәрен һаҡлай алғандар.

Минеңсә, яҡут башҡорттарын яҡшылап өйрәнеү — башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе буласаҡ.



*«Тыуған илдәй ил булмаҫ»*

*Халыҡ мәҡәле*

## 1. АУЫЛДАР ҠАСАН БАРЛЫҠҠА КИЛГӘН?

Элегерәк халҡыбыҙҙың күпселеге ауылдарҙа йәшәгән. Ләкин уларҙың тарихын беҙ элегә белеп еткермәйбеҙ.

Һәр ауылдың үткән ауыр тормошо, данлы кешеләре тураһында материалдар йыйыуҙы урындарҙа йәһәтерәк ойоштороу кәрәк. Сөнки рәсми документтарҙа ауылдың бөтә тормошо сағылмаған. Был эштә ауыл аҡһаҡалдары ҙур файҙа килтерәсәк.

Минеңсә, һәр ауылдың тарихын яҙғанда ҡайһы бер һорауҙарға иғтибар итеү кәрәктер: мәҫәлән, *ауылдың барлыҡҡа килеүе, урыны* (өйәҙ, олоҫ, аймаҡ, ниндәй ара-зат), *халҡы*, уның *революцияға тиклемге кәсебе, социаль иҙеүгә ҡаршы көрәше, мәҙәниәте, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы* һ. б., *Совет дәүерендә Октябрь революцияһының йоғонтоһо, граждандар һуғышы, хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу, ауыл хужалығын коллективлаштырыу, индустриялаштырыу йылдары, мәҙәни революцияға һәм Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә ауылдың индергән өлөшө, һуңғы осорҙа ауыл.* Ошолар нигеҙендә урындарҙа яҙылған ауылдар тарихын аҙаҡ дөйөмләштереп, айырым бер китап итеп сығарып та булыр ине.

Ә хәҙергә ҡайһы бер ауылдарға нигеҙ һалыныу ваҡытына һәм уларҙың исемдәренә иғтибар итәйек.

Башҡорт ауылдарының һәр береһенең ҡасан барлыҡҡа килеү ваҡытын билдәләүҙә документтарҙың наҡыҫлығы ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Күсмә тормош дәүерендә ауылдар булмаған. Ҡыш көндәре ваҡытлыса туҡтау һәм йәшәү урындары (ҡышлау) ыҙма тип аталған. Ярым күсмә тормош хәленә күскәс, ыҙма урынында ауылдар барлыҡҡа килгән. Ҡағиҙә булараҡ, улар шишмә, йылға һәм күл буйҙарында нигеҙләнгән. Тарихсы *А. Чулошниковтың* яҙыуынса, ауылдарҙың нигеҙләнеүе XVII быуатҡа тура килә. Ауылдар бик бәләкәй булып, улар ни бары 30 йорттан торғанлығын әйтә. Ләкин XVIII быуаттың аҙағында ла ауылдар бик бәләкәй булған.

1795 йылғы V ревизия материалдары буйынса, 16 өйәҙҙең (Бәләбәй, Бөгөлмә, Бөрө, Боғорослан, Быҙаулыҡ, Үрге Яйыҡ (Верхнеуральск), Екатеринбург, Красноуфимск, Минзәлә, Ырымбур, Өфө, Пермь, Стәрлетамаҡ, Троицк, Уса, Шадринск) 1548 ауылында 30 574 йортта 184 560 башҡорт йәшәгән. Тимәк, һәр ауылға 20-гә яҡын йорт тура килеп, унда сама менән 180 кеше йәшәгән. Һәр йортта уртаса 6 кеше ғүмер иткән. 1826 йылда һәр ауылға уртаса — 25,9, 1853 йылда 47,6 йорт тура килгән.

Мишәр, типтәр һәм татар ауылдарының нигеҙләнеүен, йә булмаһа, уларҙың килеп ултырыу ваҡытын асыҡ билдәләп була. Башҡорт аҫабалары менән мишәр һәм типтәрҙәр килешеү төҙөп, уларҙың ере менән файҙаланған. Был килешеүҙә дата ла күрһәтелгән, шуға ҡарап ауылға нигеҙ һалыу йә унда килеп ултырыу йылын бик дөрөҫ итеп билдәләргә мөмкин. 1834 йылда мишәрҙәр 331, ә типтәрҙәр 1 075 ауылда йәшәгән. XVII быуатта — 8, XVIII быуаттың беренсе яртыһында — 58, икенсе яртыһында — 69 мишәр ауылы, ҡалғандары XIX быуатта нигеҙләнгән. Ләкин күбеһенең барлыҡҡа килеү ваҡыты билдәһеҙ. Типтәр ауылдарының 40 проценты XVIII быуатта барлыҡҡа килгән, ҡалғандары XIX быуатта нигеҙләнгән. Мишәр ауылдарының ҙурҙарынан Боҙаяҙ, Солтанморат һаналған. Тәүгеһе 1757 йыл Өршәк-меңле башҡорттары менән 20 йылға төҙөлгән килешеү нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Ул 1789 йылда килешеү шарттары яңынан 50 йылға оҙайтылған. Был — *Пугачевтың* күренекле көрәштәше *Ҡәнзәфәр Усаевтың* тыуған төйәге. Солтанморат ауылы 1761 йыл Меркет-меңле олоҫоноң ерендә нигеҙләнгән. Был — күренекле әҙип *Ғәлимйән Ибраһимовтың* тыуған ауылы.

Башҡортостан үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, һәр ырыу территорияһы олоҫ (волость) тип атала башлай. Уның һәр береһендә төп ауылдар барлыҡҡа килгән. Быны Үрге Яйыҡ өйәҙенә ҡараған Бөрйән олоҫо (башҡа өйәҙҙәрҙәге бөрйәндәр тураһында һүҙ бармай) миҫалында күрһәтәйек. 1795

йылда бында ни бары 24 ауыл (шуларҙың өсәүһенең исемен асыҡлап булманы) һаналған. Иң ҙур төп ауылдарҙан 60-тан ашыу йортло 3 ауыл (Эткол, Таулыҡай, Сыңғыҙ), 50 йортло 5 ауыл (Ҡәйепкәй-Темәс, Иҙрис, Мырҙаҡай, Йомаш, Исмаҡай), 40 йортло 2 ауыл (Муллаҡай, Биктаһир-Әхмәр), 30 йортло 5 ауыл (Әлмөхәмәт, Әтек, Этҡол, аҙағыраҡ — Икенсе Этҡол, Яйыҡбай, Сибай). Шул төп ауылдарҙан башҡалары айырылып сыҡҡан. Былар иҫәбенә 20 йортло 2 ауыл (Күсей, Ярат), 12—19 йортло 3 ауыл (Нуғай, Төрөкмән, Иҫәнбәт) инә. Нуғай ауылы Ҡыҙыл йылғаһы буйына Яйыҡбай (Нуғай) ауылынан айырылып сыҡҡан. Бынан тыш, Яйыҡбайҙың 9 утары күрһәтелгән. Ҡарағужанан 2 ауыл айырылған. Уның Ярат һәм Шырмай тигән утарҙары ла булған. Сыңғыҙҙан ике ауыл айырылған. Әйткәндәй, XVII быуатта Сыңғыҙ — Монаш, Этҡол Ямаш тип аталған. Ә Монаш һәм Ямаш Бөрйән ырыуының түбә-тармаҡтары булған. Бөрйәндәр шәжәрәһендә лә был исемдәр телгә алына. 46 йыл уҙғас (1834 йыл) Бөрйән олоҫонда ауылдар һаны 78-гә еткән. Был төп ауылдарҙан яңы ауылдар айырылып сығыуы хаҡында һөйләй. Башҡорттарҙың йәмғиәт үҫеше, игенселеккә күсеүе һ. б. сәбәптәр ерҙе бүлгеләүгә һәм төп төбәктән яңы ауылдар айырылыуға килтергән.

Бына миҫалдар. Үрҙә әйтелгәнсә, Сыңғыҙ ауылынан XVIII — XIX быуат араһында ике ауыл нигеҙләрлек кеше айырылып сыҡҡан. Был ауылдар — Абдрахман һәм Мерәҫ. 1816 йылда Мерәҫ ауылында Сыңғыҙҙан килгән 15 ғаилә йәшәгән. Шулар араһында ауылға исем биреүсе йорт старшинаһы (уға 4—5 ауыл ҡараған) *Мерәҫ Биктимеров,* уның улы, йорт ясауылы *Хәсән* дә бар. Абдрахман ауылына нигеҙ һалып, ҡайһы бер ғаиләләр (19 ир-ат) кире Сыңғыҙға әйләнеп ҡайтҡан. Шулар араһында *Мөхәмәткилде Түләков, Дилмөхәмәт Уразбаев* бар.

1834 йылда бик күп ауылдар барлыҡҡа килгән. Бында *Перовскийҙың* утарҙарҙы бөтөрөү тураһындағы бойороғо билдәле роль уйнай. Утарға сығып, полиция күҙәтеүҙәренән ситләшеп йәшәгән башҡорттарҙы кире ауылдарына ҡыуыу башлана. Был — йәйләүҙе тыйыу тигән һүҙ. Утарҙарҙы һаҡлап ҡалыу маҡсаты менән төп ауылдарҙан ҡайһы бер ғаиләләр унда күсеп ултыра һәм яңы ауылдар барлыҡҡа килтерә.

Яңы ауыл кешеләре үҙҙәре өр-яңы ауылға нигеҙ һалған. Йылайыр һыуы ҡушылдығы Шүлкә буйындағы утар урынында Абдрахмандан һәм Мерәҫтән 113 ир-ат 60 йәшлек *Мөхәмәт Абдрахманов* (уның атаһы Сыңғыҙҙан сығып, Абдрахман ауылына нигеҙ һалған) етәкселегендә күсеп, Мөхәмәт ауылын барлыҡҡа килтерә. Сыңғыҙҙан сығып, Абдрахманда ғүмер итеп,

Мөхәмәткә нигеҙ ташын һалыусылар араһында бөгөн осраған фамилияларҙы башлап ебәреүсе *Сирбай Мансуров,* уның улы *Йомағужа Сирбаев, Этҡол Боҫҡонов,* уның улдары *Әсфәндиәр* һәм *Мөхәмәҙиәр, Бәлхиә Ильясов* һ. б. бар. Һуңғараҡ Мөхәмәт ауылы киренән утарға әйләнә, ә уның халҡы үрҙә һаналған өс ауылға таралған.

Ул ауылдарҙың халҡында ҡан ҡәрҙәшлек һаҡланыуы һәм төп ауылдан башҡалары айырылыуы түбәндәге хәлдән дә күренә. 1856 йылда 65 йортло Сыңғыҙҙа оло мәсет булып, уның мәхәлләһенә 41 йортло Мөхәмәт, 24 йортло Мерәҫ, 13 йортло Абдрахман ауылдары халҡы ингән.

Сыңғыҙ ауылына яҡыныраҡ Һаҡмар ҡушылдығы Күсәбә йылғасығы үрге ағымының ике тармаҡҡа айырылған урында иҫке утарға Таулыҡай һәм Йәнйегет (был факт Йәнйегеттең Таулыҡайҙан айырылып сығыуы тураһында фараз итергә мөмкинлек бирә) ауылдарынан 139 ир кешенән торған ғаилә 1834 йылда күсеп, Әмин ауылына нигеҙ һалған. Был ауыл кантон штаб-квартираһы урынлашҡан Хәсәндән 53 саҡрым алыҫлыҡта ултырған.

1792 йылда Таулыҡай ауылынан 55 ир Нигмәт һәм II Этҡол араһында Таулы йылғаһының ҡушылдығы Сыбалайыр йылғасығы (икенсе документта Саҡмағош тип атала) тамағында Исхаҡ ауылына нигеҙ һалған. Һуңға табан уның халҡы күрше ауылдарға таралған.

Һаҡмар буйындағы Кинйәбулат ауылы ике ауылды башлап ебәргән. Уларҙың береһе — Таналыҡ буйында Буранбай, икенсеһе — Яңы Кинйәбулат. Тәүгеһе 1816 йылғы VII ревизияла күрһәтелгән. Ул йорт старшинаһы, атаҡлы ҡурайсы *Буранбай Ҡотосов* тарафынан XIX быуат баштарында нигеҙләнгән. 1834 йылда унда — 38, 1859 йылда ни бары 26 йорт иҫәпләнгән. VIII ревизия (1834 йыл) материалдарында ғаилә башлығы 53 йәшлек *Буранбай Ҡотосов* «енәйәте өсөн 1820 йылда Себергә һөрөлгән» тип яҙылған. Буранбай ауылы аҙағыраҡ Аһыл тип тә аталған. Уға исем биреүсе 67 йәшлек *Юнысов Аһыл* 1834 йыл шул ауылда йәшәгән (уның *Динмөхәмәт, Мөхәмәтҡазы, Йыһангир, Әфләтун, Ғөбделмәжит* исемле улдары булған). Был ауыл күптән юҡ инде. Бөгөнгө көндә Аһыл ауылынан сығыусылар һәм уны хәтерләүселәр бар. Ләкин уның Буранбай исеме менән йөрөгәнен хәтерләүсе берәү ҙә юҡ тиерлек. Буранбай исеме Кинйәбулат ауылына күскән. Бында Буранбайҙың улы *Нәушируән Буранбаев* йәшәгән. Ҡайһы берҙә ул *Ҡотосов* фамилияһы менән дә йөрөгән. Кинйәбулат ауылының (1856 йылда 50 йорт) төп ауыл икәне һәм унан башҡалары айырылыуы Буранбай һәм Таналыҡ (18 йорт)

халҡы төп ауыл мәсетенең мәхәлләһен тәшкил итеүендә лә күренә.

XIX быуат башына тиклем Йомаш халҡы утар урынында Байыш ауылын нигеҙләгән. 1839 йылда Йомаштан тағы ла 18 ир ғаиләһе Байышҡа килеп ултырған. Шул ваҡытта был ауылда ни бары 24 ғаилә һаналған. Ауылға исем биреүсе *Байыш Аҡҡусҡаров* 1823 йылда 76 йәшендә донъя ҡуйған (улдары — *Йөрмөхәмәт, Ыласын*).

Йомаштар Ташлы йылғасығы Йылайырға ҡойған тирәлә Елгилде (русса — Зильгилдино) ауылына ла нигеҙ ташы һалған (1834 йыл). Бында килеүселәр араһында 75 йәшлек *Елгилде Йомашев, Килдеғош Рыҫҡолов* (74 йәштә, уның улдары — *Мөхәмәтйән, Ғәҙелмырҙа*) бар.

Кеүәшле һыуының тамағында Бәләкәй утар урынында Байыштан — 11, Мырҙаҡайҙан 65 ир ғаиләһе күсеп, 1834 йылда Әбсәләм ауылын барлыҡҡа килтерә. Ауыл Байыш аҫабаһы *Ғәбсәләм Бейешев* исемен йөрөткән. Байыш һәм Мырҙаҡайҙың бер ауылды нигеҙләүе уларҙың төп сығышы бер икәнлеген фараз итергә урын бирә. Йомаштар ғына түгел, Мырҙаҡай кешеләре лә Байыш ауылына нигеҙ һалғандар, тигән уй тыуа. Сөнки сит-ят кешеләр, туғанлығы булмаған кешеләр йәйләүгә йә утарға бергәләп сыҡмаған һәм яңы ауылға нигеҙ ҙә һала алмаған.

Шул уҡ ваҡытта 6-сы кантондың 7-се йортона ингән Тәңребирҙе ауылына Әптекәйҙең (Абдюково) аҫабалары (32 ир-ат) *Тәңребирҙе Ильясовтың* исемен биреп нигеҙ ҡорған. Мағаш буйында 6-сы кантондың 6-сы йортона ҡараған Ғүмәр һәм Яраттан 92 кеше 1834 йылда үҙ утарына күсеп ултырған һәм Йәрмөхәмәт ауылын барлыҡҡа килтергән. Ауыл Ғүмәрҙән килгән зауряд-хорунжа *Йәрмөхәмәт Үҙәнбай* улы *Юлыевтың* исемен йөрөтә. Ул — 1812 йылғы Ватан һуғышы батыры. Һуғыш башланған йылда уға ни бары 16 йәш тулған. 15-се башҡорт полкы составында ул Париждан урап ҡайтҡан. Батырлыҡтары өсөн ике көмөш миҙал менән наградланған: береһе — «1812—1814 йылдар һуғышы иҫтәлегенә», ә икенсеһе — «1814 йылдың 19 (31) мартында Парижды алған өсөн». Ул 1853 йылда 56 йәшендә вафат булған. *Солтанғәле* һәм *Мөхәмәтбаҡый* тигән улдары ҡалған.

Йөрмөхәмәт XIX быуат аҙағында йәшәгән билдәле этнограф *Бәхтегәрәй Юлыевтың* тыуған ауылы һанала. Ләкин ул яҡта *Юлыевтарҙы* ҡырҙан килгән кешеләр тип иҫәпләйҙәр. Ә шулай ҙа улар шул төбәктеке. *Йәрмөхәмәт Юлыевтың* ҡустыһы *Муллағәләм* Ғүмәрҙә йәшәгән, аҙаҡ Мырҙаҡайға күсерелгән. Йәрмөхәмәт ауылында *Ҡолғариф Байдәүләт* улы, Иҫәнғолда *Йомағол* улы *Юлыевтар* йәшәгән. Байышта ла

*Юлыевтар* булған. *Өнәс Әҙибаевтың* улы *Ҡолмөхәмәт Өнәс* улы *Юлыев* 1833 йылда Ғүмәр ауылына күсерелә, шунан Йәрмөхәмәттә йәшәй. Уның 1832 йылда Байышта тыуған *Мөхәмәт* тигән улы булған: *Мөхәмәт* Ырымбур айырым корпусы генштабы эргәһендә тәрбиәләнеп белем алған. Башҡорт ғәскәрендә һыҙмасы булып хеҙмәт иткән. Уның *Сәлимгәрәй* һәм *Бәхтегәрәй* тигән улдары булған; һуңғыһы 1861 йылдың 10 авгусында тыуған. Буласаҡ этнограф ошо *Бәхтегәрәй* булырға тейеш.

Әйткәндәй, кантонлыҡ осоронда бындай күсеү-күсереүҙәр йыш булған. Мәҫәлән, 1831 йылда, хәрби губернатор бойороғо буйынса, Бөрйән олоҫо Сибай ауылынан алыҫ Пермь яғына — Ғәйнә башҡорттарының Күҙемйәр ауылына *Дәүләтҡол Сибаев, Фәйзулла Һунаршин, Алтынса Туҡанбаевтар* күсерелгән.

6-сы кантондың 10-сы йортона ҡараған Иҫәнғазынан 95 кеше Маҙалы йылғасығы буйында *Йәрмөхәмәт Йәнсурин* исемен йөрөткән Йәрмөхәмәт ауылына 1834 йылда нигеҙ һалған. Шул уҡ ваҡытта Назар ауылынан 41 кеше тарафынан Төйәләҫкә ҡойған Еркле йылғасығы тамағында Абыҙгилде (Абҙаҡ) ауылы нигеҙләнгән.

Ғәли ауылынан 26 ир ғаиләһе Таналыҡҡа ҡойған Илсебәк (Илсебикә?) йылғасығы эргәһендәге утарға күсеп, 43 йәшлек урядник *Әбделмөьмин Иҙелбаев* (атаһы 78 йәшлек *Астыров*) исеме менән ауыл тыуған. Һуңғараҡ ул Иҙелбай тип аталған.

Ирәндек араһында Ҡаракүбек йылғасығы янындағы утарға Йәнйегет ауылы кешеләре күскән (1834 йыл) һәм яңы ауыл барлыҡҡа килгән. Йорт старшинаһы, аҙағыраҡ кантон ярҙамсыһы, 1836 йылдан кантон башлығы йөҙбашы *Хәсән Байназар* улы *Бейешев* исемен йөрөткән ул ауыл. Уның *Мирсаяф* исемле улы 80-се йылдар аҙағында Ҡазан университетында *В. И. Ленин* менән бергә уҡыған һәм студенттарҙың беренсе сходында ҡатнашҡан.

Ҡазаҡсапҡан йылғасығы буйындағы утарға Әхмәр ауылынан 51 кеше күсеп ултырған һәм 60 йәшлек *Дәүләт Юлсурин* исемен йөрөткән ауыл барлыҡҡа килгән.

Шундай уҡ утар урынында Бәхтегәрәй ауылынан 73 ир-ат Шүрәле йылғасығы буйында Фәйзулла ауылына (1834 йыл) нигеҙ һала. Ауыл хорунжа *Фәйзулла Ильясовтың* исемен йөрөтә.

Шул уҡ йылда тағы ла бер нисә ауыл нигеҙләнгән. Тулыбай йылғаһы буйындағы утар Исмаҡайҙан сыҡҡан халыҡ тарафынан ауылға әйләндерелгән. Был ауыл *Иҫәнгилде Ҡунаҡҡоловтың* исеме менән йөрөгән.

Исмаҡай ауылы кешеләре Йылайыр буйындағы тағы ла бер утарҙа ҡалып (64 ир), Ниязғол ауылына нигеҙ ҡорған. 71 йәшлек *Ниязғол Ҡотлобаев* исемен алған ул ауыл.

Шул уҡ Исмаҡай ауылынан сыҡҡан кешеләр *Мырҙа Иҙрисов* (72 йәш) исемен йөрөткән ауылға нигеҙ һалғандар.

Кеүәшле йылғаһының Май-Таш исемле кисеүе эргәһендә Мәмбәт ауылынан зауряд-хорунжа *Мортаза Ғабдуллин* исемен алған Мортаза ауылы ла барлыҡҡа килә. Унда 81 ир-ат күскән.

Ҡорас, Ишембай, Баталы йылғасыҡтары янында Әбделмәмбәттән 100 кеше килеп, зауряд-хорунжа *Кинйәлиби Аҡҡусҡаров* исемен йөрөткән ауыл хасил булған.

Түңгәүер олоҫона ҡараған Асҡар һәм Икенсе Исмаҡай кешеләре Ҡағы буйында Байназар ауылын нигеҙләгән. 49 йәшлек *Байназар Татлыбаев* (улы *Ғәйнетдин*) хөрмәтенә шулай аталған.

Бөрйән олоҫо ерендә Юлыҡ ауылы барлыҡҡа килгән. Ылау һәм почта йөрөтөү эшен йөкмәтеү өсөн Бөрйән олоҫо аҫабалары Ҡазан өйәҙе Арск (өлкәһе) йөҙ башы *Шары Кулеевтың* Злеякунал (боҙоп яҙылған.— *Авт.*) ауылы яһаҡ түләүсе татар *Әбүбәкер Муҡаев* һәм уның иптәштәре (30 йорт) менән 1781 йыл 10 йылға килешеү төҙөгән. 1816 йыл уның шарты яңыртылған. Тәүҙә килгән кешеләр утар, һуңғараҡ Юлыҡ йылғаһы буйында шул исемдә ауыл булып ултырған. Йыл һайын 40-ҡа яҡын ылау, 6 почта ылауы биреү, күпер һалыу, юл билдәләре ҡуйыу шартында уларға ер-һыу бирелгән.

Төп ауылдан яңы ауылдар барлыҡҡа килеү күренеше башҡа олоҫтарға ла хас булған. Иҙел-Нөгөш тамъяндарының 1795 йыл 58 мең дисәтинә уңайлы һәм шул тиклем үк уңайһыҙ ер биләгән 6 төп ауылы булған. Бына улар: Ҡотош (25 йорт), Смаҡ (29 йорт), Муса (42 йорт), Моҡас (29 йорт), һуңғыһынан Түләк (20 йорт) һәм Мәмбәтҡол ( 9 йорт) айырылған. 1803 йылдан һуң Тамъян олоҫонда тағы ла 4 ауыл үҫә. Мусанан айырылған Яңы Муса, Йомағужа (1834 йыл, 123 ир һәм ҡатын-ҡыҙ), унан — Илкәнәй, Смаҡтан — Бәләкәй Смаҡ (Исламғол). Шул аҫабалар араһында Ҡотошта (1834 йыл) — 11 типтәр, Смаҡта ерһеҙ башҡорттарҙан 10 ебәрелмеш (этәмбәй) йәшәгән. Яңы Муса ауылында Ҡарағош һәм Хәлкәй ауылдарынан килгән 77 ебәрелмеш татар йәшәгән.

*Пугачев* етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында уның Өфө эргәһендәге икенсе үҙәгенә етәкселек итеүсе *Ҡасҡын Һамаровтың* ейәне *Сәлих Хәлилов* Ҡотошта йәшәгән. Ул яңылыш ебәрелмештәр рәтенә ҡуйылған. Шуға күрә ул олатаһы *Ҡасҡын Һамаровтың* аҫаба һәм полковник икәнен иҫбат итергә тырышҡан.

Йомағужаның ҡыҫҡаса тарихын 1929 йылда *Усман Ғариф улы Әбүбәкеров* яҙған. Был ҡулъяҙма уның ҡустыһы *Ғәли* ағайҙа һаҡлана. Октябрь революцияһына тиклем Йомағужа халҡының экренләп игенселеккә күсеүе һәм 1868 йылдан башлап йәйләүҙе ташлауҙары билдәле. Был яңылыҡ уларҙың һыу тирмәне төҙөүҙә, һабан ҡулланып, күмәкләшеп ер эшкәртеү һымаҡ эштәрендә күренә. Ағай-эне һабандаш булып, бер һабанға 5-6 ат егеп иген сәсеүҙәре заман йырында ла сағылып ҡалған:

Алты ат ектем һабанға,
Биш ат тарта алмағанға.
Егет меҫкен төндә йөрөй,
Яңғыҙ ята алмағанға.

Ауыл халҡы малсылыҡ менән дә шөғөлләнгән, ылау ҙа йөрөткән. (Воскресен заводына баҡыр мәғдәнен ботона 4—5 тингә ат менән ташыған.)

Йотлоҡ йылдары һәм төрлө эпидемия ауыл халҡын күпләп ҡырған. 1911 аслыҡ йылы 41 йорт-хужалыҡтан 32-һе ерен һатҡан.

Ул ваҡытта халыҡтың ҡайһы бер ғөрөф-ғәҙәттәрен, дини йолаларын байҙар үҙ мәнфәғәттәрендә ныҡ файҙаланған. Ҡорбан байрамы ярлыларға ифрат ҙур сығымдар килтергән. Бына шулай, мәҫәлән, 7 кеше йыйылып, Мәләүез сауҙагәренән ҡарт бер һыйыр алып, ҡорбан салдырғандар. Уның өсөн ете быҙау биргәндәр. Һөҙөмтәлә ошо ауылда бер сауҙагәрҙең 30-ҙан ашыу һыйыры йыйнала. Ауыл кешеләре уларҙы аҫраған, һауған, ләкин түлен сауҙагәргә бирә барған. Бынан тыш, сауҙагәрҙәр үтескә сәй-шәкәр тараткан, бурысын түләй алмағандарҙың һыйырҙарын тартып алып, элекке хужаһына уны һауынға кире биргән, ләкин түлен үҙе алған. Социаль тигеҙһеҙлек, бай ҡатламдың иҙеүе шул осорҙа нык һиҙелгән.

Граждандар һуғышы ваҡытында Ҡыҙыл Армияға ауылдың матди ярҙамы тураһында мәғлүмәттәр ҙә бар. Йотлоҡ йылында Совет хөкүмәтенең ярлы халыҡка матди ярҙамы асыҡ күрһәтелгән унда. 1929 йылда ауылда тәүге комсомол ячейкаһы (10 кешелек), 20 йорт-хужалыҡтан торған колхоз барлыҡка килгән. Бына шундай ваҡиғалар тураһында һүҙ бара *У. Әбүбәкеров* яҙмаларында.

Тарихи документтарҙа ауылдарға исем биреүселәр иҫкә алына. 1754 йыл заводсы *Твердышев* һәм *Мясниковҡа* Яйыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Туғыҙтимер, Ҡарғалы, Ҡарамалы, Һайылмыш, Юшатыр, Ыҡ буйҙарындағы мәғдән сыҡкан 482 ерҙе Нуғай юлы биш олоҫ аҫабалары 185 һумға һатҡан. Шул килешеүгә Тамъян олоҫонан ҡул ҡуйыусылар араһында *Смаҡ Ҡасаев,* ике рядовой араһында *Моҡас Теләукәев, Моҡас*

*Аһылов, Ҡасҡын Һамаровтар* бар. 1756 йылда Тамьян олоҫо Воскресен заводына унһң тирәһендәге Тор йылғаһынан Ағиҙел һәм Нөгөшкә, йәғни Ҡыпсаҡ һәм Юрматы олоҫтары сигенә тиклемге араны, 55 һумға һатҡан. Килешеүгә олоҫтоң ышанысла кешеһе тип һайланып ҡуйылған *Смаҡ Ҡасаев* ҡул ҡуйған. 1763 йыл Нуғай юлы башҡорт старшиналары һәм олоҫтан һайланып ҡуйылған ышанысла кешеләргә Ырымбур губернаторына игенселекте киңерәк йәйелдереү өсөн крепостной крәҫтиәндәр тоторға рөхсәт һорап яҙған хатҡа *Смаҡ Ҡасаев* тамғаһын ҡуйған. *Ҡасҡын Моҡасов* уны яҙған һәм ҡулын ҡуйған. Икенсе тапҡыр *Моҡас Теләүкәев* (документта *Макач Тилкэев*) 1764 йыл Тамъян олоҫо аҫабаларының 24 суҡынған һәм суҡынмаған татарҙарға Бөгөлсән һәм Ҡыҙыл яр тигән урында — элек тоҙ келәттәре булған пристань ерендә йәшәүгә рөхсәт биргән килешеүгә ҡул ҡуйыусылар араһында бар. Был факттарҙы Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар йыйынтығында табып була.

Ауылға нигеҙ һалыусылар исемлеге тамъяндар шәжәрәһендә лә бик асыҡ күренә. Шәжәрәнең был варианты Кумертау районы Йомағужа ауылында йәшәүсе күп кенә тарихи ваҡиғалар шаһиты, социализм нигеҙен төҙөүҙә әүҙем көрәшсе аҡһаҡал *Ғәли* ағай *Әбүбәкеровта* (1893 йылғы) һаҡлана.

*Йомағужа* — тамъян ырыуы бейе, Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылған *Шәғәле Шаҡмандан* һуң бишенсе быуын кеше. *Шаҡмандың* өлкән улы — *Буралы,* уның улы — *Илсекәй,* уның улы — *Теләүкәй,* уның улы — *Йомағужа. Моҡас* — *Теләүкәйҙең* өсөнсө улы. (Дауам итһәң, *Моҡастың* улы — *Иҙәге,* уның улы — *Сәйфетдин,* уның улы — *Камалетдин,* уның улы — *Мөхәмәтйән,* уның улы — Моҡас ауылы аҫабаһы *Миңлеғужа Шағманов* — 9 быуын элек йәшәгән *Шәғәле Шаҡман* исеме 10-сы быуындың фамилияһы булып һаҡланыуы ғәжәп хәл, ләкин, уның улдарының изге исемдән ситләшеп, икенсе фамилияла йөрөүе бик аяныс.) *Моҡастың* дүртенсе улы *Ҡасҡын* мулла документта нисек, шәжәрәлә лә шулай күрһәтелгән. *Теләүкәйҙең* икенсе улы *Әтекәй* тарихи документтарҙа *Смаҡ Ҡасаев* менән бергә иҫкә алына. Тор буйындағы Воскресен заводына ер һатыу килешеүендә *Әтекәй Теләүкәевтең* тамғаһы бар. Ләкин унда *Клеев* тип яңылыш бирелгән, ахырыһы. Әйткәндәй, *Ғәли* ағай *Әбүбәкеров* шул *Әтекәй* тоҡомо (уның улы — *Ҡунаҡҡужа,* уның улы — *Хәлит,* уның улы — *Әбүбәкер*).

*Муса* — *Шәғәле Шаҡмандың Бураш* исемле икенсе улының тоҡомо. Бураш улы — *Яңыбирҙе,* уның улы — *Ҡужабирҙе,* уның улы — *Сыуашай,* уның улы — *Һөйәр,* уның улы — *Муса.* Шәжәрәлә *Исмаҡ Муса* улы, *Исламғол Исмаҡ* улы, тип

күрһәтелгән. *Илкәнәй* — шул уҡ *Бураш* нәҫеле. *Сыуашай* улы — *Сәфәр*, уның улы — *Теләүембәт*, уның улы — *Илбай*, уның улы — *Илкәнәй*, Түләк ауылының исеме *Шаҡмандың* бүләһе *Теләүкәй* исемен йөрөтөүе ихтимал.

*Шәғәле Шаҡмандан* һуң бишенсе быуын *Моҡас Теләүкәев*, *Әтекәй Теләүкәев*, алтынсы быуын *Ҡасҡын Моҡасовтың* XVIII быуаттың уртаһында тарихи документтарҙа иҫкә алыныуы тамъян ырыуы шәжәрәһенең был варианты дөрөҫлөктө сағылдырыуын асыҡ күрһәтә. Был шәжәрә *Шәғәле Шаҡмандың* ысынлап та XVI быуаттың икенсе яртыһында йәшәүен һәм шуға күрә уға ныҡ таянырлыҡ тарихи документ икәнен тағы бер тапҡыр раҫлай. Профессор *Р. Г. Кузеев* баҫтырған шәжәрәлә *Моҡас*, уның улы *Ҡасҡын* да бар. Бынан тыш, тарихи материалдар раҫларлыҡ исемдәр ҙә осрай (мәҫәлән, *Туҡан Балтасов*, уның улы *Юлай* 1756 йыл иҫкә алына).

Шулай итеп, Иҙел — Нөгөш яғындағы Тамъян олоҫоноң ауылдарын нигеҙләүсе тарихи шәхестәр шәжәрәлә генә түгел, документаль сығанаҡтарҙа ла осрай.

Теманан аҙ ғына сигенеп, үрҙә иҫкә алынған шәжәрә биргән бына тигән материал тураһында бер-ике һүҙ әйтке килә. Беренсенән, тарихи һәм шәжәрә сығанаҡтарынан *Шәғәле Шаҡмандың* ошоға тиклем билдәһеҙ ата-бабалары тураһында. Баҡтиһәң, уның ата-бабалары билдәле икән. Бына улар: *Шәғәле Шаҡмандың* атаһы — *Ҡырай бей*, уның атаһы — *Мутай бей*, уның атаһы — *Уразай бей*, уның атаһы — *Тамъян бей*, уның атаһы — *Балун бей*, уның атаһы — *Тәман бей*. Шулай итеп, XVI быуаттың башы менән уртаһын тоташтыра *Шәғәле Шаҡмандың ата-бабаларының* нәҫел ебе.

Шул шәжәрәлә «Илсекәй ваҡиғаһы» тигән легенда бар. *Илсекәй* — *Шәғәле Шаҡмандың* ейәне. Социаль тигеҙһеҙлектең юл йыра барыуы бында бик асыҡ күренә. Бына ул легенда (һис бер үҙгәрешһеҙ бирелә):

> — Мына был ҡолаҡтан ҡолаҡҡа ишетелеп, телдән телгә һөйләнеп килгән бер һүҙ. Илсекәй Буралы улы Шаҡмановҡа бер ваҡыт яуға барған башҡорттар менән яланда ҡунырға тура килә. Шул ваҡыт йыйылышып ултырғанда һөйләшәләр: бөгөн аттарҙы кем көтә, кемгә сирут, тиҙәр. Араларынан Һунаҡ тигән бер кеше уйнатып әйтә: — Илсекәй ағайыма сирут, ти. Илсекәй аларҙың ханнары була, башлыҡтары. Һунаҡтың ошо һүҙен ишетеү менән Илсекәй: «Ярар, мин сығырмын»,— ти ҙә, уҡһаҙағын алып, ат көтөргә китә: «Миңә алмашҡа ярты төндән Һунаҡты ебәрерһегеҙ»,— ти ул. Башҡалар был эшкә ғәжәпләнеп ҡалып, Һунаҡты орошалар һәм ярты төндә Һунаҡты уяталар: «Бар, мал көтөргә»,— тиҙәр.

һунаҡ йоҡонан тороп китә, мал янына барып етә һәм тауыш бирә: «Илсекәй, һин ҡайҙа»,— ти. Илсекәй: «Мин бында, Һунаҡ, һинме, килдеңме»,— ти. «Мин килдем»,— тигән була Һунаҡ. Илсекәй уҡ-янын алып, Һунаҡтың күкрәгенә төҙләп атып ебәрә. Уҡ уның күкрәген ярып сығып та китә. Һунаҡ аунап ятып ҡала. Илсекәй иптәштәре янына ҡайта. «Бар, ана, малды ҡарағыҙ, теге этегеҙҙе йыйып ҡуйығыҙ»,— тип әмер бирә. Уйнатып һүҙ һөйләгән өсөн Һунаҡ меҫкен донъянан күсә».

Тамъяндарҙың күршеһе бошмаҫ ҡыпсаҡтар ауылы Аптраҡтың (Көҫәпәй) исемен биреүселәр тарихи документта күрһәтелгән. 1763 йыл үрҙә әйтелгән губернаторға яҙылған старшиналар хатында *Аптраҡ Яуғастин* һәм уның улы *Көҫәпәй Аптраҡов* та бар. *Аптраҡтың* атаһы *Бирҙеғол* тархан да старшина булған.

Шул уҡ олоҫта Бесәнсе ауылдары бар. Һәр береһенең нигеҙ һалыусылары ла билдәле. *Бесәнсе* тигән аҫаба шул исемле ауылға нигеҙ һалған. *Бесәнсенең* 1816 йылғы ревизия ваҡытында *Хоҙайғол* (69 йәшендә 1812 йылда үлгән), *Арыҫланғол* (78 йәш) һәм *Хоҙайбирҙе* (67 йәш) улдары булған. *Хоҙайбирҙенең Сәйетбаттал, Йәнсәйет, Ҡулсәйет* исемле улдары теркәлгән. Был ауыл башҡорт халҡының данлы улы *Шәһит Хоҙайбирҙин* исемен йөрөтә. Күренеүенсә, элек тә ауылдың исеме уның яҡын ата-бабалары менән бәйләнгән.

Яңы Бесәнсе ауылы бик бәләкәй булһа ла, уның да үҙ тарихы бар. 1816 йыл унда ни бары ике ғаилә булып, шуларҙың береһе ауылға нигеҙ ташын һалыусы *Бесәнсе Ҡотошовтың* ағалы-ҡустылы ғаиләһе булған. Ул бер туған ҡустыһы шағир *Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи* (53 йәш) менән бергә йәшәгән. Тарихсы *С. Н. Нигмәтуллиндың* диссертацияһында, *Мәнди Ҡотош* суфый шағир булһа ла, ул осорҙағы кантон башлыҡтарын ҡаты тәнҡитләгән, уларҙан әсе көлгән шағир иҫәпләнгән, тип әйтелә. Ләкин әлегәсә был шағирҙың ижады өйрәнелмәгән һәм баһаланмаған, биографияһы ла билдәһеҙ ҡала килә. 1834 йылғы ревизия буйынса Яңы Бесәнселә 4 ғаилә йәшәгән. Шуның тәүге икәүһен *Ҡотошовтар* ғаиләһе тәшкил иткән. Ул саҡта *Мәнди Ҡотошҡа* 71 йәш тулған. Тимәк, ул 1763 йылда тыуған. Ләкин шағирҙың ижадына беренсе иғтибар итеүсе *Зиннәтулла Мөхәмәтрәхимдең Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡиҙың* 88 йәшендә 1843 йылдың 9 апрелендә Икенсе Кинйәабыҙ ауылында үлеүен билдәләп, уның тыуған йылы итеп 1761 йылды күрһәтеүе дөрөҫләккә тура килмәй. Был хата ҡараште шуның менән аңлатып булыр ине: мосолмандар һәр тулы 30 йәшкә бер йыл өҫтәгәндәр. Ысынлап та *Мәнди* 86 йәштә үлгән, ә мосолманса *Мөхәмәтрәхим* күрһәткән кеүек, уға 88 йәш була.

Бына шуның өсөн 1761 йыл хата булып сыға ла инде. 1995 йылда уның тыуыуына 232 йыл тулды.

Төп булмаған ауылдарҙың исем сығышын билдәләү ауыр түгел. Сөнки улар һуң барлыҡҡа килгән һәм документтарҙа теркәлгән. Бөрйән олоҫонда, 1834 йылғы ревизия мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ғәҙелбай ауылына *Ғәҙелбай Ейәнғолов,* Мәмбәт ауылына 83 йәшлек *Мәмбәт Әбдрәшитов* (1832 йыл үлгән), Ишбирҙегә (Ирәндек буйы) йорт старшинаһы *Ишбирҙе Мөхәмәтшәрипов,* Күсейгә *Күсей* (1834 йыл был ауылда *Игебай Аҡназаров* (62 йәш), уның улдары *Мөхәмәтҡунафий* (26 йәш), *Сирбай* (30 йәш) *Игебаевтар* йәшәгән) нигеҙ һалған.

1816 йылғы VII ревизия был турала бик күп материал бирә. Күпселеге Үҫәргән олоҫона ҡараған ауылдарҙың нигеҙ ташын һалыусыларын ҡарайыҡ әле. Хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районына ҡараған Солтанбай (Һултанбай) ауылына (4 йортло) 73 йәшлек *Солтанбай Ярышев* нигеҙ һала. Уның улы зауряд-ясауыл *Сәйфулла* 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы, 8-се башҡорт полкы сафында Парижды алыуҙа ҡатнаша, ике көмөш миҙал менән наградланған. 5 йортло Ҡолғона ауылына (Бөрйән олоҫо) — 94 йәшлек *Ҡолғона Дәүләтов,* 25 йортло Алғаҙыға (Түңгәүер олоҫо) — *Алғаҙы Ғүмәров* (88 йәш), Әбешкә (22 йорт) — *Әбеш* (улы Исхаҡ 1818 йыл иҫән булған), Ҡарағужаға (Ҡыпсаҡ олоҫо) — *Ҡарағужа Этҡолов,* Байдәүләткә — йорт старшинаһы *Байдәүләт Аҡкөбәков,* Алламоратҡа — *Алламорат Мөхәмәтов,* Яҡупҡа — *Яҡуп Мәҡсүтов,* Һөйөшкә (Бөрйән олоҫо) — 90 йәшлек *Һөйөш Көсәков,* Түләбайға — йорт старшинаһы ярҙамсыһы *Түләбай Байғолов* (71 йәш), Иҫәнғолға — *Иҫәнғол Ҡәйепҡолов,* Күсәрбайға — *Күсәрбай Ҡормантаев,* Байҡыйға (Бөрйән олоҫо) — *Байҡый Бабисев,* Ейәнсураға — йорт старшинаһы *Ейәнсура,* Ултраҡҡа — *Ултраҡ Бикйәнов,* Иҙелбайға — *Иҙелбай Ҡангилдин,* Ғәббәс ауылына — *Ғәббәс Мөстәнов* нигеҙ ташы һалған.

Табын олоҫтарының ҡайһы бер ауылдары ла тарих материалдарында сағылып ҡала. Кесе табындарҙың Сәйетбаба йәки Мырҙаҡай ауылы исеме антропоним икәне күренә. Аталы-уллы ауылға исем биргәндәр. XVIII быуаттың уртаһында *Мырҙаҡай Сәйетбабин* тигән старшина билдәле. *Сәйетбаба* һәм *Мырҙаҡай* табындар шәжәрәһендә лә күрһәтелгән*. Бәйембәт ауылына нигеҙ һалыусы — *Бәйембәт Илсеғолов.* Ул 1750 йыл *Твердышевҡа* Усолка буйында Богоявлен заводын

---

* Кузеев Р. Ғ. Башкирские шежере. Өфө, 1960, 155-се бит.

төҙөү өсөн 50 йылға ҡортомға ер биргән. Уның атаһы *Илсеғол Илсебаев* Табын олоҫона ике грамота алған, береһе 1695 йыл Табын олоҫона, икенсеһе 1700 йыл Күрпәс-Табын олоҫона бирелгән. Табын олоҫо ҡаҙнаға 168 һыуһар яҫаҡ түләгән. Был ике грамота *Илсеғолдоң* ейәне *Яҡшығол Бәйембәтовта* һаҡланған. 1676 йылға тиклем Табын олоҫо төрлө олоҫтарға тарҡалған (Күрпәс, Дыуан, Бишауыл). Дыуан табындарҙың Малай ауылы *Малай Янбахтиндың* исемен йөрөтә. Был аҫаба 1678—1681 йылдарға тиклем биләгән еренән мәхрүм ителгән, ул икенселәргә бирелгән. (Башҡорт АССР-ның топонимдар һүҙлегендә был антропонимдың «бәләкәй» ҡушаматынан икәнлеге әйтелә. 103-сө бит.)

Йомран, Дыуан, Ҡумрыҡ, Бишауыл табындары бөтәһе лә күрпәс табындарҙан айырылғанлығы документтарҙа асыҡ сағыла. 1840 йыл Стәрлетамаҡ өйәҙендә Йомран-Күрпәс-Табын, Дыуан-Күрпәс-Табын, Ҡумрыҡ-Күрпәс-Табын, Өфө өйәҙендә Йомран-Күрпәс-Табын, Кенәзләр-Күрпәс-Табын олоҫтары билдәле. Уларҙың Күрпәс-Табындан айырылыуы, тимәк, көн кеүек асыҡ. Күрпәс-Табындан Йомран-Табындарҙың айырылып сығыуы тағы ла бер грамотала күренә. Күрпәс-Табын олоҫо башҡорто *Өмөтбай Мырҙашев* Туҡ йылғаһы буйындағы биләмәһенән ҡаҙнаға йыл һайын 21-әр һыуһар яһаҡ түләгән. Ләкин был ерҙе биләү өсөн уның батшанан алған грамотаһы булмаған. 1684 йыл *Мырҙашев* шул грамотаны алған. Ә уның йәшәгән урыны биләгән еренән бик алыҫта — Өфө ҡалаһынан 10 саҡрым арала Өмөтбай тигән ауыл булған. Үҙенең грамота биреүҙе үтенгән ғаризаһында олоҫ аманаттарын Өфөгә яҡын урынлашҡан шул Өмөтбай ауылына күсереүҙе лә өҫтәп һораған. Был ауыл хәҙер картала юҡ. Һуңғараҡ (1700 йыл) Күрпәс-Табын олоҫо ерендә йомран табындар, үҙ биләмәләрен айырып, яңы олоҫ барлыҡҡа килтергән.

*Өмөтбай Мырҙашевтың* Йомрандар олоҫо-аймағына ҡарауы йомран табындарҙан сыҡҡан башҡорт ғалимы һәм демократ-мәғрифәтсе *Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың* шәжәрәһендә асыҡ күренә. Бына ул: *Әмир Ҡурған,* уның улы *Фируз-шах,* уның улы *Хани — Туҡтар бей — Айҡымбирҙе — Йомран —Ишембәт — Мырҙаш — Өмөтбай — Үтәғол — Собханғол — Ғәббәс — Ишғол — Ишмөхәммәт — Мөхәммәтсәлим* (Р. Г. Кузеев. Башкирские шежере, 216-сы бит). Бында *Өмөтбайҙың Мөхәммәтсәлимгә* фамилия биреүсе бер бабаһы икәнлеге асыҡлана.

Билдәле булыуынса, башҡорт совет әҙәбиәте классигы *Мәжит Ғафури* Кәлсер табын, күренекле демократ-мәғрифәтсе *Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев* Йомран табын тоҡомонан сыҡҡан. Билдәле башҡорт совет яҙыусыһы *Дауыт Юлтый*

Ырымбур өйәҙенә ҡараған Йомран Табын олоҫонан булып, үҙ тоҡомон *М. Өмөтбаев* менән бәйләгән.

*М. Өмөтбаевтың* 7-се быуын бабаһы *Өмөтбай Мырҙашев* Туҡ буйҙары биләмәһенә XVII быуаттың 80-се йылдар уртаһында грамота алғанлығын үрҙә күреп үткән инек. Йомран Табын олоҫонда Ҡыҙылғы йылғаһы буйында килмешәктәрҙең яңы ауылдары барлыҡҡа килеүе арҡаһында аҫаба биләмәләрендә ҡыҫынҡылыҡ тыуыу яңы ергә күсеү мәсьәләһен көн үҙәгенә ҡуйған. 1757 йыл шул олоҫ старшинаһы *Ҡәйепҡол Алыпаев* үҙҙәренең Туҡ буйындағы биләмәһенә күсеп ултырыу өсөн рөхсәт алған. Күсеү һәм йәшәү урындары араһы йөҙәр саҡрым самаһы һаналған. XVIII быуаттың уртаһына тиклем йомран табындарҙың Туҡ буйында утарҙары булғаны билдәле. 1764 йыл *Ҡәйепҡол* старшина етәкселегендә шул яҡҡа 50 ғаилә күскән. Туҡ тамағына яҡын ергә ҡойған Ҡура һәм Сула йылғалары буйына *Ильяс Муллаҡаевтың* 20 йорто, шунан тағы ла 23 йорт күсеп ултырған. Шулай итеп, йомран табындарҙың боронғо биләмәһендә яңы олоҫ барлыҡҡа килгән. Уларҙың Туҡ буйында ысынлап та ерҙәре булыуын күрше юрматы һәм ҡара табындар раҫлаған. Уларҙың ифрат киң ере булғанлығын уны межалау материалы ла күрһәтә. Ырымбур өйәҙендә йомран табындарҙың 61 133 дисәтинә, ә Быҙаулыҡ өйәҙендә уларҙың 130 120 дисәтинә ере иҫәпләнгән. Тәүге өйәҙҙә 1795 йыл ни бары 225, ә икенсеһендә 555 йән Йомран табын олоҫонда аҫаба ир булған. Уларҙың һәр береһенә 15-әр дисәтинә ер бүлеп биреләү ҡаралған. Ә уларҙың ҡалған 162 561 дисәтинә биләмәһе ҡаҙна ҡулына күсергә тейеш булған.

Пермь яғы Ғәйнә башҡорттарының Барҙы, Барҙыбаш, Елпачиха (Удик), Тонтор Тамаҡ йылғалары исемле боронғо ауылдары бар. Шуларҙың иң ҙур Барҙы ауылы ике исем менән йөрөгән. Уны Ҡажмаҡты ла тиҙәр икән. Ошо ауылдан әбей батша төҙөгән Уложение комиссияһы (1767—1768 йылдар) депутаты һәм шунда Өфө провинцияһы башҡорттарының наказын тапшырыусы Ғәйнә олоҫо старшинаһы *Туктамыш Ишбулатов* сыҡҡан. Барҙы һәм Ҡажмаҡты исемдәренең сығышын был ауыл кешеләре үҙҙәренсә аңлатырға тырыша. Ул исемдәр былай барлыҡҡа килгән: ҡаҙым аҡты (шунан, имеш, Ҡажмаҡты), бары ла аҡты (шунан Барҙы, йәнәһе).

«Ағиҙел» журналы биттәрендә (1981 йыл, 11-се һан, 1982 йыл, 4-се һан, 111—113-сө биттәр) бына ошо ғәйнә аҫабаларының ауылы татар халҡының бөйөк шағиры *Ғабдулла Туҡайҙың* әсә яғынан олатаһының тыуған төйәге булыуы, *Ғ. Туҡайҙың* әсәһе *Мәмдүҙә* Ғәйнә ырыуының Тол-Ғәйнә аймағы (тармағы) Ҡажмаҡты ауылы аҫаба башҡорто *Зиннәтулла* хәҙрәт-

теҙ ҡыҙы икәнлеге тураһында бер нисә тапҡыр яҙылғайны. Унда Уса өйәҙе Ғәйнә олоҫо Солтанай (журналда яңылыш «Солтанҡай» тиелә) ауылында *Зиннәтулланың Шируан* хәҙрәттә уҡығанлығы ла әйтелгән.

Был мәғлүмәттәрҙең, нигеҙҙә, дөрөҫләгән ревизия материалдары раҫлай. Ысынлап та, 1834 йыл Солтанай исемле башҡорт ауылында *Мөхәмәтрәхим Зябаловтың* өс улының ике игеҙәге араһында 21 йәшлек *Ғәбделшируан* булған. 1859 йыл 47 йәшлек *Ғәбделшируан Мөхәмәтрәхимов* указлы имам, хатип һәм мөғәллим дәрәжәһендә шул ауылда йәшәгән. Иң өлкән улына 14 йәш тулған. VIII ревизия 174 йортло Барҙы (Ҡажмаҡты) ауылында *Зиннәтулланы* теркәгән. 123-сө һанлы 64 йәшлек *Әмирхан Әмиров* ғаиләһендә 31 йәшлек *Зәйнулбәшәр* улының 4 йәшлек малайы *Зиннәтулла* күрһәтелгән. 1850 йыл *Зәйнулбәшәрҙең* 6 улы араһында 20 йәшлек *Зиннәтулла* ла бар. 1859 йылғы X ревизия 29 йәшлек өйләнмәгән *Зиннәтулланы* теркәгән. Ул ағаһы *Хәйрулбәшәр* ғаиләһендә йәшәгән. *Зиннәтулла Зәйнулбәшәр* улы оҙаҡ өйләнмәгән. Быны уның мәҙрәсәнән мәҙрәсәгә йөрөп уҡыуы менән аңлатырға мөмкин. Билдәле булыуынса, шәкерттәр һуңлап өйләнгән. Үрҙә әйтелгәнсә, *Шируан* хәҙрәттең дә 32—33 йәштә өйләнеүен күргәйнек. Бына ошо *Зиннәтулла Зәйнулбәшәр* улы *Әмиров* — бөйөк *Ғабдулла Туҡайҙың* әсәһе *Мәмдүҙәнең* атаһы.

Шулай итеп, башҡорт ауылдарының барлыҡҡа килеүе уларҙың ярым күсмә һәм ултыраҡ тормошҡа күсеүе менән бәйләнгән. Иң тәүҙә һәр олоҫта төп ауылдар барлыҡҡа килгән. Шулар башҡаларын нигеҙләгән. XIX быуатта нигеҙләнгән ауылдар губерна властарының башҡорттарҙың йәйләүен бөтөрөүгә ынтылыуы менән бәйләнгән. Яҙлау, йәйләү, көҙләү урындарын һаҡлап ҡалыу маҡсатында, төп ауыл кешеләренең бер өлөшө утарҙарға күсеп, 1834 йыл яңы ауылдарға нигеҙ ташы һалған. Ауылға иң беренсе күсеп килеүсе йә дәрәжәле, йә абруйлы, йә иң өлкән кешенең исеме бирелгән.

Һәр ауылдың үҙ тарихы бар. Был мәҡәлә урындарҙа ауыл тарихын яҙыуға ҡыҙыҡһыныу уята ҡалһа, уның авторы үҙ алдына ҡуйған маҡсатына иреште, тип уйларға мөмкин.

## 2. БЕР АУЫЛДЫҢ ТАРИХЫ

Һәр ауылдың үҙ тарихы бар, тигәйнек үрҙә. Уның ҡасан, кем тарафынан нигеҙләнеүе тураһында риүәйәттәр һаҡлана. Уларҙың ҡайһы берҙәре баҫылып та сыҡҡан. Бына «Башҡорт халыҡ ижады» баҫмаһының *Ф. Нәҙершина* төҙөгән риүәйәттәр,

легендалар китабында* Оҡкол (Эҡкол) ауылының риүәйәте бирелгән. Бына нәмә һөйләй ул.

> Бынан 200 йылдар элек Дим буйына Оҡкол тигән ҡарт килеп сыҡҡан. Ул үҙе Ирәндектән — Төрөкмән ауылыныҡы булған. Ирәндек яҡтарында тормош бик тынғыһыҙланып киткән: барымталар йышайған. Аяғы аҡһаҡ Оҡкол ҡарт илендә малын һаҡлай алмаған, шуға ла бында, тыныс илдә, урын тапҡан.
>
> Оҡколдан ҡалған быуындарҙан Оҡкол ауылы килеп сыҡҡан. Шунан үҫә барып, үткән быуат аҙағында тимер юл үткәс, ауыл станцияға тоташа башлай. Һаман үҫә барып, бында һөнәрселәр, оҫталар, һатыусылар килә. 1910 — 1914 йылдарҙа тирмәндәр һалына. Оҡкол әкренләп Дәүләкәнгә әйләнә, тип хәбәр итә риүәйәт. Уныһы — Тәүләгән тигән исемдән сыҡҡан. Оҡкол нәҫеленән. Хәҙер ҙә бында Оҡкол урамы бар.

Риүәйәт бына шундай. Уны Дәүләкән ҡалаһында йәшәүсе *Мөлкәмән Хужиевтан* ғалим *Азат Камалов* яҙып алған.

Тарихи материалдар был ауылдың ысынлап та ике быуат элек барлыҡҡа килеүен раҫлай. Оҡкол (Эҡкол) ауылы 1797 йылда нигеҙләнгән. Ошо турала Мәскәүҙәге Үҙәк дәүләт хәрби тарих архивында һаҡланған топографик яҙмалар һөйләй. Шул уҡ датаны 1795 йылда үткәрелгән V ревизия ҡағыҙҙары ситләтеп булһа ла иҫбатлай. Был ревизияға Оҡкол ауылы инмәгән, сөнки ул әле булмаған. Тимәк, ауыл 1795 йылдан һуң барлыҡҡа килгән. Ә бына Дәүләкән ауылы булған һәм унда ревизия үткәрелгән ваҡытта 33 йорт иҫәпләнгән.

Ауылға тәү нигеҙ һалыусы — *Оҡкол (Эҡкол) Боҫҡонов.* Уның тураһында 1850 йылғы IX ревизия түбәндәгеләрҙе күрһәтә. *Оҡкол Боҫҡонов* 1834 йылда 88 йәшендә үлгән. Дим буйына Ирәндек яғынан күсеп килгәндә, уға 51 йәш булған. Оҡколдоң биш улы күрһәтелгән: беренсе ҡатынынан *Собхангол* (уның улы *Имелбай*), *Изгебай, Мөхәмәҙи, Әхмәҙи,* икенсе ҡатынынан — *Таулыҡай.* Был ауылдағы *Боҫҡон, Имелбай, Мөғәйтмәс, Оҡкол, Таулыҡай, Яугилде* тигән исемдәрҙең Бөрйән олоҫо ауылдарында ла йыш осрауы уларҙың яҡын ҡәрҙәшлегенә ишара яһай.

*Оҡкол Боҫҡоновтоң* Ирәндек яҡтарындағы Төрөкмән ауылынан (хәҙерге Баймаҡ районы) икәнен уның Бөрйән олоҫонан булыуы ҡеүәтләй. Ул ҡырҡөйлө меңләләр еренә аҫаба түгел, ә этәмбәй булып ултырған. Әйткәндәй, ҡырҡөйлө меңләләрҙән XVIII быуатта «бунтта ҡатнашҡан өсөн» Бөрйән оло-

---

* Башҡорт халыҡ ижады.— Өфө, 1980, 135-се бит.

ҫонан сыҡҡан этэмбэйҙэр файҙаһына 94 мең дисэтинэ ерҙең 37 меңен ҡаҙна тартып алған. Шул ерҙэ меңле аҫабаларының Көрмэнкэй, Мэкэш, Яппар, Ҡаҙанғол, Дэүлэкэн, Ҡоръятмаҫ ауылдары урынлашҡан. Уларҙың һэр береһендэ бөрйэн башҡорттары этэмбэй хэлендэ йэшэгэн. Э Оҡол ауылы тик шуларҙан ғына торған. Оҡол халҡы Өйҙөрэк һэм Мораҙым йылғалары буйҙарына (Димдең һул ҡушылдыҡтары) йэйлэүгэ сыҡҡан. Ауылда йылҡы малы күп булған. 1853 йыл 24 йортҡа бөтэһе 2 005 баш ат иҫэплэнеп, һэр йортҡа уртаса 83 баш (Дэүлэкэндэ иһэ 12-13 баш) йылҡы малы тура килгэн. Лэкин уларҙың күбеһе байҙар ҡулында булған. Был һандар Оҡол кешелэренең, дэүлэкэндэрҙэн айырмалы рэүештэ, ярым күсмэ тормошто дауам итеүен һэм йылҡысылыҡ уларҙың төп кэсебе булыуы хаҡында һөйлэй. Игенселек уларҙа ҙур урын тотмаған. Һэр йортҡа ни бары 9—10 бот иген үҫтереп алғандар.

Ауыл тарихын байҡап, беҙ риүэйэттең төп өлөшө дөрөҫлөккэ нигеҙлэнеүенэ ышанабыҙ.

Э шулай ҙа сигенеүҙэр ҙэ осрай. Үрҙэ Оҡолдоң Дэүлэкэнгэ эйлэнеүе тураһында һүҙ булһа, ысынында иһэ, Дэүлэкэн үҫэ барып, Оҡолдо үҙ эсенэ алған. Һуңғыһы уның урамы булып ҡына һаҡланған. Риүэйэттэ эйтелгэнсэ, *Дэүлэкэн Оҡол* нэҫеленэн булыуы мөмкин түгел, сөнки Дэүлэкэн ауылы Ҡырҡөйлө-мең олоҫоноң төп һэм боронғо ауылдарының береһе һанала. Э Оҡол ауылы Бөрйэн этэмбэйҙэре тарафынан сағыштырмаса һуң нигеҙлэнгэн. *Дэүлэкэн* ысынлап та кеше исеме: был тирэ ауылдарында ул исем һэм *Дэүлэкэнов* тигэн фамилия йыш осраған.

Шулай итеп, риүэйэт биргэн мэғлүмэттэрҙең күбеһе документтар менэн раҫлана.

## 3. МЭҢГЕ БУРЫСЛЫБЫҘ ҺИҢЭ, ТЫУҒАН ИЛЕМ!

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында меңэрлэгэн бала-саға, йэш үҫмер ата-эсэһеҙ ҡалды, лэкин Тыуған илебеҙ уларҙы етемһерэтмэне һэм үҙ ҡосағына алды. Завод һэм фабрика, колхоз һэм совхоз коллективтары «Беҙҙэ етем балалар булмаяҡ!» — тигэн саҡырыу ташланылар, һэм ул бөтэ ил буйынса үҙенэ яуап тапты. Төрлө миллэттэге 16 баланы тэрбиэгэ алған һэм бынамын тигэн хеҙмэт һөйөүсе улдар һэм ҡыҙҙар итеп үҫтергэн оло йөрэкле ябай совет кешелэрен — Ташкент тимерсеһе *Шааһмад Шамахмудов* һэм уның ҡатыны *Бахриҙың* батырлығы кемгэ генэ билдэле түгел дэ, улар менэн кем генэ ғорурланмай икэн? Ауыр һуғыш йылдарында шундай кешелэр

беҙҙең республикала ла аҙ булманы. 1944 йылдың башына 7 400 баланы Башҡортостан хеҙмәтсәндәре үҙ тәрбиәһенә алды.

Ата-әсәһеҙ ҡалған балалар һәм үҫмерҙәр тураһында Совет хөкүмәтенең хәстәрлеге иҫ киткес ҙур булды. Аслыҡ һәм яланғаслыҡ был балаларҙы ситләтеп үтте. Бөтә ил буйынса балалар йорттары киңәйтелде һәм яңылары асылды. Башҡортостанда ғына ла 1941 йылдан алып 1945 йылға тиклем балалар йорттарының һаны 28-ҙән 131-гә етте, ә унда тәрбиәләнеүселәрҙең һаны 4 меңдән 16 300-гә тиклем артты.

Балалар йорттарын тотоу өсөн илебеҙ бик күп аҡса бүлде. 1944 йылда БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы яңынан 54 балалар йортон асыу тураһында күрһәтмә бирҙе. Июль айында асылғандары араһында **Баймаҡ районының 1-се Этҡол балалар йорто** ла бар ине.

Һаҡмар буйында урынлашҡан был ауыл. Уны икенсе төрлө Ямаш тип тә йөрөтәләр.

Бына ошо ер ата-әсәһеҙ ҡалған, төрлө яҡтан йыйылған балалар өсөн икенсе тыуған төйәккә әүерелде. 1-се Этҡол ауылы кешеләре тәрбиәләнеүселәргә хәленән килгәнсе ярҙам һәм булышлыҡ итте. Бының өсөн уларға әйтеп бөткөһөҙ рәхмәт һүҙебеҙ бар беҙҙең!

Балалар төрлө төркөмгә бүленеп, һәр береһе менән Темәс педагогия училищеһын тамамлаған тәрбиәселәр етәкселек итте. Йөҙәрләгән үҫмерҙәрҙе оло юлға аяҡ баҫтырыуҙа тәрбиәселәребеҙ *Хәтифә Арыҫланова, Фәсилә Тимерғазина, Гәүһәр Яҡшығолова,* мәрхүмә *Мөнирә Хәкимова, Фатима Харрасова, Зәйнәп Ишбирҙина, Мәрйәм* һәм *Ләлә Дашкиналар, Вәзимә Әбүбәкирова, Клара Ғаббасова, Ҡояш* һәм *Хәтирә Әхмәровалар, Сәрүәр Сәйфуллина* апайҙарҙың хеҙмәте ифрат та ҙур булды. 1-се Этҡол балалар йортона нигеҙ һалыусы, уның тәүге директоры *Фәриҙә апай Абдрахманова,* уның материаль базаһын нығытыу һәм үҫтереүҙә *Тажетдин Сәлимов* һәм бигерәк тә *Нәжиб Азаматовтың* хеҙмәттәре айырыуса һиҙелерлек булды. Хеҙмәт күнекмәләрен биреүҙә инструкторҙарҙан *Зәйнулла Азаматов* айырылып торор ине.

Заман һулышы һәм халҡыбыҙ яҙмышы менән йәшәнек беҙ. Ул ваҡытта бөйөк «Ҡыҙыл Армияға һәр кем бөтә нәмә менән мөмкин ҡәҙәре ярҙам итергә!» — тигән саҡырыу тылдағы бөтә совет халҡы йөрәгендә ғәйәт ҙур яуап тапты. Беҙҙең тәрбиәләнеүселәр ҙә көстәренән килгәнсә фронтҡа ярҙам итергә тырышты. Ҡыҙҙары ла, малайҙары ла һуғышсыларға бүләк итеп йөндән өс бармаҡлы бейәләй, ойоҡ, шарф бәйләне. Һалдаттар менән сәләм хаттар ҙа алышып торҙоҡ. 1-се Этҡол яугирҙарының ғаиләләренә, һуғыш инвалидтарына һәм ҡартҡороларға өй эшендә, ағыулыҡ һәм бесән әҙерләшеүҙә беҙҙең

балалар тарафынан тимурсылар ярҙамы ойошторолдо. Йыл һайын үҫмерҙәр күрше колхоздар баҫыуында башаҡ йыйҙы, ырҙын табағында төрлө эштәрҙә ҡатнашты, яҙғы айҙарҙа үҙҙәре йыйған көл һәм ҡош тиҙәге сығарҙы.

1-се Эҫкол, Буранбай, Сыңғыҙ, Таулыҡай, Ярат, Йомаш, Әбделкәрим ауылдарында балалар йорто үҙешмәкәр артистарының концерттары йылы һәм бик көтөп ҡаршы алына ине. Был йәһәттән беҙҙең йырсыларыбыҙ һәм бейеүселәребеҙ — *Рамазан Йәнбәков, Мәрхәбә Йортбәкова, Айрат Ишбулатов, Салауат Монасипов, Хәсән Хисмәтуллин* һ. б. айырылып торҙо.

Хеҙмәткә ихтирам ғына түгел, беҙгә ысын хеҙмәт тәрбиәһе бирҙеләр унда. Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү, бүлмәләрҙе йыйнаҡ һәм таҙа тотоу, ашханала эшләү, утын ҡырҡыу, мейес ярыу менән генә сикләнмәне, ҡышҡа яғыулыҡ һәм бесән әҙерләү ҙә шулар рәтенә инә ине.

Балаларҙың көндәлек туҡланыуын тулыраҡ һәм сифатлыраҡ итеү маҡсатында колхоз һәм ауыл Советы етәкселәре (*Әғзәм Хисмәтуллин, Хажи Әхмәтов*) балалар йортоноң ярҙамсы хужалығын булдырыу өсөн 9 гектар ер бүлеп бирҙе. Уның 4 гектарына картуф, 2 гектарына йәшелсә һәм 3 гектарына һоло һәм башҡа иген сәселә ине.

Уҡыусыларҙың күберәге тик «4» һәм «5»-кә генә уҡыны. Балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр I Эҫкол ете йыллыҡ мәктәбендә башҡа ауыл балалары менән бергә уҡынылар һәм татыу йәшәнеләр. Беҙгә белем биреүҙә үҙ көстәрен аямай эшләүселәр әле һаман хәтерҙә. Улар араһында *Сөләймәновтар, Мостафиндар, Нурмөхәмәт Байрамғолов* ағайҙар, *Нурбаева* һәм *Сидельникова* апайҙар бар ине. Беҙҙе оло юлға сығарған тәрбиәселәребеҙгә һәм уҡытыусыларыбыҙға мәңге рәхмәтлебеҙ!

Был йортта тулы хоҡуҡлы граждандар тәрбиәләнде, йәмғиәтебеҙгә файҙалы улдар һәм ҡыҙҙар үҫеп сыҡты. Ҡайҙа һәм ниндәй генә эштә булмаһын, улар үҙҙәрен һынатмайҙар, һәр кем дөйөм эшкә үҙ өлөшөн индерә. Етәксе урындарҙа ла эшләүселәр булды арабыҙҙан. Беҙ бер-беребеҙҙең уңыштары менән ғорурланабыҙ, ҡыуанабыҙ. Һирәк булһа ла осрашып торабыҙ. Тыуған илебеҙ хәстәрлегенә ихлас хеҙмәтебеҙ менән яуап бирәбеҙ. Беҙ һиңә, Тыуған илем, мәңге бурыслыбыҙ!

## *«Мәғдән ауырыуы» йоҡҡан кешеләр*



### 1. МӘҒДӘН ЭҘЛӘҮСЕЛӘР ҺӘМ ЭШКӘРТЕҮСЕЛӘР

Уралда ҡара һәм төҫлө металлургия промышленносын үҫтереүҙә урындағы халыҡтың, йәғни башҡорттарҙың да, ҙур өлөшө бар. XVIII быуаттың уртаһында ҡаҙна, сауҙагәрҙәр, дворяндар, тау промышленниктары аҫаба башҡорт ерҙәрендә утыҙға яҡын завод төҙөгән. Уларҙа, нигеҙҙә, рус крепостной крәҫтиәндәре эшләгән. Башҡорттарҙың хеҙмәте төрлө ярҙамсы эштәрҙә — күмер яндырыуҙа, мәғдән ташыуҙа файҙаланылған. Ләкин башҡорттар араһында мәғдән ятҡылыҡтарын таба белеүселәр, үҙ олоҫтарында һәм ҡаҙна ерҙәрендә асылған ятҡылыҡтарҙан заводтарға мәғдән ташыуҙы ойоштороусылар — йәғни үҙ мәғдәнселәре лә булған. Уларҙың ҡайһы берҙәре уҡыусыларға таныш: *Исмәғил Тасимов* тураһында *П. Ф. Ищериковтың, Надир Уразмәтов* хаҡында профессор *К. В. Костриндың,* бер төркөм башҡорт мәғдәнселәре тураһында *Ә. Н. Усмановтың* мәҡәләләре сыҡты. Ләкин улар XVIII быуаттағы шул белгестәрҙең эшмәкәрлеген тулыһынса асыҡлап бөтә алманылар. Шуға күрә, беренсенән, яңы тикшеренеүҙәр нигеҙендә бер ни тиклем өҫтәмәләр индереү мәҡәләмдең маҡсаты булыр, һәм, икенсенән, Уралда ҡаҙылма байлыҡтарҙың ятҡылыҡтарын асыуҙа ошонда күрһәтелгәндәрҙең, бәлки, артабан юҫыҡ биреү әһәмиәте лә булыр, тип ышанғы килә.

XVIII быуатта батша хөкүмәте бөтә Рәсәйҙә ҡаҙна һәм шәхси завод хужалары мохтаж булған мәғдән белгестәрен дәртләндереү сараһын күргән. 1719 һәм 1739 йылдарҙағы указ буйынса, ҡаҙылмалар яткылығын асҡан һәр кешегә киләсәк төшөмдөң 32-се өлөшө тәғәйенләнгән. Ҡазан, Ырымбур һәм Себер заводтарының баш идаралығы етәксеһе, аҙаҡтан рус тарихсыһы *В. Н. Татищев* асыштар яһаусы башҡорттарға суйын ҡаҙандар һәм ҡыҙыл сәкмәндәр тараткан, ә был әлбиттә, һөҙөмтәһеҙ ҡалмаған. 1721 йылда *Субарбатыр Балағошов*, Өфөгә килеп, киләсәктә ҡаҙылмалар эҙләүселәргә ҡамасау итмәйенсә, Чусовая йылғаһының башында көмөш яткылығы табыуы тураһында хәбәр итә. 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы ваҡытында Көҙөй олоҫо Күскилде ауылынан *Нурыш Кинйәкәев* һорау алған саҡта Ағиҙел башындағы Алабаш тауында көмөш мәғдәне барлығын әйтә. Ул үҙе уны рус таныштына күрһәткән, һынау өсөн иретеп тә ҡараған.

Көмөштө башҡорттар көнкүреш әйберҙәре етештергәндә киң файҙаланған. Был турала, мәҫәлән, 1737 йылда Көнгөр воеводаһы майор *А. Писемский* Һарт ауылынан 25 саҡрым алыҫлыкта көмөш яткылығы барлығы, ауыл башҡорттарының көмөш иретеп, йүгәндәрен, ҡамыт-дуғаларын биҙәүҙәре, шулай уҡ, башҡалар белмәһен өсөн, мәғдән яткылығын япраҡтар менән баҫырып ҡуйыуҙары тураһында әйтә.

*В. Н. Татищев*, 1720 йылда билдәһеҙ башҡорт Ҡара-Табын олоҫонда алтын яткылығын тапҡан, ти. Уралдың тау промышленносы тарихын яҡшы белеүсе *Наркиз Чупин* фекеренсә, был Башҡортостандың алтынға бай яҡ икәнлеге тураһында беренсе хәбәр булған. Уның Миәс яткылығы булыуы ихтимал, сөнки алтынға ифрат та йомарт был урын ҡара табындар еренә ингән.

1764 йылда Исәт провинцияһы Уфалей (Өпәле) һәм Ишалы йылғалары араһында *Ҡурабатыр Балсаров* һәм *Кескенәй Ҡормантаев* исемле башҡорттар алтынға бай урынға юлыға. Бынан башҡа улар Этҡол күле эргәһендә тағы бер алтын яткылығын асҡандар.

Башҡортостанда тимер мәғдәнен табыусылар ҙа осраған. *Демидовтар* ҡулындағы бик күп завод-фабрикалар төрлө олоҫтарҙағы башҡорттар тарафынан асылған яткылыҡтар нигеҙендә төҙөлгән булған. Мәҫәлән, Әүжән йылғаһының ҡушылдығы Бағарашты буйында тимер мәғдәне яткылығын Тамъян олоҫо Мәсәғүт ауылы кешеһе *Мәсәғүт Малаев*, ә Ҡыҙылбалыҡлыкүл йылғаһы буйындағыһын шул уҡ олоҫтоң Әтекәй ауылы башҡорто *Соҡо Ҡушәмбәтов* тапҡан.

1740 йылда генерал-майор *Соймонов* башҡорттар тарафынан тимер мәғдәне яткылыҡтары асылыуы тураһында Петер-

бургка хәбәр иткән. Уларҙың береһе Әйле башҡорто *Илғотло Ҡунаҡовтың* ауылынан 6 саҡрым арала Уртыш тауында, икенсеһе Һатҡының ҡушылдығы Аҡбалыҡ башында, өсөнсөһө Нарыҡ йылғаһының Уйылға ҡушылған ерҙә булған. Был мәғдәндең һәр 100 ҡаҙағынан 56 ҡаҙаҡ тимер алынған. Шул уҡ йылда Ҡара Табын олоҫонан *Байым Ҡадраев* Яйыҡтың һул ярындағы Әтәс (атаҡлы Магнит) тауында тимергә ифрат бай мәғдән барлығын тәржемәсе *Роман Ураҙлинға* хәбәр иткән. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында Шайтан-Көҙөй олоҫо старшинаһы *Шығанай Борсаҡов* Үҙән йылғаһының башында тимер мәғдәнен тапҡан. Һүҙ ыңғайында шуны ла өҫтәйек: уның исеме Башҡортостанда селитра ятҡылығы тураһында хәбәрҙәр итеүе менән киң билдәле. Ятҡылыҡ Һикеяҙҙың Әйгә ҡойған урынында бер мәмерйәлә урынлашҡан булған. Унан дары яһағандар.

Тимер мәғдәнен табыу ғына түгел, э эшкәртеү ҙә башҡорттарға серле йомғаҡ булмаған. Был турала 1736 йыл *Мәхмут Мамаделгиндың* һорау алғандағы яуабы һөйләй. «Нуғай юлы Максим ауылында Максим исемле башҡорт, кем улы — унының белмәйем,— ти Мәхмүт,— суйын иретеп, тимер эшкәртә» (русса рәсми ҡағыҙҙарҙа исемдәр йыш ҡына боҙолоп бирелгән.— *Авт.*).

XVIII быуатта марганец, күмер, нефть, күп һанда баҡыр ятҡылыҡтары асылған. Бында ла ерле халыҡ үҙ өлөшөн индергән. Ырымбурҙа йәшәүсе Рәсәй фәндәр академияһының беренсе ағза-корреспонденты тарихсы *П. И. Рычков* 1766 йылда, башҡорттар «хәҙер мәғдән эҙләү менән бик мәшғүлдәр», тип яҙмай булдыра алмаған.

Марганец табыуҙың ҡыҫҡаса тарихы былай. Батшалыҡҡа ныҡ тәләктәш булған Ҡатай олоҫо старшинаһы *Дауыт Йәнәлин* 1759 йылдың февралендә үҙенең һәм күрше Тамъян олоҫондағы халыҡтың ризаһыҙлығы, йәшерен йыйылыштары, шулай уҡ уның үҙен үлтерәсәктәре, Яйыҡ аръяғына ҡасырға маташыуҙары тураһында ошаҡ-шикәйәт яһай. Батырша болаһы алдынан да ул Тамъян башҡорттарының сыуалыштары тураһында губернаторға еткереп торған. *Дауыттың* шикәйәтен тикшереү өсөн ике олоҫҡа йәшерен рәүештә офицерҙар ебәрелгән. *Дауыт* старшина Ырымбурға саҡыртылып, һаҡ аҫтына ҡуйыла.

Үҙенең яҙмышын еңеләйтергә теләптерме, *Дауыт Йәнәлин* һаҡта торған унтер-офицерға көмөш мәғдәнен табыуын хәбәр итә, ятҡылыҡтың урынын да әйтә. Көмөш тип аталған был ҡаҙылма ике урында: береһе — Үрге Яйыҡ пристаненән (һуңынан Верхнеуральск нығытмаһы) 40 саҡрымдар самаһы, икенсеһе Исәт провинцияһының Шуково ауылынан 20 саҡрым

алыҫлыҡта урынлашҡан. Медицина докторы *Редер* тикшереү яһап, Берг-коллегияға мәғдәндә бик аҙ ғына миҡдарҙа көмөш барлығын белдерә. 1762 йылда был ҡаҙылма байлыҡҡа икенсе тапҡыр тикшереү үткәрелеп, уның составында көмөштән башҡа марганец һәм ҡурғаш булыуы ла асыҡлана.

Марганец мәғдәнен табыусы *Дауыт Йәнәлиндың* артабанғы яҙмышына туҡталып шуны әйтергә була. 1759 йылдың сентябрендә ул һаҡ аҫтынан ҡотҡарыла. Тиҙҙән халыҡты ауыһыҙ иҙеүе һәм бөлдөрөүе арҡаһында бик күпләп килгән ялыуҙар нигеҙендә *Дауыт* старшиналыҡтан төшөрөлә.

Көньяҡ Уралда күмер яткылығының да барлығы асыҡлана. Юрматы олоҫонда, Ағиҙелдең уң ярында урынлашҡан Мәстүк тигән башҡорт ауылынан бер саҡрым алыҫлыҡта буласаҡ Пугачев ихтилалында ҡатнашасаҡ *Юлдаш* старшина *Ҡотлин* тарафынан «ер күмере» табыла. Уның икенсе яткылығы Яңы Мәскәү юлы буйында, Ырымбурҙан төньяҡ-көнсығышҡа 150 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Ошо асыштар тураһында Берг-коллегияға Ырымбур губернаторы *Рейнсдорп* 1770 йылдың сентябрендә хәбәр итә, тикшереү өсөн аҙыраҡ күмер ҙә ебәрә.

XVIII быуатта башҡорттар өсөн нефть тә ят нәмә булмаған. Нефтте таныш белеүселәрҙең булғанлығы тураһында түбәндәге материалдар һөйләй.

1754 йылда *НадирУраҙмәтов* улы *Йосоп* менән үҙенең биләмә ерҙәрендә нефть таба, уны эшкәртеү өсөн завод төҙөргә рөхсәт һорап, Ырымбур губерна канцелярияһына мөрәжәғәт итә. Нефтле урын Өфө өйәҙе Ҡазан юлы Сергиевск ҡаласығынан алыҫ түгел Сок буйындағы Һарт-ата тауы эргәһендә, уға ҡойған Көкөрт (Сургут) исемле йылға буйында урынлашҡан. Был ер хәҙер Һамар өлкәһенә ҡарай. Февраль айында был яҡҡа килеп, Берг-пробирер *Христиан Лемон* тикшереүгә нефть алған. Ә 2 июндә *Надир Ураҙмәтовҡа* йыллыҡ доходтың ундан бер өлөшөн түләү шарты менән нефть «заводын» төҙөргә, ирекле хаҡ менән нефтте Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә һатырға рөхсәт бирелгән. 1755 йылда, «завод» төҙгәнсә тип, нефть ҡайнатыу өсөн ул оҙон келәт тә һалдыртҡан. Тик ҡаты ауырып китеүе арҡаһында Берг-коллегия биргән срокта нефть «заводын» төҙөй алмаған. Атаһының ныҡышып үтенеүенә ҡарамаҫтан, *Йосоп* та был мәшәкәтте үҙ өҫтөнә алмаған. Һауыҡҡас, эште дауам итергә теләһә лә, Берг-коллегия *Надирҙы* нефть эшкәртеү һәм завод төҙөү хоҡуғынан мәхрүм итә, уның үҙен дә, улы *Йосоп* Надировты ла «заводчиктар» исемлегенән һыҙып ташлай. Яңынан ҡаты сиргә һабышып, *Надир Ураҙмәтов* үлеп киткән. Шуның менән нефть эшкәртеү ниәте бик оҙаҡҡа һүнеп ҡалған.

Кем һуң ул *Ураҙмәтов*? XVIII быуатта *П. И. Рычков* уны татар старшинаһы тип атай. Хәҙерге көндә тарихсы *С. Х. Әлишев* Надир тигән исемде «Надвар» тип уҡый һәм уны 1729 йыл Башҡортостанда баҡыр иретеү заводы төҙөү хоҡуғын алған «яһаҡ түләүсе татар» тип яҙа. Ә бына Башҡортостан тарихы буйынса бер нисә томдан торған документаль материалдарҙы сығарыусы Мәскәү тарихсыһы *Н. Ф. Демидова Надирҙың* тулы шәжәрәһен тапҡан. Унда күренеүенсә, *Урахмәтовтар* — аҫаба башҡорттар, Башҡортостандың Ҡазан юлы Надир ауылының кешеләре улар. *Надирҙың* ата-бабалары 1704— 1711 йылдарҙағы башҡорт күтәрелештәре барышында Өфө өйәҙенән (Башҡортостан) Ҡазан өйәҙенә (Татарстан) күсеп, тәүҙә яһаҡ, һуңынан йән башынан һалым түләүселәр рәтенә яҙыла. 30-сы йылдарҙа *Надир Урахмәтов* кире Башҡортостанға ҡайта, 1735—1740 йылдарҙағы ихтилалды баҫтырыуҙа ҡатнаша. Шуның өсөн дә ул башҡорт старшинаһы итеп түгел, ә Надир олоҫон тәшкил иткән бер төркөм татар һәм сыуаштар өҫтөнән старшина итеп тәғәйенләнә. Ул йәшәгән ауылға ҡалһа, унда бер нисә аҫаба башҡорт йорто булып, ҡалған халыҡты яһаҡ түләүсе татар крәҫтиәндәре тәшкил иткән. *Урахмәтов* феодалдарҙың юғары ҡатлам кешеһе булған. Уның ата-бабалары башҡорт тарханы тоҡомонан сыҡҡан.

Башҡортостан ере артабан да үҙенең серен аса барған. 1760 йылда Өфө сауҙагәре *И. И. Сенеев* һәм башҡорт старшинаһы *Яҡшымбәтов* Өфө ҡалаһынан 45 саҡрым алыҫлыҡта, Инйәрҙең уң ярындағы *Яҡшымбәт* ауылынан өс саҡрым арала, тау аҫтынан нефттең сығып ятыуы тураһында Ырымбур тау идаралығына хәбәр итәләр. Был ятҡылыҡ граф *С. П. Ягужинскийға* беркетелә, ләкин уны табыу һәм эшкәртеү өсөн ул бер ниндәй сара күрмәгән.

1763 йылда асфальт сыға торған урын да асылған. Башҡорт старшиналары *Урмансы Миңлебаев* һәм *Яҡшымбәт Урасов* Нуғай юлы Күрпәс-Табын-Ҡумырыҡ олоҫо Инйәр буйындағы *Яҡсан* тигән ауыл эргәһендә ыҫмала табалар. Уны тикшереү өсөн 1764 йылдың йәйендә унтер-шихтмейстер *П. Метелев* ебәрелгән, был кеше лә унда ыҫмала барлығын иҫбат иткән. Ул килгәнгә тиклем казачий ғәскәр атаманы *А. Н. Бородиндың* приказчигы *Р. Михайлов* асфальт ятҡылығын эшкәртә башлаған да 100 ботҡа яҡын асфальт тоҡомон әҙерләп ҡуйған була. 1767 йыл был урынды картаға төшөрөү өсөн маркшейдер өйрәнсеге *И. Михайлов* Инйәр буйына ебәрелә. Ул 12 бот асфальт әҙерләтеп Екатеринбургка оҙата. Үрҙә иҫкә алынған ҡомһоҙ *Ягужинский* был ятҡылыҡты ла үҙенә эләктергән, ләкин уны эшкәртеү өсөн ҡыл да ҡыбырлатмаған.

XVIII быуат башҡорттарҙың тарихына Урал металлургияһы, бигерәк тә баҡыр ирҙтеү промышленносының, үҫешенә ныҡлы ҡатнашыу осоро булып ингән.

Баҡыр һәм күмер ҡаҙылмаларын танып-белеүселәр һаны ифрат күбәйә, уларҙың ҡайһы берәүҙәре мәғдән эшкәртеүселәр дәрәжәһенә күтәрелә. Үҙ ерҙәрендә йә ҡаҙна ерендә мәғдән ятҡылыҡтарын табыусылар, бик күп мәғдән сығарылған ерҙең хужалары, заводтарҙы үҙ иҫәбенә ҡаҙылмалар менән тәьмин итеүҙе ойоштороусылар XVIII быуат документтарында рудопромышленниктар (мәғдән эшкәртеүселәр) тип аталған. Архив материалдары уларҙың бик күптәренең исемдәрен һаҡлай. Беҙ шуларҙың иң күренеклеләренең эшмәкәрлегенә туҡталмаҡ булдыҡ.

Себер юлы Һалйоғот олоҫо йөҙ башы *Сәләй Боҫҡонов* мәғдән буйынса билдәле белгес һәм уны эшкәртеүсе-етештереүсе булған. 1763 йылда ошо олоҫтоң 20 башҡорто Уй, Тубыл, Ишем йылғалары буйында мәғдән эҙләп ҡарау өсөн рөхсәт ала, ә уларҙың етәксеһе *Сәләй Боҫҡоновҡа* шул турала указ тотторола. *Сәләй* үҙенең яҡташтары менән *Демидовтарҙың* Урал заводтарына мәғдән ташыҡан. 1761 йылда *Демидовтарҙың* Ревда заводы приказчигы менән төҙөлгән контракт буйынса бер төркөм башҡорт мәғдәнселәре ботон 2-шәр тиндән генә ҡаҙылмалар тапшырырға йөкләмә алған. Эҫкол ауылы башҡорттары *Дауыт Утәгәнов, Ҡунай Назаров, Мәрҙәғол Айытбаев,* Терҫәк олоҫо Ҡангилде ауылынан *Яков Алсынбаев, Арыҫлан Тумәков,* Тахталым ауылынан *Умәр Кәсиев,* Юлғотло ауылынан *Ҡалмаҡай Уптынов* һәм рус крәҫтиәне *Максим Ширяев* тарафынан әҙерләнгән 20 400 бот мәғдән *Турчаниновтың* Сысерт заводы приказчигы тарафынан һорауһыҙ-ниһеҙ алып кителгән. Мәғдәнселәр исеменән *Сәләй Боҫҡонов, Омоҡ Миңлебаев* һәм *Сысҡан Дәрбишев Турчаниновтан* был зыянды ҡаплауҙы талап итәләр. Ә *Демидовтар* менән килешеү буйынса, улар яңынан 30 мең ботҡа яҡын ҡаҙылма әҙерләп, уны ташып та биргәндәр.

Уса юлы Ғәйнә олоҫо кешеләре эре мәғдәнселәр булып таныла. Барҙы ауылынан *Туҡтамыш Ишбулатов* — ана шуларҙың береһе. Был кеше тарихҡа бик ҡатмарлы социаль шәхсиәт булараҡ билдәле. Ул Ғәйнә олоҫо старшинаһы. Старшиналыҡ алғанға тиклем ауыл общинниктарының юғары ҡатламына ҡараған хәлле кеше булған. Батырша һәм Пугачев ихтилалдарын баҫтырыуҙа ҙур булышлыҡ күрһәткән. 1767—1768 йылдарҙа *Туҡтамыш Ишбулатов* Өфө провинцияһы башҡорттарынан Екатерина II саҡыртҡан Уложение комиссияһында депутат булып унда бер нисә тапҡыр сығыш яһаған, башҡорт старшиналарының халыҡ исеменән төҙөлгән «наказ»ын комис-

сияға тапшырған. 70-се йылдарҙың аҙағындағы ниндәйҙер бер сыуалышты етәкләгәне өсөн *Т. Ишбулатов* ғүмерлеккә бирелгән депутатлыҡ исеменән дә, старшиналыҡтан да мәхрүм ителгән.

1759 йылда *Туҡтамыш* старшина һәм уның иптәштәре 6 баҡыр яҡтылығын асҡан. Ғәйнә башҡорттарының ерендә төҙөлгән Шермияк заводын мәғдән менән тәьмин итеү тураһында *Ишбулатов* завод хужаһы *А. И. Глебов* менән килешеү төҙөй. *Глебов Ишбулатовҡа* таҙа баҡырҙың ҡаҙағына 4 тин ярым түләргә йөкләмә ала. 1759—1763 йылдарҙа башҡорт мәғдәнсе-промышленнигы Шермияк заводына 165 500 бот мәғдән тапшыра. Ләкин *Глебов* уның өсөн бер тин дә түләмәгән. Бынан тыш, завод конторaһы *Ишбулатовтың* тағы ла 65 мең бот мәғдәнен урлата. Бының өсөн дә хаҡ түләнмәгән. Шуға күрә *Ишбулатов* Берг-коллегияға ялыу ебәргәс, промышленность менән идара итеүсе был орган *Глебовҡа* дөрөҫ иҫәп-хисап яһарға бойороҡ бирә.

Мол-Ғәйнә олоҫо Ҡуян (уны Тасим тип тә атағандар) ауылы кешеләре эре промышленниктар булып айырыуса дан ҡаҙаналар. 1723 йылда Ягошиха заводы (хәҙерге Пермь ҡалаһы территорияһында) төҙөлгәс тә, был ауыл кешеләре ҡаҙылмалар һатыу һәм уны Ягошиха, Мотовилиха, Үрге Йоҡ (Юг), Түбәнге Йоҡ (Юг) заводтарына ташыу менән мәшғүл булалар.

Ҡуян ауылы Пермь ҡалаһының көньяғында, унан 20—25 саҡрым самаһы алыҫлыҡта урынлашҡан. 1790 йылда унда 90 өй һаналып, 360-ҡа яҡын ир заты йәшәгән. Ана шуларҙың күбеһенә «руда — мәғдән ауырыуы» йоҡҡан да инде.

Ҡуян кешеләре, мәғдәнселәр булараҡ, билдәле өҫтөнлөктәр менән файҙаланған. Башҡа башҡорттар менән уларҙы хәрби хеҙмәттә бер тиң файҙаланыу Пермь яғы «мәғдән промысла»һынан ситләтеү тип һаналған. Шуға күрә 1736, 1741, 1745 йылдарҙағы указдар нигеҙендә, улар, тейешле һалымдарҙан тыш, Ырымбурға Илек тоҙон ташыуҙан, хәрби хеҙмәттән һәм ылау йөкләмәләренән азат ителгәндәр.

Пермь мәғдәнселәре иҫәбенә Ғәйнә олоҫона, бигерәк тә Ҡуян ауылынан, 360-тан ашыу башҡорт һәм Пермь өйәҙенән 10-ға яҡын рус кешеһе ингән. Социаль яҡтан улар тиң булмағандар. Мәғдәнсе-промышленниктарҙың билдәле өлөшө башҡорт йәмғиәтенең феодаль ҡатламына инһә, уның ҡалған өлөшөн ябай общинниктар тәшкил иткән. Һуңғылары тураһында документ бына нәмә һөйләй. Ябай башҡорт мәғдәнсе-промышленниктары, иҡтисади яҡтан бик көсһөҙ булыу арҡаһында, ялланып эшләгән кешеләрҙең берәүһенә лә закладҡа аҡса бирә алмаған. Мәғдән промыслаһын улар тик ҡаҙнанан үтескә алған аҡса иҫәбенә генә алып бара алғандар. Ә инде эре

мәғдәнсе-промышленниктар йөҙәр мең һумдар менән эш иткән. Улар үҙ ҡулдарына бик күп баҡыр рудниктары туплай алған. Йоҡ заводтарына ҡараған яткылыҡтарҙың, мәҫәлән, 76-һы ғына ҡаҙнаныҡы булып, ҡалған 234-е мәғдәнсе промышленниктарҙың милкен тәшкил иткән. Уларҙың ҡайһы берҙәре 5-тән алып 40-ҡа тиклем асылған яткылыҡ эшкәрткән. Бынан тыш, был мәғдәнселәр ҡаҙнаға ҡараған ҡаҙылма яткылыҡтарының бер өлөшөн эшкәртергә мөмкинлек алған.

Улар, нигеҙҙә, ялланма хеҙмәт ҡулланған. Үҙ эштәренән буш саҡта, рус крәҫтиәндәре менән бер ҡатарҙан, башҡорт һәм татар крәҫтиәндәре лә ялланып мәғдән сығарған, заводтарға үҙ эш көстәре менән ташыған.

Хеҙмәт кешеләрен яллау хаҡы, аҙыҡ-түлектең ҡиммәтләнеүе арҡаһында, 1770 йылдан башлап юғары күтәрелгән. Мәҫәлән, 14 саҡрым араға 100 бот мәғдәнде ташыу өсөн 35—45 тин урынына хәҙер 70—90 тин аҡса түләргә мәжбүр булғандар. Бынан тыш, улар мәжбүри хеҙмәт тә ҡулланғандар. Берг-коллегияның 1771 йылғы указы нигеҙендә, мәғдәнсе промышленниктар ҡарамағына заводтарға беркетелгән крәҫтиәндәр ҙә бирелгән.Ләкин был хәл ваҡытлыса булып, мәжбүри хеҙмәткә йәлеп ителеүсе крәҫтиәндәр һаны 700 кешенән артмаған. Ялланма хеҙмәт төп эш көсө булып иҫәпләнгән.

Заводтарға ташыған мәғдәндең хаҡы ла үҙгәреп тора. 1729—1735 йылдарҙа иретелгән таҙа баҡырҙың ботона 2-шәр һум да 40-ар тин аҡса алғандар. 1735—1755 йылдарҙа ике хаҡ йәшәп килгән: быраулау юлы менән табылған мәғдәнгә элеккесә хаҡ, ә йомшаҡ ҡаҙылма булһа, улар өсөн 2-шәр һум ғына түләгәндәр. 1775 йылдан башлап был хаҡ тағы ла түбәнәйтелә: дары ярҙамында табылған ҡоро мәғдәндән иретелгән таҙа баҡырҙың бото хәҙер 1 һум да 80 тин генә торған. Ә инде еүеш мәғдәндән алынған баҡырҙың ботона 2 һум биргәндәр. Был хаҡ мәғдәнсе промышленниктарҙың эшмәкәрлеген йәйелдереүгә ҡамасаулыҡ иткән, әлбиттә. Шуға күрә улар таҙа баҡырҙың һәр ботона хаҡты 2 һум 40 тингә күтәреүҙе һорап, Берг-коллегияға мөрәжәғәт итәләр. Ләкин унан ыңғай яуап килмәгән.

Ҡуян ауылы мәғдәнселәренән *Тасимовтар* ғаиләһе иҡтисади яҡтан ҡеүәтле, ҙур йоғонтоло булған. Бына улар: *Исмәғил (Исмаил) Тасимов,* уның улы *Исхаҡ (Исак) Исмәғилов, Мөхәмәтрәхим* (русса документтарҙа үҙен *Михаил* тип тә йөрөткән.— *Авт.*) *Тасимов,* уның улы *Захар. Тасимовтарҙың* ата-бабалары бик борондан Пермь яҡтарында үҙ биләмәһен тотҡан. Өфө өйәҙе Уса юлы Ғәйнә олоҫо Ҡуян ауылы *Исмәғил* һәм *Мөхәмәтрәхимдең* атаһы *Тасим Мәмәтов* ошо ергә 1700 йылдың 5 августа Петр I-нән грамота алған. Ул ер Ғәйнә

олоҫона ингән. Был биләмә өсөн *Тасим* һәм уның иптәштәре ҡаҙнаға 276 һуҫар тиреһен яһаҡ итеп түләгән.

Бына ошо ер ҡаҙылма байлыҡтарға ифрат та бай урын булған. Шуға күрә Ҡуян ауылынан йөҙәрләгән кешеләрҙең ҡаҙылмалар белгестәре һәм мәғдәнсе промышленниктар булып китеүе һис тә ғәжәп түгел.

Тарихи әҙәбиәттә *Исмәғил Тасимовтың* исеме күптән билдәле инде. Ул — эре мәғдәнсе һәм Петербургтағы Тау училищеһын асыу эшен башлап ебәреүсе, уға нигеҙ һалыусы. Бик күп йылдар буйы ул үҙенең 10—15 асылған ятҡылығынан күрше баҡыр иретеү заводтарына сеймал ташыҡкан.

1765 йылда 7 башҡорт, татар һәм 9 рус мәғдәнсе промышленник *Исмәғилде* һәм *Яков* (Яҡуп?) *Аҙнағоловты* завод хужаһы *Чернышев* менән бәхәс ваҡытында үҙҙәренең ышаныслы кешеләре итеп һайлаған. Был бәхәстең асылы түбәндәгесә булған. 1757 йылда ҡаҙна граф *Чернышевҡа* ике Йоҡ заводын биргән. Ошоға тиклем мәғдәнсе промышленниктар, ҡаҙна заводтарын ҡаҙылма менән тәьмин итеп (1735—1757 йылдарҙа — 2 млн бот), таҙа баҡырҙың ҡаҙағынан 5-әр тин аҡса алып торһалар, *Чернышев* элекке контракттың шартын үтәүҙән, уларға аҡса түләүҙән баш тарта. *Чернышев* мәғдәнсе промышленниктарҙың 500 мең боттан ашыу мәғдәнен һәм уларҙың бөтә асылған ятҡылыҡтарын тартып алған. Баҫып алынған ятҡылыҡтарҙан Йоҡ заводтарының управляющийы *Санников* башҡа хужалыҡтарҙың да заводтарына сеймал биргән. *Исмәғил Тасимов* һәм *Яков Аҙнағолов Чернышевтан* бөтә асылған ятҡылыҡтарҙы үҙ хужаларына кире ҡайтарып биреүҙе һәм уларға күрһәткән зыянды һис һүҙһеҙ ҡаплауҙы талап иткәндәр.

Бәхәс оҙаҡҡа һуҙылған. Шулай ҙа эшкәртелеүсе ятҡылыҡтар үҙ хужаларына ҡайтарып бирелгән. Урланған мәғдән өсөн аҡса түләүҙән *Чернышев* һаман да баш тартҡан. Был мәсьәлә хатта Сенатта ҡарала һәм *Әбей батшаға* ла барып етә. Дәғүәләшеүсе яҡтарҙың һөйләшеүе тик 1770 йылда ғына килешеүгә килтерә, *Чернышев* мәғдәнсе промышленниктарға 70 мең һум аҡса түләргә мәжбүр ителә. Ошо сумманың өстән бер өлөшө *Исмәғилгә* тейергә тейеш булған... Бына ошоларҙы һөйләй *Тасимов* тураһындағы тарихи материалдар.

Тау промышленносы белгестәре әҙерләү буйынса Рәсәйҙәге берҙән-бер уҡыу йортона нигеҙ һалыусы *Исмәғил Тасимовтың* 1770 йылда Берг-коллегияға яҙған үтенес ҡағыҙында Тау училищеһының зарурлығы тураһында бына нәмәләр яҙыла. *Тасимов*, тау эшен белгән кешеләр әҙерләү өсөн уҡыу йорто булдырыуҙы һорап, уны тотоуға башҡорт промышленниктары заводтарға тапшырған мәғдәндең һәр ботонан килгән «полушка»ның («полушка» тиндең дүрттән бер өлөшө.— *Авт.*) яр-

тыhын биреп торасаҡ, тип белдергән. Был аҡсаны үҙ яҡкылыҡтарынан тапшырылған ҡаҙылмаларҙан ғына түгел, бәлки улар ҡарамағына бирелгән ҡаҙнаныҡылар иҫәбенән дә түләйәсәктәрен *Тасимов* ныҡлап яҙған. Тимәк, Тау училищеһының башҡорт мәғдәнсе промышленниктары иҫәбенә йәшәйәсәге күренеп тора. Тау училищеһын асыуҙы һорап, *Исмәғил* был уҡыу йортонда мәғдәнселек менән шөғөлләнеүселәрҙең һәр береһен һәм уларҙың балаларын үҙ һөнәрҙәре буйынса тейешле белемгә мотлаҡ өйрәтеүҙе ниәт итеп ҡуйған. Берг-коллегияға ҡалһа, *Тасимовтың* үтенес хаты менән танышҡандан һуң, ул һораған уҡыу йортоноң үтә файҙалы һәм бик кәрәк икәнлеген таныған.

Документтар тағы ла бер асыҡлау индерә. *Исмәғил Тасимовтың* уйынса, Тау училищеһы Йоҡ заводтарының эргәһендә асылырға тейеш булған икән. Был турала уның хатында әйтелә. Тау училищеһы өсөн башҡорт мәғдәнселәренән аҡса тотоу тураһында һәм был уҡыу йортоноң *Исмәғил Тасимовтың,* ысынлап та, фәкәт үҙ башланғысы ғына булыуын иҫбат итеп, *Мөхәмәтрәхим Тасимов* түбәндәгеләрҙе яҙған: уның фекеренсә, мәғдәнселәрҙең кәңәшенән тыш, *Исмәғил* Берг-коллегия алдында Йоҡ заводтарына килтерелгән ҡаҙылмаларҙың һәр ботонан килгән аҡсанан ярты полушка түләргә ризалыҡ биргән. Икенсе бер үтенесендә 1771—1793 йылдар өсөн Петербургтағы Тау училищеһына 1 142 һум аҡса тотоуҙарына ризаһыҙлыҡ белдереп, *Мөхәмәтрәхим* былай ти: «Был аҡсаны түләргә мәғдәнсе промышленниктар бер ниндәй ҙә йөкләмә алманы. *Исмәғил Тасимовтың* Берг-коллегияла төҙөгән кондицияларына туҡталһаҡ, ул тик Йоҡ заводтары эргәһендә асылаcаҡ Тау училищеһы өсөн генә аҡса түләүҙе күҙҙә тотҡан. Был заводтар эргәһендә ундай училище асылманы, шуға күрә улар был түләүҙән баш тартасаҡ». Ләкин *Исмәғил Тасимовтың* һораған Тау училищеһы Йоҡ заводтары эргәһендә түгел, ә 1773 йылда Петербургта асыла, бөтәһе 24 уҡыусыға иҫәпләнгән була.

Тау училищеһын тотоу өсөн мәғдәнсе-промышленниктарҙан кәрәк сумманы йыйғанға тиклем, Сенат ҡарары буйынса, 61 мең һум аҡса бүленеп, банкка һалынған. Ана шул сумма процентынан файҙаланған училище.

1771—1789 йылдар эсендә башҡорт мәғдәнселәренән бөтәһе 7 483 һум аҡса алғандан һуң, ҡаҙна училищены ҡарау мәсьәләһен бөтөнләйе менән үҙ өҫтөнә алған, ләкин ҡаҙна файҙаһына аҡса алыу дауам иткән. Тик 1792 йылдан башлап ҡына Сенат башҡорттарҙы аҡса түләүҙән ҡотҡарған.

Был уҡыу йортонда башҡорт балаларының уҡыу-уҡымауҙары тураһында әлегә мәғлүмәттәр юҡ. Әммә шуныһы билдәле:

1830 йылдарҙа башҡорт үҫмерҙәре өсөн Петербургтағы Тау институтында (элекке Тау училищеһы) өс вакансия асыла.

1873 йылда Тау институтының 100 йыллыҡ юбилейын билдәләгән ваҡытта, башҡорт мәғдәнсе промышленнигы *Исмәғил Тасимовты* ла иҫкә алғандар. Шул уҡыу йортон тамамлаусы тау инженеры *П. Н. Алексеев, Тасимовҡа* һоҡланып, бына ниндәй шиғыр яҙған:

> Сто лет тому назад тогдашний горный мир
> Приятно изумил безграмотный башкир.
> Он подал от своих товарищей прощенье,
> Чтоб рудокопам, им, безграмотным,
> как сам,
> Давать указчиков по рудным их делам.

*Тасимовтың* улы *Исхаҡ Исмәғилев* XVIII быуаттың һуңғы сирегенә ҡағылған материалдарҙа йыш ҡына иҫкә алына. Пермь яҡтарында уның унға яҡын эшкәртелеүсе яткылығы булыуы, үҙ иҫәбенә мәғдән ташытыуы хаҡында әйтелә.

1793 йылда *Исхаҡ Исмәғилев* менән *Кирилл Ломакин,* Пермь промышленниктарының ышаныслы кешеләре буларак, Пермь яғындағы заводтарға 1788—1792 йылдарҙа ташылған 1 млн бот мәғдән өсөн ҡаҙнанан өҫтәмә аҡса түләүҙе талап иткәндәр.

Бер туған *Тасимовтарҙың* икенсеһе — *Мөхәмәтрәхим* заманында күренекле мәғдәнсе промышленник булған. XVIII быуаттың аҙағында Ҡуян ауылында йәшәһә лә, ул Пермь ҡалаһының сауҙагәрҙәр гильдияһына яҙылған. Ул бер үк ваҡытта ҡаҙылмалар яткылығын эҙләү, уны табыу һәм заводтарға ташыу эшен дә дауам иткән.

Шулай ҙа *Мөхәмәтрәхимдең* эшмәкәрлеге тулыһынса әле бер кемгә лә билдәле түгел. Мәскәүҙең Үҙәк дәүләт боронғо акттар архивында (ЦГАДА) уның тураһында материалдар һаҡланған. Шулар нигеҙендә *М. Тасимовтың* иң күренекле мәғдәнсе промышленник икәнлеге күренә.

Уның ҡырҡҡа яҡын эшкәртелеүсе яткылығы иҫәпләнгән. 1771—1789 йылдарҙа ул Йоҡ заводтарына 92 762 һумға 2 млн боттан ашыу баҡыр мәғдәне һатҡан. Заводтарға тапшырған йыллыҡ ҡаҙылманың күләме 112 мең ботҡа барып еткән. Был һандың тос икәнлеге башҡаларҙың эшмәкәрлеге менән сағыштырғанда асыҡ күренә. 1773 йылда эре тау промышленнигы *Кирилл Ломакин* Йоҡ заводтарына 39 мең бот мәғдән тапшырып, 1 865 һум аҡса алған. Шул уҡ йылда бөтә промышленниктар бергә Йоҡ заводтарына 400 мең боттан ашыу сеймал һатҡан. Шуның дүрттән бер өлөшө *М. Тасимовҡа* тура килә.

Ҡайһы бер материалдар *Мөхәмәтрәхим Тасимовтың* Урал заводтары эшмәкәрлегендә ярайһы уҡ роль уйнауы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, 1790 йылда ул Йоҡ заводтарына тик һигеҙ йәтҡылыҡтан ғына 85 мең бот, 1791 йылда тик дүртәүҙән генә 99 мең бот руда тапшырған.

Дөйөм алғанда, Ҡуян ауылы тау промышленниктары Урал заводтарын сеймал менән тәьмин итеүгә ҙур көс һалған. *Мөхәмәтрәхим Тасимовтың* 1821 йылда әйткән һүҙҙәренә ҡарағанда, ошо ауылдың мәғдән хужалары Ягошиха, Мотовилиха, Йоҡ заводтарына 1735—1807 йылдар эсендә 12 млн бот баҡыр ҡаҙылмаһы тапшырған. Был иһә йыл һайын ташылған мәғдәндең күләме уртаса 167 мең ботҡа тигеҙ тигән һүҙ.

Башҡорт тау белгестәре һәм мәғдәнсе промышленниктарҙың XVIII быуаттағы эшмәкәрлеге тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр бына шунан ғибәрәт. Уралда тау промышленносының үҫешенә улар ярайһы уҡ ҙур өлөш индергәндәр. Был хәл тыуған яҡ тарихын өйрәнеүселәр иғтибарынан ситтә ҡалырға тейеш түгел.

Ылау йөрөтөүҙә һәм башҡа тау эштәрендә бергә хеҙмәт иткән рус, башҡорт, татар һәм башҡа халыҡтарҙың вәкилдәре араһында бик әкренләп булһа ла бер-береһе менән аңлашыу һәм яҡынайыу процесы барған. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, XVIII быуаттың һуңғы сирегендә Пугачев етәкләгән Крәҫтиәндәр һуғышына бөтә Рәсәйҙең иҙелгән халыҡтары берҙәм күтәрелеп сыҡҡан.

## 2. БАШҠОРТТАРҘЫҢ ПОТАШ ЗАВОДТАРЫ

Башҡортостанда химия промышленносында капиталистик предприятияларҙың барлыҡҡа килеүе, нығыныуы һәм артабан үҫеүе тураһындағы мәсьәлә айырым тикшеренеүселәрҙең иғтибарын ошоға тиклем бик үк үҙенә тартманы. Дөйөм хеҙмәттәрҙә шул завод хужаларының ҡайһы берҙәренең исемдәрен генә атап үтеүҙән ары китмәнеләр.

Ошо мәҡәләлә төрлө сығанаҡтар нигеҙендә поташ заводтарының торошо тураһында һүҙ барасаҡ.

Башҡорттар араһында промышленностың төрлө тармаҡтарының һәм унда ялланма хеҙмәт ҡулланыуҙың таралыу даирәһен өйрәнеү башҡорт йәмғиәтенең үҫеш кимәлен билдәләргә мөмкинлек бирәсәк.

Поташ Рәсәйҙә күптән етештерелгән. Башҡортостанда иһә уны эшләп сығарыу сағыштырмаса һуңыраҡ — XVIII быуаттың аҙағында ғына башланған. Поташ заводтарының бында

нигеҙләнеүенә урмандың киң майҙандарҙы биләүе булышлыҡ иткән.

Ағас йәки үлән көлөн һелтегә әйләндереп, уны парландырып, ҡалдығын көршәктәрҙә ҡыҙҙырып поташ алынған. Ул исем голландтарҙың *potas*, йәғни *pot* — көршәк һәм *as* — көл һүҙҙәренән барлыҡҡа килгән.

Поташты быяланың юғары сифатлы төрҙәрен әҙерләүҙә, буяуҙар яһауҙа, тирене эшкәртеүҙә, буҫтау һуҡҡанда, туҡымаларҙы ағартыуҙа ҡулланғандар. Ҡайнар һыуҙа тотолоп алынған поташ шыйыҡсаһынан яһалған шадрик исемле ҡаты матдә һабын яһауҙа файҙаланылған.

Поташ заводтары өсөн сеймал итеп айырым кешеләрҙән һатып алынған мейес көлө һәм завод хужалары тарафынан ҡортомға алынған урман участкаларында яндырылған ағастан йыйылған көл дә файҙаланылған. Поташ әҙерләү өсөн бик күп ағас исраф ителгән. Был түбәндәге һандарҙан күренә. Мәҫәлән, 1 куб метр ҡарама ни бары 0,76 кг, өйәңке 0,63 кг, йүкә 0,5 кг поташ биргән йәки 1 тонна поташ өсөн 1600 куб метр утын кәрәк булған.

Шуға күрә урмандарҙы һаҡлау тураһында батша хөкүмәте төрлө указдар сығарып торған. Ләкин улар башҡорт аҫаба урмандарына ҡағылмаған. Шул арҡала Башҡортостанда бик күп поташ заводтары барлыҡҡа килгән.

1798—1800 йылдарҙа Ырымбур губернаһында 143 поташ заводы булып, шуларҙың 46-һы Бөрө өйәҙендә, 33-ө Минзәләлә, 32-һе Өфөлә, 14-е Бәләбәйҙә, 11-е Стәрлетамаҡта, 4-е Ырымбурҙа, 3-ө Бөгөлмә өйәҙендә урынлашҡан.

Заводтар ҙур биналарҙа урынлашмаған, ә ағас ҡоролмаларҙа булып, улар тирәһендә бер нисә һарай төҙөлгән. Берееһендә көл һаҡлағандар, икенсеһендә уны эҫе һыу менән эшкәрткәндәр, өсөнсөһөндә шул ҡалдыҡ һелтене ҡыҙҙырғандар һәм поташ алғандар. Бының өсөн ҙур-ҙур тимер һәм суйын ҡаҙандары булған.

Был бәләкәй поташ заводтарында үҙенә күрә төрлө эш башҡарыусы һөнәр кешеләре булған. Шуларҙың берәүҙәре утын һәм көл ташыған, икенселәре көлгә эҫе һыу ҡойоп торған, өсөнсөләре мискәләр эшләгән, тимерселәре, балта оҫталары ла юҡ түгел унда. Шулай итеп, эш барышын төрлө һөнәр кешеләре башҡарған.

Был заводтағы эштәрҙе ялланып эшләүселәр башҡарған. Уларҙың һәр береһендә ни бары 8—15 кеше эшләгән. Шундағы эшселәрҙең 300—400-ө башҡорт булған. Әйтергә кәрәк, XIX быуаттың уртаһына ялланып эшләүселәр араһында алтын йыуыуҙа, буҫтау фабрикаһында, баҡыр иретеү заводтарында 2,5—3 мең башҡорттоң эшләгәне билдәле. Төрлө тармаҡта ял-

ланып эшләүсе башҡорттарҙың һаны 10 меңде уҙып киткән. Был заводтарҙа машина, пар көсө файҙаланылмаған. Поташ етештереү башлыса ҡул көсө хеҙмәтенә нигеҙләнеп, һыу көсө генә ҡулланылғаны күренә. 1850 йылда Бәләбәй өйәҙендә урынлашҡан *Солтановтарҙың* 5 мең бот поташ етештергән Саҡты поташ заводында 2 «ҡыҙҙырыу» мейесе, 6 ҡаҙаны, 12 һыу һаҡлағыс ҙур чандары булған.

Әҙер поташ һәм шадрикты мискәләргә тейәп һыу юлы менән Түбәнге Новгород, Ҡазан һәм Мәскәүгә оҙатҡандар. Уны буҫтау һуғыу фабрикалары һәм һабын ҡайнатыу заводтары хужалары һатып алған. Бынан тыш поташты сит илдәргә лә (Голландия, Англия, Германия) сығарғандар.

Поташ етештереү файҙалы эш һаналған. Башҡорт ғәскәренең 1830 йылдарҙа 2 поташ заводы булып, йылына 100 мең һумға продукция һатҡан. 1831 йылда 5 завод 494 тонна поташ етештергән. Был заводтар 12-се башҡорт кантоны башлығы *ШәһигәрәйНоғайбәҡов,* 11-се башҡорт кантоны башлығы *Мөхәмәтрәхим Солтанов* ҡулында булған. 1844 йылда 16 заводтың 11-е буйынса ошондай мәғлүмәт бар: улар 569 тонна поташ етештереп, хужалары 60 мең һум табыш алған.

XVIII — XIX быуаттар араһында башҡорттар ҡулында 29, 1820 йылдарҙа — 15, 30-сы йылдарҙы — 8, 1840 йылдарҙа — 16, 1850 йылдарҙа 10 поташ заводы булған. Уларҙың һаны кәмеүе урмандарҙы күпләп ҡырыу арҡаһында аҫабаларҙың ҡортом тураһында килешеүҙәрҙе ҡайтанан төҙөүҙән баш тартыуы менән аңлатып булыр ине.

Ғәҙәттә, заводтарҙы хужалар үҙ ерендә төҙөгәндәр. 1798 йылда Өфө өйәҙендә *Миңдиәр Биксурин* исемле билдәле башҡорт һатып алған ерендә шундай завод асҡан. Йорт старшинаһы *Мәүликәй Мөхәмәтов* Стәрлетамаҡ өйәҙендә ҡортомға алған ерҙә поташ заводы төҙөгән. *Шәйхислам Солтанов* үҙ ерендә шул уҡ эште башҡарған. Уның үҙенең 13, һатып алған 60 крепостной крәҫтиәне лә булған.

Поташ заводтарын башҡорттарҙан төрлө ҡатлам кешеләре тотҡан. 1800 йылда завод хужалары араһында 18 ябай башҡорт, 3 указлы мулла, 5 старшина, 3 прапорщик, 2 йөҙ башы, 1 коллежский советник булған. Әкренләп башҡалар ябай башҡорттарҙы үҙ араларынан ҡыҫырыҡлап сығара барғандар. 1840 йылда 16 заводты 3 башҡорт дворяны, 5 старшина, 3 ясауыл, 3 йөҙ башы һәм ни бары 2 ябай башҡорт үҙ ҡулында тотҡан. 10 йылдан һуң заводты тотоусылар араһында уларҙан берәү ҙә ҡалмаған.

Әлбиттә, был предприятиелар капиталистик етештереүгә әле күсмәгән. Ҡыш көндәре улар туҡталып торған. Ә шулай ҙа

улар ялланма хеҙмәт ҡулланған, эшселәр араһында хеҙмәт бүленеше булған: һәр береһе тик бер генә эште башҡарған.

Малсылыҡ һәм игенселек менән шөғөлләнгән башҡорт йәмғиәтендә бәләкәй завод хужалары һәм унда ялланып эшләүселәр барлыҡҡа килә. Был йәмғиәттә элекке социаль ҡатламдар (феодал һәм крәҫтиәндәр) араһында яңыларының (завод хужалары һәм эшселәр) барлыҡҡа килеүе уның ҡапма-ҡаршы мәнфәғәтле көстәргә бүленеүен артабан көсәйткән.



*«Йыр йырлаһам эсем бушайҙыр...»*

*«Йосоп егет» йырынан*

## 1. «ҠЫУАТ ТА ҒЫНА ТИГӘН АЙ СӘСӘН ИР...»

Башҡорт тарихи йырҙарының береһе Әлмөхәмәт Ҡыуатовты маҡтай:

Баҙыян да менән ҡәләмферҙе
Сәйнәп кенә бөткәс тәм ҡала.
Ҡыуат та ғына тигән, ай, сәсән ир
Зирәктәрҙән зирәк һанала.

Йә булмаһа:

Егерме ике йәштә кантон булған
Әлмөхәмәт кеүек ир ҡайҙа?!

Ни өсөн ул халыҡ күңелендә тәрән эҙ ҡалдырған, ниңә ул маҡтауға лайыҡ һуң?

*Әлмөхәмәт Ҡыуатов* үткән быуаттың 50—60-сы йылдарында Башҡортостанда кантон идаралығының юғары белемле, халыҡтың ихтирамын яулаған күренекле административ эшмәкәре, башҡорт халҡының тормошо һәм яҙмышы тураһында мәғрифәтселәргә хас фекер йөрөткән әҙип ул.

*Әлмөхәмәт* атаҡлы *Ҡыуатовтар* нәҫеленән. Был фамилияны XVIII быуаттың икенсе яртыһында Үҫәргән олоҫо старши-

наһы *Кинйәгол улы Ҡыуат* башлаған. Ултырған ауылы — Ҡыуат (хәҙерге Ейәнсура районы.— *Авт.*) Уның 1830 йылдарҙа үлгән улы *Нарынбай* Үҫәргән ырыуынан иң һуңғы аманат (заложник) булған. Аманат ваҡытында ул рус телен һәйбәт үҙләштергән, уҡымышлы мулла һаналған. Фарсы телендә православие пәйғәмбәре Даниил һәм башҡа әүлиәләрҙең күрәҙәлек итеү нигеҙендә уҡымышлы мосолмандар араһында киң таралған «Мальзама» тигән китап төҙөгән. Шуның буйынса күк йөҙө яҡтыртҡыстарының хәрәкәтен күҙәтеп, киләсәкте алдан белеп була, тип уйлаған.

*Нарынбайҙың* ҡустыһы *Буранғол (Боранғол)* 1798—1817 йылдарҙа Ырымбур өйәҙендәге 250 ауылды эсенә алған иң ҙур 9-сы кантон менән идара иткән. *Буранғолдоң* ултырған ауылы уның исемен йөрөтә. (Хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районына ҡарай.— *Авт.*) Буранғол ауылы кантон үҙәге итеп һаналған.

*Буранғол* кантон үҙенең өлкән улы *Ҡаһарман* менән 1806—1807 йылғы француздарға ҡаршы һуғышта атлы полктың командиры булған. Көрәштең иң ауыр ваҡытында полк үҙ теләге менән яуға ингән, ҙур батырлыҡ күрһәткән. Дон казагы *Перт Чуйкевичтың* 1810 йылда сыҡҡан «Пруссияла казактарҙың батырлығы» тигән китабында әйтелгәнсә, генерал *Платов* баш командующийға биргән рапортында ике башҡорт полкының командирҙары поручик *Буранғол Ҡыуатов,* подпоручик *Ҡаһарман,* йөҙ баштары *Ҡарағужа Ҡәҙерғолов* менән *Айсыуаҡ Үҙәнбаевтарҙың* батырлығын билдәләй, рәхмәт белдерә.

*Буранғол* майор дәрәжәһенә етеп, кантонда хеҙмәтен тамамлап, 1819 йылда 8 улы менән нәҫелле дворян исеме алыуға ирешә. Уның рус дворяндәре кеүек үҙ имениеһы һәм крепостной крәҫтиәндәре булмай. Был дәрәжәгә ул штаб-офицер булараҡ ҡына ирешә. Үҙе отставкаға сыҡҡас, кантон менән идара итеү улы *Ҡаһарманға* күскән. 1817—1832 йылдарҙа *Ҡаһарман;* 1832—1841 йылдарҙа *Буранғолдоң* икенсе улы *Таһир* кантон булып торғандар.

Уҡымышлы кеше булараҡ, *Ҡаһарман,* профессор *Әхнәф Харисов* раҫлауынса, үҙ заманындағы суфый шағирҙар менән танышып-аралашып йәшәгән. Тағы ла шуны өҫтәргә мөмкин: 300 башҡорт малайын Петербург, Мәскәү, Ҡазан ҡалаларында хужалыҡ һәм хәрби хеҙмәт өсөн кәрәк булған һөнәрҙәргә өйрәтеүҙе ойоштороуҙа ла *Ҡаһармандың* булышлығы бар. Уның икенсе ҡустыһы *Әхмәт* 1837 йылда шул балаларҙың бер өлөшөн Ҡазанға алып барған. Шуларҙың араһында *Әхмәттең* улы *Әлмөхәмәт* тә була.

Артабан Ҡыуатовтар тураһында һөйләгәндә, иғтибарға лайыҡ тағы бер нәмәгә туҡталып китәйек. Уҙған быуат аҙағында русса-башҡортса һүҙлек баҫылған. Һүҙлектең авторы *В. В. Катаринскийға Мөхәмәтғәли Ҡыуатов* ҙур ярҙам күрһәткән.

*Әлмөхәмәт Ҡыуатов,* әйтеүебеҙсә, 1827 йылда *Буранғолдоң* улы йөҙ башы *Әхмәт Ҡыуатов* ғаиләһендә тыуған. 1838—1844 йылдарҙа ул Ҡазан ҡалаһындағы 1-се гимназияла уҡый. *Әлмөхәмәт* гимназияны уңышлы тамамлағас, университеттың медицина факультетына уҡырға инә. Бер аҙҙан ул философия факультетының Көнсығыш телдәре бүлегенә күсә. 1844—1848 йылдарҙа ул, университетта уҡып, бик күп телдәр өйрәнеп сыға. Уҡыуҙы һәйбәт тамамлағанға күрә, университет Советы уға «кандидатлыҡ дәрәжәһенә диссертация яҙырға мөмкинлек биргән». 1848 йылдың 17 декабрендә был Совет *Ҡыуатовты* филология (словестность) буйынса кандидат дәрәжәһенә лайыҡ тип таба. Был ғилми дәрәжәне мәғариф министры раҫлаһын өсөн, *Ҡыуатовтың* социаль сығышы һәм тыуған йылы тураһындағы ҡағыҙҙар талап иткәндәр. Ул документтар Петербургка 1849 йылдың май айында ғына барып еткән һәм сентябрь айында *Әлмөхәмәт* шул дәрәжәгә раҫланған һәм 563-сө һанлы кандидатлыҡ дипломын алған. (Уны типографияла баҫтырыу өсөн Ҡыуатовтан 3 һум көмөш аҡса ла талап иткәндәр.— *Авт.*)

Хәрби сословие иҫәбенә уҡыған *Ҡыуатов* Башҡортостанға ҡайтып, башҡорт-мишәр ғәскәрендә хеҙмәт итергә тейеш булған. 1849 йылдың башында *Әлмөхәмәт Ҡыуатов* хәрби губернатор эргәһендә тәржемәсе итеп тәғәйенләнгән. 1850—1853 йылдарҙа ул Верхнеуральск өйәҙендә урынлашҡан 7-се башҡорт кантонында тәүҙә башлыҡ ярҙамсыһы, һуңынан уның башлығы, 1853—1855 йылдарҙа Ырымбур өйәҙендәге 10-сы кантонда кантон ярҙамсыһы (ә 1855 йылда хәрби сословиеға типтәрҙәр күсерелгәндән һуң кантондар һаны 28-гә еткерелә), 1856—1858 йылдарҙа Ырымбур өйәҙендәге 3-сө, 1858—1861 йылдарҙа Екатеринбург һәм Шадринск өйәҙҙәрендәге 11-се кантонда башлыҡ, 1863—1865 йылдарҙа кантондарҙың һаны 11-гә ҡалдырылғас, 1-се Ырымбур кантонында кантон ярҙамсыһы булып хеҙмәт иткән. Был ваҡытта ул ясауыл (ротмистр) званиеһы алған. Формуляр исемлектә яҙылған *Ҡыуатовтың* был вазифалары уның кантон осоронда күренекле административ эшмәкәр икәнен күрһәтә.

60-сы йылдар башында, крепостной хоҡуҡ юҡ ителгән осорҙа, башҡорттарҙы хәрби сословиенан киренән гражданлыҡ хәленә күсереү эҙерләнә. 70 йылға яҡын өҙлөкһөҙ хәрби хеҙмәт башҡорттарҙың хужалығын бөлдөргән. Артабан уларҙы нимә

көтә, ниндәй яҙмыш — бына был һорауҙар ҡайһы бер кантон башлыҡтарын уйланырға мәжбүр иткән. Шулар араһында үҙенең тәрән фекерҙәре менән *Әлмөхәмәт Ҡыуатов* айырылып тора.

*Әлмөхәмәт Ҡыуатов* үҙ халҡының үткәне һәм бөгөнгөһө менән ҡыҙыҡһынып ҡына ҡалмай, ә уның батшалыҡ осорондағы ауыр хәлен һәм яҙмышын үҙенсә еңеләйтеү юлын да эҙләй. Был турала 1867 йылдың 14 мартында уның тарафынан яҙылған һәм архивта һаҡланған «Башҡорт халҡының ярлыланыу сәбәптәре» тип аталған 17 битлек яҙмаларында әйтелә. Был яҙмалар Ырымбур хәрби губернаторы канцелярияһының идара итеүсеһе *А. Д. Ходаковскийға* тапшырылған. Башҡорт халҡының иҫ киткес бөлгөнлөккә төшөү сәбәптәрен асып биреү, *Ҡыуатов* фекеренсә, халыҡ менән идара итеүселәргә уның көнкүрешен яҡшыртыуға, бәлки, мөмкинселек бирер. Үҙ халҡының ауыр хәлен, кешенән ишетеп, китаптан уҡып түгел, ә уның улы булараҡ, ул халыҡ менән идара итеүҙә ҡатнашҡан өсөн яҡшы белгәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып яҙа *Ҡыуатов.*

Башҡорт халҡының иҡтисади яҡтан ауыр хәлгә ҡалыуының иң беренсе сәбәбен *Ҡыуатов* халыҡтың хәрби хеҙмәттә һәм хәрби сословиела бик оҙаҡ ваҡыт булыуына бәйләй. Был хәрби йөкләмә меңәрләгән ғаиләләрҙең төп байлығы булған малсылыҡтың бөтөнләйгә юҡҡа сығыуына сәбәпсе булды һәм халыҡты ас-яланғас итте. Был хәл бигерәк тә Урал аръяғында йәшәгән һәм Ырымбур хәрби сиген һаҡлаусы башҡорттарға ҡағылған, сөнки уларҙың хужалығы бөлгән. Ярым күсмә тормош алып барған башҡорттар хәҙер «малсы ла, игенсе лә түгел» икәнен *Ҡыуатов* аңлаған. Кисәге малсының бөлгөнлөккә төшөүе һөҙөмтәһендә, уның игенселеккә лә күсеү мөмкинселеге булмаған. Халыҡтың ошондай ауыр хәл кисереүенә игенселектең етерлек дәрәжәлә үҫешмәүе лә булышлыҡ иткәндер, тип уйлай яҙмаларҙың авторы. Һөҙөмтәлә башҡорттар башҡа ҡайһы бер халыҡтарҙан бөтә яҡтан да тиерлек артта ҡалған. Элекке дәрәжәһенә һәм хәленә уны күтәрергә хәҙер инде өмөт юҡ тиерлек. *Ҡыуатов* әйтмешләй, тиҙ аҙымдар менән халыҡтың пролетариат синыфына юл тотоуы уның менән идара итеүселәр араһынан берәүҙең дә иғтибарын үҙенә тартмаған.

Әгәр башҡорттар ултыраҡ тормошҡа күсһә, йәнәш йәшәгән башҡа халыҡтарҙан игенселек һөнәре буйынса үрнәк алһа, тормошҡа етерлек дәрәжәлә ижтиһад күрһәтһә, *Ҡыуатов* фекеренсә, улар күптән үк, бай булмаһалар ҙа, бик үк ярлы ла булмаҫтар ине. Илгә үтә ныҡ файҙаһы тейгән күп һанлы был халыҡ хөкүмәт тарафынан матди ярҙам алһа, уға ниндәйҙер өҫтөнлөктәр бирелһә, йә ташланмалар яһалһа, хәҙерге хәлгә ҡалмаҫ ине, тип раҫлай ул.

Мохтаж халыкка ярҙам күрһәтеү саралар системаһы — попечительство булдырып та, эш бүлмәһендә ултырып, кағыҙҙар аша ғына ғәмәлгә ашырырға маташыу ҙа бер ниндәй ҙә файҙалы һөҙөмтә бирмәгән. Бындай сараға халык хатта теләктәшлек тә белдермәгән, сөнки башкорт-мишәр ғәскәре командующийы, попечителдәр һәм кантон башлыктарының баш-баштаклығын халык үҙ елкәһендә татып, уларға ышанмаған. Шуға күрә, ярҙам күрһәтеү сараларының кайһы берҙәре файҙалы булһа ла, халык уларҙы аңларға ла теләмәгән һәм кире каккан. «Һөҙөмтәлә,— ти Кыуатов,— уның көнкүреше һәм ауыр тормошо үҙгәрешһеҙ кала килә. Ул ғына ла түгел, башкорттар үҙенең элекке рухын һәм кыйыу холок-фиғелен юғалтты ла инде». Кыуатов фекеренсә, рух төшөнкөлөгөнә бирелгән сакта, наҙанлыкка каршы көрәште көсәйтеү кәрәк. Ләкин уның урынына, властарҙа наҙанлыкты һаклау киреһенсә яклау тапты. Чиновниктарҙың баш-баштаклығы аркаһында, халыкты, уның кешелек сифатын һанға һукмау, уны ихтирам итмәү башкорттарҙа үҙаң тойғоһон һүндерә. Бына шул сак инде дин тарафынан якланып килгән йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә кешеләр ныклы эйәреүен дауам итә.

Башкорттарҙың ярлыланыуына мосолмандар араһында йыш таралған иҫке йола — күп бисә алыу — булышлык иткәнлеген дә *Кыуатов* әйтеп үтә. Сөнки бер нисә тапкыр калым түләү хәлле кешене лә бөлдөрөүе *Кыуатовка* билдәле. Бында дөрөҫлөк бар, әлбиттә. Ләкин ике һәм унан да күберәк катын алыу йолаһы тик хәлле кешеләр араһында таралған, тип уйларға кәрәк. Шуға күрә был йола киң таралмаған. Шулай ҙа *Кыуатов* бының зыянлығын аңлаған. Үҙебеҙҙән өҫтәп шуны ла әйтергә мөмкин: 1816 йылда Бәләбәй, Бөрө, Минзәлә, Уса, Өфө өйәҙҙәрендә йәшәгән 7 530 ғаиләнең 10 проценты ике-дүрт катынлы булған ғаиләләргә тура килгән. Был ултыраклы башкорттарҙа. Ә Ырымбур, Стәрлетамак, Троицк өйәҙҙәрендә йәшәгән һәм ярым күсмә тормош алып барған башкорттарҙың 1 469 ғаиләһенән 20 проценты күп бисәле ғаиләгә караған. Тимәк, был йола көньяк башкорттарында сағыштырмаса йышырак осраған.

*Кыуатов* уйынса, башкорттарҙың үҫешенә, уларға аң-белем биреүгә кәртә булып торған наҙанлык һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙең тупаҫлығы ана шул яман йоланың йәшәүенә булышлык иткән. Бында *Әлмөхәмәт Кыуатов* аң-белемгә эйә булыуҙың халыктың тормошонда ниндәй ҙур роль уйнағанын әйтергә теләгән дә инде. Әлбиттә, башка мәғрифәтселәр кеүек, *Кыуатов* та социаль һәм сәйәси короллошто үҙгәртеү юлдарын аңлау дәрәжәһенә етмәгән. Әммә халыктың үҫеш юлында белемгә өндәү ярайһы ук ыңғай күренеш булып, был фекерҙе ул, *Мир-*

*салих Биксуриндан* ҡала, *Аҡмулла* һәм *Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтан* бик күп алда әйткән.

Артабан фекерен дауам итеп, *Ә. Ҡыуатов* былай тигән: әгәр ҙә, үрҙә әйтелгән хәл-әхүәлдәр арҡаһында, ошо ғөрөф-ғәҙәттәрҙең тупаҫлығы, аң үҫешендә урында тапанып тороу булмаһа, төрлө дини йолаларҙы үҙе үк юҡ итеп, башҡа халыҡтар тарихында башҡорттар ярайһы уҡ урынды биләр ине. Күрәһегеҙ, халыҡтың бына тигән улдары мир яҙмышы менән һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынған.

Зыянлы йолаларҙан арыныу үрнәге итеп *Ҡыуатов* Испания ғәрәптәренең тарихына ҡағылышлы юлдар ҙа килтерә, үҙенең фекерен иҫбатлау өсөн IX быуатта йәшәгән Испаниялағы аң-белемле һәм уҡымышлы ғәрәптәрҙе хәтеренә төшөрә. Юғары ҡатлам ғәрәптәрҙең күпселеге бер ҡатынлы ғаилә ҡорған. Әгәр тәүге ҡатыны оҙаҡ сирләһә, йә бала тапмаһа, йә иһә ҡартайһа, икенсе ҡатынды улар тап шул саҡта ғына алған. Бына ошондай ғәрәп ғаиләһен *Ҡыуатов* аң-белемгә эйә булыу йоғонтоһо тип таный ҙа инде.

Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәрҙең, башҡорттарҙың үҫешенә, улар араһында аң-белемдең таралыуына ислам дине һәм Ҡөрьән кәртә булған, тип раҫлауын *Ҡыуатов* уртаҡлашмай. Ни өсөн башҡалар фекерен *Ҡыуатов* кире ҡаға? Сөнки ғәрәп телендә яҙылған Ҡөрьәнде уҡымышлы кешеләрҙән һәм мәғлүмәтле муллаларҙан башҡа берәү ҙә аңламаған, шуның өсөн башҡорттар, мосолман булып һаналһа ла, Ҡөрьәндең һәм шәриғәттең ҡағиҙәләрен йыш ҡына үтәмәгән, уларҙың күбеһе ана шул талап ителгән ҡағиҙәләрҙән баш тартып, муллаларын да тыңламаған, көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыр өсөн мәсеткә лә йөрөмәгән, хатта ураҙаны ла тотмаған. Ә шулай ҙа, үҙебеҙҙән өҫтәп, шуны әйтәйек: фанатик мосолман булмаған башҡорттарҙың йәмғиәтендә дин һис һүҙһеҙ ыңғай роль уйнаған.

Йыйып әйткәндә, халыҡ араһында аң-белем таралһа, уҡымышлы кешеләр ишәйһә, төрлө яман ғәҙәттәрҙән халыҡ үҙе үк арына алыр ине, тигән фекер *Ҡыуатовтың* яҙмаларында ярылып ята. Халыҡ хужалығының бөлөүенә кантон идаралығы, хәрби хеҙмәттең өҙлөкһөҙлөгө, попечитель сараларының етерлек дәрәжәлә булмауы, намыҫһыҙ түрәләрҙең «эшмәкәрлеге», халыҡтың холоҡ-фиғелен һәм йолаларын аңламау — былар бөтәһе лә бергә булышлыҡ иткән. Был фекерҙәр мәғрифәтселеккә хас, уға ауаздаш уйҙар. Шуға күрә, *Әлмөхәмәт Ҡыуатов* халыҡтың мәғрифәтсеһе булып эш иткән. Әгәр ул идара иткән кантонда иң беренселәрҙән асылған рус-башҡорт мәктәптәрен хәтергә төшөрһәк, *Ҡыуатовтың* мәғрифәтселек фекерҙәре, эшмәкәрлеге ниғына төшә һымаҡ.

Бына шуның өсөн дә *Ҡыуатовты* халыҡ маҡтап йырлаған.

## 2. «БУРАНБАЙҘЫҢ ЯҘҒАН ХАТЫН УҠЫП...»

Башҡорт халҡының тәрән мәғәнәле, ғәжәп киң диапазонлы һәм иң күркәм йырҙарының береһе — «Буранбай».

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ
Буранбайҙың яҙған хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары...

Был тетрәткес йыр тураһында халыҡ араһында бик күп легендалар йәшәй. 1930 йылда *А. Ромм* рус телендә уның легендаһын яҙа. Музыка белгестәре *С. Рыбаков, Л. Лебединский* һәм башҡалар ҙа йырҙы яҙып алған. Ҡурайсы һәм йырсы *Ғата Сөләймәнов,* уҡытыусы *Ғ. Бейешевтар* ҙа матбуғатта үҙ һүҙҙәрен әйтте. Бынан тыш, *Буранбайҙың* Алыҫ Көнсығышта үлеп ҡалыуы тураһында ла хәбәр булды. Ҡыҫҡаһы, башҡорт халыҡ йырҙарын һәм музыкаһын өйрәнеүселәр һәм тикшеренеүселәр Буранбайға иғтибар итмәйенсә үтә алмай. Әйтеп үтелгән авторҙарҙың сығыштарында нигеҙҙә дөрөҫлөк бар, әлбиттә. Атап әйткәндә, Буранбай ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы сығыусы һәм дөрөҫлөк өсөн яфа сигеүсе итеп тасуирлана.

Мин түбәндә уҡыусыларға архив материалдары хаҡында һөйләйәсәкмен.

Билдәле булыуынса, 1798—1865 йылдарҙа Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһы була, башҡорт һәм мишәр халҡы хәрби сословиеға күсерелә. Һау-сәләмәт казак 17—18 йәштән 50 йәшкә тиклем алты-һигеҙ тапҡыр алтышар ай буйы Ырымбур һыҙатында Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиген һаҡлаған, поход һәм һуғыштарҙа ҡатнашҡан.

*Буранбай* тураһында 1967 йылда «Ленинсы» гәзитенә бер мәҡәлә яҙғайным. Ләкин уның йәшәгән ауылы хәҙерге Буранбай тип яңылыш күрһәткәнбеҙ. Шулай ҙа уның шул ауылда тыуып үҫеүен һәм үҙ исеме менән яңы ауылға нигеҙ һалыуын тарих материалдары раҫлай. Ул осорҙан бирле яңы материалдар ҙа табылды.

Легендалар *Буранбайҙың* писарь, йә старшина, йә кантон икәнлеге; *Ибраһим* исемле кешенең кантон булыуы, йәштәрҙең 20-гә еткәндәрен исемлеккә теркәүе һәм шул ваҡытта ҡайһы бер яңылышлыҡ ебәреүе, шуның өсөн Буранбайҙың ҡулға алыныуы һәм төрмәнән ҡасыуы хаҡында һөйләй. Бында дөрөҫлөк барлығын суд материалдары иҫбатлай. Әлбиттә, легендаларҙа дөрөҫлөктән ситкә тайпылыуҙар ҙа һиҙелә.

*Буранбай* яҙмышы тураһында.

1812 йылдың февралендә кантон етәкселәре *Аҡкол Биктимеров,* дистанция башлығы (хәрби отрядты хеҙмәт урынына алып барыусы һәм алып ҡайтыусы.— *Авт.) Буранбай Ҡотос* улы *Һөйөндөков, Юлбарыҫ Бикбулатов,* йорт старшинаһы *Ибраһим Айсыуаҡов* хөкөмгә тарттырыла. 1812 йылғы Ватан һуғышы башланыу сәбәпле, уларҙың эше 1816—1820 йылдарға тиклем һуҙыла.

Суд Сыңғыҙ ауылы башҡорт казагы *Сырлыбай Остыровтың* хәрби губернатор *Г. С. Волконскийға* биргән ялыуынан башлана. Унда кантон башлығы поручик *Аҡкол Биктимеровтың* кантон халҡынан үҙ файҙаһына дүрт-биш тапҡыр аҡса йыйыуы һәм башҡа һалымдар менән йәберләүе бик дөрөҫ әйтелгән.

1811 йылдың 15 апрелендә губернатор приказы буйынса 5-сы кантондан резерв команда төҙөлгән. Ул Сибай ауылынан 40 саҡрымдағы Ҡарағайлы Үҙәк тигән ерҙә йыйылған. Дистанция етәксеһе итеп *Буранбай Ҡотосов* (атаһының исеме фамилияға күсә.— *Авт.)* билдәләнә. Ул тархан ғаиләһенән сыҡҡан кеше була.

Ошо хәлдән *Биктимеровтың* Ырымбурҙағы таныштары отставкалағы прапорщик алпауыт *Соколов* үҙ мәнфәғәтендә файҙаланмаҡ булып, губернатор канцелярияһынан 1000 кешелек команданы таратыу тураһындағы бойороҡ хаҡында алдан белеп ҡала һәм кантон башлығына «курьер» итеп үҙ крәҫтиәне *Михайловты* ебәрә. *Соколов* үҙен был команданы таратыу сәбәбен юллаусы (ходатай) итеп күрһәтмәксе, хатта «хеҙмәтенә» хаҡ алмаҡсы. Әйткәндәй, *Биктимеровтың* уға бирәсәге лә булған. Ләкин *Михайлов* килеүгә команда таратылған булған, сөнки был турала бойороҡ почта аша алынған, «курьер» иһә һуңлап килгән.

*Михайлов, Буранбай Ҡотосовты* күреп: «Әгәр ҙә һәр казактан 6 һум аҡса йыйһағыҙ, *Соколов* команданы походтан ҡотҡарыу сараһын күрәсәк»,— тигән. *Буранбай* был мәсьәләне үҙе хәл итмәгән, ә *Биктимеровҡа* мөрәжәғәт иткән. Ул иһә аҡса йыйырға бойороҡ биргән. Бөтә йорт старшиналарына хәбәр ителә, тиҙ арала команда әүәлге урынға яңынан саҡырыла. 6 мең һум аҡса йыйыла. Был аҡса *Михайлов* аша *Соколовҡа* ебәрелә. Ләкин *Михайлов* ошо аҡсаның 2 мең һумы *Ҡотосов* менән *Юлбарыҫ Бикбулатовта* ҡалғанлығын әйткән. Суд барышында быларҙың өсөһөн дә күҙләштереп яуап алғас, курьерҙың һүҙе дөрөҫләнмәй.

1822 йылдың 4 декабрендә ҡаҙаҡ далаларында ҡасып йөрөгәнендә тотолған *Буранбайҙан* һорау алғанда, ул «ғәйепһеҙ нужа сигеүен» яҙа. Шулай итеп, ғәйепһеҙ көйгә *Буранбай* ғәйепле булып ҡала. Ул ғына ла түгел, походҡа билдәләнгән 500 ке-

шенең (башлығы *Юлбарыҫ Бикбулатов*) һәр береһенән 16-шар һум аҡса йыйылған була. Был аҡса 1811 йылғы королоҡ арҡаһында аттар йонсоу сәбәпле, команданы походтан ҡотҡарыуҙы юллау өсөн билдәләнә. Йорт старшиналары, ошо эште үтәү өсөн үҙҙәренең араһынан ышаныс кешеһе (поверенный) итеп йорт старшинаһы *Ибраһим Айсыуаҡовты* һайлап, йыйылған аҡсаның бер өлөшөн уға тапшыра. Ошо аҡсаны, үрҙә әйтелгәнсә, Ырымбур түрәләренә биреп, команданы походтан ҡотҡарырға ниәтләгәндәр. Ләкин был барып сыҡмай.

1816 йыл Ырымбур суд палатаһы төп ғәйеплеләр тип *Соколов* менән *Биктимеровты* билдәләй, ә *Ҡотосов* менән *Бикбулатовты,* законһыҙ һалым йыйыуға ризалыҡ биреүҙә ғәйепләп, 2 мең һум аҡсаны *Биктимеров, Ҡотосов* һәм *Бикбулатовтан,* ә 4 меңде *Соколовтан* түләтергә ҡарар сығара, 500 кешенән торған команданан йыйылған аҡсаны йорт старшиналарынан түләтеп, халыҡҡа кире ҡайтарып биреү ҙә ҡарала.

Суд тикшереүе барһа ла, ғәйеп тағылһа ла, улар хеҙмәттәре буйынса артабан үрләтелә. *Буранбай* (заманына күрә уҡымышлы кеше булған, русса һәм төркисә уҡый-яҙа белгән) 1815 йылда йорт старшинаһы итеп тәғәйенләнә. Был йорт 5-се һанлы булып, уға хәҙерге Баймаҡ районы ауылдары Бәхтигәрәй (Урғаҙа буйы), Сындәүләт (Таналыҡ буйы), Кинйәбулат (Һаҡмар буйы), Буранбай (Таналыҡ буйы), Эткол (Ҡышлауар буйы), Ғәҙелбай (Батҡаҡлы буйы) ингән. *Ибраһим Айсыуаҡов* үҙе Сибайҙан, ул шул тирәләге бер нисә ауылдың 1807 йылдан бирле йорт старшинаһы була. Ике көмөш миҙал менән наградланған *Юлбарыҫ Бикбулатов* (1812—1814 йылдарҙа Ватан һуғышында күп батырлыҡтар күрһәткән) ошо уҡ ерҙә төҙөлгән 14-се башҡорт полкының командиры вазифаһын үтәгән.

Хәрби губернатор суд ҡарары менән риза булған, ләкин губерна прокуроры *Веригин* һорауы буйынса был эш 1816—1820 йылдарҙа Идара итеүсе сенатта ҡарала.

1820 йылдың 3 майында был мәсьәлә буйынса сенатта батша раҫлаған указ сыға. Был хөкөм ҡарары халыҡтан законһыҙ аҡса йыйыуға бойороҡ (*Биктимеров*) һәм уға ризалыҡ (*Буранбай, Ибраһим, Юлбарыҫ*) биргән өсөн уларҙың дүртеһен дә вазифаларынан мәхрүм итеп, һөргөнгә ебәреүҙе билдәләй. Тимәк, *Биктимеровтың* бойороғо буйынса йыйылған аҡсанан файҙаланмаған кешеләр ҙә язаға тарттырыла. Был *Биктимеровҡа* ҡарата, әлбиттә, ғәҙел яза була, сөнки ул ысынында ла яуыз кантон булған: ришүәт бирмәгән кешеләрҙе төрлөсә кәмһеткән, туҡмаған; хатта һыуға ла батырҡан. Яуызлығы уның 22 йыл дауам иткән.

1820 йылдың июнь айы. Кантон үҙәге Сибай ауылы кешеләре йыйылышҡа килә. Унда бөтә тирә-яҡ ауыл кешеләре лә ҡатнаша. Бына ошонда Верхнеуральск заседателе дворян *Андреев* менән кантондың яңы башлығы *Абдрахман Биктимеров* (*Аҡҡолдоң улы*) һөргөнгә ебәрелеүселәрҙең дәрәжә грамоталарын тартып ала.

16 июлдә *Буранбай* (53 йәш) менән *Ибраһим* (42 йәш) Верхнеуральскиға оҙатыла. *Аҡҡол Биктимеров* бик ҡарт (82 йәш) һәм ауырыу булған, шуға күрә ул ваҡытлыса Сибайҙа ҡалдырылған. *Юлбарыҫ Бикбулатов* ҡасҡан. 20-се йылдар уртаһында кантон башлығы *Абдрахман*, атаһын Себергә ебәрмәү сараһын күреп, Сенатҡа мөрәжәғәт итә һәм *Аҡҡолдо*, бик оло һәм ауырыу булыуын иҫәпкә алып, һөргөндән ҡотҡаралар. Ул 1828 йылда үлә.

Шулай итеп, *Аҡҡол* ҡылған боҙоҡ эш *Буранбай* менән *Ибраһимға* япһарыла.

*Буранбай* менән *Ибраһим* 16—24 июлдәрҙә ҡалала отставкалағы унтер-офицер *Егор Глазуновтың* квартирына урынлаштырыла. Уларҙы дүрт һалдат һаҡлай. *Буранбай*, аяғым һыҙлай тип, бер нисә көн хәрәкәтһеҙ ята. Шулай итеп ул һаҡта торған һалдаттарҙың һиҙгерлеген кәметә һәм *Ибраһим* менән 24 июль төнөндә ҡаса. Аҙаҡ *Буранбай* ҡасыуын икенсе сәбәптәр менән аңлатырға тырыша. Ләкин ул аңлы рәүештә, Сенат хөкөмөнөң ғәҙелһеҙлеген тойоп, Себергә һөрөлөүҙән ҡаса. Шуны ла әйтергә кәрәк: *Буранбайҙы*, улы *Зөлҡәрнәйҙең* яҙыуынса, Верхнеуральск эргәһендә ҡаҙаҡтар алып киткән. Был дөрөҫлөккә ҡаршы килә, сөнки июлдән алып декабрь аҙағына тиклем ул Башҡортостанда йәшеренеп йәшәгән.

*Буранбай* менән *Ибраһимдың* паспорты ла була. Һаҡмар буйында ҡасып йөрөгәндә йүнләп алалар. *Күсәбай Ҡилмәков* һәм *Мөсәлим Йәнбирҙин* үҙҙәренә тип, алдан һөйләшеү буйынса, Верхнеуральскиҙа ике паспорт алып, *Буранбай* менән *Ибраһимға* биргән. Был ике башҡорттоң һүҙенә ҡарағанда, *Буранбай* менән *Ибраһим* 9-сы кантонға ҡараған (башлығы *Ҡаһарман Буранғол* улы *Ҡыуатов*) Кинель һәм Үҙән йылғалары буйына киткән. *Буранбайҙың* ошо яҡта үҙен *Ялан Йәркәй* тип атауы ла мөмкин.

Ике йыл буйы ул ҡаҙаҡ далаларын гиҙә. Чиклин һәм башҡа ырыуҙар араһында йөрөй. (Ибраһим тураһында мәғлүмәт юҡ.— *Авт.*) *Буранбай* үҙенең кем икәнлеген һәм ҡайғыһын Чиклин ырыуынан сыҡҡан *Әбделфаяз* солтан *Юлбарисовҡа* белдергән. Үҙенең ғәйепһеҙ көйгә яфа сигеүен һөйләгәс, солтан уға губернаторға еткер, тип хат биргән. *Буранбай* ҡулында *Аранғызынан* да (солтан ҡатынынан.— *Авт.*) губернаторға тигән хат булған. Бик күп яфа күргән һәм ауырыу *Бу-*

*ранбай*, губернаторға барып, үҙен ярлыҡауҙы һорар өсөн ҡаҙаҡ далаларынан Ырымбурға йүнәлә. 1822 йылдың декабрендә Илек нығытмаһы аша тоҙға килгән ылау менән Ырымбурға китергә уйлай. Әммә таможня заставаһында *Буранбай* танылаһәм комендантҡа тапшырыла. *Буранбай* ҡулындағы ике хат та комендант ҡулына эләгә һәм юғала. *Буранбай* Ырымбурға оҙатыла, һаулығы бик ныҡ ҡаҡшағанлыҡтан, госпиталгә урынлаштырыла, ләкин губернатор бойороғо буйынса унан сығарылып, ҡала полицияһының күҙәтеүенә тапшырыла.

Башы һыҙлау арҡаһында *Буранбайҙың* күҙе һуҡырая бара, ҡылый була. Шуға күрә доктор Ырымбур комендантына *Буранбайҙы* Себергә ебәреү мөмкин түгеллеген белдерә.

1823 йылдың 19 ғинуар көнө *Буранбайҙың* улы *Зөлҡәрнәй* хәрби губернатор *П. К. Эссенға* мөрәжәғәт итә. Атаһының Ырымбур төрмәһендә ултырыуын белгәс, ашатып-эсереп тәрбиәләү өсөн, бер аҙ һаулығы нығынғансы өйгә алып ҡайтыуҙы һәм аҙаҡтан, уға хәл ингәс, кире Ырымбурға алып килеп тапшырыуҙы үҙ өҫтөнә алып, үтенес яҙа. Яуап нисек булғандыр, ул турала мәғлүмәт юҡ.

1834 йылғы VIII ревизия ҡағыҙҙарында Таналыҡ буйындағы Буранбай ауылында 38 йорт-ғаилә күрһәтелеп, шунда беренсе булып теркәлгән ғаиләнең башы тураһында ошолай тип яҙылған: «Элекке йорт старшинаһы 14-се класлы Буранбай Ҡотосов енәйәте өсөн 1820 йыл Себергә һөрөлгән». Өлкән улы 4-се һанлы ғаиләне тәшкил иткән. Ул — *Зөлҡәрнәй Буранбаев,* 1831 йылда 41 йәшендә вафат булған. Ҡустыһы зауряд-йөҙ башы *Нәүширүән* Кинйәбулат (хәҙерге Буранбай) ауылында йәшәгән һәм шул тирә ауылдарында йорт старшинаһы булған.

Ә «Буранбай бәйете» Буранбайҙың биографияһын ифрат дөрөҫ сағылдыра. Был бәйетте 1958 йылда Буранбай (элекке Кинйәбулат) ауылында *Абдулла Бәхтегәрәй* улы *Буранбаевтан* диалектолог *С. Ф. Миржанова* яҙып алған. Ул 1981 йылда сыҡҡан «Башҡорт халыҡ ижады»ның «Бәйеттәр» китабында баҫылған. Суд ойошторолған йыл ғына унда дөрөҫ күрһәтелмәгән.

Тарих мең дә һигеҙ
йөҙ ҙә
Егерменсе йылында...

*Аҡҡол* кантон енәйәте өсөн ғәйепһеҙ икәүҙең генә яуап биреүе лә күренә унда:

Буранбай менән Ибраһим
Бастилинға (поселение.— *Авт.*)
китерҙәй ирме ни?

Үҙ ғаиләһенең яҙмышы ла борсоған *Буранбайҙы*:

Хәләл ефетем, Тутыйғошом,
Васыятым шул һиңә:
Балаларым йығлатмағыҙ,
Рәхмәт ҡылһын хаҡ һиңә.
Иртән тороп ҡараһам,
Ҡибладин ел иҫәр,
Ҡалған уғлан Нәүширүән,
Бәнем бәғерем шул киҫәр.

Күренеүенсә, был бәйет тарихи документтарҙа иҫкә алынған хәл-әхүәл, исемдәрҙе тулыһынса ҡабатлай. Тимәк, уның нигеҙендә — ысынбарлыҡ.

Ә *Буранбай* исеме йырҙа йәшәүен дауам итә.

## 3. «ҠЫШҠЫНАЙЫН ҠАЙҘА ҠЫШЛАЙЫМ?»

Кем һуң әсе яҙмышы хаҡында шулай йырлаған? Халҡыбыҙҙың бай ижад репертуарында был йыр үҙенә түрҙәге бер урынды алып тора. Ул әлегә тиклем халыҡ күңелендә онотолмай.

Был йырҙы тулҡынланмай тыңлау мөмкин түгел. Уның һүҙҙәрен белмәй тороп та, тик көй-моңон ғына тыңлағанда ла йыр геройының кисергән ҡайғы-һағышы, зары һәм көрәше күҙ алдына килеп баҫҡан кеүек. Һүҙ «Бейеш» йыры тураһында бара.

Башҡорт тарихи йырҙарының легенда һәм риүәйәттәре йыр тексының йөкмәткеһен шаҡтай тулыландыра. Ләкин улар нигеҙендә йырҙағы образдың кем һәм ҡайһы тарихи шәхес икәнлеген билдәләүе ауыр. Бейеш батырҙың прототибы ла ошоға тиклем бик үк асыҡланмаған әле. Йырҙың легендаһы дөйөмләштерелгән, хатта идеаллаштырылған: Бейеш тик байҙарҙы, завод хужаларын, кантон башлыҡтарын талап, тапҡанын ярлы халыҡҡа өләшкән һәм уны барыһы ла хәленсә яҡлаған һәм ҡурсалаған. Шуғалыр Бейеш:

«Табалмай ҙа дошман, әй, табалмай,
Дуҫ-иштәрем мине аралай»,—

тип йырлаған инде.

Ысынлап та был йырҙа кем тураһында һүҙ бара?

Йырҙа һәм уның легендаларында иҫкә алынған топонимдар (Орсоҡ, Ирәндек тауҙары, Ҡырҡты ҡалҡыулығы, Таналыҡ, Ҡыҙыл йылғалары һәм Ҡусҡар ауылы) архив материалдары нигеҙендә Бейеш батырҙың шәхесен асыҡларға ярҙам итә.

Был йыр Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһы урынлашҡас тыуған. Илдә хәрби-феодаль иҙеү көсәйә. Башҡорт халҡы хәрби ҡатламға күсерелә һәм уға Яйыҡ (Урал) буйлап Ырымбур сиген һаҡлау, хәрби поход һәм һуғыштарҙа ҡатнашыу бурысы йөкмәтелә. Шулай уҡ ҡала һәм ныҒытмаларҙы төҙөкләндереү ҙә һәм башҡа һалымдарҙы үтәү ҙә — уның бурысы.

Шул йөкләмәләрҙең иң ауыры Ырымбур хәрби сиген һаҡлау булған. Унда хеҙмәт итеүселәр комендантттарҙың башбаштаҡлығына тапшырыла, уларҙың шәхси хужалығында эшләү, эре һәм ваҡ йомоштарын үтәү ҙә башҡорттарҙың иңенә төшкән.

Төрлө ауырлыҡтарға, йәберләүҙәргә түҙмәгән ҡайһы бер казактар хеҙмәтен ташлап, ҡасып та киткеләгәндәр. Уларҙың тотолғандары ҡаты язаға дусар ителгән. Мәҫәлән, Яйыҡ буйы хәрби сиктән ике тапҡыр ҡасҡан өсөн 5-се кантон башҡорто *Айзин* 500 тапҡыр шпицрутен менән һуҡтырылып, үҙ еренән айырып, мәңгегә һалдатҡа бирелгән. Биш тапҡыр хәрби хеҙмәттән ҡасҡан *Йәнбаев* танауын һәм ҡолаҡтарын ҡырҡып, дар ағасына аҫыуға хөкөм ителгән.

Ғәҙәттә, икенсе тапҡыр тотолған ҡасҡын башҡорт казагы тән язаһынан һуң мәңгегә һалдатҡа бирелгән. Архив материалдары *Бейеш* һәм уның иптәштәре лә ҡасҡын хәлендәге һалдаттар булыуын иҫбатлай. Ә ниндәй сәбәптәр арҡаһында *Бейеш* казаклыҡтан мәңгегә һалдатҡа оҙатылған — уныһы беҙгә билдәһеҙ.

Әммә ләкин хәрби хеҙмәтте ташлап китеү хәрби-феодаль иҙеүгә ҡаршы бер протест формаһы икәнлеге тураһында бөтә Рәсәй буйынса шуларҙың тышҡы ҡиәфәтен билдәләп яҙылған ҡағыҙҙарҙың таратылыуы һәм ҡасҡындарҙы тотоусыларға ҙур күләмдә (10 һум) аҡса түләнеүе асыҡ һөйләй.

Властар ҡулында *Бейеш* хаҡында төрлө юл менән табылған мәғлүмәттәр туплана килгән. Шуларҙан бына нәмә асыҡлана.

Ырымбур хәрби губернаторы *В. А. Перовскийға* башҡорт-мишәр ғәскәре башлығы 1839 йылда яҙған рапортында Верхнеуральск өйәҙендә урынлашҡан 6-сы башҡорт кантоны Бөрйән һәм Тамъян олоҫтарында, Ҡағы һәм Әүжән-Петров заводтары тирәһендә ҡасҡын һалдат *Бейеште* йыш күреүҙәре тураһында хәбәр итә. Шул уҡ кантондың башлығы йөҙ башы *Хәсән Бейешев* (хәҙерге Баймаҡ районы Хәсән ауылынан) ҡасҡын *Бейештең* 16-сы йортҡа (командаға) ҡараған Ҡусҡар, Рауил, Үтәғол, Дәүләтша, Ярлыҡап, Ҡолоҡас, Теләнсе, Әбделғәзе ауылдарында күренгеләп ҡалыуын үҙ рапортында әйтеп үткән. Өсөнсө бер ҡағыҙҙа *Бейеш* ҡасҡындың Ҡусҡар ауылынан (хәҙерге Әбйәлил районы.— *Авт.*) булыуын асыҡлай.

Билдәле журналист *Ғәли* ағай *Ишбулатов* тапҡан материалдар буйынса, *Бейештең* атаһы *Ишкенә* исемле кеше булған. Шуға күрә улының фамилияһы — *Ишкинин, Ишкенәнең* тағы ла *Әбделбаҡый, Сибай, Ишъяр, Аралбай* исемле улдары билдәле. *Әбделбаҡый* Стәрлетамаҡта урядник булып хеҙмәт иткән.

Ҡаҫҡындарҙы тотоу өсөн айырым командалар төҙөлгән. Шуларҙы ясауылдар *Аҡтаев* һәм *Әлибәковтар* етәкләгән. Төрлө ауылдарҙа *Бейеште* эҙләү көсәйтелә. Уны нисек тә булһа тиҙерәк табырға һәм тоторға ынтылғандар. Ләкин *Бейеш* иректә йөрөүен дауам иткән. Бына, мәҫәлән, архив материалы буйынса, *Бейеш* 1844 йылда хатта ағаһы йәшәгән Стәрлетамаҡҡа ла барып сыҡҡан.

Халыҡ яҡлау арҡаһында *Бейеш* 10 йылдан ашыу хөкүмәт эһелдәренә күренмәҫ һәм тотолмаҫ ҡаҫҡын һалдат булып, байҙарҙың ҡотон алып, *Ҡунаҡбай Әбдрәхимов, Ҡорман Илбәков, Рәхмәтулла Бараков, Ҡотлоша Мырҙағолов* һәм *Әүбәкер Әбдәков* исемле иптәштәре менән Ирәндек буйында ҡаҫҡын тормошон дауам иткән.

*Бейеш* үҙен һәм юлдаштарын ғәҙелһеҙ тормошҡа, иҙеүселәргә ҡаршы көрәшеүсе итеп таныҡкан.

Һор юрғаҡай менеп елеп үттем
Баяр ғына баҫҡан ерҙәрҙе.
Оғро ғына тиеп хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡаҫҡан ирҙәрҙе.

«Оғро» тиеп властар үҙ дошмандарын атаған. Халыҡ иһә уларҙы үҙ иткән, яҡлаусыһы тип тапҡан.

1848 йылда Верхнеуральск исправнигы *Скорятинов* етәкселегендә һалдаттар Бейештең эҙенә төшкән һәм ул ҡулға алынған. Ике яҡтан атыш ваҡытында исправник бер нисә йәрәхәт алған. Үҙенең был «батырлыҡтары» өсөн ул изге Владимир ордены менән бүләкләнгән.

*Бейеш* ҡаҫҡындың көрәш юлы бына шулай тамамланған.

## 4. «МАКЛАШКА»НЫ КЕМДӘР ЙЫРЛАҒАН?

1981 йылдың 10 октябрендә «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫылған «Цицернак» һәм «Маклашка» тигән мәҡәлә уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Ғәжәп хәл, ә шулай ҙа Рәсәй халыҡтарының мәҙәни бәйләнеше быуаттар төпкөлөндә ятыуына тағы бер конкрет миҫал бит был.

Ул мәҡәлә бер нисә һорау тыуҙыра. Тарту университетында уҡыған әрмән студентының башҡорт һалдаттары менән осрашыуы һәм уларҙың йырын тыңлауы ысынлап та мөмкин булғанмы? Ниндәй йыр тыңлаған әрмән шағиры?

Тәүге һорауға ыңғай яуап бирерлек тарихи документтар бар. Билдәле булыуынса, 1798—1865 йылдарҙа башҡорттар хәрби сословиеға күсерелеп, казачий ғәскәрҙә торған. Шуға күрә Рәсәйҙең сиген һаҡлауҙа ғына түгел, һуғыш һәм походтарҙа ла ҡатнашҡан улар. Мәҫәлән, Ҡырым һуғышы (1853—1856 йылдар) ваҡытында башҡорт һыбайлылары Балтиҡ яр буйҙарын һаҡлаған.

Ә тарихи мәғлүмәттәр түбәндәгеләрҙе һөйләй.

Ырымбур губернаторы Перовский инициативаһы һәм батша ризалығы менән Англия, Франция һәм Төркиәнең берләшкән ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәшеүсе рус ғәскәрен еңел һыбайлылар менән көсәйтеү маҡсатында башҡорттарҙан да дүрт атлы полк төҙөлә. Ләкин бер диндәге башҡорттарҙы төрөктәргә ҡаршы файҙаланыуҙың һөҙөмтәһенән шикләнеп, уларҙы Балтиҡ буйына ебәреүҙе хуп күргәндәр. 1854 йылдың йәйендә 2-се һәм 4-се полктар Башҡортостанға кире ҡайтарыла һәм таратыла. Балтиҡ диңгеҙе яр буйына башҡорттарҙың 1-се һәм 3-сө атлы полктары Мәскәү аша Петербургка тимер юл менән оҙатылған. Һәр ике полк 850-шәр кешенән торған. Билдәләнгән урынға улар 1855 йылдың апрелендә барып етә. 1-се полк Рига тиҙ хәрәкәт итеүсе корпусына, 3-сө полк Эстляндия күҙәтеүсе отряды составына инә. Был көстәрҙең маҡсаты: дошман десантынан Балтиҡ ярҙарын һаҡлау.

1-се полк атлылары Курляндияла дошман десанты менән ысынлап осраша һәм уға ҡаршы бәрелештә батырлыҡ күрһәтә. Уның күп кенә яугиры наградаға: «1853—1856 йылдар һуғыш иҫтәлегенә» тигән бронза миҙалға лайыҡ була.

Балтиҡ корпусы командующийы генерал граф *А. А. Суворов-Рымникский* (полководецтың ейәне.— *Авт.*) 1856 йылдың 25 апрель приказында 1-се полктың яугирҙары «оло маҡтауға лайыҡ булды» тигән һәм уның составына үҙенең рәхмәтен белдергән. Генерал *Граббе* командаһындағы 3-сө полк та диңгеҙ ярҙарын һаҡлауҙа үҙ бурыстарын һәйбәт үтәгән өсөн шундай уҡ маҡтау алған. Был турала уның *Перовскийға* яҙған хатында күрергә мөмкин. Балтиҡ буйы ауылдарында фатирҙа торған башҡорттарҙың тәртибе һәм уларҙың әхләҡ нормаларын кешеләрсә үтәүе тураһында урындағы халыҡта яҡшы фекер тыуған. Был турала Кокенгуэ пасторы (дин әһеле) тарафынан шул округ халҡы исеменән 1-се полкка бирелгән рәхмәт танытмаһы һөйләй. Унда Уралдан килгән һыбайлыларҙың урындағы халыҡ менән бик һәйбәт мөғәмәләлә һәм уларҙың ифрат тәртипле булыуҙары тураһында һүҙ бара. Бер йыл буйына

башҡорт яугирҙары эстон, латыш һәм рус кешеләре менән киң аралашып йәшәй, «улар араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре урынлашты», тип яҙа генералдар. Бөтә полк составы рус телен һәйбәт аңлаған, күптәре шул телдә һөйләшергә лә өйрәнгән.

Ике полктың 1-сеһе Ырымбур, 3-сөһө Верхнеуральск өйәҙе кешеләренән торған. Тимәк, эрмән студенты Тарту ҡалаһында Һаҡмар, ике Ҡыҙыл, Эйек, Урал йылғалары буйынан килгән башҡорттар менән осрашҡан, шуларҙың йырын тыңлаған.

«Маклашка» йыры ниндәй тарихи шарттарҙа барлыҡҡа килде икән?

Башҡорт казачий ғәскәренең төп бурысы Ырымбур хәрби сиген (Тубыл йылғаһынан алып, Урал үҙәне буйлап, Ырымбур ҡалаһына тиклем) һаҡлау, Рәсәйҙең һуғыш һәм походтарында ҡатнашыуҙан торған. Ләкин батша хөкүмәте үҙенең тышҡы сәйәсәтендә ҡайһы бер мәсьәләне ыңғай хәл иткәс (Ҡаҙағстан жуздарының Рәсәйгә әкренләп ҡушылыуы), башҡорттарҙың тормошона бер аҙ үҙгәреш индергән. Беренсенән, күпселек кантондар өсөн хәрби хеҙмәт урынына аҡсалата һалым индерә; икенсенән, Ырымбур хәрби сигенә йәнәш урынлашҡан 5-се (Троицк өйәҙе), 6-сы (Верхнеуральск өйәҙе), 9-сы (Ырымбур өйәҙе) кантондары өсөн хәрби һалым урынына, икенсе ифрат ауыр феодаль йөкләмә билдәләнә. Ул — сығым түкмәйенсә, ҡаҙнаның төрлө төҙөлөштәрендә ҡатнашыу, ылау сабыу һәм һал ағыҙыу.



Башҡорт ғәскәри кейемдәре: *(һулдан уңға)* генерал, штабс-офицер, обер-офицер, урядник, казак.

Был мәжбүри йөкләмәне үтәү өсөн арзан хеҙмәт сығанағы булған Урал аръяғында баяғы өс кантон кешеләренән «эшсе» көстәр төҙөлгән. Сик һаҡлауға тәғәйенләнгән башҡорттарҙың һаны ҡырҡа кәметелгән. Әгәр элек 5—10 мең башҡорт сик һаҡлаһа, хәҙер уларҙың ни бары 15 проценты ғына шул хеҙмәтте дауам иткән, ҡалған 85 проценты төрлө эшкә ебәрелгән.

Ошо «эшсе» көстәр ярҙамында 252 саҡрымлыҡ Үрге Яйыҡ — Стәрлетамаҡ сауҙа юлы төҙөлә. Өс йыл эсендә был эштә бөтәһе 200 меңдән ашыу башҡорт ҡатнаша. Орск — Троицк араһында яңы сик һыҙығы үткәреү, унда нығытмалар төҙөү ҙә улар елкәһенә төшә.

Ырымбур, Орск, Уральск, Өфө ҡалаларын төҙөкләндереү эшендә лә «эшсе» көстәр күпселекте тәшкил иткән. Улар тарафынан Ырымбурҙы һаман да биҙәп торған генерал-губернатор канцелярияһы, Николай казармалары, генерал-губернатор йорто, Каруанһарай һ. б. биналар төҙөлгән. Урамдарға таш түшәү, ҡом һибеү, баҡсаларға һәм урамдарға ағас ултыртыу, Урал ярында юл һалыу — былар бөтәһе лә шул көстәр эше. Уларҙың эш күләмен түбәндәге һандар күрһәтә. Тик 1850 йылда ғына ҡаҙна эштәрен башҡарырға 35 мең кеше, 300 меңдән ашыу ат бүленгән.

Ылау сабыу ҙа бик ауыр йөкләмә булған. Тик бер Хиуа походында (1839 йыл) ғына башҡорттар 7 800 өсәр атлы арба һәм сана менән Перовский ғәскәренең йөктәрен Ырымбур ҡалаһынан Ҡаҙағстан далаларына ташыған.

Ә шулай ҙа был эш төрҙәренең иң ауыры һәм һаулыҡ өсөн иң зыянлыһы — һал ағыҙыу булған. Ырымбур, Орск, Уральск ҡалаларын утын һәм ағас менән башҡорттар тәьмин иткән. Йыл һайын бер мең кеше һалсы итеп билдәләнгән. 1834—1859 йылдарҙа Урал йылғаһында бөтәһе 23, Һаҡмарҙа 25, Эйек һәм ике Ҡыҙылда 39 тапҡыр «һал өмәһе» үткәрелгән. Бының өсөн иҫ киткес күп ағас ҡырҡылған һәм кеше көсө түгелгән, ҙур-ҙур урмандар юҡҡа сығарылған. Һөҙөмтәлә ике Ҡыҙыл, Һаҡмар һәм башҡа йылға буйҙары ярым яланғас тороп ҡала, уларҙың һыуы кәмей. Губернаторҙың яҙмаларына ҡарағанда, Ырымбур губернаһында элек урман 4 миллион дисәтинә майҙанды биләһә, 1861 йылға уның яртыһынан аҙыраҡы ғына тороп ҡалған.

Һал ағыҙыуҙың килеме губерна властарына бик күп файҙа килтергән.

Шулай итеп, башҡорт казактары Ырымбур губернаһының төп эшсе көсө булып әүерелгән. Быны уларҙың Бөгөлмәлә хәрби судта эшләгән, аҙаҡ хәрби совет ағзаһы дәрәжәһенә күтәрелгән генерал *Н. Г. Залесов* та раҫлай. Ул башҡорт халҡын губернаның «эшсе-негрҙарына» күптән әүерелдерҙеләр инде, тип яҙған.



Генераль-Губернаторскій домъ. Преображенскій соборъ. Главная [illegible]
Набережная р. Урала

Ырымбурҙа башҡорт хәрби көстәре төҙөгән йорттар.




Домъ [illegible] останавливался А. С. Пушкинъ [illegible]
Генераль Губернатора

«Эшсе» көстәр ғәскәренә эләгеүселәр үҙ хәлдәренән ризаһыҙлыҡ белдергән. Улар хәрби сословиела булған башҡорттарға көрәк менән эш итеү килешмәй, «көрәк хеҙмәте — каторга» тигәндәр. Етмәһә, был командаға билдәләнеүселәр үҙ ауыл кешеләренән ярҙамға бик аҙ аҡса, аҙыҡ-түлек алғандар. Уларҙы карабинын ташлаған «көрәкселәр» тип мыҫҡыл иткәндәр.

Бына ошондай шарттарҙа үткән быуаттың 30—40-сы йылдарында башҡорт халҡының «Маклашка» (шартлы исем) тигән йыры барлыҡҡа килгән. Йыр Һаҡмар, Ҡыҙыл, Эйек буйы башҡорттары тарафынан тыуҙырылған, тип ныҡлап әйтеп була, сөнки «эшсе» көстәр ғәскәрен нигеҙҙә улар тәшкил иткән.

Йырҙың тулы тексы юҡ. Уның 9 юлы үрҙә иҫкә алынған *Залесовтың* яҙмаларында күрһәтелә («Русская старина» журналы, 1903 йыл, 4-се һаны). Түбәндә уның һүҙҙәре, *Залесовтың* йәйә эсенә алған өҫтәмәләре бер ниндәй үҙгәрешһеҙ бирелә:

Моклашка, моклашка
(отрубок дерева),
Ты куда плывишь (плывешь)?
Ты плыви, моклашка, на
родимый сторона,
Ты скажи, моклашка, мой
татишка (отец),
Ты, скажи, моклашка, мой
матишка (мать),
Что их сынка, что их сынка,
Больна мудрина (очень мудрен) стал,
Железна лопатка навоз чистит,
Худой арба писка (песок)
возит и проч.

Күренеүенсә, был йыр «эшсе» хәрби көстәр башҡарған бөтә төр хеҙмәтте үҙ эсенә ала тиерлек. Бында һал ағыҙыу, ҡала төҙөкләндереү өсөн ҡом-таш әҙерләү һәм ташыу тураһында һүҙ бара. Йырҙа уның ауыр хеҙмәте һәм ризаһыҙлығы бик асыҡ күренә.

Уның ниндәй генә телдә йырланыуы мөмкин? Әлбиттә, башҡортса. Әрмән студенты ла, генерал *Залесов* та ул йырҙың һүҙҙәрен русса орфографик хаталар менән башҡорт әйтелешенә яҡынайтып биргәнгә күрә, ул йыр, бәлки, рус телендә йырланғандыр тигән фекер тыуа.

Был уйҙы *Н. А. Крашенинников* та раҫлай. 1907 йылда Мәскәүҙә сыҡҡан «Һүнеп барған Башҡортостан» тигән кита-

бында ул «Маклашка» йырының түбәндәге бер куплетын килтергән.

— «Маклашка, Маклашка, куда плывешь?
— На Родина.— Скажи моя батюшка-матюшка:
Твоя сынка больно плоха стала,
Стада свои
Совсем кончал!
Железным лопатком
Земля копал».

Һәм өҫтәп шуны әйткән. Был йырҙы борамсы Тәзей тигән башҡорт, һүҙҙәрен боҙоп булһа ла, русса ҡат-ҡат йырлаған.

Бына ошо башҡорт йыры Тарту университеты студентына әрмән һәм эстон халыҡ йырына әүерелгән «Ҡарлуғас» көйөн тыуҙырыуҙа булышлыҡ иткән дә инде.

*«Башҡортомдан батыр юҡ икән...»*

*«Колой кантон» йырынан*



## 1. «ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ...»

1812 йылдың 12 июнендә Франция ғәскәрҙәре Рәсәйгә ҡаршы һуғыш башлаған. Рус тарихсылары Беренсе Ватан һуғышы тип атаған был һуғышта рус, украин, белорус, Волга буйы һәм башҡа ерҙәр халыҡтарынан тыш башҡорттар ҙа ҡатнашып, дошманды еңеүгә ҙур өлөш индергән. Яман-яҡшы булһа ла, уртаҡ Ватаныбыҙ һаналған Рәсәйҙе һаҡлап яу ҡырында ҡалған һәм, Париж урамдарын айҡап, Елисей яландарында ҡурай тартып, дан-шөһрәт менән әйләнеп ҡайтҡан батырҙарыбыҙ бер ваҡытта ла халыҡ хәтеренән сыҡмаҫ.

1805—1807 йылдарҙағы һуғышта Австрия, Рәсәй һәм Пруссияның берләшкән көстәренең еңелеүенән һуң, Наполеон Францияһы Көнбайыш Европа өҫтөнән тулыһынса хакимлыҡ итә башлай. Быны менән генә риза булмаған император Наполеон Бонапарт шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙе баҫып алырға ла әҙерләнә.

Французларҙың Рәсәйгә һөжүм итеү ҡурҡынысы артҡас, рус хөкүмәте ғәскәр һанын арттырыу сараһын күрә. 1811 йылдың апрелендә Ырымбур хәрби губернаторы *Григорий Волконскийға* башҡорттарҙан 2 полк һәм Волганың уң ярында йәшәгән, ләкин Ырымбур губернаторына буйһонған керәшен, Ставрополь ҡалмыҡтарынан 1 полк төҙөргә бойороҡ бирелә. Быға

тиклем 2 типтәр, 2 Ырымбур казактары һәм 2 Урал ҡазактары полкы төҙөлгән була.

Наполеон Рәсәйгә баҫып ингәс, император Александр I халыҡтарға манифест менән мөрәжәғәт итә. Манифест һәм губернаторҙың Ватанды һаҡларға саҡырған яҙмаһы сиркәүҙәрҙә, мәсеттәрҙә, ауылдарҙағы йыйындарҙа һ. б. ерҙәрҙә уҡыла. Бынан һуң Башҡортостанда йәшәүселәрҙән күп кенә кеше ил сигенә китергә теләк белдерә. Улар араһында, документтарҙан күренеүенсә, ағалы-ҡустылы *Әбделхалик* һәм *Нәзир Әбделмәмбәтовтар,* йорт старшинаһы (бер нисә ауылдың башлығы) *Әбуталип Абдрахманов* улы менән ситтән бер ниндәй ярҙам алмайынса китергә әҙер була. Ә үҫмер егет *Яким Домашнев,* ағалары артынан һуғышҡа ебәреүҙе һорап, Өфө пехота полкына килә. Нуғайбәк станицаһы атаманы *Серебряков,* үҙ иҫәбенә 53 казакты тулыһынса ҡоралландырып, изге эш эшләй. Башҡорттар һәм башҡа рус булмаған халыҡтар араһында ватансылыҡ, ил һөйәрлек күтәрелештәре күреп, 1818 йылда *Сергей Глинка* былай тип яҙа: «...Не только стародавние сыны России, но и народы, отличные языком, нравами, верою и образом жизни, народы кочующие — и те, наравне с природными россиянами, готовы были умереть за землю русскую. Мордва, тептяри, мещеряки, черемисы ревностно и охотно шли на службу: башкирцы оренбургские сами собой вызывались и спрашивали у правительства, не нужны ли их полки».

1812 йылда Ырымбур губернаһының күп кенә өйәҙҙәрендә иген уңмай, ләкин аслыҡҡа һәм фәҡирлеккә ҡарамаҫтан башҡорттар, казактар һуғышҡа үҙҙәренең кейем-һалымы, ҡоралдары менән бара. Шуныһы ла үҙенсәлекле: һуғыш ваҡытында башҡорттар һәм урыҫ казактары араһында һуғыштан ҡасыу кеүек күренештәр булмай.

1812 йылдың июль — октябрь айҙарында 18 башҡорт атлы полкы ойошторола. 1812 йылдың аҙағында һәм 1813 йылдың башында тағы ла 8 полк төҙөлә. Әйтеп үтелеүенсә, 2 полк 1811 йылда уҡ барлыҡҡа килә. Шулай итеп, башҡорттар барлығы 28 полкты һуғышҡа оҙата. Башҡорттар йәшәгән һәр кантон йәки өйәҙ бер йәки өс полк биргән. Мәҫәлән, Пермь, Екатеринбург, Красноуфимск башҡорттары — 20-се полкты, Ҡурған башҡорттары — 19-сы полкты, Троицк башҡорттары — 18-се полкты, минзәләнекеләр — 3-сөнө һәм 5-сенең бер өлөшөн, Бәләбәй һәм Бөгөлмә башҡорттары 4-се полкты һәм 5-се, 12, 20-се полктарҙың бер өлөшөн, Верхнеуральск башҡорттары — 14-се, 15-се полктарҙы, стәрлетамаҡтар 12-се һәм 13-сө полктарҙы әҙерләй.

Атлы полк 500 ябай һалдаттан, ә командирҙар составы 30 кешенән (2 полк командиры — береһе — башҡорт, икен-

сеһе рус, 1 старшина, 5 ясауыл, 5 йөҙ башы, 5 хорунжа, 1 мулла, писарь, 10 илле башынан) торған.

Француздарға ҡаршы һуғышыусы полктарҙан тыш, 12 мең башҡорт Рәсәйҙең көнсығыш сигендә хеҙмәт итә — һыҙыҡ һағы хеҙмәтен үтәй. 1811—1813 йылдарҙа башҡорт кантондары Наполеон ғәскәренә ҡаршы һәм көньяҡ-көнсығыш сикте һаҡлауға 27 меңләп яугир ебәрә, мишәр кантондары 2 полк ойоштора. Шулай уҡ милли частарҙан 2 типтәр һәм 1 Ставрополь ҡалмыҡтары полкы ҡатнаша.

1812 йылда Ырымбур казактары — 5, Урал казактары 5 полк ҡуя. Ырымбурҙан тағы 1 драгун полкы һәм Өфөнән пехота полкы һуғыша. Шулай итеп, Башҡортостан рус ғәскәренә ярҙамға 45 полк бирә. Быларҙан тыш, 1812—1813 йылдарҙа Ырымбур губернаһындағы 4 тапҡыр рекрут буйынса 10 мең крәҫтиән һәм эшсе-хеҙмәткәрҙәрҙе һалдатҡа алалар.

Башҡорт яугирҙарының төп ҡоралы — һөңгө, ҡылыс, уҡ-ян, ә мылтыҡ һәм пистолет бик һирәктәрендә генә була. Шулай уҡ ҡайһы берҙәренең тимер күлдәктәре лә булған. Тимер сымдарҙан үрелгән бындай ауыр күлдәктәрҙе һуғышҡа инер алдынан ғына кейгәндәр. Ул яугирҙарҙы һөңгөнән, ә алыҫ арала дошман пуляһынан һаҡлаған. Һуғыштан һуң күп йылдар үткәс, Өфө дини семинарияһы уҡытыусыһы *Зефиров,* француз яуында ҡатнашҡан *Йәнтүрә* батыр менән уның йәйләүендә осрашҡанда, уның һуғыш кейемен күрә һәм шул турала яҙып ҡалдыра: «...Ҡорос дүңгәләктәрҙән эшләнгән был күлдәк яугирҙы башынан алып биленә тиклем ябып тора. Мин дә уны кейергә теләгәйнем, ләкин ул ауыр булып сыҡты, ике бот тирәһе барҙыр, шуға кейә алманым. Минеңсә, мылтыҡ пуляһы ла уны тик яҡындан ғына тишә алалыр».

Ә парад кейеменә килгәндә, башҡорттарға үҙҙәре теләгәнсә кейенергә рөхсәт ителә. Ә шул осорҙа йәшәгән бер авторҙың яҙыуынса, башҡорт яугиры ошолай кейенгән: өҫтөндә — аҡ йәки күк төҫтәге буҫтау кафтан, киң ҡыҙыл һыҙатлы (лампаслы) шундай уҡ төҫтәге киң салбар, башында — осло түбәле аҡ кейеҙ ҡалпаҡ, аяғында — ат тиреһенән тегелгән итек, билендә — ҡайыш билдек, портупеяһы менән ҡылыс һәм патрондар һала торған сумка». *Ә Йәнтүрә* батыр *Зефировҡа*: «...Атҡа атланырға бойороҡ бирһәләр, тимер күлдәк өҫтөнән күк кафтанды, башҡа аҡ ҡалпаҡты кейеп, арҡаға уҡ-ян аҫып, билгә ҡылысты тағаһың да, һөңгөнө ҡулға эләктереп, командир күрһәткән яҡҡа атылаһың»,— тип һөйләй.

Башҡорт яугирҙарына Рәсәй алып барған һуғыштарҙа йыш ҡатнашырға тура килгәнлектән, уларҙың үҙенсәлекле һуғышыу алымдары барлыҡҡа килә. Айырыуса дошмандың айырым отрядтарын ҡамап алып, юҡ итеүҙә ҙур оҫталыҡҡа ирешәләр. Йыш ҡына, ҡурҡып ҡасҡан булып, дошманды йәтеш урынға



Башҡорттарҙың хәрби башлығы. *XIX быуат.*

ылыҡтырып индерәләр ҙә, ҡапыл кире әйләнеп уратып алып, ҡыра торған булғандар. Ҡыҫымда ҡалған дошман, күп ҡорбандар юғалтып, бирелгән. Бер автор атлы яугирҙың һуғыштағы хәрәкәтен ошолай һүрәтләй: «...Дошманға етәрәк 40 аҙым уҡ атылыр ер ҡалғас, башҡорт арҡаһындағы ҡанъялын (уҡ һалғыс һауыт) күкрәгенә шыуҙыра ла, ике уҡ алып, береһен ауыҙына ҡаба, икенсеһен янына һала һәм шулай бер-бер артлы икәүһен дә атып ебәрә. Ә һөжүм иткәндә иҙеүҙәре асыҡ һәм еңдәре төрөлгән яугир, алға әйелеп, үҙәк өҙгөс әсе тауыш менән дошманына ҡыйыу ташлана һәм уҡ атымы ер яҡынлаш-



Башҡорт яугиры. *Немец художнигы Шадов гравюраһынан. XIX быуаттың тәүге сирееге.*

ҡас, 4 уҡ атып ебәрә лә, ҡыуып етеп, һөңгө менән сәнсә». Ә икенсе бер автор: «Башҡорттар һөңгө менән бик оҫта һуғыша һәм мылтыҡ, һаҙаҡтан төҙ ата. Уның уғы бик алыҫ булмаған арала, мәҫәлән, 15 сажин (1 сажин — 2,18 метр.— *Авт.*), кешене генә түгел, ә атын да үтә тишеп сығып китә»,— тип яҙа.

Рәсәй яҙмышы өсөн хафаланған Ырымбур төбәге халҡы 1812 йылдың август урталарына тиклем ғәскәр иҫәбенә 500 мең һум аҡса күсерә. Бынан тыш, башҡорт халҡы 4 139 ат бирә.



Башҡорт казактарының француз отрядтары менән алышы. *Гравюра. Дрезден. XIX быуаттың тәүге сиреге.*

Бер үк ваҡытта алайҙарҙы (полк) һуғышҡа әҙерләү ҙә башлана. Бына «Икенсе эрме» риүәйәтендә был турала нимә һөйләнелә:

> «Урыҫ еренә сит дошман килгәнлеген ишетеү менән, бөтә Урал халҡы йәшен һуҡҡандай һиҫкәнеп киткән, бөтәһе лә аяҡ өҫтө баҫҡан, ти. Урманда уҡ юнып, аласыҡта һаҙаҡ эшләп, тана-торпо, тәкә һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, тире ыҫлап, турһыҡ, һаба, мәс тегеп, ҡаймаҡ яҙып, май таҫҡып, төн-көн ағытмай бейә һауып, турһыҡ, һаба тултырып ҡымыҙ йыйып, аҙыҡ-түлек, ат-тун, кейем-һалым таярлап, халыҡ яуға әҙерләнгән, ти. Бөтә бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшөп, түштән шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-саға береһе ҡалмай батырҙарҙы яуға оҙатырға йыйылған, ти.
>
> Яуға оҙатҡанда әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегер еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә дошман уғы теймәһен тип, яуға барыусыларҙың түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡын, егеттәргә сер һаҡлаусы булығыҙ тип, нағышлы янсыҡтар биргән...»

Ә «Абдрахман Аҡъегетов» тигән икенсе риүәйәттә былай тиелә: «Рәсәй батшаһы башҡорттарға ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәс, был хәбәр-оран беҙҙең Үтәгәнгә лә килеп еткән. Ауыл

ҡарттары-аҡһаҡалдар йыйылып кәңәш ҡорғандар. Илгә ауырлыҡ төшкәндә, яу килгәндә, башҡорттар бер ҡасан да ситтә ҡалмаған, ир-егеттәр иртән үк аттарын эйәрләһендәр, тигәндәр. Ауылдың бынамын тигән ир-егеттәрен ат атландырып, башлыҡ итеп Абдрахман батырҙы тәғәйенләп, яуға оҙатҡандар». (*Абдрахман Аҡъегетов* — реаль шәхес, 1816 йылда уға 29 йәш тулған. 1834 йылда уның 35 йәштәге улы *Мырҙагилденең* бишәр йәштәге игеҙәк *Муллагилде* һәм *Абыҙгилде* исемле улдары булған. 1858 йылда *Мырҙагилдененең Мостафа* исемле өсөнсө улы тыуған. *Абдрахмандың* атаһы — 1746—1814 йылдарҙа ғүмер иткән *Аҡъегет Һабаев.— Авт.*)

2 башҡорт полкы һәм 1 типтәр полкы һуғыштың башынан алып ҡатнашалар, сөнки улар 1812 йылдың майында, йәғни һуғыш башланғанға тиклем үк, ил сигендә торған булалар. Майор *Тимеровтың* типтәр полкы торған ерҙә — Понемунь ауылы районында 11-енән 12 июнгә ҡараған төндә французларҙың алдынғы отрядтары Неман йылғаһы аша сығa башлайҙар. Һуғыш башлана һәм, беренсе булып, рус ғәскәрҙәре менән улар ҙа дошманға ҡаршы сыға. Ләкин көстәр тигеҙ булмау сәбәпле, рус ғәскәрҙәре һуғыша-һуғыша сигенергә мәжбүр була. Ошо хәлдә лә улар бик ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтәләр һәм үҙҙәрен батырҙарса тоталар.

15 июндә Гродно ҡалаһы эргәһендәге һуғыштарҙа 1-се башҡорт полкы яугирҙары *Үзбәк Аҡмырҙин, Буранбай Сыуашбаев,* хорунжа *Ғилман Хоҙайбирҙин,* ясауыл *Иҡсан Әбүбәкиров* һәм башҡалар ҡаһарманлыҡ күрһәтә. 16 июндә 1-се типтәр полкы Вильно эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнаша. III ғәскәр составындағы 2-се башҡорт полкы 16 июль Брест-Литовскиҙан көнсығыштараҡ Кобрин ҡалаһы янында дошман менән алышҡа инә. Был һуғышта дошмандың 2 мең һалдаты үлтерелә, тағы 200 офицеры һәм 2 генералы менән 2 меңдән ашыу һалдаты ҡулға алына. Был рус ғәскәрененең французлар өҫтөнән тәүге ҙур еңеүе була. Ошо һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн башҡорттар — Бәләбәй өйәҙе Сәпәш ауылынан *Әйүп Ҡәйепов* һәм Стәрлетамаҡ өйәҙе Күсәрбай ауылынан полк старшинаһы *Аралбай Аҡсулпанов* 4-се дәрәжәле Изге Анна ордены менән бүләкләнәләр.

Июль айында башҡорт атлылары атаман Платов корпусы менән разведкаға йөрөй. Себастиани дивизияһын ҡыйратыуҙа ҡатнаша.

1812 йылдың 26 авгусында Бородино һуғышында французлар бик ҙур ауырлыҡтар менән Раевский батареяһын яулап ала. Генерал *Ермолов,* Өфө пехота полкының бер батальоны һәм Ырымбур драгун полкы менән ҡаршы сығып, батареяны ташлап ҡасып барған частарҙы туҡтата һәм кире бороп, дош-

манға ташланалар. Раевский батареяһы дошмандан азат ителә. Был алышта ҡатнашҡаны өсөн 9 офицер-драгун «За храбрость и неустрашимость» миҙалына лайыҡ була.

*Михаил Кутузов*, дошмандың иғтибарын ситкә йүнәлтеү һәм ғәскәрҙәренең хәлен еңеләйтеү маҡсатында, казак ғәскәрҙәренә дошмандың һул флангыһына һәм тылына һөжүм итергә бойороҡ бирә. *Платов* менән *Уваровтың* атлылары (1-се башҡорт полкы ла улар сафында була) Яңы Смоленск юлы буйындағы Валуево ауылы эргәһендә француздарҙың тылына сығып, француз ғәскәренең һул флангыһында ығы-зығы тыуҙыра. Наполеон төп йүнәлештән алып, уларға ҡаршы 28 мең кешелек ғәскәр ебәрергә мәжбүр була. Рус ғәскәрҙәренең ошо ынтылышы Бородино һуғышындағы һынылышта ыңғай роль уйнай. *Наполеон* флангылағы ғәскәр менән мәшәкәтләнгән арала, *Кутузов* төп ғәскәрен Бородино һуғышына әҙерләп өлгөрә.

Рус ғәскәренең яуап һөжүмгә әҙерләнгән осоронда башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр, Ырымбур һәм Урал казактары Наполеон ғәскәренең тылында һуғышҡан атлы отрядтар сафына инә. Ә 1812 йылдың сентябрендә үрҙә һанап үтелгән полктар полковниктар *Ефремов, Ҡудашев, Давыдовтарҙың* махсус ойошторолған партизан отрядтарында булалар.

Октябрь айы башында, француздар Мәскәүҙе ташлап китергә мәжбүр булғас, рус ғәскәрҙәре араһында башҡорт полкынан бер нисә йөҙ һәм 1-се мишәр полкы Рәсәйҙең баш ҡалаһына инә. 1-се мишәр полкы Мәскәүҙә ҡалдырыла һәм 1814 йылда һуғыш бөткәнгә тиклем гарнизон хеҙмәтен үтәй.

Мәскәүҙе азат итеү өсөн барған һуғыштар тураһында шул йылдарҙа сығарылған «Любизар» исемле башҡорт йырында бик яҡшы әйтелә:

Француздар килеп ингән
Мәскәү тигән ҡалаға.
Беҙҙең ғәскәр ҡыҫып алғас,
Сығып ҡасты далаға.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!
Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
Мәскәүҙәргә килеп ингәс,
Ул да үҙе һынаған.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!

Французлар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен,
Урыҫ, башҡорт
ҡыҫмаҡлағас,
Таба алмайҙар эҙҙәрен,
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

Шулай уҡ «Ҡаһым түрә» легендаһында ла Мәскәү өсөн һуғыш үҙенсәлекле сағылыш тапҡан:

«...Наполеон урыҫ батшаһы Александрҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарған. Александр батша, ғәскәре менән Мәскәүҙе кире үҙ ҡулына алыу өсөн ни тиклем һуғышһа ла, булдыра алмаған. Көн уйлаған, төн уйлаған, көндәрҙең берендә бер уйға килә алған да, үҙенең һанаттарына әйткән: «Минең ҡул аҫтында башҡорт тигән халыҡ бар бит әле. Шуларҙан ғәскәр һорап ҡараһаҡ, ҡалай булыр икән?» — тигән. Һанаттар: «Дөрөҫ әйтәһең, батша хәҙрәт, был эште булдырһа, шулар ғына булдыра инде»,— тигәндәр. Башҡорт иленә илсе ебәргәндәр. Был хәбәрҙе алғас, башҡорттарҙың аҡһаҡалдары йыйылышып кәңәштөңәш иткәндәр. «Барайыҡ, шул дошмандарҙы айҡайыҡ, батырлығыбыҙҙы күрһәтәйек»,— тигәндәр. Тирә-яҡҡа оран ебәргәндәр. «Һуғышырға теләгән кешеләр, ҡоралдарын алып, аттарына менеп сыҡһын»,— тигәндәр. Йыйылышып, һуғышырға тип, юлға сыҡҡандар. Башлыҡ итеп Ҡаһым түрәне һайлағандар. Мәскәүгә барып еткәндәр. Башҡорт халҡын күреү менән, Наполеон Мәскәүгә ут төрткән дә ғәскәрен алып ҡаса башлаған. Ҡаһым түрә... Наполеондың артынан баҫтыра башлаған. Наполеон ғәскәрен һуҡтырып, рус батшаһы еренән сығарып ташлағандар».

Йәмғиәттә легендаларға «әкиәт» тип ҡарау йәшәп килһә лә, минеңсә, улар башлыса ысынбарлыҡты сағылдыра. 1812 йылдың октябренән алып рус ғәскәрҙәре һөжүмгә күскәс, Башҡортостандан килгән атлы полктар Наполеондың хәрби көстәрен ҡамау һәм юҡ итеүҙә әүҙем ҡатнаша. Малоярославец районында 1-се типтәр полкы батырлыҡ күрһәтә һәм быннң өсөн уның командиры майор *Тимеров* 4-се дәрәжә Изге Владимир ордены, ә прапорщик *Монасипов* менән зауряд-хорунжа *Ибраһимов* 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнә.

Өс башҡорт һәм Урал полкы генерал *Витгенштейн* корпусында була. Улар Петербургка барған дошмандың юлын быуа. 1812 йылдың ноябрендә бер нисә башҡорт полкы Волга буйы ополчениеһы сафында Украинаны һаҡлай.



Башҡорт яугиры Бородино алышында. *Рәссамы А. О. Орловский.*

Дошманды эҙәрләп ҡыуғанда башҡорт һәм казактар бик ҡыйыу эш итә. Уларҙы йыш ҡына разведка яһау өсөн тәрән тылға ташлайҙар. Ырымбур губернаторы *Волконскийға* рус ғәскәрҙәренең еңеү артынан еңеү яулауы һәм французларҙың ҡасыуы хаҡында хәбәр иткәндә *Кутузов* былай ти: «Һеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ. Ваше сиятельство, нисек итеп һәр рус һалдаты ҡасыусы дошманды туҡмап, кинәнес алғанын, батырлыҡ ҡылғанын. Шулай уҡ казактар һәм ҡайһы бер башҡорт полктарының уларҙы ҡырғанын!»

Башҡортостан яугирҙары рус ғәскәренең 1813—1814 йылдарҙағы сит илгә походында ла ҡатнашалар. 2 типтәр, 2 мишәр, ҡалмыҡ, Ырымбур, Урал казактары һәм күп кенә башҡорт полктары Беннигсен етәкселек иткән һәм Польша менән Германия ерендә һуғышҡан «Польша» ғәскәрҙәре сафына инә.

Варшаваны азат итеүҙә 2-се башҡорт полкы ҡатнаша, ә Данциг (Гданьск) ҡалаһын ҡамау һәм штурмлауҙа 8-се башҡорт, 2-се типтәр, ҡалмыҡ һәм Ырымбур казак полктары ҡатнаша. Шунда Изге Анна ордены менән бүләкләнгәндәр араһында *Хөсәйен Кусәрбаев, Иҡсан Әбүбәкиров* (икеһе лә икенсе тапҡыр.— *Авт.*), *Ирназар Дәүләтсурин, Байбулат Торсонбаев, Иҫәнгол Ишҡужиндар* була. Ә Ырымбур полкынан 14 яугирға хәрби орден тапшырыла.

1-се башҡорт полкы Берлин эргәһендәге һуғыштарҙа һәм уны алыуҙа ҡатнаша. 4-се башҡорт һәм 2-се мишәр полктары Глогау ҡәлғәһен ҡамап тота. Шулай уҡ 1-се, 4-се, 5-се, 9-сы һәм 14-се башҡорт полктары Лейпциг эргәһендәге «халыҡтар һуғышында» ҡатнаша. *Наполеон* генералы *Марбо* уҡты бик мәргән һәм оҫта атҡандары өсөн үҙҙәре үк «амурҙар» тип атаған башҡорт яугирҙары хаҡында тәьҫораттарын яҙып ҡалдыра: «Улар беҙҙең ғәскәрҙе һәр саҡ һағалап ҡына торалар. Саҡ ҡына уңайы сығыу менән, һағыҙаҡ күсе кеүек ябырылалар. Ә уларҙы ҡыуып етеүе бик ҡыйын». Рус ғәскәрҙәренең батырлығы хөрмәтенә Лейпциг эргәһендәге һуғыш булған урында һәйкәл ҡуйылған. Унда башҡорт полктарының номерҙары ла яҙылған. Был һуғышта ла күп кенә башҡорттар ордендарға лайыҡ була. Улар араһында 9-сы полктың ғәскәр старшинаһы *Ҡотлогилде Ишемғолов,* 14-се полк яугирҙары *Насир Абдуллин, Абдулла Сураґолов* һәм башҡалар. 7 башҡорт полкы бүтән ғәскәри подразделениелар менән бергә Дрезденды ҡамай һәм штурм менән ала. 1847 йылда *Василий Зефиров* яҙып алған «Йәнтүрә хикәйәте»ндә Дрезден эргәһендәге һуғыш һүрәтләнә. Унда *Йәнтурә* үҙенең ҡатыны менән бергә була. (Сәсән Мөхәмәтша Буранғолов уның исеме *Аҫылбикә* булғанын иҫбатлай.— *Авт.*) Бер ваҡыт бер төркөм башҡорт һыбайлылары, шул иҫәптән *Йәнтурә* менән ҡатыны ла, һаҡ күҙәһендә йөрөгәндә, ҡапыл уларға французлар һөжүм итә. Башҡорттар ҡурҡып ҡалмай: шунда уҡ һуғышҡа керәләр. «Беҙ аттарға һикереп мендек тә,— тип һөйләй Йәнтүрә,— тиҙ генә һөңгөләребеҙҙе эйәргә ныҡытып, һөрән һалып, яуыздар өҫтөнә ташландыҡ. Мин атланған ат бик йылғыр, ҡурҡмаусан ине. Сабып барған ыңғайға бер французды һөңгөм менән сәнсеп йыҡтым. Һөңгөнө тартып алып маташҡанда, икенсеһе килеп, ҡылысы менән минең яурынға сапты.

...Шунда иҫтән яҙғанмын, һушыма килгәндә, иптәштәремдең яртыһы тегеләр тарафынан тураҡланып бөткәнен күрҙем. Ҡалғандарының ҡул-аяҡтары бәйләнгән. Бисәм янымда юҡ ине. Мин инде уны бөтөнләй донъяла юҡтыр тип уйлайым. Аттарға мендереп, беҙҙе әсир алып киттеләр. Сәғәт ярымдан һуң ҡапыл урман араһынан бер йөҙ Дон казагы килеп сыҡты. Беҙҙе уратып алдылар. Унлап ҡына ҡалған француздар ҡурҡты. Бирелеүҙәрен белдереп, баш эйҙеләр. Ҡараһам, бисәм Дон казактары араһында йөрөй. Ул эш шулай булып сыҡты: беҙ һуғыша башлау менән, минең ҡатын, тегеләргә ҡаршы тора алмаясағыбыҙҙы аңлап, һуғыш майҙанынан тайшанып сыҡҡан да беҙҙең төп отрядҡа хәбәр иткән».

Ҡыйыулығы өсөн *Аҫылбикәгә* рус ғәскәре командованиеһы тарафынан хәрби миҙал тапшырыла. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының 1813—1814 йылдарҙағы походта ҡатнашыуы хаҡында яугир ҡатыны йырлаған «Ирәмәл» йырында асыҡ әйтелә:

«Илкәйенә дошман баҫып инһә,
Кем генә һуң өйҙә ҡала икән?—

тип йырлаған да, атҡа менеп, ҡулына ҡорал алып, ире менән бергә француз яуына киткән»,— ти.

Башҡорттар һәм казактар Гамбург, Эрфурт, Веймар һәм Майндағы Франкфурт ҡалаларынан француздарҙы ҡыуырға ярҙам итә.

1814 йылда Германияла киң билдәле яҙыусы-ғалим *Гете* менән осрашҡанда башҡорт отряды башлығы уға үҙенең уҡ һәм янын бүләк итә. Башҡорттар килеп киткәндән һуң 11 йыл үткәс, *Гете* ошо ҡәҙерле бүләген оло һаҡланыу менән дуҫы *Эккерманға* күрһәткән. «Бына ул,— ти Гете мөйөштәге ҡәҙерле ҡоралдар араһынан уҡ-янды сығарып.— Күренеүенсә, ул миңә башҡорттоң ғәскәр башлығы бүләк иткән хәлдә һаҡлана».

Башҡорттар шулай уҡ Австрияны азат итеүҙә лә ҡатнашҡандар. «Ҡаһым түрә» легендаларында ошо турала түбәндәгеләр яҙылған.

«Австрия халҡы быларҙы күреп: «Һеҙ ниндәй халыҡ?» — тип һораған. Былар: «Беҙ — башҡорттар»,— тигән. Австрия халҡы башҡорт тигән халыҡты электән белә икән. «Ә, теге йылҡы ите ашай торғандар икән»,— тигәндәр. Шунан Австрия һәм Германия ерҙәрен үтеп, Францияға барып инәләр. Француздар башҡорттарҙы күреп, тырым-тырағай ҡасып бөтә,— тип дауам итә легенда.— Бер заман Парижға ла барып еткәндәр. Ни күҙҙәре менән күрһендәр, Париж ҡалаһы ҡоймалар менән уратып-

лып алынған, ти. Наполеондың бөтә ғәскәре шунда инеп бикләнгән. Ҡойманың мылтыҡ ҡуйып ата торған тишектәре бар икән. Французлар шул тишектәрҙән генә мылтыҡ менән атып яталар, ти. Шунан һуң Ҡаһым түрә:



Башҡорт казактары. *Гравюра. XIX быуаттың тәүге сирегә.*

«Мылтыҡҡа — мылтыҡ»,— тип урыҫ ғәскәрҙәренең алға сығыуын һораған. Урыҫ ғәскәрҙәре бер көн, бер төн мылтыҡтан атҡандар. Ә башҡорттар уҡтарын һауаға ата башлаған. Һауаға атылған уҡтар кире әйләнеп ҡойма артында боҫоп ултырған французДарға төшөп ҡаҙала икән. Французлар түҙә алмай, ҡойма янынан ҡаса башлағандар. Уларҙың ҡасҡанын күреп, беҙҙең ғәскәрҙәр сабышып ҡапҡа эргәһенә килгәндәр. *Инеп китәбеҙ тиһәләр*, ҡапҡа бикле икән. Шул саҡта Күбәләк-Теләүҙән килгән Ғариф батыр таш стенаға менеп ҡараһа, ҡапҡа йоҙаҡлы икән. Ғариф батыр йоҙаҡты ҡылыс менән сабып онтаған да ҡапҡаны асып ебәргән. Шул ыңғайға беҙҙең бөтә ғәскәрҙәр инеп киткәндәр. Париж ҡалаһының бөтә урамдарын ҡаплап алғандар. Беҙҙекеләр Парижды алып,- батшаһын баш һалдырғас, унда бер нисә көн байрам иткәндәр».

«Башкиры порядком дивили парижан своими луками и стрелами: даже сам Вальтер Скотт, прославленный английский писатель, посетивший в те дни Париж, отдал им дань в своих путевых картинах»,— тип яҙа яҙыусы *Лев Никулин*, шул йылдар шаһиттарының хәтирәләренә таянып.

Шағир *Н. К. Батюшков* та шул ваҡиғаларға ошондай юлдар арнаған:

Кипел бульвар в Париже так,
Народа праздными толпами,
Когда на нем летал с нагайкою
казак
иль Северный Амур
с колчаном и стрелами.

Парижға тәүгеләрҙән булып аяҡ баҫҡан 1-се, 2-се, 5-се, 8-се, 9-сы, 12-се, 13-сө, 14-се, 15-се башҡорт полктары һәм 2-се типтәр, 2-се мишәр, 8-се Ырымбур казактары полктары яугирҙары «За взятие Парижа 19 марта 1814 года» тигән көмөш миҙал һәм ордендар менән бүләкләнә. Шулай уҡ 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан бөтә яугирҙарға ла «В память войны 1812 года» тигән көмөш миҙал тапшырыла.

Башҡорттар, типтәрҙәр, ҡалмыҡтар һәм башҡа рус булмаған халыҡтарҙың Рәсәйҙең 1813—1814 йылдарҙағы походтарында ҡатнашыуы хәрби әһәмиәткә генә түгел, ә сәйәси әһәмиәткә лә эйә. *Талейран* етәкселегендәге француз дипломаттары 1813—1814 йылдарҙағы кампанияла Рәсәйҙең рус булмаған халыҡтарының ҡатнашыуын Европаға тағы бер татар-монгол яуы итеп күрһәтергә тырыштылар. 1814 йылда Вена конгре-



Башҡорт атлылары походта. *Рәссамы А. О. Орловский. Литография. XIX быуаттың тәүге сирегe.*

сында ҡатнашҡан Франция делегацияһының бер ағзаһы Рәсәйгә ҡаршы Европаның көстәрен берләштереү зарурлығы тураһында һөйләй. «Бер нисә быуын элек бөтә христиандар мосолмандарға ҡаршы берләшкән дә баһа,— ти ул,— ә ниңә хәҙер ҡалмыҡ, башҡорт һәм башҡа төньяҡ варварҙарына ҡаршы берләшмәçкә?.. Беҙ өçтөбөҙҙән көләүгә юл ҡуймаясаҡбыҙ!»

*Андрей Раевский* ҙа башҡорттар һәм башҡа халыҡтарҙың һуғышта ҡатнашыуы хаҡында былай тип яҙа: «Всего страннее, как замечали жители, было видеть в числе мстителей за свободу, независимость и благосостояние Европы обитателей берегов Урала и моря Каспийского... башкиры, калмыки, тептя-

ри и другие племена язычников разделяли святой подвиг брани народной; и они смиряли дерзость просвещенных французов».

Бер башҡорт йырында:

Ишетмәйҙәр микән сит
илдәрҙә
Уралтауҙың йәйелеп
ятҡанын.
Ниндәй яуға ҡаршы
барһалар ҙа,
Һис күрмәнең еңмәй
ҡайтҡанын,—

тип йырланһа, яҡташыбыҙ декабрист һәм шағир *Петр Кудряшевтың* башҡорттарға һоҡланып, күкрәгенән урғылып сыҡҡан һүҙҙәре ошоно иҫбатлай:

Друзья! Гордитесь:
целый мир
Узнает, сколь могуч
башкир!

Беренсе Ватан һуғышы халыҡ хәтеренә мәңгелеккә һеңеп ҡала һәм ауыҙ-тел ижадында киң сағылыш таба. Уларҙың байтағы хәҙер ҙә халыҡ теленән төшмәй. Улар араһында шул һуғыштың ҡаһарман батыры *Ҡаһым түрә* (йөҙ башы Ҡаһым Мырҙашев, хәҙерге Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылында тыуып үҫә.— *Авт.*) легендаһы һәм йыры халыҡта айырыуса киң таралаған.

Үҙҙәренең 1812 йылғы һуғышта ҡатнашыуы менән башҡорттар һәр саҡ ғорурланған, батырҙарының даны менән һоҡланған. Киң билдәле «Ҡолой кантон» йырында:

Был империяны
самаланым —
Башҡортомдан батыр юҡ икән,—

тип хаҡлы әйтелгән.

## 2. ҠАҺЫМ ТҮРӘ

1812 йылғы Ватан һуғышы халҡыбыҙ күңелендә тәрән эҙ ҡалдырған. Был хаҡта әле лә йыш йырланған «Эскадрон», «Байыҡ», «Любизар», «Кутузов» һәм башҡа патриотик йыр һәм марштар, легенда һәм риүәйәттәр һөйләй. Улар араһында

«Ҡаһым түрә» йыры ла бар. Автор Ҡаһым түрәнең тарихи шәхес булыу-булмауын, уның тыуған яғын, нәҫел-нәсәбен асыҡлауҙы маҡсат итеп ҡуя.

Һүҙҙе Ҡаһым түрә тураһында киң таралған легендаларҙан башлайыҡ. Ҡурған, Силәбе өлкәләрендә, Башҡортостандың Учалы, Баймаҡ, Стәрлетамаҡ һәм башҡа райондарында ул легендаларҙың төрлө варианттары яҙып алынған.

Ҡаһым түрәне күрше өлкәләрҙә Ҡасым, Стәрлетамаҡ яҡтарында Ҡаҫым тип йөрөткәндәр. Ташҡа баҫылған һәм БДУ, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының архивтарында һаҡланған легендаларҙың бөтәһендә лә Ҡаһым түрә 1812 йылғы Ватан һуғышында бер башҡорт полкының командиры итеп һүрәтләнә. Уларҙың береһендә Ҡаһым түрәнең Парижға тиклем барып етеүе билдәләнә. Хәрби хеҙмәттәре өсөн майор, полковник дәрәжәләренә лайыҡ булыуы тураһында хәбәр ителә. Йырҙың бер вариантында былай тиелә: «Көмөш кенә һаплы, ай еҙ ҡылыс, полковникҡай Ҡаһымдың билендә».

Легенданың 1965 йыл Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылы *Кәримов Рамазандан* (1910 йылда тыуған) *М. Хәсәнов* һәм *Д. Тикеев* яҙып алған вариантында Ҡаһым түрәнең Кутузовтан рәхмәттәр, ордендар алыуы хаҡында һөйләнелә.



Башҡорт атлылары ял иткәндә ҡурай моңо тыңлайҙар. *Рәссамы А. О. Орловский. XIX быуаттың тәүге сиреге.*

Ә йыр тексы унық йәшен асыҡлай: «Егерме лә йәштә Ҡаһым түрә командаһын көнөнә биш урай».

Риүәйәттәрҙә Ҡаһым түрәнең фажиғәле үлеме тураһында ла мәғлүмәттәр килтерелә.

Легендаларҙың 1966 йылда үрҙә иҫкә алынған Айыусы ауылында *Ф. Рәхимғолова Ҡаҙаҡбаев Алтынбай Янғужа улынан* (1879 йылда тыуған) яҙып алған бер вариантында Ҡаһым түрәнең тыуған ауылы, унын нәҫел-нәсәбе тураһында факттар бар. Шуларға иғтибар итәйек.

...Ҡасандыр Мырҙаш һәм Айыусы ауылдары бергә булған. Айыусыла *Моҡатай* тигән ҡарт йәшәгән. Унын *Тувай* һәм *Һатлыҡ* тигән улдары булып, *Тувайҙан — Мырҙаш, Мырҙаштан Ҡаһым* тыуған. Шул уҡ ваҡытта информатор *Ҡаһымдың Туйсин* фамилияһы менән йөрөгәнен шик аҫтына ҡуя. Унын һүҙе буйынса, *Ҡаһым Туваев* булырға тейеш, сөнки олатаһынын атаһы *Тувай* булған. Легендала *Ҡаһым* түрәнең улы һәм ейәне тураһында ла мәғлүмәт бар. *Ҡаһымдан Хәбибулла, Хәбибулланан — Йәндоҙаҡ, Йәндоҙаҡтан Ғәлиулла* һәм *Вәлиулла* тыуа, *Ғәлиулланан Ғәйнулла, Хөснулла* тыуған. Улар *Ҡасимовтар* фамилияһы менән йөрөй,— тип һүҙен тамамлай *Алтынбай* ҡарт.

Һәр береһе айырым йәшәргә хоҡуҡлы бай йөкмәткеле легендалар биргән мәғлүмәттәрҙең тарихи нигеҙлеген тикшереп ҡарайыҡ. Быныц өсөн йән башын иҫәпкә алыу буйынса 1816 йылғы 7-се ревизия материалдарына күҙ һалайыҡ. Бер нисә легендала *Ҡаһымдың* тыуған ауылы Айыусы тип атала. Ул Юрматы олоҫононң Аҙнай түбәһенә ингән. 1795 йылғы мәғлүмәт буйынса шул түбәгә ҡараған ауылдар араһында Айыусы ла (41 йорт) бар. Унда 120 ир-ат һәм 112 ҡатын-ҡыҙ һаналған.

1798 йылда башҡорттар хәрби сословиеға күсерелгәс, улар йәшәгән ер административ яҡтан кантондарға бүленгән. Стәрлетамаҡ өйәҙендә 7-се башҡорт кантоны барлыҡҡа килә, ул бер нисә ауылды үҙ эсенә алған йорттарға бүленә. Бөтәһе 25 административ йорт булып, шуларҙың 24-сеһенә 11 ауыл рәтендә Айыусы ла ингән. Был ауылда 1834 йылда 54 (174 ир-ат һәм 180 ҡатын-ҡыҙ), 1850 йылда 51 (204 ир-ат һәм 213 ҡатын-ҡыҙ) йорт иҫәпләнгән.

7-се ревизия Айыусы ауылы буйынса 6-сы йорт-ғаиләлә *Ҡасим Мырҙашевты* теркәй. 1811 йылда уға 33 йәш була. Йөҙ башы дәрәжәһендә һуғышҡа киткән һәм 1813 йылда унда һәләк булған. *Ҡаһым* түрәнең яу ҡырында күрһәткән батырлыҡтары һәм алған наградаһы хаҡында тарихи материалдар әлегә беҙҙең ҡулда юҡ. Тик шуныһы асыҡ: Ватаны өсөн ҡаһармандарса һуғышҡан һәм шунын өсөн халыҡ күңелендә ул яҡты эҙ ҡалдырған.

Күренеүенсә, легенда һәм тарихи мәғлүмәттәр *Ҡаһымдың* йәшен бер үк итеп күрһәтмәй. Уның 1813 йылда һуғыш яланында ятып ҡалыуы территориаль яҡтан сит-ят ерҙәргә тап килә.

Һүҙҙе дауам итеп, *Ҡаһымдың* ғаиләһенә иғтибар итәйек. Уның 6 йәшлек *Хәбибулла* тигән улы етем ҡалған. Документта уның әсәһе күрһәтелмәгән. Ә был хәл инде *Ҡаһымдың* ҡатыны икенсе кешегә кейәүгә сыҡҡан йә тыуған яҡтарына ҡайтып киткән тип фараз итергә мәжбүр итә. («Сәмәрҡәндтән килгән Сафия һылыу кире ҡайтыр микән иленә».)

Артабанғы ревизия материалдарында ла *Ҡаһымдың* улы хаҡында мәғлүмәттәр табып була. 1834 йылда Айыусы ауылында 24 йәшлек *Хәбибулла Ҡасимов* йәшәгән. Үҙенән тыш бында уның 19 йәшлек икенсе ҡатыны *Гәүһәр Әбдрәшитова,* беренсеһенән 10 йәшлек улы *Йәндоҙаҡ* та бар. Тимәк, үкһеҙ етем ҡалған Хәбибулла 13 йәшендә өйләнергә мәжбүр булған. 1850 йылда шул уҡ ауылда 40 йәшлек *Ҡаһым улы Хәбибулла* йәшәүен дауам иткән. *Йәндоҙағы* өйләнеп, атаһы менән бергә йәшәгән. *Гәүһәрҙән* ике ҡыҙы булған.

Легендала яҙып алынған *Ҡаһым* түрә шәжәрәһенең һуңғы өлөшө ревизия мәғлүмәттәре менән тулыһынса тап килә: *Ҡаһымдың* улы *Хабибулла,* ейәне *Йәноҙаҡ* (шәжәрәлә — *Йәндоҙаҡ.— Авт.*)

*Ҡаһымдың* атаһы Айыусы ауылында 6—7-се ревизия ҡағыҙҙарында күренмәй. Мырҙаш ауылында ун йорт булып, шуларҙың яртыһында йорт старшинаһы, поход старшинаһы, уның ярҙамсыһы, йөҙ башы һәм ясауыл йәшәгән 9-сы йортта 1811 йылда 73 йәшлек *Мырҙаш Туйсин* ике ҡатыны (*Емеш, Буранбикә*) һәм *Йомагилде* (1 йәш), Хисаметдин (23 йәш) тигән улдары менән йәшәгән. Өлкән улы өйләнгән, уның да ҡатыны күрһәтелгән.

Үҙ түбәһе һәм олоҫонда Юрматы аҫабаларының ышаныс (поверенный) кешеһе булараҡ Богоявлен заводында ер бүлгәндә һәм 1790 йыл Пашкованың Воскресен заводына ер һатҡанда *Мырҙаш Туйсин* да ҡатнашҡан. Был хәл уның абруйлы кеше булыуын раҫлай һәм шуға күрә Айыусынан айырылып сыҡҡан 10 аҫаба йортонан торған ауыл Мырҙаш исемен алған.

*Мырҙаш Туйсин Ҡаһымдың* атаһы була ла инде. Быны уның фамилияһы иҫбатлай. Тимәк, легенда биргән мәғлүмәткә төҙәтмә индереү кәрәк: *Мырҙаштың* атаһы Ҡаҙаҡбай түгел, ә *Туйсы* булған. (Ә рәсми ҡағыҙҙарҙа атаһының исеме аҫабалар өсөн фамилия хеҙмәтен дә үтәгән.— *Авт.*)

Шулай итеп, Ҡаһымдың нәҫел-нәсәбенең үрге өлөшө лә төҙәтмә талап итә: *Ҡаһымдың* атаһы *Мырҙаш,* уның атаһы

*Туйсы*, ә *Туйсының* атаһын билдәләү элегә мөмкин түгел, сөнки Өфөлә 1795 йылғы 5-се ревизия материалы һаҡланмаған.

Ҡаһымдың нисәнсе башҡорт полкында хеҙмәт итеүен һәм ниндәй полк менән командалыҡ итеүен дә әйтеүе ҡыйын. Шулай ҙа бер нәмә асыҡ: 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан 28 башҡорт полкының һәр береһендә командир вазифаһын рус офицерҙары башҡарған. Ә уларҙың ярҙамсылары башҡорттарҙан ҡуйылған. Фольклор һәм хатта рәсми ҡағыҙҙарҙа ла улар командир тип атала. Бынан тыш, йөҙ башы (поручик), ясауыл (капитан), войсковой старшина (майор) званиеһындағы башҡорттар полк старшинаһы итеп билдәләнгән һәм улар ҙа полк командиры йә түрә тип аталған.

Һәр кантон, халыҡтың иҫәбенән сығып, бер йә ике айыл (полк) төҙөгән.

*Ҡаһым Мырҙашевтың* тыуған яғы — Стәрлетамаҡ өйәҙе өс полк биргән, шуларҙан 13-сө полк тулыһынса Юрматы, Табын һ. б. олоҫ башҡорттарынан торһа, 2-се, 12-се полктар яртылаш шуларҙан формалашҡан. Бына шул полктарҙың береһендә Ҡаһым түрә хеҙмәт иткән.

Шулай итеп, Ҡаһым батыр тураһында йәшәп килгән легендаларҙа дөрөҫлөк тә, унан сигенеү ҙә бар.



*«Уҡымышлылар үҙебеҙҙә лә юҡ түгел»*

*Туҡтамыш Ишбулатов, Уложение комиссияһының депутаты, Ғәйнә олоҫо старшинаһы*

## 1. БЕЛЕМ ҺУҠМАҒЫНАН

Үткән быуаттың тәүге яртыһында Рәсәйҙә феодаль ҡоролош тарҡала башлай. Промышленность һәм ауыл хужалығында яңы капиталистик мөнәсәбәттәр экренләп урын ала. Улар ныҒына барҒан һайын мәҙәниәт һәм фән дә тормош ҡытыршылыҡтарын еңеп алға ынтыла. Предприятиеларҙың һаны артыу менән белгестәргә ихтыяж килеп тыуа. Батша хөкүмәте, үҙ иркенә ҡаршы килеп булһа ла, махсус уҡыу йорттары асырға мәжбүр була.

XIX быуаттың 20-се йылдарына тиклем Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау эшен башҡарыусы өйәҙ табиптары бармаҡ менән генә һанарлыҡ була. Башҡорт кантондарында, уның ауылдарында халыҡтың һаулығын фән нигеҙендә һаҡлау эше бөтөнләй ойошторолмай. Хәрби хеҙмәт үтәүсе башҡорт һәм мишәрҙәргә тейешле медицина ярҙамы күрһәтелмәй. Хеҙмәт итеүсе һәм отставкалағы башҡорт казактары, шулай уҡ үҫмерҙәре өйәҙ медиктары тарафынан йылына бер тикшереү үтә үтеүгә, ләкин теге йәки был ауырыуға ҡаршы алдан уҡ иҫкәртеү эше алып барылмай. Бының өсөн белемле табиптар етешмәй. Һөҙөмтәлә йылдан-йыл хеҙмәткә һәләтһеҙ үҫмерҙәр күбәйә һәм һаулығы ҡаҡшаған башҡорт казактары күпләп отставкаға сыға. Шуның өсөн башҡорт ғәскәренең хеҙмәткә ар-

табанғы һәләтлеген һаҡлау маҡсатында уға даими медицина ярҙамы күрһәтеү, улар араһынан үҙ медиктарын әҙерләү бурысы көн тәртибенә ҡуйыла.

Үткән быуатта балалар өсөн иң ҡурҡыныс сир — ҡара сәсәк ныҡ тарала. Башҡорт медиктарының иң тәүгеләре ана шул ауырыуға ҡаршы көрәшеүсе сәсәк һалыусылар була.

1811 йылғы бойороҡҡа ярашлы, Рәсәйҙең һәр өйәҙендә сәсәк һалыу комитеттары ойоштора. Кантон башлыҡтары һәр административ йорттан (бер йортҡа бер нисә ауыл буйһонған) 17 йәштәге берәр үҫмерҙе өйәҙ врачтары ҡарамағына бер йылға уҡытырға оҙата. Уҡыу осоронда был үҫмерҙәр бөтә мәжбүри һалымдан азат ителә, ауыл йәмғәтселеге иҫәбенән туҡланыу, кейенеү һәм торлаҡ өсөн аҡса менән тәьмин ителә. Уҡыуҙы тамамлап, сәсәк һалыусы һөнәрен алғас, улар үҙҙәрен ебәргән һәм кәрәк-яраҡтар менән тәьмин иткән ауыл һәм йортҡа ҡайтып, эшкә тотона. Тәүҙә бер ниндәй ҙә эш хаҡы алмайынса, балаларға бушлай сәсәк һалыр булғандар. Әлбиттә, был күп ауырлыҡтар тыуҙырған, уларҙың изге эшенә кире йоғонто яһаған. Шуға күрәлер инде, сәсәк һалыу эшенең йоғонтоһон арттырыу маҡсатында уны башҡарыусылар бөтә һалымдарҙан азат ителә. Сәсәк һалыусыларҙың ауыр матди хәлен иҫкә алып, эш хаҡы урынына уларҙың һәр бер уңышлы эше өсөн ғәскәр ҡаҙнаһынан көмөш менән 12-шәр тин түләү индерелә. Бынан тыш, уларҙың һәр береһенә аҙыҡ-түлек өсөн йылына 7 һум 31 тин көмөш аҡса ла түләнә.

Әкренләп сәсәк һалыусыларҙың һаны ла арта бара. Үткән быуаттың 20-се йылдарында 12 башҡорт һәм 5 мишәр кантонының һәр береһенә 3—4, 30-сы йылдарҙа 7—10 сәсәк һалыусы тура килгән. 1843 йылда уларҙың һаны 187, 1847 йылда — 259, 1857 йылда 326-ға етә. Әлбиттә, 545 мең башҡорт һәм 110 мең мишәр өсөн сәсәк һалыусыларҙың һаны диңгеҙҙәге бер тамсы кеүек кенә була. Шулай ҙа улар башҡарған эштең үтә файҙалы булыуын замандаштары юғары баһалаған.

Үткән быуаттың 20-се йылдары аҙағында башҡорттарҙан тәүге медицина фельдшерҙары күренә башлай. Хәрби губернатор *П. К. Эссен* ҡушыуы буйынса, 17 кантондан берәр үҫмер «ябай сирҙе дауалау» өсөн Ырымбур хәрби госпитале эргәһендәге фельдшерҙар мәктәбенә урынлаштырыла. Үҙ теләге менән килгән үҫмерҙәр 5 йыл буйына белем ала һәм практика үтә. Уларҙы уҡытыу һәм тәрбиәләүҙе башҡорт ғәскәре үҙ иҫәбенә ала. Мәктәп сығымдарын кантонда йәшәүселәрҙән йыйылған аҡса менән ҡаплайҙар. Буласаҡ фельдшерҙарға рус һәм латин телдәре, шул телдәрҙә уҡыу һәм яҙыу, медицина буйынса теория һәм практика өйрәтелә.

30-сы йылдар башында ҡайһы бер кантондарҙа ла була фельдшерҙар. Шулар араһында Верхнеуральск өйәҙендә урынлашҡан 6-сы кантондың Сибай ауылында *Мөхәмәтғәле Иҫәнгилдин* (ҡартатаһы *Сибай*), I Этҡолда (Баймаҡ районы) *Йәноҙаҡ Мөхәмәтсәлих* улы *Азаматов* та була. Улар *Перовскийҙың* Хиуа походында ла ҡатнаша. Фельдшерҙар башҡорт ғәскәрендә түләнә торған бөтә аҡса һалымдарынан ҡотҡарыла. Башҡарған эштәре өсөн йылына ҡағыҙ аҡса менән 90 йәки көмөшләтә 26 һум аҡса алалар. 1865 йылда барлығы 64 фельдшер иҫәпләнгән.

Башҡортостан мәҙәниәте үҫешендә XIX быуатта урта һәм юғары белем алыусылар билдәле роль уйнаған. Тәүге хәрби белгестәр, уҡытыусылар, табиптар, юристар, телселәр, фольклорсылар, мәғрифәтсе-ғалимдар Ырымбурҙағы Неплюев хәрби училищеһында, Беренсе Ҡазан гимназияһында һәм университетында тәрбиәләнгән.

Үткән быуаттың 20-се йылдарында башҡорт-мишәр ғәскәренең офицер һәм чиновник балалары хәрби белем ала башлай. Улар ғәскәр иҫәбенә уҡыған.

Ырымбурҙа асыласаҡ хәрби училище файҙаһына бөтә губернала аҡса йыйыу ойошторола, шул иҫәптән башҡорттар ҙа үҙ өлөшөн индерә. Был хәрби уҡыу йортоноң маҡсаты, генерал-губернатор *Эссендың* билдәләүе буйынса, «азиаттарҙы рустар менән яҡынайтыуға» булышлыҡ итеүгә, уларҙа батша хөкүмәтенә ихтирам һәм ышаныс тәрбиәләүгә ҡайтып ҡалған. Ырымбур Неплюев хәрби училищеһы 1824 йылда эшләй башлаған (1844—1866 йылдарҙа ул Ырымбур Неплюев кадет корпусы, 1866—1886 йылдарҙа — Ырымбур Неплюев хәрби гимназияһы, 1886—1916 йылдарҙа Ырымбур Неплюев кадет корпусы тип аталған). Ә уны асыу тантанаһы 1825 йылдың 3 ғинуарында үткәрелгән.

Был хәрби училищела башҡорт, мишәр, ҡаҙаҡ балалары Икенсе (Көнсығыш) бүлектә 6 йыл уҡып, тарих, география, алты тел (рус, немец, француз, фарсы, ғәрәп, төрки), физика, арифметика, алгебра, геометрия, тригонометрия, черчение, фортификация, артиллерия, һүрәт төшөрөү, ислам дине ҡанундарын өйрәнгән. Беренсе бүлектә уҡыған рус балалары хәрби һәм дөйөм белем алып, казачий ғәскәрҙә урядник булып хеҙмәт итә башлаған йә тәржемәсе ролен үтәгән. Мираҫлы дворяндарға — шунда уҡ, ә шәхси дворяндарға бер йылдан һуң офицер дәрәжәһе бирелгән. Ябай ғаиләләрҙән сығыусыларҙан бик яҡшы хеҙмәт итеүселәр өс, ҡалғандары дүрт йылдан һуң офицер була алған. Шулай итеп, уҡыуҙы тамамлаусыларҙың ниндәй хоҡуҡтар менән файҙаланыуы уларҙың синфи сығышына бәйле булған.



КАЗАКЪ
*Башкирскихъ кантоновъ, 1829–1838.*

Кантондарҙа хеҙмәт итеүсе башҡорт казагы. *1829—1838 йылдар.*

1825 йылда был училищела бөтәһе — 20, 1828 йылда — 52, 1830 йылдан һуң йыл һайын 80-гә яҡын уҡыусы иҫәпләнгән. Тәүге йылда ни бары бер мишәр, ике башҡорт, өс татар, дүрт ҡаҙаҡ уҡыһа, 1828 йылда башҡорттарҙың һаны дүрткә еткән. 1838 йылда был уҡыу йортонда башҡорт ғәскәренә офицерҙар әҙерләү өсөн башҡорт һәм мишәр малайҙарын уҡырға урынлаштырыу тураһында хәрби губернатор *Перовский* һүҙ ҡуҙғата, һәм 20 бала училищеға ҡабул ителә. Шул уҡ йылда, уларҙан тыш, был училищела 10 башҡорт һәм мишәр уҡыған.

1831 йылда Ырымбур Неплюев хәрби училищеһы беренсе сығарылыш яһай. Ошо йылдан алып 1907 йылға тиклем 70-тән артыҡ башҡорт һәм мишәр хәрби белем алған. Башҡорт һәм мишәрҙәрҙән был уҡыу йортон түбәндәгеләр тамамлаған: 1831 йыл — *Сәлихйән Куклашев, Әмирйән Хөсәйенов;* 1834 йыл — *Хәбибулла Яуишев;* 1836 — *Искәндәр Батыршин;* 1838 — *Шәһиәхмәт Шәрипов, Мирсалих Биксурин, Абдулҡадир Собханғолов;* 1842 — *Сөләймән Батыршин;* 1844 — *Хәжимөхәмәт Хөсәйенов, Шаһимырҙан Сатиков;* 1845 — *Мөхәмәтйосоп Ҡарамышев, Солтангәрәй Ноғайбәков, Мөхәмәтвәлит Солтанов;* 1851 — *Абдулвәлит Дәүләтшин, Мөхәмәтйән Бикмөхәмәтов, Арыҫланғәле Солтанов; 1853* — *Мөхәмәт Солтанов, Йыһангир Ишемғолов, Мусабай Көсөков, Хажимөхәммәт Әбләев, Мирсәйет Мәнәшев, Мирхәзетдин Ғәҙилов;* 1855 — *Ибраһим Батыршин, Ғәләүетдин Сәйтәков, Ишмөхәмәт Көсөков, Ғабдуллатиф Ырыҫов, Шаһисолтан Сыртланов;* 1857 — *Абдулғаит Ибраһимов;* 1859 — *Хөсәйен Байтағолов; Мөхәммәтлатиф Солтанов, Шаһитгәрәй Шиғаев, Сәләхетдин Шиғаев, Нисабитдин Шаимов, Мирсәйшәриф Юнысов, Мөхәмәтғәли Табылдин;* 1861 — *Шәмғәли Сыртланов, Шәйехзаман Солтанов, Дәүләтбай Хәлилов, Әмирхан Яуишев, Хөсәйен Өмбәтов;* 1863 — *Шаһиәхмәт Әкимбәтов, Әмиртимер Солтанов, Шарафитдин Диваев, Мөхәммәткәрим Биғлов;* 1865 — *Ильяс Айытов, Шәйхәҙәр Сыртланов, Муса Солтанов, Хәлим Бабажанов* (ҡаҙаҡ), *Йыһангир Хашаев* (ҡаҙаҡ), *Азамат Айсыуаков* (ҡаҙаҡ); 1867 — *Исмәғил Айытов, Әдил Нурекин* (ҡаҙаҡ), *Суфыйәхмәт Ҡәҙерғолов, Мирхәйҙәр Биксурин, Хажиғәләүетдин Мирбадалов, Әхмәтфазыл Акиров, Юныс Көсөков;* 1869 — *Батыргәрәй Ноғайбәков, Хажиәхмәт Ишбулатов, Ғималетдин Йосопов, Мостафа Диваев, Мөхәммәтфазыл Ибраһимов, Сәлмән Һунарғолов, Мирмәхмут Биксурин, Мирәбүбәкер Биксурин, Йыһангир Батыршин;* 1871 — *Дауыт Айытов, Абдрахман Дәүләтшин;* 1872 — *Әхмәтмохтар Ноғайбәков;* 1880 — *Абдулғазиз Дәүләтшин;* 1882 — *Арыҫланғәли Солта-*

*нов;* 1888 — *Мөхәмәтҡарам Биғлов;* 1897 йыл — *Сафиғәскәр Чанышев;* 1907 йыл — *Мәһәҙи* (Магдий) *Чанышев.*

Шулай итеп, башҡорттарҙан хәрби белем алған *Батыршиндар* (4), *Биксуриндар* (4), *Диваевтар* (2), *Дәүләтшиндар* (3), *Ибраһимовтар* (2), *Көсөковтар* (3), *Ноғайбәковтар* (3), *Солтановтар* (8), *Сыртлановтар* (3), *Өмөтбаевтар* (2), *Яуишевтар* (2) фамилияһы бигерәк тә айырылып торған. Мишәрҙәрҙән *Айытовтар* (3), *Биғловтар* (3), *Чанышевтар* (2) һ. б. хәрби белем алған.

Хәрби белем алыусылар кантон башлыҡтары, башҡортмишәр ғәскәрендә офицер, губернатор эргәһендә тәржемәсе булып хеҙмәт иткән. Неплюев хәрби училищеһын тамамлаусыларҙың ҡайһы берҙәре Башҡортостан мәҙәниәтендә һиҙелерлек эҙ ҡалдырған.

Шулар араһында хәрби училищела көнсығыш телдәрен уҡытҡан *Мартимиан Иванов, Сәлихйән Кукләшев, Мирсәлих Биксурин, Искәндәр Батыршин, Айса Бикмаевтар* (Омскиҙағы Азия мәктәбен, Ҡазан гимназияһын һәм 1835 йылда университет тамамлаған) бар.

Үрҙә әйтелгәнсә, Ырымбур Неплюев училищеһында мосолмандар, хәрби һөнәрҙән тыш, күп тел өйрәнгән. Ләкин ғәрәп, фарсы, төрки телдәрен өйрәтеү буйынса бер ниндәй ҙә уҡыу әсбаптары — грамматика, хрестоматия, һүҙлек, методик ҡулланма бөтөнләй булмаған. Шуға күрә был телдәрҙе өйрәнеү ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырған. Уҡытыусылар алдында методик ҡулланмалар, уҡыу әсбаптары булдырыу бурысын тормош үҙе көн тәртибенә ҡуйған.

Был эште *Мартимиан Иванов, Сәлихйән Кукләшев, Мирсәлих Биксуриндар* башлап ебәргән. Улар хаҡында «Ағиҙел» журналының 2-се һанында (1981) *Ғ. Ҡунафиндың* «Тәүге ҡарлуғастар» тигән мәҡәләһендә яҙылған. Беҙ бында *М. Биксуринға* ҡағылышлы бер нисә өҫтәмә мәғлүмәттәр килтерәбеҙ.

*Мирсәлих Биксурин,* Рус география йәмғиәте Ырымбур бүлегенең актив ағзаһы булараҡ, уның йыйылыштарында үҙенең социаль-сәйәси темаға арналған мәҡәләләрен тикшертеп торған. 1865—1869 йылдарҙа «Төркөстандағы Крет хәҙрәт мәсетен һүрәтләү», «Төркөстан өлкәһендәге клевер», «1866 йыл Һырдаръя аръяғындағы рустар тарафынан баҫып алынған ерҙәрҙе һүрәтләү» (1868 йыл), «Беҙҙең Урта Азия сауҙаһының торошо тураһында» (1869 йыл) тигән мәҡәләләре «Хәрби йыйынтыҡ», «Рус географияһы йәмғиәтенең хәбәрҙәре» тигән баҫмаларҙа донъя күрә. 1872 йылда шул мәҡәләләр, «Төркөстан төйәге» тип аталып, айырым китап булып Ҡазанда

баҫылған. Был хеҙмәтте өйрәнеп, бер нисә йыл элек профессор *Д. Вәлиев* мәғрифәтсе *М. Биксуриндың* социаль-сәйәси ҡарашы тураһында мәҡәлә яҙҙы.

*Мирсәлих Биксуринды* илдең ҡаҙылма байлыҡтары ла ҡыҙыҡһындырған. 1868 йылда География йәмғиәтенең бер йыйылышында Ҡаҙағстан далаларында Ҡалмыҡ нығытмаһы эргәһендә асылған нефть ятҡылығынан нефть һәм шуға оҡшаш матдәне алып килгән. Шулай итеп, *Мирсәлих Биксурин* киң ҡарашлы филолог, фольклорсы, педагог, яҙыусы, мәғрифәтсе-ғалим булып тарихҡа ингән. Ләкин уның биографияһы әле булһа ентекләп өйрәнелмәгән.

Беренсенән, *Мирсәлих Биксуриндың* тыуған йылы төрлө авторҙар тарафынан төрлөсә күрһәтелеп килә. Ә быны аныҡ билдәләрлек мәғлүмәттәр етерлек. Мәҫәлән, 1838 йылдың йәйендә Ырымбур Неплюев хәрби училищеһын тамамлағанда *Мирсәлих Биксуринға* 18 йәш булған. Тимәк, ул 1820 йылда тыуған. Быны икенсе дәлил дә раҫлай. *Мирсәлих Биксуриндың* Ленинградтағы Үҙәк дәүләт тарих архивында һаҡланған формуляр теҙмәһендә ошондай мәғлүмәттәр бар. Дворянлыҡ исеменә дәғүә итеп, 1868 йылдың йәйендә ул үҙенең бөтә хеҙмәт юлы йылдарын күрһәткән яҙыу ҡалдырған. Ошо йылда уға 48 йәш булған. Шулай итеп, *Мирсәлих Биксурин* обер-офицер ғаиләһендә 1820 йылда донъяға килгән.

Икенсенән, уның үлгән йылы итеп бөтә мәҡәләләрҙә лә 1872 йыл күрһәтелә. Ләкин *Мирсәлих Биксурин* 80-се йылдарҙа ла иҫән булған. Ә уның вафат булған ваҡытын билдәләү яңы эҙләнеүҙәр талап итә. Был йәһәттән беҙҙә Ырымбурҙа сыҡҡан гәзиттәргә иғтибар итеү кәрәктер, сөнки уның биттәрендә күренекле шәхестәргә һуңғы ихтирам бирелеп барыуы билдәле.

Артабан шуны ла өҫтәйек: *Мирсәлих Биксуриндың* Петербургта хәрби белем алыуы тураһында раҫлауҙар дөрөҫлөккә тура килмәй. Хәрби белемде ул Ырымбурҙа алған.

Тағы ла бер төҙәтмә. *Мирсәлихтың* атаһын *Мирсәлим* итеп күрһәтеү ғәҙәткә инеп китте. Русса документтарҙа уның атаһы «Мурсалим» итеп бирелә, шуға күрә уны *Мөрсәлим* тип уҡыу дөрөҫ булыр. Мирсәлихтың дүрт улының исеме ысынлап та «мир» ҡушылдығы менән бирелгән: Мирйосоп, Мирмәхмүт, Мирәбүбәкер, Миръяҡуп, үҙенең исеме лә шуға оҡшаш. Ләкин уның атаһы — Мөрсәлим.

Үрҙә әтелгәндәр башҡорт мәҙәниәтендә яҡты эҙ ҡалдырған әҙиптең эшмәкәрлеге генә түгел, уның биографияһы ла артабан өйрәнеүгә мохтаж икәнен күрһәтә.

* * *

Ырымбур хәрби училищеһында буласаҡ икенсе башҡорт мәғрифәтсеһе *Мөхәммәтсәлим Ишмөхәммәт улы Өмөтбаев* та уҡыған. Ләкин ул 1861 йылда атаһы үлеп ҡалыу сәбәпле, уҡыуҙы ҡалдырырға мәжбүр була. Атаһы *Ишмөхәммәт Ишемғол* улы ясауыл дәрәжәһенә етеү арҡаһында, ағаһы *Фәхретдин,* ҡустыһы *Сөләймән* һәм *Мөхәммәтсәлим* үҙе дворян дәрәжәһенә лайыҡ булған.

Шунда уҡ Стәрлетамаҡ өйәҙе Аллағыуат ауылынан бер тыуған *Батыршиндар* белем алған. 1836 йылда *Искәндәр* (1820 йылғы), 1842 — *Сөләймән* (1825 йылғы), 1850-лә *Мөхәммәтҡунафи* һәм 1855 йылда *Ибраһим Батыршиндар* хәрби училищены тамамлаған. Атаһы *Әлук Батырша улы Батыршин* поручик ғаиләһенән сыҡҡан, үҙе штабс-капитан чинына еткән. Шуның өсөн уның улдары нәҫелле дворян исемен алған. *Искәндәр* шул уҡ училищела Көнсығыш телдәрен уҡытҡан. *Сөләймән Батыршин* тәржемәсе булып хеҙмәт иткән. Ул — фольклор менән ҡыҙыҡһынған әҙиптәрҙең береһе. *Мөхәммәтҡунафи* Ҡазан университетының медицина факультетын тамамлай.

*Диваевтар* ҙа бында уҡыған. *Әхмәтйән Диваев* хәрби училищенан Ҡазан гимназияһына ебәрелгән. 1838—1841 йылдарҙа шунда уҡый, ләкин уны тамамлай алмай, кире Башҡортостанға ҡайта. Оҙаҡ йылдар буйы *Әхмәтйән Диваев* административ эштә була, тәржемәсе вазифаһын үтәй. *Әхмәтйәндең улы Әбүбәкер* Урта Азия һәм Ҡаҙағстан халыҡтарының ауыҙтел ижадын, этнографияһын өйрәнгән күренекле белгескә әйләнә.

Неплюев хәрби училищеһын тамамлаусыларҙың күбеһе тәржемәселәр, кантон башлыҡтары, уның ярҙамсылары булып хеҙмәт иткән. Шулар араһында Бәләбәй өйәҙенән *Сыртлановтар, Ноғайбәковтар,* Ырымбур өйәҙенән — *Дәүләтшиндар,* Минзәлә өйәҙенән — *Солтановтар,* Силәбе өйәҙенән *Көсөковтар* бар. Ә Стәрлетамаҡ өйәҙе Маҡар ауылынан *Мөхәммәтйосоп Ибраһим* улы *Ҡарамышев* оҙаҡ йылдар буйы Урта Азияла һәм кантон идаралығында хеҙмәт иткән. *Ҡарамышев* — генерал дәрәжәһенә ирешкән кеше ул.

Күренеүенсә, Ырымбур хәрби уҡыу йортоноң үҙ алдына реакцион маҡсат ҡуйыуына ҡарамаҫтан, уның күп кенә тәрбиәләнеүселәре башҡорт һәм башҡа туғандаш халыҡтар мәҙәниәте үҫешендә ыңғай роль уйнаған.

1836 йылғы Дәүләт Советы ҡарары нигеҙендә башҡорт һәм мишәр үҫмерҙәре Ҡазан гимназияһында һәм университетта уҡыған. Улар өсөн был уҡыу йорттарында 20 урын бирелгән.

Ҡазан ҡалаһының Беренсе гимназияһында 1836—1844 йылдарҙа 20-шәр, 1845 йылда — 13, 1846 йылда — 12, 1847 йылда — 14, 1848 йылда — 15, 1849 йылда — 17, 1850 йылда 18 башҡорт һәм мишәр балаһы уҡыған. Артабан да уҡыусылар булған: 1870—1871 йылдарҙа гимназияла башҡорттарҙан 7 малай белем алған. Был уҡыусыларҙың ҡайһы берҙәрен төрлө сәбәптәр арҡаһында Башҡортостанға кире ҡайтарып, уларҙың урыны икенселәре менән тулыландырылған. Был гимназияға Ырымбур хәрби училищеһынан билдәле күләмдә белеме булған балалар ебәрелгән. 1850 йылдан башлап инде Ырымбур хәрби кантонсылары батальонына урынлаштырылған 20 башҡорт малайы иҫәбенән Ҡазан гимназияһындағы вакансия тулыландырылған.

Тыуған еренән алыҫта уҡыған, тәбиғәт ҡосағынан, ата-әсәләренән айырылған был малайҙар ҡала шартына бик ауырлыҡ менән күнеккән. Улар араһында ауырыуҙар, хатта үлгәндәр ҙә булған. Башҡорт ғәскәре командующийы улар тураһында 1845 йылда: «Ата-әсәләренең теләге менән гимназияға һайланған был малайҙар туғандарынан һәм тыуған иленән оҙаҡ йылдарға айырылғас, тәрән ҡайғы кисерәләр, йыш ҡына илайҙар, үҙ өйҙәренә, тыуған яҡтарына ҡайтарыуҙы үтенеп һорайҙар»,— тип яҙған.

Был үҫмерҙәр гимназиянан һуң Ҡазан университетының тик медицина факультетында уҡырға тейеш булғандар. 1843 йылда университетҡа гимназия тамамлаған — 1, 1844 йылда — 7, 1845 — 8, 1846 — 6, 1847 — 15, 1848 — 9, 1849—3, 1850 йылда 2 башҡорт үҫмере уҡырға ингән.

Ҡазан университетына абитуриенттарҙы гимназия ғына әҙерләмәгән. Был уҡыу йортона Ырымбур хәрби училищеһын тамамлаусылар ҙа туп-тура килеп инә алған. Мәҫәлән, 1832 йылда уҡ әле *Сәлихйән Кукләшев* (1836 йылда университетты тамамлай), 1834 йылда *Хәлит Шәрипов, Бикарыҫлан Собханғолов,* 1840 йылда *Садиҡ Ниғмәтуллин,* 1843 йылда *Сәйфулла Тоҡомбәтов* университетҡа хәрби училищенан килеп ингәндәр. Шуларҙың *Кукләшев* һәм *Тоҡомбәтовтан* башҡалары табип һөнәренә уҡығандар.

Медицина факультетын 1848 йылға тиклем ни бары өс кеше тамамлаған. Бындай хәлдең сәбәптәре бар, әлбиттә. Шуларҙың береһе — мосолман дин әһелдәренең медицинаға ҡаршы ҡотҡоһо. Уҡыу барышында күп кенә студенттар медицина факультетынан башҡа факультеттарға күсә. Был, әлбиттә, Дәүләт Советының маҡсатына ҡаршы булғанға күрә, 1849 йылдан башлап бындай күсеүҙәр ҡәтғи тыйыла. Ләкин тормош үҙенекен итә, һирәкләп булһа ла ундай күсеүҙәр дауам иткән.

Университетты тамамлаусыларҙан *Хәлит Шәрипов, Бикарыҫлан Собханғолов, Садиҡ Ниғмәтуллин, Заһретдин Выжданов, Сафа Йосопов, Әхмәтйән Әбдиев* һ. б. Башҡортостандың билдәле табиптары булып танылған.

Шуларҙың береһе — *Әхмәтйән Абдулғәләм улы Әбдиев* медицина докторы ғилми дәрәжәһенә ирешкән. Ул Беренсе Ҡазан гимназияһынан университеттың медицина факультетына уҡырға инеп, 1856 йылдың 10 ноябрендә уны уңышлы тамамлай. 1858 йылға тиклем ул башҡорт ғәскәрендә табип булып хеҙмәт иткән. Медицинаны айырата нык̧лап өйрәнеү өсөн үҙ теләге һәм губернатор рөхсәте менән Петербургтағы Медико-хирургия академияһына уҡырға китә. Тәжрибә үткәреү өсөн *Әбдиев* унда 2-се хәрби госпиталгә беркетелгән. 1862 йылдың 24 майында шул академияла имтихандар биреү һәм диссертация яҡлау һөҙөмтәһендә ул медицина докторы тигән ғилми дәрәжәгә лайыҡ булған. Ырымбурға ҡайтҡас, *Әбдиев* башҡорт ғәскәренең 4-се участка дауаханаһына хәрби доктор итеп билдәләнә. Шулай итеп, *Әхмәтйән Әбдиев* — башҡорттарҙан медицина фәндәре докторы ғилми дәрәжәһенә ирешкән тәүге белгес.

1865 йылға башҡорт ғәскәрендә 6 дауахана булып (Ырымбур өйәҙендә — 2, Верхнеуральск, Силәбе, Бөрө, Өфө өйәҙҙәрендә — берәр), унда 5 участка табибы, 5 табип ярҙамсыһы, 11 кендек инәһе, 5 ветврач, 84 фельдшер эшләгән.

Ҡазан университетының медицина факультетында башҡорттар араһынан артабан да уҡыусылар булған. 70-се йылдарҙа *Хәлиулла Солтанғолов, Сәғит Ишмурзин, Дауыт Ҡәипов* табип булып сыҡҡандар. Ҡазан университетын тамамлаған хәҙерге Баймаҡ районының Ҡолсора ауылы егете *Х. Ғ. Ғафаров* 241-се Орск пехота полкында рус-япон һуғышында табип булып хеҙмәт иткән. Уның маҡтауға лайыҡ эше ике орден менән баһаланған. 1907 йылда ул Кананикольскиҙан ҡайтышлай холера йоҡтора һәм шул сирҙән үлеп ҡала.

Башҡорт талиптары араһында христиан миссионерҙары актив эш итеү һөҙөмтәһендә, Башҡортостанға ҡайтыусы белгестәр кәмей барған. *Дауыт Ҡәипов* 1873 йылда лекарь исеме менән университетты тамамлай ҙа тыуған яҡҡа ҡайтыуҙан баш тарта. Сәбәбе — уның христиан диненә күсеүе. Ул Урал казактары яғына эшкә ебәрелгән.

Өфө приход училищеһын һәм Ҡазан гимназияһын тамамлап, башҡорт *Мөхәмәтшәкир Мөхәмәтйәнов* Ҡазан университетына уҡырға ингән, шунда христиан диненә күскән. Уҡыуҙы тамамламайынса, ул армияға алынған. Көнсығыш Себерҙә ул бер өйәҙ мәктәбендә уҡытыусы булып та эшләгән.

Ҡазан университетында уҡыусыларҙың ҡайһы берҙәре гуманитар белем алған. *Сәлихйән Кукләшев, Сәйфулла Тоҡомбәтов, Әлмөхәмәт Ҡыуатов, Шаһиәхмәт Абдухәиров, Мөхәммәт Мәҡсутов* фәлсәфә факультетының Көнсығыш телдәр бүлеген, *Заһретдин Носратдинов, Зариф Сыртланов, Шаһисолтан Шаһиәхмәтов* юридик факультетты тамамлағандар.

Шуларҙың береһе *Сәйфулла Тоҡомбәтов* ифрат һәләтле үҫмер иҫәпләнгән. Уның атаһы Ырымбур өйәҙендә урынлашҡан иң ҙур кантондарҙың береһе — 9-сы кантонда — хеҙмәт иткән. 1828 йылда ул — кантон башлығы. *Сәйфулла* Ырымбур хәрби училищеһынан Беренсе Ҡазан гимназияһына уҡырға ебәрелә. 1843—1847 йылдарҙа Ҡазан университеты фәлсәфә факультетының ғәрәп-фарсы телдәре бүлеген отличноға бөтә. *Тоҡомбәтов* ғәрәп-фарсы телдәре буйынса кандидат ғилми дәрәжәһенә («степень кандидата арабско-персидской словесности») эйә булып, 1849 йылдың мартында 189-сы номерлы диплом алған. Башҡорт ғәскәре канцелярияһында ул бүлек башлығының ярҙамсыһы булып хеҙмәт иткән. Һуңға табан *Сәйфулла Тоҡомбәтов* баш ауыртыуы һөҙөмтәһендә тома һуҡырая, 1853 йылда үлә.

Минзәлә өйәҙенән башҡорт егете *Шаһисолтан Шаһиәхмәтов* 1873—1876 йылдарҙа юридик факультетта уҡый, уны бик һәйбәт тамамлау арҡаһында кандидат дәрәжәһенә диссертация яҙыу мөмкинселеге алған.

Силәбе өйәҙе Себеш (Сибаш) ауылынан (5-се башҡорт кантоны) башҡорт *Әхмәт Хәиров* (1825 йылғы) — украин халҡының бөйөк шағиры *Тарас Шевченко* менән яҡындан таныш һәм аралашҡан кеше.

*Әхмәт Хәир улы Хәиров* 1836—1844 йылдарҙа Ҡазандың Беренсе гимназияһын, 1844—1848 йылдарҙа университеттың Көнсығыш телдәре бүлегендә уҡып, юғары белем алған. Шунан һуң ул башҡорт ғәскәре командующийы эргәһендә тәржемәсе ролен башҡарған. 1849 йылдың 25 апреленән 1852 йылдың август аҙағына тиклем *Хәиров* Каспий диңгеҙенең көнсығыш ярында урынлашҡан Яңы Петр нығытмаһында тәржемәсе хеҙмәтен үтәгән. 1851 йылдан бирле ул йөҙ башы, 1861 йылдан — ясауыл. Төрлө кантондарҙа кантон башлығы, уның ярҙамсыһы булып эшләгән.

Яңы Петр нығытмаһында *Әхмәт Хәиров Тарас Шевченко* менән ике йыл бергә хеҙмәт иткән. Әлбиттә, улар хеҙмәтендә ҙур айырма ятҡан: *Хәиров* — офицер, *Шевченко* — рядовой. Ул ғына ла түгел әле. Күренекле шағир һәм рәссам *Тарас*

*Шевченко* (1814—1861 йылдар) үҙенең революцион-демократик ҡараштары өсөн ошо яҡҡа һөрөлгән дә һалдатҡа бирелгән.

*Т. Шевченко* үҙенең хаттарында *Әхмәт Хәировты* бик йыш һәм йылы итеп иҫкә ала. Мәҫәлән, 1852 йылда яҙылған бер хатында түбәндәгеләр әйтелгән: «Ә хәҙергә ошо изгелекле һәм намыҫлы йөҙ башы *Хәировты* ҡотла. Беҙ уның менән ике йыл бергә йәшәнек, бер ҙә асыуланышманыҡ». Был хат Яңы Петр нығытмаһынан Ырымбурҙағы дуҫы *Ф. Лазаревскийға* яҙылған. *Әхмәт Хәиров* улар араһын тоташтырыусы ролен уйнаған, *Т. Шевченконың* һүрәттәре һәм хаттары *Әхмәт Хәиров* аша Ырымбурҙа йәшәгән *Ф. Лазаревскийға* етеп торған.

*Т. Шевченконың* биографияһын һәм эшмәкәрлеген өйрәнеүселәр ҙә *Әхмәт Хәиров* тураһында йылы һүҙ әйтергә онотмайҙар. 1970 йылда Киевта украин телендә сыҡҡан «Тарас Шевченконың һүрәттәре нимә тураһында һөйләй» тигән китабында *Мечислав Гаско Әхмәт Хәировтың* бөйөк украин шағирына бик яҡын булыуы, уға булышлығы һәм ике туғандаш халыҡтарҙың бик күптәнге бәйләнеше тураһында яҙа.

## 2. ТӘҮГЕ УҠЫМЫШЛЫЛАР

1798—1865 йылдарҙа Башҡортостан менән кантонлыҡ идара итеү тәртибе урынлаштырыла. Был реформа, башҡорт халҡын хәрби ҡатламға күсереп, уға бик ауыр бурыс — Ырымбур хәрби сиген һаҡлау эшен йөкмәтә. Башҡорт ерҙәре кантондарға бүлгеләнә. Бер нисә ауыл бер йортто тәшкил итеп, уның менән йорт старшиналары идара итер була. Кантон башлыҡтары һәм старшиналары, ғәҙәттә, белемле һәм бай ҡатламдан сығыусыларҙан тәғәйенләнә.

Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиген һаҡлау һәм һуғыштарҙа ҡатнашыуҙарҙан тыш, башҡорт халҡы менән башҡорт ерҙәренә килеп ултырған мишәрҙәр ҙә бик күп һанда аҙыҡ-түлек, әйбер һәм аҡсалата һалымдар түләргә мәжбүр булғандар.

Кантонлыҡ осоронда халыҡ тормошон күҙәтеү йәһәтенән иҫ киткес ҡаты хәрби-феодал тәртип урынлаштырыла. Полиция-администрация күҙәтеүе (опека) халыҡтың хужалығына, хәрби хеҙмәтенә генә ҡағылып ҡалмайынса, хатта һәр кешенең шәхси тормошона ла ҡыҫылған. Һәр башҡорттоң уй-фекере, ҡылығы һәм тәртибе полиция һәм чиновниктар күҙәтеүе аҫтында була. Урындағы ҡатмарлы административ идара һәм хәрби хеҙмәт ерле халыҡ вәкилдәренән уҡымышлы чиновниктар һәм етәкселәр талап иткән. Ошоға ярашлы рәүештә, башҡорттарҙың бер аҙ өлөшөнә белем бирелгән. Улар Ырым-

бур хәрби корпусында, Ҡазан университетында һәм гимназияһында хәрби һәм дөйөм белем алғандар. Батша хөкүмәтенең мәғариф өлкәһендә үткәргән ҡайһы бер саралары Башҡортостандың мәҙәни үҫешенә ыңғай йоғонто яһамай ҡалмай, әлбиттә.

Башланғыс белем биреүсе мәктәптәрҙә һәм дини мәҙрәсәләрҙә ир балаларҙың уҡыуы XIX быуатҡа тиклем үк билдәле. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙан иһә унда уҡыусылар бөтөнләй билдәһеҙ. Ҡыҙ балаларҙың мәктәптәрҙә уҡығаны тураһындағы мәғлүмәттәрҙе XIX быуаттың тик икенсе сирегенән башлап ҡына беләбеҙ. Ғәҙәттә уларҙы мулла ҡатындары — абыстайҙар һәм уҡымышлы башҡа ҡатын-ҡыҙҙар уҡытҡан. Был бигерәк тә Һарытау (Саратов) башҡорттары миҫалында асыҡ күренә.

Был урында башҡорттар күптән йәшәгән һәм Иван IV батшанан улар, аҫаба булараҡ, ошо ерҙе биләгәнлеккә **грамота** алғандар. 1804 йылда бында бөтәһе 160 ғаилә булып, шуларҙың 136-һы Вольск, 24-е Хвалынск өйәҙҙәрендә йәшәгән. Был башҡорттар бөтәһе 1 286 йән тәшкил иткән. Ырғыҙ һәм Кәмәлек буйындағы Һарытау башҡорттары ҙур ер биләгәндәр. Ике өйәҙҙә уларҙың бөтә биләгән ере 649 мең дисәтинә тәшкил иткән. Улар ҡулында 7 мең баш йылҡы, 3 мең баш һыйыр малы, 3 мең һарыҡ һәм 40 дөйә булған. Был урында 25—27 башҡорт ауылы иҫәпләнгән.

Улар араһында белем алыу күпселек осорҙа төрки телендә барған. Йәштәрҙең бөтәһе лә тиерлек йә мулла, йә ялланып эшләгән мөғәллимдәр тарафынан уҡытылған. Тик XIX быуаттың 60-сы йылдарына ҡағылған мәғлүмәттәрҙән генә лә ошо хәл күренә. Һәр бер ауылдағы ир һәм ҡыҙ балаларҙың өстән ике өлөшө ете йәштән мәктәпкә йөрөгән. Был йәһәттән Һарытау башҡорттары башҡаларға ҡарағанда алдараҡ барған. Сөнки төрки телендә ҡатын-ҡыҙҙарға белем биреү Башҡортостандың әле күп ерендә бик һүлпән тарала башлаған осор була.

Батша хөкүмәтенең руслаштырыу һәм христианлаштырыу сәйәсәтенә ярашлы рәүештә, рус телендә белем биреү Башҡортостандан ситтәрәк ятҡан ерҙәрҙә иртәрәк тормошҡа ашырылған. Һарытау башҡорттары араһында беренсе рус училищеһы 1852 йылда уҡ асылған. Ул Кәмәлек ауылында ойошторолоп, бер нисә ауылды берләштергән 1-се һәм 2-се йорт башҡорт балаларынан 25 кеше уҡыған. Ә 3-сө йорт балалары Сәҙе (Чиж) форпосындағы дистанция мәктәбендә белем алған.

1858 йылда башҡорт ҡыҙҙарын медицинаға уҡытыу башланған. Бының өсөн Петербургтағы акушерлыҡ институты эргәһендә кендекселәр бүлегенә Башҡорт казачий ғәскәре аҡсаһы иҫәбенә ҡыҙҙар өсөн 10 урын бирелә. Был урынға алдан рус теле һәм грамотаһына өйрәтелгән башҡорт ҡыҙҙары

ебәрелгән. Институтта уҡыуҙан тыш, улар Калинкин дауахананыһында тәжрибә үткәндәр. Был ҡыҙҙар, 5 йыл уҡып, акушеркендексе исемен алғас, Башҡорт ғәскәре ҡарамағындағы дауаханаларға эшкә ҡайтарылғандар. 1864 йылда 6 дауаханала Бөрө, Верхнеуральск, Өфө, Ырымбур, Силәбе өйәҙҙәрендә башҡорттарҙан 10 табип, уларҙың 7 ярҙамсыһы, 6 ветеринария табибы, 84 фельдшер менән бер рәттән, ҡатын-ҡыҙҙарҙан 8 башҡорт, 2 мишәр һәм рус акушеры эшләгән.

Архив материалдары һаранырак белешмә бирһә лә, ул ҡыҙҙарҙың өсөһөн исемләп әйтеп була. Шул уҡ йылда Красноуфимск өйәҙендә (кантонында) *Ҡәйҙәфә Тәсиғмуллина,* Минзәлә кантонында *Гөлгәмирә Әбделяппарова,* Бөрөлә *Хөснибанат Әбделмәнәфова* тигән башҡорт ҡыҙҙары, Петербургтан ҡайтып, акушер вазифаһын үтәгәндәр. Уларҙы тәьмин итеү өсөн йыл һайын институтҡа 717 һум аҡса ебәрелеп торған. Әйтергә кәрәк, был ҡыҙҙарҙы медицинаға уҡытыу кантонлыҡ бөтөрөлөү менән туҡтатыла, ләкин улар хеҙмәт иткән дауаханалар XIX быуаттың 80-се йылдарына тиклем эшләгән. 1864 йылда 6 башҡорт дауаханаһында 139 койка булып, ауырыуҙарҙы һәм дауахана хеҙмәткәрҙәрен тәьмин итеү өсөн ғәскәр иҫәбенән һәм ҡаҙнанан йыл һайын 45 меңдән ашыу аҡса тотонолған.

Башҡорт ғәскәре иҫәбенә Петербургта 20 йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙы кендек инәләре һөнәренә өйрәтеү артабан да дауам иткән. Башҡорт стипендияһына уҡыған *В. А. Кашеварова-Руднева* кендек инәләре институтын тамамлап, Медицина-хирургия академияһында белем алыуын дауам итә һәм, уны алтын миҙалға тамамлап, лекарь дипломын ала. Ошо уҡ академияла ул диссертация яҙа һәм 1878 йылда рус ҡатын-ҡыҙҙары араһынан беренселәрҙән булып медицина фәндәре докторы дәрәжәһенә ирешә.

Үҙәк хөкүмәт һәм урындағы губерна чиновниктары рус булмаған балаларҙы уҡытып, ҙур өмөт һәм маҡсат ҡуйғандар. Башҡорттарҙың бер аҙ өлөшөн уҡытыуҙың һуңғы маҡсатын, мәҫәлән, хәрби губернатор *Безак* әйтеп биргән: «Башҡорттар араһында белемдең таралыуы уларҙы рус халҡы менән ҡушыуҙың иң һәйбәт бер сараһы ул». Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙы рус теленә өйрәтеүҙе губерна етәкселәре айырыуса хуплаған. Уларҙы рус грамотаһына һәм, ғөмүмән, хужалыҡ эшенә өйрәтеү һәр башҡорт ғаиләһенә әкренләп рус көнкүрешенең үтеп инеүенә булышлыҡ итәсәгенә *Безак* бик ныҡ ышанған. Шуға күрә лә Башҡортостанда рус-башҡорт ауыл мәктәптәрен асыу тиҙләтелә. 1862 йылда уларҙың һаны — 22-гә, 1864 йылда 28-гә барып етә. Уларҙа 400-гә яҡын бала була. Был мәктәптәрҙә ир балалар менән бергә һирәкләп булһа ла ҡыҙҙар ҙа уҡый.

1860 йылдан башлап Башҡортостандың төрлө урындарында ҡыҙҙар өсөн айырым мәктәптәр асыла. 3 ноябрҙә, мәҫәлән, ул 10-сы кантонда — Силәбе өйәҙенең Мәтәл ауылында асыла. Унда бөтәһе 8 ҡыҙ бала уҡыған. 1861—1862 йылдарҙа тағы 3 мәктәп ойошторолоп, унда бөтәһе 30 ҡыҙ бала белем алған. Был мәктәптәр, айырым кешеләр ҡарамағында булып, ауыл халҡынан йыйылған аҡса иҫәбенә тотолған. 1861 йылдың 24 ғинуарында Ырымбур өйәҙенең Иҫәнғол ауылында ла ҡыҙҙар өсөн мәктәп асыла. Ошо уҡ ваҡытта хорунжа *Арслановтың* ҡатыны һәм лекарь *Заһретдин Выжданов* ауыл ҡыҙҙарын рус грамотаһына һәм хужалыҡ эшенә өйрәтеү өсөн үҙ мәктәптәрен ойошторғандар. 1866 йылда *Мирбатталова* приютында башҡорт ҡыҙҙарының бер өлөшө уҡыуы билдәле. Шул уҡ осорҙа ҡыҙ балалар өсөн 7-се (Троицк өйәҙе), 8-се (Красноуфимск өйәҙе), 9-сы (Силәбе өйәҙе) һәм 11-се (Екатеринбург һәм Шадрин өйәҙҙәре) кантондарҙа ла мәктәптәр барлыҡҡа килә. Кантонлыҡ бөтөрөлгәс, был мәктәптәрҙең йәшәүйәшәмәүе билдәһеҙ. Тик шуны әйтеп була: кантондар бөтөрөлгәс тә, 1869 йылда Ырымбур өйәҙенең Сәйетҡол ауылында башҡорт ҡыҙҙарын рус грамотаһына, баҡсасылыҡҡа һәм өй эшенә өйрәтеү мәктәбе асыла. Ә 80-се йылдарҙа Өфөлә башҡорт ҡыҙҙары өсөн *Нигмәтуллина* приютының йәшәүе билдәле. Унда башланғыс белем бирелгән һәм һәр төрлө һөнәргә өйрәткәндәр. 60-сы йылдарҙа 20—30-ға яҡын башҡорт ҡыҙы Ырымбурҙа ярлыларға булышлыҡ итеү комитеты мәктәптәрендә уҡыған.

1861 йылда Ырымбур хәрби губернаторы *Безак* Башҡортостанда ҡыҙҙар өсөн ике үҙәк өйрәнеү-хужалыҡ мәктәбе асыу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан. Уларҙың береһе башҡорттарҙың иң юғары ҡатлам ҡыҙҙарына, ә икенсеһе суҡындырылған типтәр һәм мәжүсилек динен тотоусы ҡыҙҙарға тәғәйенләнгән булған. Беренсе мәктәп үҙ алдына киләсәктә башҡорт ҡыҙҙарын уҡыта алырлыҡ һәм үҙ мәктәптәрен асырлыҡ белемле мөғәллимәләр әҙерләү бурысын ҡуйған. Ә типтәр ҡыҙҙары өсөн билдәләнгән мәктәп икенсе маҡсатты күҙ уңында тотҡан. Был мәктәп типтәрҙәр араһында христиан динен таратыуҙа булышлыҡ итергә тейеш була. Шуның өсөн мәктәп эргәһендә хатта сиркәү төҙөү ҙә күҙҙә тотола. Проект буйынса, үҙәк мәктәптәрҙә рус грамотаһынан һәм башҡа предметтарҙан тыш, ҡатынҡыҙҙар эшенә, бигерәк тә, баҡсасылыҡҡа өйрәтеү ҡаралғаны күренә. Был йәһәттән мәктәптәр эргәһендә баҡса ултыртыу, хужалыҡтың алдынғы ысулдары менән таныштырыу өсөн ере һәм ваҡ мал, ҡош-ҡорт аҫрау ҙа иҫтә тотола. Ҡул эшенә өйрәтеү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә булған. Бер һүҙ менән әйткәндә, асыласаҡ мәктәптәр мосолман ҡатын-ҡыҙҙары араһында хужа-

лыҡ буйынса ғилми белем таратыу үҙәгенә әйләнергә тейеш була. Ләкин ул тик проект ҡына булып ҡалған.

1860—1861 йылдарҙа Бөрөлә, Минзәләлә, Ырымбурҙа, Өфөлә, Силәбелә асылған ҡатын-ҡыҙҙар училищеларында рус ҡыҙҙары менән бергә башҡорт ҡыҙҙары ла уҡыған. Мәҫәлән, Бөрөләге 2-се разрядлы ҡатын-ҡыҙҙар училищеһында 43 башҡорт һәм типтәр балалары уҡып, рус грамотаһына, хисапҡа, ҡул эшенә, баҡсасылыҡ һәм өй эшенә өйрәтелгән. Мосолман ҡыҙҙарына дин уҡытылмаған.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында белем алыуға күҙ һалыу шуны күрһәтә. Төрлө уҡыу йорттарында ир һәм ҡыҙ балаларҙы уҡытыу батша хөкүмәтенең Башҡортостанда үткәргән колониаль сәйәсәтенең яңы бер һыҙаты булып тора. Был мәктәптәр үҙенең төп йүнәлеше буйынса батшаның дөйөм колониаль сәйәсәтенә барып тоташа һәм Башҡортостанды тиҙерәк һәм тулыһынса колониаль тәртипкә буйһондороуҙы күҙҙә тота. Ә рус-башҡорт мәктәбе, ерле халыҡ вәкилдәрен уҡытып, уларҙы рус халҡы менән ҡушыуҙы маҡсат итеп ҡуйған.

Дөйөм алғанда, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында һирәкләп булһа ла белем алыуҙы, һис һүҙһеҙ, ыңғай хәл тип танырға кәрәк.

## 3. МИРСАЯФ БЕЙЕШЕВ

Үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағында Ҡазан университетында *В. И. Ульянов (Ленин)*менән бергә уҡыған башҡорт *Мирсаяф Бейешевтең* исеме студенттарҙың 4 декабрҙәге йыйылышы менән бәйләнгән.

Был декабрь ваҡиғаһын, университет тормошон билдәле тарихсы профессор *Р. И. Нафиҡовтың* «Революцияға беренсе аҙым» тигән 1970 йылда русса сыҡҡан китабы, Татар һәм Башҡорт АССР-ҙары Үҙәк дәүләт архивтарының материалдары асыҡ итеп күҙ алдына баҫтыра.

*Мирсаяф Бейешев* тураһында һуңғы йылдарҙа бер нисә мәҡәлә донъя күрҙе. Береһе уны студент итеп, икенсеһе тыуған яғында йәшәүен һүрәтләй. Ләкин улар *Мирсаяфтың* тыуған яғын, ғаиләһен, гимназияла һәм университетта уҡыуын тулыһынса асыҡлай тип әйтеп булмай. Был материалдың авторы ла архив сығанаҡтарының наҡыҫлығы арҡаһында тулы мәғлүмәттәр биреүгә дәғүә итә алмай.

*Мирсаяф Бейешевтең* тыуған яғы — хәҙерге Баймаҡ районының Хәсән ауылы. Кантон осоронда был ауыл Верхнеуральск өйәҙендә барлыҡҡа килгән 6-сы кантонға ингән.

1834 йылда Ирəндек теҙмəһе араһында Ҡаракүбек йылғасығы буйындағы утарға Сибай ауылынан *Рысҡужа Асылғужин* өс улы менəн, *Төсҡəле* һəм *Сирғəле Рысҡужиндар,* алты бер туған *Байназаровтар, Аҡназар Яҡупов* ике улы менəн, *Кинйə, Нарынбай, Ҡаҙаҡбай Бикйəновтар, Исəнғол Мəмбəтсуриндар* күсеп ултырған. Ошо урында Хəсəн ауылы нигеҙлəнгəн. Ауыл Сибай кешеһе, бер нисə ауыл менəн идара итеүсе йорт старшинаһы *Хəсəн Байназар улы Бейешевтең* исемен алған. *Бейешевтең* хəрби чины — йөҙ башы. Əйтергə кəрəк, *Хəсəн Бейешев* был ауылға туп-тура Сибайҙан килмəгəн. Тəүҙə уны Йəнйегет ауылына күсергəндəр. Яңы ауылға шул Йəнйегеттəн килгəн.

*Хəсəн Бейешев* 6-сы кантондың билдəле эшмəкəре булған. Йорт старшинаһы вазифаһын 1838—1846 йылдарҙа шул кантондың башлығына алмаштырған. Был кантонда 50 мең кеше йəшəгəн.

*Мирсаяф* ошо ауылда 1862 йылдың 27 сентябрендə *Хəсəн Бейешевтең* ғаилəһендə тыуған. Был дата уның өлгөргəнлек аттестатында күрһəтелгəн. Əсəһе *Ғилмияза Сирбаева. Мирсаяфтан* башҡа *Хəсəн Бейешевтең* дүрт ҡатындан 9 улы, бер ҡыҙы булған.

*Мирсаяфтың* гимназияға тиклем ҡайҙа уҡыуы билдəһеҙ. Əммə 15 йəштəн алып 24 йəшенə тиклем 1877—1886 йылдарҙа ул Ырымбур гимназияһында уҡыған һəм уны уңышлы тамамлаған. Дин, логика, рус, латин, грек, немец, француз телдəре, математика, физика, математик география, тарих, география фəндəренең 9-ын уҡытыусылар кəңəшмəһе «4» һəм «5», ə һынау һөҙөмтəһендə 5 фəнде шул уҡ билдəлəргə баһалаған. Ҡалғандарынан уртаса билдəһе алған. Тəртибе «5»-кə, дəрескə йөрөү, дəрес əҙерлəү, яҙма эштəрҙе башҡарыу — «4»-кə, тырышлығы «5»-кə, бөтə фəндəргə лə уның ҡыҙыҡһыныуы «4»-кə баһаланған. Был билдəлəрҙе һəйбəт тип əйтеп була.

Гимназияны уңышлы тамамлағас, *Мирсаяф* шул уҡ 1886 йылда ҡаҙна иҫəбенə Ҡазан университетының юридик факультетының студенты итеп ҡабул ителгəн. Лəкин ауырыу сəбəпле Ҡазанға бара алмаған. Килəһе йылдың 17 августа уҡыуға алыуҙы һорап, шул уҡ университеттың ректорына ғариза яҙған һəм ҡабул ителгəн.

Шул йылда уҡ Ҡазан университетында яҡташ студенттарҙың 20 йəшерен ойошмаһы — землячество — булып, улар бик күп йəштəрҙе үҙ эсенə алған. Был хəл батша властарын бик борсой. Йəшерен түңəрəктəрҙə ҡатнашҡан студенттарҙы юғары уҡыу йортонан ҡыуыу менəн янағандар. Шул уҡ йылдың көҙөнə землячествоның һаны кəмегəн. Унда тик Ҡазан,

Сембер, Һамар, Вятка, Үрге Волга, Екатеринбург, Себер, Өфөнән килгән студенттарҙың түңәрәктәре генә ҡалған. Студенттар араһында реакцион университет уставы нигеҙендә уларҙы күҙәтеү, донос, шпионлыҡ хөкөм һөргән.

1887 йылдың йәйендә *В. И. Ульянов-Ленин* юридик факультетҡа уҡырға инеп, алдынғы студенттар менән бәйләнеш урынлаштыра һәм революцион түңәрәктә актив ҡатнаша. Унда Маркс, Белинский, Чернышевский, Добролюбов, Щапов, Писаревтың әҫәрҙәре өйрәнелгән. Университеттарҙа хөкөм һөргән полиция режимына ҡаршы студенттар бик актив күтәрелә. 1887 йылдың 4 (16) декабрендә Ҡазан университетының актовый залында 256 студент йыйыла, шуларҙың 142-һе медицина, 61-е юридик факультеттан, ҡалғандары — физика, математика, филология-тарих факультетынан һәм Ветеринария институтынан булғандар. Элегерәк бер мәҡәләлә уның медицина факультетында уҡыуын яңылыш яҙған инек. Студент-юрист икәнлеге уның уҡырға ингәндә үтенес яҙыуында һәм студенттарҙың инспекторына биргән ғаризаһында күренә:

«Господину инспектору студентов
Императорского Казанского университета
студента юридического факультета
II семестра *Мирсаяфа Биишева*

Заявление.

Прилагая у сего квитанцию в уплате денег, имею честь заявить, что на предстоящее весеннее полугодие 1888 года я записался на следующие курсы:

преп. Загоскин. История русского права, 6 лекций;
преп. Дормидонтов. История римского права, 6 лекций;
преп. Загоскин. Энциклопедия права, 2 часа.

Декан (подпись)

Студент II семестра юридического факультета
*Мирсаяф Биишев».*

Ошо йыйылышта студенттар реакцион университет уставын юҡҡа сығарыуҙы, студент ойошмаларының эшен рөхсәт итеүҙе, элегерәк университеттан ҡыуылған студенттарҙы кире ҡайтарыуҙы талап иткәндәр. Бына ошо талаптар тупланған петицияны студенттар университет ректорына тапшырған.

Был йыйылышты әҙерләүҙә һәм уны үткәреүҙә *Ульянов* эшлекле ҡатнашлыҡ күрһәткән. Уны университет инспекторы актовый залға бәреп инеүселәрҙең алдында, сыуалышта иң

әүҙем ҡатнашыусыларының береһе — йоҙроҡтарын төйөп, ныҡ ярһыған итеп һүрәтләй. Унда ҡатнашҡан *Н. Алексеевтың* һүҙҙәренә ҡарағанда, батша иҙеүе, ғәҙелһеҙ суд һәм йәшәп килгән режимға ҡаршы студенттар көрәшенең кәрәклеге тураһында *В. Ульянов* ялҡынлы телмәр һөйләгән.

Ҡазандағы хөкүмәт әһелдәрен студенттарҙың был тәүге революцион сығыштары үтә борсоған. Университет эргәһендә бер батальон һалдат әҙер торған. Полиция һәм ғәскәр саҡыртыу ҡурҡынысы арҡаһында ғына студенттар актовый залды бушатҡандар. Ҡаршылыҡ билдәһе итеп күптәре студент билеттарынан баш тартҡан. 5 декабрҙә *В. Ульянов* нәфрәт һәм ҡаршылыҡ билдәһе итеп, университеттан китеү тураһында ғариза яҙған. Күп кенә студенттар ҡулға алынып, төрмәгә ябылған. 5 декабрҙә сыуалышта әүҙем ҡатнашҡан 47 студент университеттан ҡыуылған. Уларҙың һәр береһенә ниндәй ҙә булһа уҡыу йортонда белем алыу мөмкинлегенән мәхрүм иткән «бүре билеты» бирелгән. Исеме штраф кенәгәһенә индерелеп шелтә алған *Мирсаяф Бейешев* сыуалышта ҡатнашҡан ҡалған 208 студент кеүек уҡыуҙа ҡалдырылған. Ләкин юғары уҡыу йортон тамамлау *Мирсаяфҡа* насип булмаған. Ауырыу сәбәпле юридик факультеттың 4-се курсынан уҡыуын туҡтатырға мәжбүр булған. Тыуған яҡтарына ҡайтып бер нисә йыл үтеүгә ул донъя ла ҡуйған.

Студенттарҙың революцияға табан яһаған беренсе аҙымында бер сафта барған *Мирсаяф Бейешевтең* исемен мәңгеләштереүҙең кәрәклеге һәм уның ифрат ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә буласағы тураһында бер яҙған инек. Был тәңгәлдә Бөтә Рәсәй тарих һәм культура ҡомартҡыларын һаҡлау йәмғиәтенең Башҡортостан республика һәм уның Баймаҡ район бүлектәренең *Мирсаяфтың* исемен мәңгеләштереүҙә эш башҡарһа, яҡшы булыр ине тигән теләк белдергәйнек. Ләкин әлегә тиклем ул таҡтаташ күренгәне юҡ. Уның исемен мәңгеләштереү мәсьәләһен күтәреү уның нисек уҡыуы, ниндәй синыфтан сығыуы, атаһының кем булыуына ҡағылмай, ә уның Ҡазан университеты студенттары сходкаһында әүҙем ҡатнашыуына бәйле. Университетта уҡыған бөтә студенттар ҙа унда ҡатнашмаған. Уларҙың алдынғы өлөшө генә күтәрелеп сыҡҡан. Шулар араһында беҙҙең яҡташыбыҙ *Мирсаяф Бейешев* та булған. Император исемен йөрөткән уҡыу йортонда ҡаҙна иҫәбенә уҡыған *Мирсаяфтың* башҡалар кеүек университетта йәшәп килгән реакцион тәртипкә ҡаршы сығыуы һәм шуның өсөн унан ҡыуылыу ҡурҡынысы булыуға ҡарамаҫтан шул аҙымға барыуы — үҙе бер тәүәккәллек, үҙе бер фәһемле үрнәк. Шуға күрә лә Ҡазан университетында сходкала ҡатнашыусыларҙың, шул иҫәптән *Мирсаяф Бейешевтең* дә, ҙурай-

тылған һүрәттәре уларҙың ҡылған изге эшенә ихтирам йөҙөнән әле булһа эленеп тора. Шул турала китаптар ҙа сыға. Ҡазанда ошо сходканың 100 йыллыҡ юбилейына арналған фәнни конференция ла уҙғарылды. Ҡазан сходкаһы — студенттар тормошонда уға тиклем булмаған яңы нәмә. Был ыңғай тарихи факт үҙе юғары әһәмиәткә эйә, уның һабаҡтары студенттарҙың артабанғы хәрәкәтендә файҙаланылған. Тарихи шәхестәрҙән беҙ бик күпте талап итәбеҙ ахыры.

*Мирсаяф Бейешевтың* исеме тарихтың яҡты биттәренән йәнә «кантон балаһы» һәм «дворян тоҡомонан» булыуы арҡаһында һыҙып ташланырға тейеш түгелдер. *Хәсән Бейешевтың* кем икәнлеге тураһында әйтелде инде. Ысынлап та батшаға тоғро хеҙмәт итмәгән кешене кантон башлығы итеп билдәләмәүҙәре көн кеүек асыҡ. *Хәсән* — үҙ заманының улы, шуға күрә, чиновник булараҡ, йәшәп килгән ҡоролошто яҡлаған, уның поход һәм һуғыштарында ҡатнашҡан. Шундай хеҙмәттәре өсөн йөҙ башы дәрәжәһенә ирешкән. Ләкин дворянлыҡ ала алмай донъя ҡуйған. 1863—1865 йылдарҙа кантон идаралығы бөтөрөлгәс, обер-офицерҙарҙың балалары дворянлыҡ дәрәжәһен юллайҙар. Ләкин властар был исемде уларға биреүҙән баш тарта. Дәғүәселәр, шул иҫәптән *Хәсән Бейешевтең* уландары ла, тик «Потомственный почетный гражданин» тигән исемде генә алыуға ирешкәндәр. Өҫтәп шуны ла әйтәйек: башҡорттарҙан дворян исемен алыусыларҙың тик бер-икеһендә генә крепостной крәҫтиәндәре булған. Ҡалғандары ябай общинниктан ныҡ айырылмаған.

Кантон балаһын ололау — хата юл ул, тип барһаҡ, беҙ Октябргә тиклем йәшәгән һәм мәҙәниәт өлкәһендә хеҙмәт иткән, шулай уҡ халыҡтың азатлығы өсөн көрәшселәрҙән уларҙың синфи сығышына ҡарап баш тартҡан булыр инек. Заманында хатта *Пушкиндан, Толстойҙан* баш тартырға, мәҙәниәт биттәренән уларҙы һыҙып ташларға өндәүселәр булманымы ни беҙҙең тарихта? «Саф» пролетар мәҙәниәт төҙөүҙә традицияға, күсәгилешкә таяныуҙы инҡар итеүселәр еңһә, илебеҙ рухи яҡтан ниндәй фәҡир булыр ине...

Илебеҙҙәге 1825—1917 йылдарҙағы азатлыҡ хәрәкәте этаптарына иғтибар итһәк, уның беренсе осоронда тик дворян сословиеһынан сыҡҡан революционерҙар, икенсеһендә — төрлө ҡатламдан — дин әһелдәре, сауҙагәрҙәр һ. б. ғаиләнән сыҡҡан көрәшселәр, өсөнсөһөндә — эшселәр менән бер рәттән дворяндар сафынан сығыусы халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәшеүсе ялҡынлы революционерҙар булғаны һәр кемгә билдәле. Шул көрәшселәрҙең синфи сығышына ҡарап ҡына, уларҙың революцион эшмәкәрлеген инҡар итһәк, ниндәй ғәҙелһеҙлек булыр ине.

Бөйөк *Пушкиндың* «Халыҡтың мәҙәниәте уның үҙенең үткәненә ҡарата мөнәсәбәте менән билдәләнә» тип әйткәне бөгөн дә заманса яңғырай. Уҙған тормоштан һабаҡ алына. Шуға күрә үҙебеҙҙең тарихҡа, билдәле шәхестәрҙең эшмәкәрлегенә һаҡлыҡ менән ҡарау зарурлыҡ. *Мирсаяф Бейешевтең* исеме беҙгә яҡын, беҙ уның исемен мәңгеләштереү тураһындағы уйҙан тиҙерәк эшкә күсергә тейешбеҙ.



*«Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар»*

*Шәйехзада Бабич*

## 1. БАШҠОРТТОҢ АҪЫЛДАРЫ

Бөгөн ҡайһы бер көстәр Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарын бүлеп алырға йыйына. Улар белә: ниндәй ҙә булһа халыҡтың меңәрләгән йылдар буйы билдәгән аҫаба ерен тартып алыу өсөн, тәүҙә уның тарихын үҙләштерергә кәрәк, шунан инде шул «яһалма» тарих нигеҙендә һөжүмгә күсергә лә мөмкин.

Бөгөн гәзит-журнал биттәрендә әле теге ырыуыбыҙҙы, әле быныһын, әле теге ғалимыбыҙҙы, артисыбыҙҙы, батырыбыҙҙы, әле быларын беҙҙеке тип яҙып сығалар.

Бер генә миҫал: Ҡазанда сыҡҡан «Ҡазан утлары» журналында (Р. Әхмәтов, Р. Сибәғәтов) һәм Өфөлә сыҡҡан «Кызыл таң» гәзитендә (М. Саҙретдинов, С. Мөхәмәтнуров һ. б.) баҫылған мәҡәләләрҙә башҡорт шағиры *Ғәли Соҡорой* менән уның улы башҡорт мәғрифәтсеһе *Ғарифулла Кейековтың* татар икәнен күрһәтеп иҫбатларға тырышалар. Әлбиттә, улар яҙғандарҙа бер генә дәлил дә, документ та күрмәҫһең.

Ә ысынында *Ғ. Соҡорой* менән *Ғ. Кейеков* ҡайһы төбәк башҡорто һуң? Ғәҙәттә, *Ғәли Соҡоройҙоң* Өфө губернаһы Тәтешле олоҫонда тыуыуы тураһында яҙалар. Был дөрөҫ түгел. *Соҡорой* 1828 йылда донъяға килә, ә ул саҡта Тәтешле олоҫо булмай, ул 1866 йылда ғына барлыҡҡа килә. Буласаҡ шағир

ысынында ҡара табын ҡәбиләһенең бер ырыуы булған Ирәкте олоҫонда тыуа, ул һуңыраҡ Тәтешле олоҫона әйләнә. Шулай уҡ Ирәкте Ырымбур губернаһына инә, сөнки Өфө губернаһы 1865 йылда тәүгеһен икегә бүлеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. (Тәтешле олоҫоноң барлыҡҡа килеүе лә — ана шул йылда Ырымбур губернаһы икегә бүленеп, Башҡортостанда кантондар системаһы бөтөрөлгәндән һуңғы үҙгәртеп ҡороуҙар емеше.)

*Р. Кузеев* яҙыуынса, Ирәкте башҡорттары, табын ҡәбиләһенең башҡа ырыуҙары менән бергә Мейәс буйҙарынан күсеп килеп, Сулман (Кама) һәм Ыҡ буйҙарында төйәк тота башлай. Ҡазан ханлығы барлыҡҡа килгәс, ирәктеләр хан ҡулы аҫтында ҡала. Уларҙың бер бабаһы *Әхмәт Шәйех бей* Ирәкте исеме менән дә билдәле. «Ирәкте» һүҙен *Кузеев* «нығытма» (ҡәлғә), «нығытылған урын», йәғни кремль тигән мәғәнә менән бәйләй. Ирәктеләр ханға тоғро хеҙмәт итә. 1552 йылда Рәсәй Ҡазан ханлығын баҫып алғас, улар Танып йылғаһы буйына килеп төпләнә. 1600 йылдарҙың башында батшанан ошо яңы ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы биргән ярлыҡ алалар.

Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылғас, башҡорт ырыуҙарының ерҙәре олоҫтар тип йөрөтөлә башлай. Шулай уҡ Ирәкте ырыуы ла рәсми документтарҙа, ғөмүмән, рәсми телдә олоҫ (волость) тип йөрөтөлә.

Уның ере ике өлөштән торған. Береһенә башҡорт аҫабаларының Һәүәләй, Яңғыҙ Нарат, Тыҡан һәм Түбәнге Ҡанһөйәр (Балтас районы), Иҫке һәм Яңы Соҡор, Аҡсәйет, Мәмәт, Юрмаза (Юрмиязбаш), Үрге һәм Түбәнге Ҡоҙаш, Илмәт ауылдары инә. (Һуңғылары хәҙер Тәтешле районына ҡарай.) Ә Ирәктенең икенсе өлөшөн Үрге һәм Түбәнге Табын, Тирмән, Туғаш, Тамъян, Митрәй, Миллитамаҡ (Шәрип), Нарата҇ты, Вәрәшбаш, Имәнле, Һалауыс исемле башҡорт ауылдары тәшкил итә. Ырыуҙың беренсе өлөшө 1781 йылдан Бөрө өйәҙенә, 1798—1865 йылдарҙа шул уҡ өйәҙҙең 10-сы башҡорт кантонына инә. Ә икенсеһе Минзәлә өйәҙендәге 11-се башҡорт кантонына ҡараған.

Бөрө өйәҙендәге ирәктеләрҙең ер биләмәһе 1800 йылға 43 мең дисәтинә тәшкил иткән. 1834 йылға унда 1 143 аҫаба башҡорт (ир-егет) йәшәгән. Улар шулай уҡ үҙ ерҙәрендә ир затынан 437 типтәргә йәшәргә рөхсәт итә. Минзәлә өйәҙендәге Ирәкте олоҫоноң 61 мең дисәтинә ере булып, унда 1 913 аҫаба башҡорт (ир-егет) йәшәгән. Улар ҙа 112 мишәр, 1 801 типтәр, яһаҡ түләүсе һәм хеҙмәтсе (служилый) татарға үҙ ерҙәрендә йәшәргә рөхсәт иткән. Шулай итеп, Ирәкте башҡорттарының киң күңеллелеге арҡаһында XIX быуат аҙағына уларҙың аҫаба ерҙәрендә йәшәүсе килмешәктәр күбәйә.

*Ғәли Соҡоройҙоң* ата-олаталары — Бөрө өйәҙендәге Ирәкте олоҫо аҫабалары. Шағир шул олоҫтоң Соҡор ауылында донъяға килә. Ә XVIII быуаттың аҙағында унан айырылып сыҡкан яңы ауыл — Яңы Соҡор, ә элеккеһе Иҫке Соҡор тип йөрөтөлә башлай. Был ауылдарҙа тик аҫаба башҡорттар ғына йәшәгәнлеген архив материалдары ла раҫлай. Мәҫәлән, 1795 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу (5-се ревизия) мәғлүмәттәре буйынса, Иҫке Соҡорҙа — 20 йорт, уларҙың хужалары итеп 169 башҡорт теркәлгән. 1816 йылғы ревизия буйынса, унда 34 йортта 190 башҡорт көн күргән. 1834 йылда ауылда 47 өйҙә 219 башҡорт йәшәгән. Ә инде 1859 йылдағы 10-сы ревизия ваҡытында 54 йортта йәшәүсе 325 кеше теркәлгән. Артабан 1870 йылда унда 64 өйҙә — 348, 1920 йылда 125 йортта 588 аҫаба башҡорт иҫәпкә алынған.

Батша хөкүмәтенең Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылғанда килешелгән шарттарҙы боҙоуы — халыҡ ерен тартып алыуҙар, һалымдарҙың артыуы башҡорттарҙың баш күтәреүенә килтергән. Шуға күрә урыҫтарҙың үс алыу командалары ла был яҡта ҡанһыҙ йыртҡыслыҡ күрһәтә: ауылдарҙы яндыралар, ҡорал тоторҙай ир-егеттәрен язалайҙар, бала-сағаларын, ҡатындарын урыҫ алпауыттарына таратып бирәләр.

1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында ғәйнә, уран, ҡыр-танып, балыҡсы һәм башҡа ырыуҙар аҫабалары менән бергә ирәктеләр ҙә дәррәү күтәрелә. 1738 йылда ғәйнә ырыуы ерендәге Сәмин урманында тупланған 450 баш күтәреүсенең етәксеһе *Мортаза Хәлимов* — Соҡор ауылы аҫабаһы, ә балыҡсыларҙың (балыҡсы ырыуы башҡорттарының) 480 яугирының етәксеһе ирәктеләрҙең Ҡоҙаш ауылынан сыҡҡан *Мөсәлә Сапаров* була.

Документтарҙан күренеүенсә, Ирәкте олоҫоноң ике өлөшөндә 1738 йылда — *Соток Нәҙерғолов* менән *Сурағол Дусҡәйев,* 1742 йылда *Илеш Аҙнағолов* менән *Аҙнабай Теләков* старшина вазифаларын башҡарған. 1750 йылдан алып 1797 йылға тиклем бөтә ирәктеләрҙең баш старшинаһы булып *Шәриф Кейеков* торған. Ә *Ғәли Соҡорой* — шул *Шәриф Кейековтың* бүләһе. Уларҙың шәжәрәһенә күҙ һалһаҡ та, быны асыҡ күрергә мөмкин: *Иҫән хан,* уның улы *Быраҡ,* уның улы *Кейек,* уның улы *Шәриф, Шәрифтең* улы *Ғабдулла,* уның улы *Ғәбдессалих, Ғәбдессалихтың* улы *Мөхәммәтғәли,* уның улы *Ғарифулла.*

*Мөхәммәтғәли Ғәбдессалих* улы *Кейековтың* (беҙ уны *Ғәли Соҡорой* тип beләбеҙ, Соҡорой псевдонимын ул тыуған ауылы исеменән алған) ата-олаталарынан *Шәриф Кейеков* тарихи сығанаҡтарҙа йышыраҡ күренә. Был уның Ирәкте олоҫо старшинаһы вазифаһын башҡарыуына бәйле.

Башҡорт олоҫтарының старшиналары итеп тик башҡорт аҫабалары ғына һайланыуын һәр тарихсы белә. Башҡорт тарихында теге йәки был сит бауырҙың олоҫ башында тороуы күрелмәгән һәм мөмкин булмаған хәл. Күп осраҡта старшина вазифаһы быуындан быуынға күсә килгән. Шуға күрә XVIII быуат старшиналары — элекке ырыу-ҡәбилә бейҙәренең нәҫеленән булған аҫабалар.

Шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт ихтилалдарында башҡорт старшиналарының барыһы ла күтәрелмәй, ә ҡайһы бер өлөшө батша яғында булып, баш күтәреүселәр хәрәкәтен баҫтырыуҙа ла ҡатнаша. *Шәриф Кейеков* та шундай тоғро старшиналарҙың береһе. Ул 1755 йылдағы күтәрелеште баҫтырғанда батша яғында була, шулай уҡ 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалды ҡорал көсө менән баҫтырыуҙа ла ҡатнаша. Айырыуса тырышлыҡ күрһәткән баш старшина *Шәриф Кейеков* Ҡазанда баш күтәреүселәрҙе язаға тарттырыу өсөн төҙөлгән Йәшерен комиссияның башлығы *Павел Потемкин* менән осраша. «Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии» (Өфө, 1975) тигән документтар йыйынтығында — уның был эшмәкәрлеге хаҡында бик күп мәғлүмәт табып була.

*Пугачевҡа* ҡаршы сығырға өндәгән манифесты таратып йөрөгәндә, бер мәл ул баш күтәреүселәр ҡулына эләгә. Ләкин мөғжизә менән теге батша карателдәре уны ҡотҡарып алып ҡала. Пугачевсыларҙы Өфө эргәһендә тар-мар иткән подполковник *Михельсон Шәриф* старшинаға *Әбей батшанан* наградалар юллаған. Ул алтын һәм көмөш миҙалдар менән наградланған. Ҙур алтын миҙалдың ал яғына Әбей батшаның һүрәте төшөрөлгән, кире яғында ошондай яҙыу булған: «Башкирский главный старшина Шариф Кииков жалован сей медалью за верность, за храбрость, за его службу. 1774 год». Шул осорҙа ул төньяҡ башҡорттарының баш старшинаһы вазифаһын һәм прапорщик дәрәжәһен дә ала. Шуға ҡарамаҫтан, уның олоҫондағы 352 башҡорт йорто Пугачев хәрәкәтендә ҙур теләк менән ҡатнашҡан.

Ирәкте ерен ҡортомға биреүҙә һәм һатыуҙа ла *Шәриф* старшина алдан йөрөүселәр сафында була. *Шәрифтең* улы *Ниғәмәтулла Кейеков* атаһының эшен дауам итә һәм тәүҙә бер нисә ауылға баш булған йорт старшинаһы, ә 1825 йылда Бөрө өйәҙендәге 10-сы башҡорт кантоны башлығы итеп һайлана. 1802 йылда, 14-се класлы чинға лайыҡ булғас, дворян дәрәжәһе ала.

Бөтә ревизия материалдарында ла *Мөхәмәтғәли Ғәбдессалих улы Кейековтың (Ғәли Соҡоройҙоң)* тыуған йылы 1828 йыл тип күрһәтелә, тимәк, уны 1826 йылда тыуған тип яҙыусылар яңылыша.

Ғөмүмән, *Шәриф Кейековтың* нәҫеле Соҡор ауылы халҡының ҙур ғына өлөшөн тәшкил иткән. Мәҫәлән, 1850 йылда ундағы 43 ғаиләнең 15-е (35 проценты) *Шәрифтең* нәҫеле була. Хәҙерге көндә лә Соҡор ауылында *Кейековтар* нәҫеленән байтаҡ кеше йәшәй.

Һеҙ күргән шәжәрәлә, нигеҙҙә, *Ғәли Соҡорой* менән уның улы *Ғарифулла Кейековтар* тармағы ғына күрһәтелә. *Шәриф* улдары *Ғабдулла* менән *Ниғәмәтулланың* балаларының да быуындары бик ишле. Мәҫәлән, *Соҡоройҙоң* атаһы *Ғәбдессалихтан* тыш *Ғабдулланың* тағы дүрт улы була: *Төхвәтулла* (1768—1842), *Ҡорбанғәле* (1782 йылғы), *Әбделхалиҡ* (1787—1816) һәм *Ғәйнетдин* (1803 йылғы). Шуларҙан *Төхвәтулла* — һигеҙ ул атаһы. Улдары: *Ғибаҙулла* (1790—1847), *Мөхәмәтвәли* (1793—1823), *Хәбибулла* (1804 йылғы), *Фәтҡулла* (1805 йылғы), *Хисмәтулла* (1809—1814), *Шаһимәрҙән* (1812 йылғы), *Шәйәхмәт* (1816 йылғы), *Насибулла*.

*Төхвәтулла* улдарынан *Ғибаҙулланан Хисмәтулла* исемле (1826 йылғы), *Шаһимәрҙәндән Мөхәмәтзариф* (1843 йылғы) менән *Шәрәфетдин* (1845 йылғы), ә *Насибулланан Сафиулла* (1827 йылғы), *Мөхәмәтсадиҡ* (1830 йылғы), *Мөхәмәтәмин* (1832 йылғы) һәм *Исмәғил* (1834) исемле улдары ҡала.

*Ғабдулланың* икенсе улы *Ҡорбанғәле* өс ул атаһы була: *Фәйруш* (1812 йылғы), *Ғәлиулла* (1815 йылғы), *Зәйнулла* (1817—1847). Ә *Фәйруштән Әбделханнан* (1834 йылғы), *Исмәғил* (1843 йылғы), *Мозафар* (1848 йылғы), *Хөсәйен* (1850 йылғы) исемле, *Ғәлиулланан Шаһиҙулла* (1848 йылғы) менән *Хәбибулла* (1850 йылғы), *Зәйнулланан Мөхмөтҡәйүм* исемле улдары тыуған.

Ғабдулланың өсөнсө улы *Әбделхалиҡтың Әбделхәким* (1812 йылғы) менән *Йыһанша* (1814 йылғы) исемле улдары була. Үҙ сиратында *Әбделхәким* дүрт ул ҡалдыра: *Ғайса* (1836 йылғы), *Садрислам* (1842 йылғы), *Саҙретдин* (1844 йылғы), *Садриҡсан* (1846 йылғы). Ә *Йыһаншаның* өс улы — *Мөфәррәх* (1834 йылғы), *Мөхәмәтлатиф* (1838 йылғы), *Мөхәмәтсадиҡ* (1848 йылғы) була.

*Ғабдулланың* бишенсе улы (дүртенсеһе *Ғәбдессалих*) *Ғәйнетдин* — туғандары араһында иң күп бала атаһы, уның ун улы була: *Камалетдин* (1824 йылғы), *Ямалетдин* (1824 йылғы), *Баһауетдин* (1826 йылғы), *Солтанәхмәт* (1829 йылғы), *Ғәбделмөсәүир* (1841 йылғы), *Яҡуп* (1843 йылғы), *Йосоп* (1845 йылғы), *Дауыт* (1847 йылғы), *Яхъя* (1849 йылғы) һәм *Муса* (1849 йылғы).

Шәрифтең өсөнсө — кесе улы — *Ғабдулланың* ҡустыһы *Ниғәмәтулланың* да (шәжәрәлә күрһәтелгән) балалары бик ишле була. Ул үҙенән һуң ун ул ҡалдыра. Бына улар: *Ғөбәй-*

*ҙулла* (1805—1840), *Мөхәмәтша* (1810 йылғы), *Шәриф* (1821 йылғы), *Дәүләтша* (1823 йылғы), *Солтанша* (1834 йылғы), *Ғәйнулла* (1834 йылғы), *Әхмәтша* (1837 йылғы), *Шаһингәрәй* (1839 йылғы), *Солтангәрәй* (1841 йылғы), *Тимерша* (1844 йылғы). Шуларҙан иң өлкәндәре *Ғөбәйҙулланан* өс ул: *Арыҫланбәк* (1833 йылғы), *Арыҫланбай*(1832 йылғы) һәм *Хәмиҙулла* (1837 йылғы), ә икенсеһе *Мөхәмәтшанан Шаһыбул* (1843 йылғы) менән *Нурмөхәмәт* (1847 йылғы) исемле улдары була.

Әлбиттә, ул балаларҙан да нәҫелдәре дауам итеп, улар бөгөнгө көндә лә Иҫке Соҡор ауылында һәм Тәтешле районындағы бүтән ауылдарҙа, шулай уҡ башҡа төбәктәрҙә лә донъя көтәләр.

Артабан Соҡор ауылының *Кейековтар* нәҫеленән булмаған башҡа кешеләренең исемлеген тәҡдим итәбеҙ. Хәҙерге ваҡытта көн итеүсе уларҙың нәҫелдәре исемлектә ата-олаталарын табыр тип ышанабыҙ.

1) *Йәрмөхәмәт Йәҙегәров* (1766—1838).

Улы — *Сәйфелмөлөк* (1794 йылғы), уның улдары: *Ҡотләхмәт, Ибраһим, Фазләхмәт, Фазләхмәттеке — Хажиәхмәт.*

2) *Ғөзәйер Йәҙегәров* (1784—1830).

Улдары: *Хөснөтдин, Хөснимәрҙән, Әбделиҡсан* (1815 йылғы), *Әбделманнан* (1820).

3) *Ишнияз Йосопов* (1798 йылғы, *Ғөзәйерҙең* ике туған ҡустыһы).

Улдары: *Насретдин, Саматулла, Назметдин* (1845).

4) *Мөхәмәтша Ишмөхәмәтов* (1813 йылғы).

Улы — *Хәйҙәрша* (1842 йылғы).

5) *Ғәлекәй Юлдашев* (1782—1840).

Улы — *Ғәбиҙулла* (1838 йылғы).

6) *Әҙмөхәмәт Юлдашев* (1783—1842).

Тәүге улы — *Мөьминғол* (1809 йылғы), уның улдары: *Хәмиҙулла, Хөббөтдин, Мөхәммәт.* Икенсе улы — *Хәйретдин* (1831 йылғы).

7) *Шаһиморат Ибраһимов* (1818 йылғы).

Улы — *Шаһивәли,* ике туған ағаһы — *Мәүлет Шамҡаев.*

8) *Байрамғол Сәфәров* (1771—1843).

Беренсе улы — *Фәйрүз* (1791—1845), уныҡы *Әбделнафиҡ, Әбделнафиҡтыҡы — Әбделшафиҡ* менән *Миңлеғәле.*

Икенсе улы — *Әбделнасир* (1818 йылғы), уның улы — *Әбделбасир.* Өсөнсө улы — *Фәйруш,* артабан *Йыһанша* менән *Шаһимәрҙән.*

9) *Әхтәм Ғөбәйҙуллин* (1798 йылғы).

Улы — *Әхмәтша* (1822 йылғы), уныҡы — *Әбделшәйех* менән *Мөхәмәтшәйех.*

10) *Хоҙайғол Ғөбәйҙуллин* (1798 йылғы).




*Ғәли Соҡоройҙоң* (Мөхәммәтғәли Ғәбдессалих улы Кейековтың) *шәжәрәһе*

Улдары — *Муллаяр, Ғилмийән, Әхмәҙей, Әхмәтша, Ғәлимша.*

11) *Әхәтулла Ғөбәйҙуллин* (1815 йылғы).

Улы — *Ғәбделлатиф,* ҡустылары: *Сәғәҙей, Вәлиулла, Нәбиулла, Әхмәҙулла,* һуңғыһының улы — *Әхмәтҡәләм.*

12) *Мөхәмәтғәле Шәрейев* (1799 йылғы).

Улдары: *Фәүәретдин, Хәйретдин, Хисмәтулла, Ғәләүетдин.*

13) *Хисмәтулла Айҙыҡаев* (1793—1843).

14) *Исмәғил Мортазин* (1762 йылғы).

Улы — *Мөхәмәтсадиҡ,* уның улы — *Ғайса.*

15) *Әшрәф Исхаҡов* (1804 йылғы).

Улдары: *Әхмәтшафиҡ, Бәҙәмша, Мөхәмәтхафиз, Әбделфәүәрис,* һуңғыһының улы — *Низаметдин.*

16) *Ҡасфран Мөьминов* (1793—1845).

17) *Миңлеғол Мөьминов* (1806 йылғы).

Улдары: *Әбделвәхит, Муллагилде, Вәлиша.*

18) *Хөсрәүшар Йомағолов* (1810 йылғы).

Улдары: *Хажмөхәмәт, Фазулла, Ғарифулла, Ширахетдин, Ғәйзәтулла, Нәметдин.*

19) *Йомаҡай Мәҡсүтов* (1782 йылғы).

Улдары: *Шаһимарҙан* (1815 йылғы), *Шаймөхәмәт* (1850 йылғы).

20) *Фәтҡулла Әбдрәшитов* (1806 йылғы).

Улдары: *Нурмөхәмәт* (1845 йылғы), *Вәлиәхмәт* (1849 йылғы).

21) *Фәйзулла Әбдрәшитов* (1808 йылғы).

Улы — *Хәсән* (1850 йылғы), ҡустылары — *Зәйнибәшәр* (1822 йылғы), *Зәйнулла* (1843 йылғы).

22) *Шәмсетдин Сәғитов* (1785—1842).

Улы — *Мөхәмәтйәр* (1816 йылғы), уныҡы — *Дәүләтйәр* (1838 йылғы) менән *Дәүләтбай* (1849 йылғы). Икенсе улы — *Сәйфетдин* (1820 йылғы), уның улы — *Миңлешәйхетдин.*

23) *Рәхмәтулла Әмиров* (1807—1846).

Ҡустылары: *Фәйзулла* (1812 йылғы), *Ҡорбанай* (1814 йылғы).

24) *Иҙрис Энәсов* (1783—1835).

Улы — *Әһлетдин* (1828 йылғы).

25) *Ғәйнулла Әбделғафаров* (1785 йылғы).

Беренсе улы — *Сәхрәтулла* (1814 йылғы), уның улдары — *Сибәғәтулла* (1844 йылғы) менән *Сәғиҙулла* (1846 йылғы). Икенсе улы — *Заһиҙулла* (1825 йылғы), кесеһе — *Әхтәрей* (1829 йылғы).

26) *Искәндәр Мәхмүтов* (1786—1848).

Улы — *Дәүләтша* (1813 йылғы), уның улдары: *Мөхәмәтлатиф* (1846 йылғы), *Мөхәмәтнур* (1850 йылғы).

27) *Әфләтүн Әбделманнапов* (1810—1849).

Ҡустыһы — *Әйүп* (1812—1846), уның улдары — *Ғиззәтулла* (1836), *Төхрәтулла* (1845 йылғы).

28) *Хәйрибәшәр Мәхмүтов* (1792—1842).

29) Указлы мулла *Мирхәйҙәр Рәхмәтуллин* (1824 йылғы). *Мирхәйҙәрҙе* 1848 йылда Диниә назараты ауылға мулла итеп ебәрә. Ул үҙе Өфө өйәҙе Оло Әрем ауылынан. Унан башҡалар бөтәһе лә — Ирәкте ырыуының аҫаба башҡорттары.

...Алтыға берҙе ҡушып, ун булмағандай юҡты бар итергә тырышыуҙан да бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Башҡорт мәҙәниәтенә Иҫке Соҡор ауылы биргән ике зыялының милли сығыштарын үҙҙәренән дә асыҡ әйткән кеше юҡтыр: «Беҙ урман башҡорто булабыҙ» (*Ғ. Соҡорой*), «Беҙҙең башҡорт тоҡомо...» (*Ғ. Кейеков*).

## 2. ТАРИХИ ДОКУМЕНТТАР ЭҘЕНӘН



Мәшһүр башҡорт шағиры, башҡорт әҙәбиәтенең классигы бөйөк *Мифтахетдин (Аҡмулла) Камалетдиновтың* ғилми биографияһы әлегә тиклем яҙылмаған. Уның тураһындағы китаптарҙағы фактик яҡтан буталсыҡ, хата фекерҙәр, тарихи документтарға ҡапма-ҡаршы килгән раҫлауҙар был мәсьәләгә асыҡлыҡ индереүҙең кәрәклеге хаҡында һөйләй.

Һүҙҙе шағирҙың тыуған еренән башлайыҡ.

**Тыуған губернаһы һәм өйәҙе.** *Мифтахетдин Аҡмулла* тураһында яҙыусылар уның тыуған урыны итеп Өфө губернаһын яңылыш күрһәтәләр. Ул Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙендә донъяға килгән. Өфө губернаһы иһә Аҡмуллаға 34 йәш тулғас, йәғни Ырымбур губернаһы 1865 йылда икегә бүленгәс кенә, барлыҡҡа килгән.

**Тыуған олоҫо.** Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған ауылы Елдәр олоҫона ҡарағанлығын профессор *Ә. И. Харисов* яҙып ҡалдырҙы. Ләкин үткән быуаттың 30-сы йылдарында шул исемле башҡорт олоҫо бөтөнләй булмаған. Аҙаҡ булып та, *Аҡмулланың* ауылы ул олоҫ ҡарамағына инмәгән. 1864 йылда Ырымбур губернаһын административ яҡтан яңы олоҫтарға бүлгәндәр. Бына шул ваҡытта башҡорттарҙың ҡан ҡәрҙәш олоҫтары территориаль олоҫтар менән алмаштырылыу һөҙөмтәһендә, *Аҡмулланың* тыуған ауылы менән бер рәттән бөтәһе 9 ауыл Елдәр тигән олоҫҡа ингән. Ләкин был үҙгәреш *Аҡмуллаға* 33 йәш тулғас ҡына булған.

Дим йылғаһы бассейнын меңле башҡорттары биләгән. Бына шул меңлеләрҙең 12 олоҫоноң береһенә — Күлиле-меңлегә — *Аҡмулланың* ауылы ҡараған. Был олоҫта 1795 йылда 12 башҡорт ауылы булған, ә *Аҡмулла* донъяға килгән мәлдә уға 31 ауыл ингән.

**Тыуған ауылы.** Ана шул ауылдар араһында *Аҡмулла* тыуған Туҡһанбай тигәне лә бар. Был ауылдың исемен дә боҙоп күрһәтеү осраҡтары булғылай. Мәҫәлән, Ҙур Совет энциклопедияһы (1-се том, 1970 йыл) уны Тусанбай итеп атаған.

Был ауыл исеме кеше исеменән яһалған. Быны ауылда *Туҡһанбай* исеме һәм фамилияһының булыуы раҫлай. XVIII быуаттың аҙағында бында *Туҡһанбай Араптанов* һәм 1822 йылға тиклем уның улы йөҙ башы *Ураҙгилде Туҡһанбаев* йәшәгән.

Туҡһанбай халҡы ярым күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Уның кешеләре 7—8 саҡрымдағы Ҡамышлы йылғаһы буйына яҙлауға сыҡҡан. Шул ерҙән экренләп ауылға яҡыная бареп, Шар йылғаһы үҙәнендә йәйләүгә туҡтағандар. Булған аҙ-маҙ игенде һуғыр өсөн, йәйләүҙән йәнә ауылдан 4 саҡрым самаһы Көҙләү йылғаһы буйына көҙләүгә күскәндәр. 1864 йылда Туҡһанбай һәм Яңы Ҡанғол ауылдарында бөтәһе 300 баш йылҡы, 400 баш һыйыр һәм 300 ваҡ мал аҫралған. Әлбиттә, был һан ярым күсмә малсылыҡ хужалығы өсөн аҙ. Тимәк, ауыл кешеләре тормошонда игенселек өҫтөнлөк ала барған. Әйтәйек, 1842 йылда 167 кешенең һәр береһенә ни бары 5—6-шар бот ҡына иген сәселгән. Ужым культураларын улар хуп күрмәгән. Шуның өсөн бер бот та ужым игене сәсмәгәндәр. Был хәл Туҡһанбай халҡының шул осорҙа ярым күсмә тормоштан ултыраҡ хәлгә, малсылыҡтан игенселеккә яңыраҡ ҡына күсә башлауҙары тураһында һөйләй.

Туҡһанбай бик бәләкәй ауыл булған: 1795 йыл унда ни бары 15 ғаилә йәшәһә, 1816, 1834, 1850, 1859 йылдарҙа ла ул һан 20-нән артмаған.

Ғаиләләрҙең һаны бер кимәлдә тороуы уларҙың һәр береһе үҙ нәүбәтендә үҙгәрешһеҙ ҡалған тигән һүҙ түгел. Бәләкәй ғаилә (ата-әсә һәм бәлиғ булмаған балалары) нигеҙендә ҙур йәки бүленмәгән ғаилә барлыҡҡа килә торған. Мәҫәлән, 1816 йылда Туҡһанбайҙа 20 ғаиләнең 19-ы бәләкәй, ә береһе бүленмәгән ғаиләнән торған (ата-әсәһе менән өйләнгән улдары бергә йәшәгән). 1834 йыл 10 бәләкәй һәм 10 бүленмәгән ғаилә (уларҙың 4-еһендә ата-әсәһе менән бергә өйләнгән улдары, тағы 4-еһендә өйләнгән ике-өс ағалы-ҡустылы, 2-һендә — атаһының ҡустыһы менән бер туған ағалы-ҡустылылар үҙ ҡатындары менән), 1850 йыл бөтәһе 7 бәләкәй һәм 13 бүленмәгән ғаилә иҫәпләнгән (бергә йәшәгән өйләнгән ағалы-

ҡустылыларҙың ғаилә һаны 10-ға еткән). Тағы 3 ғаиләне бергә йәшәүсе аталы-уллылар ғаиләһе тәшкил иткән. 1859 йылда 20 ғаиләнең береһе, үлеп бөтөү сәбәпле, юҡҡа сыҡҡан. 6 бәләкәй (бөтә ғаиләнең 30 проценты), 13 бүленмәгән (65 проценты) ғаилә булған. Күренеүенсә, XIX быуаттың 43 йылы эсендә (1816—1859) бәләкәй ғаиләләр 19-ҙан 6-ға кәмеһә, бүленмәгән ғаилә һаны берҙән (5 процент) 13-кә (65 процент) артҡан.

Бындай хәл аңлатыуҙы талап итә. Бүленмәгән ғаилә, ғәҙәттә, хәлле кешеләрҙә барлыҡҡа килгән. Ләкин 13 ғаилә лә байҙар тип әйтеп булмай. Ауыл байҙарына Туҡһанбайҙа йәшәгән ясауыл, йөҙ башы, йорт старшинаһы (уның ҡарамағында бер нисә ауыл) һәм указлы имам (*Аҡмулланың* атаһы) инергә мөмкин булған.

Бәләкәй ғаиләнең үҫешендә өйләнгән улдары айырылып сыҡһа, ғаиләнең экономик хәлен мөшкөлләткән. Бәләкәй ғаиләнең нигеҙендә бүленмәгән ғаиләнең барлыҡҡа килеүе (улы башҡа сыҡмай) уның иҡтисади мөмкинлеген киңәйткән һәм нығытҡан. 1798—1865 йылдарҙа башҡорттарҙың төп бурысы булып хәрби хеҙмәт торған. Унан башҡа ла бик күп феодаль һалым, йөкләмәләр түләргә һәм үтәргә мәжбүр ителгәндәр. Шуға күрә был һалымды эре ғаиләгә үтәүе еңелерәк булған. Ошо арҡала ике ағалы-ҡустылы, атай һәм улдары, атайҙың ҡустыһы менән ағайлы-ҡустылылар айырым ғаилә ҡороуҙан берләшеүҙе артыҡ күргәндәр. Был процесҡа рус дәүләтенең закондары һис һүҙһеҙ булышлыҡ иткән: феодаль йөкләмәләрҙең үтәлешен йән башынан түгел, ә һәр бер ғаиләнән, хужалыҡтан талап иткәндәр.

Ғаилә һаны бик артмаһа ла, ундағы кешеләр һаны үҫкән. 1795 йылда Туҡһанбайҙа — 61, 1816 йылда — 124, 1834 йылда — 167, 1850 йылда — 205, 1859 йылда 232 кеше йәшәгән. Уртаса алғанда, һәр ғаиләгә 1795 йылда — 4, 1816 — 6,2, 1834 — 8,4, 1850 — 10,3, 1859 йылда 11,6 йән тура килгән. Күмәкләп бер ғаиләлә йәшәү ярым күсмә тормош алып барған башҡорттарҙа бүленмәгән ғаиләнең киң таралыуы тураһында һөйләй.

Туҡһанбай — аҫаба башҡорттарының ауылы. Аҫаба (вотчинник) хоҡуҡтарынан файҙаланып, был ауыл кешеләре исеменән *Көсөкбай Йәмәкәев* һәм башҡалар Ҡамышлы буйындағы ерҙәрҙе 1789 йылда 35 йылға рус крәҫтиәненә ҡортомға бирә. 1794 йылда Ағиҙел буйындағы ерҙе Күлиле-меңлеләр сержант *Хлебниковҡа* һатҡан. Улар араһында Туҡһанбайҙан *Батырша Алдаров* һәм *Туҡһанбай Араптановтар* булған (Материалы по истории Баш. АССР, т. V, 198—199, 338-се биттәр).

Туҡһанбай ауылында, ерле халыҡтан тыш, башҡа милләт вәкилдәре йәшәмәгән. Был турала XIX быуатта үткәрелгән ре-

визия материалдары һөйләй. Шулай ҙа 1795 йылда был ауылға Әбдрәшит ауылынан яһаҡ түләүсе татар *Абдул Уразаев* күсеп килгән. Уның ике улы ла өйләнгән булған: береһе — типтәр (милләте күрһәтелмәгән), икенсеһе башҡорт ҡыҙына. Ләкин 1816, 1834 йылғы ревизияла *Уразаев* һәм уның улдары Туҡһанбай ауылында күрһәтелмәгән. Тимәк, ул ғаилә үҙ ауылына кире ҡайтҡан.

1834 йылғы VIII ревизия Туҡһанбайҙа 132 аҫаба һәм 35 ебәрелмеш (этәмбәй — припущенник, ерһеҙ) башҡорттарҙың барлығын күрһәтә. Унан алдағы VII ревизия иһә ебәрелмеш башҡорттарҙың бында булмауын раҫлай. Тимәк, ебәрелмеш башҡорттар аҫабалар ауылына 1816—1834 йылдар араһында ҡабул ителгән. (VIII ревизия бөтәһе 380 мең башҡорттоң 66 меңен ерһеҙ-ебәрелмеш итеп күрһәткән).

Туҡһанбай ауылы тәүҙә 7-се, аҙаҡ 12-се, 13-сө башҡорт кантонының 28-се йортона ҡараған. 1855 йылдан алып ул 22-се кантондың 14-се йортона ингән.

Был ауылда кантон, йорт идаралығының чиновниктары — ясауыл, йөҙ башы, йорт старшинаһы һәм дин әһелдәре — аҙансы, указлы мулла һәм имам йәшәгән.

Туҡһанбай халҡы ил менән бергә көн күргән. Наполеон яуына ҡаршы туҡһанбайҙар ҙа дәррәү киткән. Ватан һуғышы яландарында 1812—1814 йылдарҙа ошо ауылдан *Ҡорманғол Дәүләтшин* (23 йәш), *Муатша Алдаров* (48 йәш), *Биксәнтәй Исламғолов* (44 йәш), *Исламғол Миндекәев* (29 йәш) ятып ҡалған. *Дәүләтша Алдаров* шул һуғышта ғәйеп булып, тик 1817 йыл ғына сит яҡтарҙан үҙ ауылына ҡайтыу бәхетенә ирешкән. Туҡһанбай халҡы төрлө социаль ҡатламдарҙан торған. Ауыл ярлыларының социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы көрәше тураһында ике кешенең Себергә һөрөлөү факты һөйләй.

Бына ошо Туҡһанбай — *Аҡмулланың* тыуған ауылы.

**Тыуған йылы.** Мосолмандар өсөн метрика мәжбүри рәүештә 1828 йылда индерелә. Унда тыуған, никахлашҡан һәм үлгән кешеләр теркәлгән. Ләкин был яңылыҡ күп урында шунда уҡ барып етмәгән. Бәлки, шуның өсөндөр, Мосолман диниә назаратының архивында 1828—1832 йылдар метрикаһы һаҡланмаған. Шуға күрә *Аҡмулланың* тыуған йылын билдәләү өсөн ревизия материалдарына мөрәжәғәт ителде. 1834 йылда Туҡһанбай ауылында халыҡтың иҫәбен хеҙмәттән бушатылған 9-сы класс чиновнигы *Иван Дыннов* алған. Был VIII ревизия мәғлүмәттәренә ауыл йыйылышында өс тапҡыр тикшергәндән һуң, йорт старшинаһы *Әхиәр Мәмбәтов* ҡул ҡуйған. Бына шул материалдың иң аҙағында 20-се һанлы бүлкәлә *Камалетдин* улы *Мифтахетдиндең* 3 йәштә булыуы яҙылған. 1850 йылда Бәләбәй мещаны *Дулесов* төҙөгән IX ревизия ҡағыҙын-

да *Мифтахетдингә* 19 йәш күрһәтелгән. X ревизия (1859 йыл) уға 28 йәш биргән.

Тимәк, *Мифтахетдин Камалетдинов (Аҡмулла)* 1831 йылда тыуған. Ләкин тыуған көнө һәм айы унда юҡ. Был һижрә йыл иҫәбе буйынса Ҡуян йылына тура килә. *Аҡмулланың* тыуған йылын (1831) 12-гә — һижрә йыл иҫәбе 12 йәнлек исеменән тора — бүлгәс, ҡалдыҡ һан (7) һижрә буйынса йылдың тәртип номерен күрһәтә. Ҡуян йылы 7-се номергә тап килә (ҡарағыҙ: Р. Г. Кузеев. Башкирские шежере. Өфө, 1960, 181-се бит).

*Аҡмулланың* тыуған йылын асыҡлауҙың мөһимлеге электәнге ҡапма-ҡаршы фекерҙең бөгөнгөгә тиклем йәшәп килеүе менән аңлатыла. (Һүҙ *Аҡмулланың* тыуған ваҡыты итеп 1839 йылды күрһәтеү тураһында бара. Һуңғы дата легендаға һылтана, һәм уны хата тип танырға кәрәк.)

**Ата-әсәһе. Нәсәбе.** *Мифтахетдин Аҡмулланың* биографияһын, уның ата-әсәһен, ҡустыһының исемен, уларҙың милләтен төрлө автор тарафынан төрлөсә яҡтыртыу дауам итә. 1895 йылда *Аҡмулла* үлгәс, шағир тураһында бик күп ысынлы-ялғанлы легендалар тарала. Үрҙә, Туҡһанбай ауыл халҡы тураһында яҙғанда, уның милли сығышын һыҙыҡ өҫтөнә алғайныҡ инде. 1816, 1834, 1850, 1859 йылдарҙағы ревизияларҙа башҡорттарҙан тыш башҡа милләт вәкилдәренең был ауылда булмауы күренә. «Башҡорт» тигән графала ир һәм ҡатын-ҡыҙҙар исемлеге, йәше, бер-береһенә туғанлыҡ мөнәсәбәте күрһәтелгән. *Аҡмулланың* атаһын «Из башкир указной имам» тип яҙғандар. Әсәһе лә шундай уҡ графала — башҡорт икәне күренә.

1816 1834



1816, 1834 йылғы ревизия мәғлүмәттәре.




1834 йылғы ревизия мәғлүмәттәре.

Аҡмулланың тоҡомо — аҫаба башҡорттар. Үрҙә әйтелгәнсә, 1834 йылда ғына Туҡһанбай ауылында ебәрелмеш башҡорттары булыуы билдәләнгән. *Аҡмулланың* ҡартатаһы *Ишҡужа Ишбулды* улы 1816 йыл (VII ревизия) ябай аҫабалар араһында күрһәтелгән. Тимәк, ул ебәрелмеш башҡорт түгел.

Ебәрелмеш башҡорт аҫабалар хоҡуғын ала алмаған һәм улар общинаһына (коллективына) инмәгән. Ул бары аҫабалар ерендә өй төҙөргә, иген сәсергә, көтөүлек, сабынлыҡ урындары менән файҙаланырға мөмкинлек алған. Ләкин бының өсөн ул аҫабаларға һәр өйҙән йылына 5—10 тин аҡса түләргә, улар түләгән яһаҡҡа үҙ бурысын индерергә бурыслы. Ебәрелмеш кеше аҫабалар хоҡуғынан мәхрүм: ер һатҡанда, уны ҡортомға биргәндә, яңы ебәрелмештәр индергәндә, уларҙың төптө ҡыҫылышы юҡ. Башҡа олоҫтарҙың ерһеҙ башҡорттары меңләләргә ебәрелмеш булып килә икән, улар ҙа аҫабалар хоҡуғына эйә була алмаған. Башҡорт булмаған ебәрелмеш тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Ул да аҫабаларҙың хоҡуғынан мәхрүм. Ә инде ошо Күлиле-меңле олоҫонан берәй аҫаба, үҙ «пайын» һатмайынса, сит яҡтарға китеп, күпме йәшәп тә, үҙ олоҫона ҡайтһа, шул уҡ элекке пайына йәки аҫаба хоҡуҡтарына дәғүә итә алған. Ләкин бик һирәк осраҡта айырым ебәрелмеш ерһеҙ башҡорт, шулай уҡ башҡа милләт вәкилдәре, аҫаба хоҡуҡтарына эйә булып, башҡорт общинаһына инә алған. Бындай хәл аҫаба үҙ пайын закладҡа һалып, киренән уны һатып ала алмаһа йәки улһыҙ аҫаба сит кешене ул итеп алһа, ҡулланылған. Ләкин быны ҡағиҙә рәүешендә түгел, ә айырым, бик һирәк осрай торған хәл тип ҡарарға кәрәк.



РЕВИЗСКАЯ СКАЗКА.

1850 года Июля 30 дня Оренбургской Губерніи Белебеевского Уезда деревни Таксанбаевой

| Семьи. | МУЖЕСКІЙ ПОЛЪ | По послѣдней ревизіи состояло и послѣ оной прибыло. | Изъ того числа выбыло. | Нынѣ на лицо. |
|---|---|---|---|---|
| № | Башкирцы | Лѣта. | Когда именно. | Лѣта. |
| | | 1834 г. | | 1850 г. |
| 20 | Указной мулла Ишнияз Ишбулдин | 66 | Умеръ 1844 года | — |
| | Ишниязя Ишбулдина Сынъ отъ 1. жены Указной мулла Камалетдинъ Ишниязовъ | 29 | | 45 |
| | Камалетдина Ишниязова Сынъ отъ 1. жены Мифтахутдинъ | 3 | [illegible] февраля 1850 | 19 |
| | Ишниязя Ишбулдина Сынъ отъ 1 жены второй Хуснутдинъ | 20 | -"- | 36 |
| | третій Шамсутдинъ | 20 | .. | 36 |
| | Шамсутдинова Сынъ Гимадутдинъ | новорож. | .. | 5 |
| | отъ 2 жены четвертой Шарафутдинъ | 12 | .. | 28 |
| | пятый Гильманъ | новорож. | .. | 14,5 дн. |

Мифтахетдин Аҡмулла нәҫеленең 1850 йылғы ревизия мәғлүмәттәрендә сағылышы.

Был экскурс *Аҡмулла* тоҡомонoң аҫаба башҡорттарына ҡарауы, уның ебәрелмеш башҡорт, йә булмаһа башҡа милләт вәкиле түгеллеген тағы бер тапҡыр иҫбатлаусы дәлил итеп килтерелде.

Тағы ла шуны өҫтәргә кәрәктер. Ревизия халыҡтың милли составын ифрат аныҡ биргән. Әгәр бер ауылда башҡорт, татар, мишәр, сыуаш һ. б. бергә йәшәй икән, уларҙың милләте асыҡ һәм мәжбүри итеп күрһәтелә. Сөнки милләт социаль ҡатламды билдәләүҙә мөһим роль уйнаған.

*Мифтахетдин Аҡмулланың* тоҡомона кире ҡайтып, тағы шуны аныҡлайыҡ. Уның **ҡартатаһы — Ишбулды улы Ишҡужа.** Ул 1768 йылда тыуған һәм 1843 йылда 75 йәшендә үлгән. Уның ике ҡатыны булып, беренсеһе *Шәһәрбаныу* (1783 йылғы) өс ул (*Камалетдин,* игеҙәктәр — *Хөснөтдин* һәм *Шәмсетдин* — 1814 йылғылар) һәм өс ҡыҙ (*Фазылниза,* 1800 йылғы; *Шәмсениса,* 1810 йылғы; *Фәхерниса,* 1819 йылғы) тапҡан. Икенсе ҡатыны *Хәсибәнән* (1793 йылғы) ике улы (*Шәрәфетдин,* 1822 йылғы; *Ғилман,* 1836 йылғы) һәм бер ҡыҙ (*Сафиза,* 1823 йылғы) ҡалған.

*Ишҡужа Ишбулдин* 1816 йылда ябай аҫаба башҡорт итеп күрһәтелгән, ләкин ике-дүрт бисә алыусылар хәлле ғаиләләрҙә йыш осрағанға күрә, *Ишҡужаны,* бай булмаһа ла, хәлләләр рәтенә индереп була. Етмәһә, 1834 йылда Ишҡужаның указлы мулла һәм мөхтәсип дәрәжәһенә күтәрелгәнлеге теркәлгән. Тимәк, *Аҡмулла* тыуған йылдарҙа уның ҡартатаһы Туҡһанбай ауылының иң эре дин әһеле булған. (Унан башҡа, ауылда указлы аҙансы ла бар.) Шуға күрә уның ғаиләһен үтә ярлы һәм фәҡир тип һис атап булмай.

*Аҡмулла* тураһында фекер йөрөтөүсе бер генә автор ҙа уның ҡартатаһын иҫкә алмай, исемен дә әйтмәй. Әйткән хәлдә лә, ул дөрөҫлөккә тура килмәй. Мәҫәлән, *Риза Фәхретдинов Аҡмулланы «Мифтахетдин бине Камалетдин бине Ишмөхәмәт»* тип атап, ҡартатаһының исемен дөрөҫ бирмәгән.

**Аҡмулланың атаһы — Ишҡужа улы Камалетдин.** «Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса очерктар» (1-се томдың икенсе киҫәге) һәм Ҡаҙағстан авторҙары *Аҡмулланың* атаһын Мөхәмәдйәр, фамилияһын Мөхәмәдйәров тип яңылыш атайҙар. Тимәк, *Мифтахетдин Камалетдин* улы халыҡ араһында, билдәле шағир булараҡ, ағартыу эше алып барғаны өсөн халыҡ тарафынан хаҡлы рәүештә *Аҡмулла* тигән маҡтаулы ҡушамат алһа, шағир биографияһын яҙыусы авторҙар, уның тоҡомонда ундай исем булмаһа ла, уға хата һәм яһалма рәүештә йәнә икенсе Мөхәмәдйәр тигән ҡушамат та өҫтәгәндәр.




*Мифтахетдин Камалетдиновтың* (Акмулла) *шәжәрәһе*



| | | 1850 г. | | 1859 г. |
|---|---|---|---|---|
| 20. | Камалетдин Ишкузин Чубаштир указной имам | 45 | — | 54. |
| | Камалетдина сыновья Мухаметдин | 19. | | 28 |
| | Ахмадай | новорожд. 1855 февр. | | 4 4м |
| 20 | Камалетдина Ишкузина жена Сагида Бакирова — — — | | | 45. |
| | Туйсугу Мухаметзянина — | | | 33. |
| | Его ж дочь от 2-й жены Гайша — | | | 2 4м |

1850 һәм 1859 йылдарҙағы ревизия мәғлүмәттәре.



| | | | 1850 г. |
|---|---|---|---|
| 20 | Камалетдина Ишкузина жена | | |
| | 1-я Бибейи Самигуллова . . . . | . . . . | 41. |
| | 2-я Салиха Бакирова . . . . | . . . . | 36 |
| | 3-я Мухлисе Ибетдулина . . . . | . . . . | 25 |
| " | Хуснутдина Ишкузина жена | | |
| | Гульбина Абзабаева . . . . | . . . . | 28 |
| | Его же дочь Мукфира . . . . | . . . . | 1 году |
| " | Шамсутдина Ишкузина жена | | |
| | Фатима Курбангалина . . . . | . . . . | 27. |

Итого женского пола на лицо. 6

1850 йылғы ревизия мәғлүмәттәре.

*Камалетдиндың,* имеш, бик иртә етем ҡалыуы, унның Бохара мәҙрәсәһен тамамлаусы *Ниғмәтулла Биктимеровты* осратыуы һәм һуңғыһының уға өйләнергә ярҙам итеүе һәм шул никахтан Аҡмулланың тыуыуы тураһындағы иҫбатлауҙар әле булһа ҡабатланып тора. Шуны ныҡлап әйтергә кәрәк: *Камалетдин* үҙ атаһы ғаиләһендә өйләнгән килеш бергә йәшәгән. Атаһы үлгәндә *Камалетдинға* 38 йәш булған. Шулай икән, ир уртаһына еткән кеше, үҙ ғаиләһе менән йәшәп тә, атаһы үлгәс, кеше ҡулына ҡаламы ни?..

*Мифтахетдин Аҡмулланың* әсәһе, документтарҙа яҙылғанса, *Сәлимйән ҡыҙы Бибиөмөгөл* (1809 йылғы). Ғилми әҙәбиәткә был исем яңылыш Бибигөлсөм Сәлимйән ҡыҙы булып кергән. *Мифтахетдиндың* әсәһенең дә бик иртә үлеүе (йә булмаһа икенсе иргә китеүе) һәм буласаҡ шағирҙың үҙ сиратында етем ҡалыуы тураһындағы раҫлауҙар ҙа дөрөҫ түгел. *Аҡмуллаға* 19 йәш сағында әсәһе *Бибиөмөгөл* иҫән булған. Ләкин 1859 йылғы X ревизияла унның әсәһе күрһәтелмәгән.

1834 йылда *Камалетдиндың* ике ҡатыны булып, беренсеһе — *Мифтахетдиндың* әсәһе *Бибиөмөгөл* (унан тыуған ҡыҙы *Гөлниса,* 1833 йылғы); икенсеһе — *Бакир ҡыҙы Сәхибә* (1814 йылғы), балалары булмаған. 1850 йылғы IX ревизия кенәгәһенә 45 йәшлек *Камалетдиндың* өсөнсө ҡатыны ла теркәлгән. Ул — *Һибәтулла ҡыҙы Мөхәдис* (1825 йылғы). 1859 йылғы ревизия элекке ҡатындарынан тик *Сәхибә Бакированың* ҡалыуын һәм яңы ҡатыны *Төхфәтулла ҡыҙы Туйһылыуҙың* (1826 йылғы; ҡыҙы — *Ғәйшә,* улы — *Әхмәҙи*) булыуын сағылдыра.

Атаһы иҫән саҡта *Камалетдин* унның урынын алмаштырырға әҙерләнгән. Был шунан күренә: 1834 йылда ике ҡатынлы 29 йәшлек *Камалетдин* ябай башҡорт итеп күрһәтелһә, 1850 йылда атаһы үлеп, 7 йыл уҙғас, указлы имам итеп яҙылған. Тимәк, *Аҡмулла* тыуғанда, картатаһы указлы мулла һәм мөхтәсип, ә атаһы — ябай аҫаба башҡорт булған. Шунан һуң (сама менән 1843 йылда — атаһы үлгәс) *Камалетдин* указлы имам булып киткән.

**Шағирҙың фамилияһы.** Ябай башҡорттар (ир һәм ҡатын-ҡыҙҙар) русса документтарҙа ата исемен фамилия иткәндәр. Тик башҡорт дворяндары ғына (*Буҙыҡаев, Биктимеров, Көсөков, Ҡыуатов, Ноғайбәков, Солтанов, Сыртланов* һ. б.) быуаттар буйына үҙ фамилияларын һаҡлағандар. Документтарҙа (ревизия материалдары) **Мифтахетдин Камалетдинов,** унның атаһы **Камалетдин Ишҡужин,** картатаһы **Ишҡужа Ишбулдин** тип әйтелә. Шулай булғас, ниңә әле уларҙың ысын фамилияларын боҙоп, яңыһын уйлап сығарырға?

Шуның менән бергә *Мифтахетдин Аҡмулла* тоҡомоноң ғаилә тибына ла иғтибар итәйек әле. 1816 йыл унның карта-

таһы бәлиғ булмаған балалары менән бәләкәй ғаилә (8 кеше) ҡороп йәшәгән. 1834 йылда ул ғаилә ҡатмарлана: бүленмәгән ғаиләлә *Ишҡужа* ҡарт өйләнгән улы *Камалетдин* һәм башҡа бала-сағалары менән йәшәгән (13 кеше). 1850 йылда *Аҡмулланың* ҡартатаһы һәм өләсәһе үлеп киткән. Өйләнгән 4 ағалы-ҡустылы бер ғаилә булып йәшәгән (14 кеше). Был өс типтағы ғаиләлә (бәләкәй; атай менән бергә өйләнгән ул; ағалы-ҡустылылар) төрлө фамилиялар таралған: ғаилә башлыҡтары аталарының, балалары — уларҙың исемен, ҡатындары — аталарының исемен фамилия иткәндәр. Мәҫәлән, 1850 йылда өйләнгән 4 ағалы-ҡустылыларҙың бүленмәгән бер ғаиләһендә 10 фамилия булған. Ғаиләнең һуңғы ике тибы уның хәлле ғаилә икәнлеге тураһында ла һөйләй.

IX ревизия материалдары йәш *Мифтахетдин Камалетдинов* тураһында тағы бер яңылыҡ өҫтәй. 19 йәше лә тулмаған *Мифтахетдин* 1850 йылдың 1 февраленән төрмәлә ултырған. Ревизия 30 июнь көнө үткәрелгән. Тимәк, *Мифтахетдин* төрмәлә 5 ай буйы ултырыуын дауам иткән. Уның төрмәгә ябылыу сәбәбен әлегә аныҡ белеү мөмкин түгел.

1859 йылда 28 йәшлек *Мифтахетдин* атаһының ғаилә ағзаһы итеп күрһәтелгән, ләкин уның үҙ ғаиләһе (ҡатыны) булмаған. Был хәл, беренсенән, *Мифтахетдиндың* шәкертлек һөҙөмтәһе тип, икенсенән, әле уның үҙ тыуған яғында, Башҡортостанда, булыуы хаҡында фараз итергә мөмкинлек бирә.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән шундай һығымта яһарға була. Архив материалдары мәшһүр башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе, башҡорт әҙәбиәтенең бөйөк классигы *Мифтахетдин (Аҡмулла) Камалетдиновтың* биографияһын асыҡлауҙа нигеҙле документ* булып ята. Шуға күрә *Мифтахетдин Аҡмулланы* 1831 йылдың 14 декабрендә Ырымбур губернаһы Бәләбәй өйәҙе Күлиле-меңле олоҫо Туҡһанбай ауылында (хәҙер Башҡортостандың Миәкә районы) аҫаба башҡорт *Камалетдин Ишҡужиндың* хәлле ғаиләһендә тыуған, тип ныҡлап әйтә алабыҙ.

---

* Был мәҡәлә түбәндәге архив материалдарына нигеҙләнеп яҙылды: Башҡортостан Үҙәк Дәүләт архивы, 138-се фонд, 1-се опись, 156-сы эш, 743—744-се биттәр; 736-сы эш, 94—98-се биттәр; 677-се эш, 279—280-се биттәр.

## 3. ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧТЫҢ НӘҪЕЛ-НӘСӘБЕ



Мәшһүр шағирыбыҙ *Шәйехзада Бабичтың* 1995 йылдың 2 ғинуарында тыуыуына 100 йыл тулды. Ошо уңай менән гәзит-журналдарҙа уның ижады һәм көрәше хаҡында мәҡәләләр, иҫтәлектәр күренә башланы. Был, әлбиттә, ҡыуаныслы хәл. Ләкин был яҙмаларҙа Бабичты берәүҙәр татар-башҡорт, икенселәре башҡорт, өсөнсөләре («Ҡыҙыл таң» гәзите) татар шағиры тип атай. Яр Саллы ҡалаһында сыҡҡан «Арғымаҡ» журналында берәү бик күп ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы «һатлыҡ йәндәр», «милләтселәр» тип һүккәндән һуң, былай ти: «Так называемая башкирская литература вовсе не башкирская, а татаро-башкирская. Самым беспардонным образом немало татарских писателей и поэтов были превращены в башкир. В башкир превратились *Ш. Бабич, Ғ. Чокрый*». (*Ғәли Соҡоройҙоң* һәм уның улы *Ғарифулланың* үҙ милли сығышы тураһында «Беҙ урман башҡорто» йә иһә «Беҙҙең башҡорт тоҡомо» тип яҙғандарын был автор беләме икән?)

Ә хәҙер ошо раҫлауҙарҙың ҡайһыһы дөрөҫләккә яҡын икәнен *Бабичтарҙың* шәжәрәһенән, шағирҙың үҙен ниндәй милләттән һанағанлығынан, уның яҡындарының был мәсьәләгә ҡарашынан, *Шәйехзада* ижадында үҙ халҡына ҡарата мөнәсәбәтенән сығып хәл итеп ҡарайыҡ.

### БАБИЧТАРҘЫҢ ТЫУҒАН ТӨЙӘГЕ

Һүҙҙе *Бабичтың* тыуған төйәгенән башлап, уның Йәлдәк олоҫона ҡараған Әсән ауылында тыуыуын беләбеҙ. Был башҡорт ауылы Өфө провинция канцелярияһының 1735 йылдың 24 май указы нигеҙендә типтәрҙәр төйәгенә әүерелгән. 1834 йылда бында 476 типтәр йәшәгән. Уларҙың этник сығышы билдәһеҙ, ә шулай ҙа уларҙың күпселеге татар крәҫтиәндәре-

нән булыуын фараз итергә мөмкин. Башҡорттар мишәрҙәрҙе лә үҙ ауылына ҡабул иткән. Шулай итеп, 1920 йылға халыҡтың күпселеге типтәрҙәр булып, улар 1590 кешене тәшкил иткән. Ошо типтәр-мишәр-башҡорт ауылына *Шәйехзаданың* атаһы *Мөхәмәтзакир* мулла итеп саҡырылған. Әсәндә төҙөлөп ятҡан 2-се мәсеттең эшен Өфө губернаторы туҡтатҡан. Ләкин ауыл халҡының юллауы буйынса Сенат 1887 йылдың 29 ғинуарында губернаторҙың ҡарарын юҡҡа сығарған. Бер йылдан һуң ул төҙөлөп тә бөткән. 41 йәшлек *Мөхәмәтзакир Бабичев* икенсе мәхәлләнең мәсетенә 1888 йылда имам-хәҙрәт итеп билдәләнгән.

Ошонан сығып, Әсән ауылы *Бабичевтарҙың* тыуған төйәге булмағанын беләбеҙ. Улар Ҡаңлы ырыуынан сыҡҡан аҫаба башҡорттар булып, Дыуанай олоҫонда урынлашҡан Тартыш ауылында көн иткәндәр.

Яңы табылған документтар раҫлауынса, Тартыш ауылы Ҡаңлы олоҫо башҡорттарының аҫаба ер биләмәһенең дыуанайҙарға ҡаҙна тарафынан киҫеп бирелгән бер өлөшөндә урынлашҡан булған. Ауыл административ яҡтан Ҡаңлы олоҫона түгел, ә Дыуанай олоҫона ҡараған. Ошонда башҡорттар, мишәрҙәр, дәүләт крәҫтиәндәре йәшәгән.

1832 йылда ер тураһында батша законы сыҡҡан. Шуның нигеҙендә аҫаба башҡорттарҙың һәр ирзатына 40 дисәтинә ер бирелеү ҡаралһа, мишәрҙәргә, хәрби ҡатламда тороу сәбәпле, йән башына — 30, ә типтәрҙәргә һәм татарҙарға 15 дисәтинә ер бүлеү күҙҙә тотолған.

Тартыш ауылының төрлө милләт халҡына уның тирәһендәге ер шул иҫәп буйынса бүлеү өсөн күпкә етмәгән. Шуның өсөн Бибичевтар, аҫаба булараҡ, үҙ ерҙәренең икенсе өлөшөнә күсеп, яңы ауыл нигеҙләү өсөн ғаризнамә яҙғандар.

Ҡаңлы олоҫо Көйөк (русса — Куюк) түбәһе тураһында рәсми мәғлүмәттәр һаҡланған. Уның ер биләмәһе Бөрө өйәҙендә урынлашҡан, ә ер хужалары — аҫаба башҡорттар — Бөрө (10-сы башҡорт кантонының Тартыш ауылы), Өфө (8-се башҡорт кантонына ингән Мәүлит, Байталлы ауылдары) һәм Бәләбәй (12-се башҡорт кантонының Ҡалмашбаш, Иҫке Биккинә, Рапат ауылдары) өйәҙҙәрендә йәшәгән. Ошо өс өйәҙҙә көн күргән аҫаба башҡорттар 1816 йылда ни бары 68, 1834 йылда 80 ир затын тәшкил иткән. Ҡаңлы олоҫо Көйөк түбәһе аҫабалары үҙ еренә XVIII быуаттың башында уҡ мари крәҫтиәндәрен ҡабул иткән. 1816 йылда был түбәлә 463 мари иҫәпләнгән. Мариҙар типтәр ҡатламына күсеп, хәҙерге Мишкә районына ҡараған Мишкә, Сабыҡ, Үрге һәм Түбәнге Һайыҫҡан, Шигәмән, Ирсай, Митрәй, Васькино ауылдарында йәшәгән һәм хәҙер ҙә шунда донъя көтәләр.

Көйөк түбәһенең 1798 йылдағы төп межалау буйынса 23 686 дисәтинә ер биләмәһе булған. Был ер күләме мари типтәрҙәренә һәм аҫаба башҡорттарға 1832 йылға закон буйынса бүлеп биреү өсөн артығы менән еткән.

Ләкин мариҙар зауряд-йөҙ башы *Ғәйнулла Мөхтәр улы,* урядник *Ғирфан Илекәй улы* һәм ябай («рядовой») башҡорт *Тәғип (Тайуп) Ишкилде улы Бабичевтарҙың* 1849 йылда яҙылған үҙ аҫаба ер биләмәһенә ҡайтарыуҙы һораған ғаризаһын белеп, улар уйына ҡаршы төшкәндәр. Был ғаризнамә *Бабичевтарҙың* 24 ир заты исеменән яҙылған. Бына унан бер өҙөк: «Мы прежде в 1834 году входили прошением к его высокопревосходительству (губернатору) о дозволении нам в числе 24 душ переселиться на жалованную предкам нашим землю, состоящую в Бирском же уезде Кальнинской (т. е. Канлинской) волости Куюковой тюбы, число коей обозначаются по генеральному межеванию 23 686 десятин, на коей имеют жительство из черемис тептяри деревень до семи... Покорнейше просим из-за малочисленности земли при деревни Тартышевой дозволить переселиться на упомянутую жалованную предкам нашим землю и приказать наделить из оной положенную пропорциею земли...»

Мари крәҫтиәндәре *Бабичевтарҙың* аҫаба еренә әйләнеп ҡайтыуына ҡаршы сыҡҡас, хәрби губернатор ҡушыуы буйынса аҫаба башҡорттар һәм мари типтәрҙәре тураһында төрлө мәғлүмәттәр йыйылған. Бына уларҙың һығымтаһы: «По собранным сведениям оказалось, что дача Куюковой тюбы по межевым документам принадлежит башкирам деревни Тартышевой, тептяри же проживают тут на праве припущенников».

Башҡорт — мишәр ғәскәре башлығы Ырымбур хәрби губернаторы *В. А. Перовский* менән кәңәшләшеп, *Бабичевтарҙың* Ҡанлы олоҫо Көйөк түбәһенең Ҡыйғаҙы йылғаһының тамағында ауыл булып ултырыуына ризалыҡ белдергән. Был ауыл Ҡыйғаҙытамаҡ тип атала. Ошо урынға *Бабичевтар* 1852 йылдан башлап күсенә башлаған һәм дүрт йылдан һуң ауылдың йәшәп ятыуын хөкүмәт рәсми рәүештә таныған. 24 ир затының һәр береһенә 40-ар дисәтинә ер бүленгән. Шунан һуң да, мари крәҫтиәндәрен ер менән тәьмин иткәс тә, аҫабалар ер биләмәһе артып ҡалған. Шуға күрә *Бабичевтар* ҡанлы ырыуынан үҙ кәрҙәштәрен ауылдарына саҡырғандар.

1865 йылда Байталлы, Мәүлит (Кушнаренко районы), Ҡалмашбаш, Иҫке Биккинә (*Ғабдрафик Тайсинов, Кейекбай Әбделмоталлапов*), Рапат (Саҡмағош районы) ауылдарынан Дыуанай һәм Шәмшәде олоҫтарында килмешәк хәлендә йәшәүсе Ҡанлы башҡорттары (27 ир-ат) Ҡыйғаҙытамаҡҡа килеп урынлашҡан.

Шулай итеп, Ҡыйғаҙытамаҡ, Тартыш кеүек, *Бабичевтарҙың* аҫабалыҡ төйәгенә әйләнә.

*Шәйехзада Бабичтың* шәжәрәһе киң ҡатлам уҡыусыларына билдәһеҙ тиерлек. Шәжәрә һәр береһенең уландары менән бөтәһе биш быуынды берләштерә — *Шәйехзада,* уның атаһы *Мөхәмәтзакир,* ҡартатаһы *Ғилуан,* уның атаһы *Ишбулды,* уның атаһы *Мөхтәр Бабичев.* Шәжәрәнең мәғлүмәттәрен ревизия — халыҡ һаны иҫәбен алыу материалдары менән сағыштырыу унда күрһәтелгән шәхестәрҙең һәр береһенең тип әйтерлек ҡасан йәшәүен күрһәтеп кенә ҡалмайынса, уға өҫтәмәләр һәм төҙәтмәләр индереүен күрәбеҙ.

*Мөхтәр Бабичев* тураһында шәжәрәлә, йәнәһе, «Ҡазан яғынан килгән, фабрика тотҡан» тип яҙылған. Күренеүенсә, был легенда бик һуң яҙылған. «Фабрика» үткән быуаттың икенсе яртыһында, XX быуаттың башында ғына тыуған һәм ҡулланыла башлаған. XVIII быуат уны әлегә белмәгән. Шуға күрә легенданың был өлөшө дөрөҫлөктө сағылдырмай. *Мөхтәрҙең* Ҡазан яғынан килеүе тураһында һүҙ бара икән — Ҡазан юлы (Башҡортостан 4 юлға (даруғаға) бүленгән) Бәләбәй өйәҙендәге ҡаңлыларға ҡараған Ҡалмашбаш, Иҫке Биккинә, Рапат ауылдарынан йә Өфө өйәҙе Байталлы, Мәүлит ауылдарынан Тартышҡа күсеүен аңларға мөмкин. Аҫабаның бер урындан икенсеһенә күсеп ултырыуы тик үҙ олоҫоноң эсендә генә мөмкин булған. Икенсе олоҫҡа күскән кеше сит ерҙә аҫаба хоҡуғынан мәхрүм ителгән һәм ул килмешәк-припущенникка әйләнгән. Ә *Мөхтәр Бабичев* — аҫаба. Ғәҙәттә тарих фәне тирәһендә уралған һәм Башҡортостан тарихын, уның үҙенсәлектәрен белмәүселәр башҡорт булмаған припущенникты бик тиҙ һәм анһат ҡына аҫаба яһап ҡуялар. Был, ҡағиҙә булараҡ, тормошта мөмкин булмаған хәл. Ергә аҫаба хоҡуғын төрлө сәбәптәр арҡаһында юғалтҡан башҡорт ҡайһы бер осраҡтарҙа ғына киренән шул хоҡуҡты ҡайтара алған. Башҡаларға бындай юл ябыҡ булған.

1816, 1834 йылдарҙағы ревизия ҡағыҙҙары *Мөхтәр Бабичевтың* оҙон ғүмерле булыуын һәм 1742 — 1822 йылдарҙа йәшәүен күрһәткән. Өс йәшкә кесе *Гөлгөнә* исемле ҡатынынан *Мөхтәрҙең* биш улы билдәле. Улар — *Илекәй* (шәжәрәлә *Илкәй*), *Ишбулды, Ишалы* (шәжәрәлә — *Ишалды*), *Ишкилде, Ғәйнулла.*

*Илекәй Мөхтәров* тураһында легендала 1812 йылғы Ватан һуғышында полковник дәрәжәһендә ҡатнашыуы, уның Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында йәшәүе һәм шул тирәләге ерҙе батшанан бүләккә алыуы тураһында әйтелә. *Илекәй* 1772—1820 йылдарҙа йәшәгән. 1816 йылда уның полковник түгел, ә поход старшинаһы тигән казачий чины булған. Тимәк, йәшенә һәм чины-

на ҡарағанда *Илекәй* һуғышта ҡатнашыуы ихтимал. Ләкин шуның өсөн батшанан ер алыуы һәм шул ауылда йәшәүе — уйҙырма. Һуғышта ҡатнашҡан 28 башҡорт полктарындағы 840 эре һәм ваҡ чиновник-офицерҙың береһе лә ер алмаған. Ул ваҡытта ундай ер таратыуҙар башҡорттар араһында булмаған хәл. Етмәһә, *Илекәй* ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем тик Тартыш ауылында ғына йәшәгән.

*Илекәйҙең* 1781 йылғы *Сәйбә* һәм 1796 йылғы *Әсҡәньямал* исемле ҡатындарынан шәжәрәлә күрһәтелмәгән 6 улы ҡалған. 1802 йылғы өлкән улы *Ғәйнан* зауряд-хорунжа булып хеҙмәт иткән. Хәрби хеҙмәттән башҡа икенсе һалымдарҙан ул азат ителгән. Улдары *Ғилман, Аллаяр. Илекәйҙең* икенсе улы 1804 йылғы урядник *Ғирфан* үҙенең *Әйүп, Ярулла, Муллаяр* уландары менән донъя көткән. Өсөнсө улы 1806 йылғы мулла *Раян* (уның улдары — *Сәйетгәрәй, Дәүләтгәрәй*). 1810 йылғы улы — *Мәрүән* (улы Мәргән). *Мәрүән* — сәсәккә ҡаршы прививка яһаусы. *Һайран* исемле улы *Мәрүән* менән йәштәш. Иң кесеһе *Сәрүән* 1823—1843 йылдарҙа йәшәгән. Был ағалы-ҡустылылар бер ҙур ғаилә булып донъя көткәндәр.

*Мөхтәрҙең* өсөнсө улы *Ишалы.* Ул 1780 йылғы. Шәжәрәләге кеүек старшина түгел, ә зауряд-ясауыл булып хеҙмәт иткән. 1847 йылдан алып башҡа һалымдарҙы түләүҙән азат ителгән. Уның шәжәрәгә төшмәгән *Биктимер, Мирхәйҙәр, Мирсаяф* һәм *Мәһәҙи* исемле улдары билдәле.

Указлы мулла һәм мөғәллим *Ишкилде* — (1782—1845) *Мөхтәрҙең* дүртенсе улы. Шәжәрәлә уның тоҡомо күрһәтелмәгән. Ревизия ҡағыҙҙары уның *Тайуп (Тәғип), Таһир, Мирғаязитдин, Ниғмәтйән* улдарын күрһәткән.

Зауряд-йөҙ башы *Ғәйнулла* — *Мөхтәрҙең* бишенсе улы. 1789 йылғы. Ул да хәрби хеҙмәттән тыш башҡа төрлө һалымдарҙан азат ителгән. 1812—1814 йылдарҙа 10-сы башҡорт һыбайлылар полкы менән *Наполеонға* ҡаршы һуғышҡан. Шәжәрәлә күрһәтелмәгән *Сәйфулла, Теләкҡабул, Дәүләткилде, Насибулла* исемле улдарын ревизия ҡағыҙҙары теркәгән.

*Мөхтәрҙең* икенсе улы *Ишбулды* 1778—1841 йылдарҙа ғүмер иткән. Шәжәрәлә әйтелһә лә, ул мулла вазифаһын үтәмәгән. Ул — поход ясаулы. Үҙ кантонынан командаларҙы хеҙмәт урынына алып барыу һәм уны алып ҡайтыу — уның бурысы булған. *Ишбулды* уландарға бай кеше. Был турала 1850 йылда уҙғарылған 9-сы ревизия мәғлүмәттәре һөйләй. Иң оло улы *Ризуан* 1809 йылғы. Икенсеһе — ике йәшкә кесе *Ғилуан.* Ул — ике ҡатынлы. 1820 йылғы *Мирвафа Ҡаһарманова* һәм 1826 йылғы *Мәғрифә Шәһиәхмәтованан* 4 йәшлек *Ғәзиә,* 3 йәштәге *Мөхәмәтзакариә* (ревизия ҡағыҙҙары *Мөхәмәтзәкирҙы* шулай яҙғандар), 2 йәшлек *Мәрилә,* 6 айлыҡ *Ну-*

*рисафа* күрһәтелгән. *Ғилуан Шәйехзада Бабичтың* олатаһы, ә *Мөхәмәтзәкир* уның атаһы. Шәжәрә *Ғилуандың* Ҡыйғаҙытамаҡта, ә *Мөхәмәтзәкирҙың* Юғары Шаҙы ауылында тыуыуҙары тураһында яңылыш күрһәткән. Үткән быуаттың тәүге яртыһында *Мөхтәр Бабичтың* үҙе, уның улдары, ейәндәре, бүләләре Тартыш ауылында тыуғандар, йәшәгәндәр һәм ҡайһылары шунда донъя ҡуйған.

1850 йылғы ревизия буйынса, Тартышта бөтәһе 13 йортта 77 ир-ат йәшәгән. *Бабичевтар* 3 йортта донъя көткән. Улар 38 ир затын тәшкил иткән. Тимәк, ауыл халҡының яртыһы *Бабичевтарҙан* торған. *Илекәй Мөхтәр* улының 6 улы ағалы-ҡустылы ғаилә булып, *Ишалы Мөхтәр* улы үҙенең уландары һәм өйләнгән ҡустылары *Ишкилде, Ғәйнулла* менән ағалы-ҡустылы ғаилә ҡороп бергә йәшәгәндәр.

Күренеүенсә, *Мөхтәр Бабичевтың* ирҙәр тоҡомо XIX быуаттың тәүге яртыһында Бөрө өйәҙендә урынлашҡан 10-сы башҡорт кантонында төрлө чиндарҙа (поход ясауылы һәм старшинаһы, зауряд-сотник (йөҙ башы) һәм зауряд-ясауылы дәрәжәһендә) хәрби хеҙмәт үтәгән. Шуларҙан *Ишкилде Мөхтәров* һәм *Ғилуан Ишбулдин* указлы мулла вазифаһын башҡарған.

Шулай итеп, аҫабалы башҡорттар *Бабичевтарҙың* шәжәрәһен ревизия мәғлүмәттәре иҫбатлай, тулыландыра һәм төҙәтмәләр индерә.

Ә хәҙер шағирҙың фамилияһының яҙылышы хаҡында берике һүҙ.

*Шәйехзаданың* фамилияһы тураһында Яр Саллыла сыҡҡан үрҙә иҫкә алған журналда шул уҡ автор «... так у них (у башкир) почему-то Ш. Бабич не стал — Ш. Бабис, хоть в башкирском языке нет буквы «ч», тип яҙһа ла, уның иронияһы урынһыҙ. Сөнки XIX быуат башында *Бабичевтар* ысынлап та *Бабисовтар* булып билдәле. Мәҫәлән, *Мөхтәрҙе* бер документта Стәрлетамаҡ өйәҙе Яуыш ауылы татар кенәзе *Өмәр Йосоп улы Дашков* өс тапҡыр *«Бабисов»* тип яҙған («живущий в деревне Тартышевой из числа отписной Кальнинской (Канлинской) земли лесными угодьями... пользуется башкирец Мухтар Бабисов с товарищами: бирский купец, заимствуясь у Бабисова, пользуется бортными ухожиями (1813 г.)».

Шулай итеп, был исем-фамилия тәүҙә *Бәбес-Бабис-Бабисов* булыуы асыҡ күренеп тора.

Ошо урында шағирҙың эсәһе тураһында әйтеп үтеү урынлы булыр. *Бабичевтарҙың* һәм башҡаларҙың иҫтәлегендә уның эсәһен *Сажиҙә (Фәтхелҡадир Бабичев), Биби Сажиҙә (Фәсәхәт Бабичева), йә Бибисажиҙәбаныу (Ғәлимйән Ибра-*

*һимов)* тип атап, уның атаһын йә *Хөсәйен,* йә *Мөхәмәтһаҙый,* тиҙәр.

1896 һәм 1897 йылдарҙағы ике метрика буйынса *Бабичевтарҙың Рәхилә* һәм *Ғәбделәхәт* исемле балалары тыуыу уңайы менән уларҙың атаһы һәм әсәһе лә исемләп аталған. Һәм шунда түбәндәге яҙыу бар: «Атасы имам-хатип *Мөхәмәтзәкир* ибне мулла *Ғилуан Бабичев,* анасы — *Сажидәбанат,* мулла *Мөхәмәтхадый* ибне мулла *Шиһабетдин* атасы». *Сажидәбанаттың* атаһы хәҙрәт *Мөхәмәтһаҙый Шиһабетдиновтың* 1897 йылдың 8 июлендә вафаты ла теркәлгән.

*Сажидәбанаттың* типтәр ғаиләһенән сығыуын билдәләп, *Бабичты* татар шағиры тип әйтеүселәр ҙә бар. Был урында ныҡлап шуны әйтергә кәрәк. Бөйөк татар шағиры *Ғабдулла Туҡайҙың* әсәһе *Мәмдүҙәнең* Ғәйнә ырыуы Барҙы (Ҡажмаҡты) ауылы (Пермь өлкәһе) аҫаба башҡорто *Зиннәтулла Зәйнулбәшәр* улы *Әмировтың* ҡыҙы икәнен «Ҡазан утлары», «Ағиҙел» журналдары документтарға нигеҙләнеп яҙғандарын күп уҡыусылар беләләр! Ләкин ошонан сығып, бер кемдең дә уны башҡорт шағиры тип әйтергә баҙнаты етмәҫ, теле бармаҫ.

## ҮҘЕНЕҢ МИЛЛИ СЫҒЫШЫН ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ НИСЕК БИЛДӘЛӘГӘН?

1994 йылда баҫылып сыҡҡан «Шәйехзада Бабич хаҡында иҫтәлектәр»ҙән күренеүенсә, татар яҙыусыһы *Зариф Бәшәр* 1916 йылдың йәйендә «Тормош» гәзите редакцияһында шағирҙы осратҡан. Шуға бәйле үҙенең иҫтәлегендә беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәттәр бирә. Бына улар. «Гәзит редакцияһында Бабич шиғырын тыңларға булдылар. Ул үҙенең «Көтәм» тигән шиғырын алып килгән икән. Бабичтың шиғырын уҡыр алдынан әйткән ошо һүҙҙәре бөгөнгөләй хәтеремдә ҡалған:

— Алдан уҡ әйтеп ҡуяйым: шиғырымдың ике сәйер яғы бар. Берҙән, ул шаҡтай мәсләкле (йәғни — идеялы), икенсенән — шиғыр башҡорт телендә яҙылған. Сөнки башҡорттоң бөгөнгө гүрстандай ауыр тормошо хаҡында, уның өмөт иткән яҡты истиҡбалы (йәғни киләсәге) хаҡында милләте башҡорт булған шағир үҙ шиғырын башҡортса яҙмай булдыра алманы. Һәм мин уның гәзиттә башҡортса баҫылыуын теләр инем.

Шунан Бабич шиғырын уҡыны. Беҙгә ул бик ныҡ тәьҫир итте. Бер аҙ ваҡыт бер кем дә бер ни әйтә алмай торҙо. Шағирҙың ысын күңеленән сыҡҡан, әйтерһең, уның йөрәк ҡаны менән яҙылған шиғыр ине ул.

Бынан һуң ҡырҡ бер йыл үтте инде, ә мин ул шиғырҙы һаман әле яттан беләм.

Бабичтың был «Көтәм» тигән шиғыры миңә лә, башҡаларға ла бик оҡшаны. Шулай ҙа уны «Тормош»тоң редакторы Закир Ҡадири хупламаны.

— Мин был шиғырҙы,— тине ул,— Бабич үҙе әйткән сәйер яҡтарын алып ташлағанда ғына баҫып сығара алам, ә был көйө — юҡ.

Бындай хөкөмдө ишеткәс, Бабич шиғырын ҡуйын кеҫәһенә тыҡты ла урынынан торҙо һәм Закир Ҡадириға:

— Беҙҙең халыҡҡа ирекле көндәр килмәйенсә, был шиғыр донъя күрә алмаҫ, ахырыһы. Ә мин ул көндө көтәм! — тине лә редактор бүлмәһен ташлап сығып китте.

Бабич бына шунан һуң бер ваҡытта ла «Тормош» редакцияһына аяҡ баҫманы».

*Бабичтың* яҡын таныштарынан *Ғариф Китабов* үҙенең иҫтәлектәрендә шағирҙың милләте тураһында уның үҙ һүҙҙәрен килтерә:

«Бабич, Ырымбурға килеп күп тә тормаҫтан, «Башҡортостан хөкүмәте»нә яҡынлашты. Ул үҙенең сығыштарында: «Беҙ, башҡорттар, Рәсәйҙең артта ҡалған, хоҡуҡһыҙ халҡы. Беҙҙең ерҙәребеҙҙе көпә-көндөҙ талап алдылар. Башҡорт халҡын ирекле тормошҡа сығарыу өсөн «Башҡортостан хөкүмәте» төҙөлдө»,— тип һөйләй ине.

Бабич, «Башҡортостан хөкүмәте» менән бергә йөрөп, Дутов һәм Колчак тарафынан туған халҡына эшләнгән төрлө йәбер-золомдарҙы, хаҡһыҙлыҡтарҙы үҙ күҙе менән күреп, эсенән илап, һыҡранып йөрөнө».

Ырымбурҙа саҡта *Бабичтың* яҡын дуҫы һаналған *Төхвәт Ченәкәй* иҫтәлегенән:

«Бабич йырҙы, шиғырҙы бик тиҙ сығара ине. Ул мандолинала уйнап бара, ә шуның артынса үҙе сығарған йыр ағылып бара ине. Был йәһәттән ул башҡорттоң ысын сәсәне, ҡаҙаҡтың аҡыны ине...

Бабич мандолинала ғәҙәттән тыш оҫта уйнаусы кеше ине. Ул бигерәк тә «Ирәндек», «Ҡаҙ ҡанаты», «Байыҡ», «Зарифа», «Ете ҡыҙ», «Ҡом бураны» көйҙәрен яратып уйнай торғайны.

«Мин бер ярлы башҡорт муллаһының ярлы балаһы инем,— тип һөйләп алып китте Бабич.— «Ғәлиә»лә уҡыу миңә ауыр булды. Атай миңә күп ярҙам итә алманы. Беренсе йылдарҙа өйҙән ашарға күмәс, бауырһаҡ, май, ҡорот, бешкән ит, ҡайһы ваҡыт бешкән тауыҡ килтереп торҙо».

*Бабичтың* һүҙҙәрен рәсми ҡағыҙҙар ҙа раҫлай. 1917 йылда 7 балалы (ике улы, шуларҙың береһенә 22 йәш — ул шағир, икенсеһенә 25 йәш һәм 5 ҡыҙ — улар 3, 7, 9, 12, 16 йәштәрҙә) 70 йәшлек *Мөхәмәтзәкирҙең* 9 кешегә (ҡатынына 53 йәш) бер

һауын һыйыры, өс бәрәсле 7 һарыҡ-кәзәһе генә булғаны һәм 12 сутый ергә бәрәңге, 0,5 дисәтинәгә тары, 1,5 дисәтинәгә һоло, 2 дисәтинәгә арыш сәскәнлеге билдәләнгән.

## БАБИЧТЫҢ ЯҠЫН ТУҒАНДАРЫ ҮҘҘӘРЕНЕҢ МИЛЛӘТЕ ТУРАҺЫНДА

*Шәйехзаданың* 1890 йылғы ағаһы (әсәләре башҡа) *Фәтхелҡадир Бабичтың* иҫтәлегенән:

«Беҙҙең атай, Мөхәмәтзәкир Ғилуан улы Бабич, асылда Башҡортостандың хәҙерге Мишкә районының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылы башҡорто ине. Был ауыл башҡорттарының күбеһе Бабич тигән фамилия менән йөрөйҙәр».

*Шәйехзаданың* һеңлеһе *Фәсәхәт Бабичева Ғилуан* олатаһы (*Мөхәмәтзәкирҙең* атаһы) тураһында: «Юғары Шаҙы ауылында ул үҙе кеүек үк башҡорт ҡыҙына өйләнгән».

Ағаһы тураһында *Фәсәхәт Бабичева* шиғри юлдар менән бына нәмәләр яҙған:

Ғинуар айы. Алһыу тын ғына.
Күктә аяҙ. Баҡса тын ғына.
Ҡапыл көслө тауыш! Өй йәмләнә
Бер ир бала килә донъяға.
Бала тыуа шөйлә йөҙлөк менән
Һирәк осраҡ. Ғәжәп ғәләмәт.
Кендеккәйгә шатлыҡ, күлдәк менән
Йортҡа юрау дәүләт-ғәзәмәт.
Ата-әсәһенә — ғәзиз бәпәй,
Һиртмәләнгән бәлләү-бишеге.
Тәкбир әйтеп, уға Әхмәт бабай*
Шәйехзада ҡуша исемен.
Бабай уны, башҡортом, тип һөйә,
Намыҫ, бәхет, теләй изгелек.
Илгә, йортҡа, ата-әсәһенә
Күрһәтһен, ти, яҡты игелек.

*Рабиға (Рафиға) Бабичева* — шағирҙың һеңлеһе иҫтәлегенән:

«Үҙем саф башҡорт ҡыҙы. Шәйехзада Бабич минең бик яҡын ағайым».

*Әхсән Ҡараретдин улы Бабичев:*

«Беҙ затлы башҡорттар нәҫеленән бик күптән татарҙар менән аралашып һәм туғанлашып бөткәнбеҙ».

---

* Әхмәт Йомағолов Мөхәмәтзәкирҙең әсәһе яғынан ағаһы.

## БАБИЧТЫҢ МИЛЛӘТЕ ТУРАҺЫНДА ЯҘЫУСЫЛАР ҺӘМ СӘЙӘСМӘНДӘР

Күренекле татар яҙыусыһы яҡташыбыҙ *Ғәлимйән Ибраһимов* (хәҙерге Ауырғазы районы мишәрҙәр нигеҙләгән Солтанморат ауылынан) 1922 йылда уҡ шағир тураһында түбәндәгеләрҙе яҙған:

«Бабичтың нәҫел шәжәрәһенән күренеүенсә, ул атаһы яғынан башҡортҡа барып тоташа: Шәйехзада — Мөхәмәтзәкир — Ғилуан — Ишбулды — Мөхтәр Бабич. Әсәһе — типтәр (Бибисажиҙәбаныу типтәр Мөхәмәтһаҙый ҡыҙы)».

*Ғәлимйән Ибраһимов Бабичта* дөйөм төркилектән айырылып, милли үҙаңдың нығына барыуын үҙенсә аңлатырға тырышҡан:

«Бабич башта татарса, мазлум татар өсөн яныусы, татарҙың дошмандары менән һуғышыусы ине. Унан һуң татарға арҡаһын борҙо, башҡортҡа ҡул һуҙҙы. Салауат балаларын күккә күтәреп, татарға үпкә менән ҡарай башланы».

Билдәле татар ғалимы *Ғабдрахман Сәғди:*

«Бабич татар шағиры булыу менән бергә башҡорт шағиры ине. Ул яңы башҡорт әҙәбиәтенең беренсе төҙөүселәренән булды. Ул башҡорт телендә лә байтаҡ шиғырҙар яҙҙы. Ахыр ғүмерендә башҡорт азатлығы юлында ҡорбан булды».

Күренекле башҡорт яҙыусыһы *Имай Насыри*:

«Бабич башҡорт ғаиләһенән сығып, башҡорттар араһында үҫеп, башҡорт халҡының моң-зарын йырлаған һәм шул милләттең хәрәкәтенә ҡатнашып, шул илдә үлгән башҡорт шағиры ине».

Башҡорт халҡының милли азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы *Зәки Вәлиди Туған Шәйехзада Бабичты* «милли шағирыбыҙ» тип атаны.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһендә *Бабич* менән бер үк осорҙа уҡыған, аҙаҡтан ҡаҙаҡ журналисы булып танылған *Абдрахман Мостафин* шағир тураһында былай тигән:

«Был егет — башҡорт халҡының йәш, ләкин даны таралып өлгөргән аҡыны — Шәйехзада Бабич ине».

## БАБИЧ ИЖАДЫНДА УНЫҢ БАШҠОРТЛОҒО НИСЕК САҒЫЛА

*Бабичты* үҙ милләтенең яҙмышы күптән борсоған. Ул халҡына «аҡ көн» килеүенә өмөтләнгән. Уның яҡты киләсәге тураһында уйланыуҙары 1914—1916 йылдарҙағы ижадында уҡ асыҡ күренә. Үрҙә иҫкә алынған «Көтәм» (1916 йыл) исемле шиғырында үҙ башҡорт халҡының шул саҡтағы ауыр яҙмы-

шын күҙ алдына баҫтыра һәм шул уҡ ваҡытта милләтенең киләсәгенә оло өмөт бағлай.

Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә:
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.
    Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
    Балҡый йәннәт нуры — гөлөстан,
    Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
    Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.
Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,
Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.
    Янып көйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
    Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,
    «Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» тип,
    Уралҡайға ҡарап илайым...
Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

2 йыл элек яҙылған «Халҡым өсөн» шиғырын үрҙәге юлдар менән сағыштырып ҡарағанда, ике шиғырында ла туған башҡорт халҡы өсөн бер үк уй-тойғолар менән янып йәшәүен күрәбеҙ. Һуңғыһының дүрт кенә юлын уҡып ҡарайыҡ әле:

Иламайым мин көндәрем
Һырғаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы меҫкен
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.

1917 йылда яҙылған «Тупраҡ» исемле шиғырында башҡорт аҫабаларына ер мәсьәләһенә етди ҡарау кәрәклеген белдерә, ерҙе ҡулдан ыскындырмауға, ерҙең башҡорттоң байлығы, киләсәге икәненә баҫым яһала.

### ТУПРАҠ

Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа балабыҙ.
    Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!
    Күкрәктәге сәнабыҙ.

Тупраҡ беҙҙең атабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа ятабыҙ.
Тупраҡ ҡәҙерен аңламау
Беҙҙең өлкән хатабыҙ.
Тупраҡ башҡорт бәхетелер,
Бәхетебеҙҙең тәхетелер.
Тупраҡ ҡалһа, истиҡбал*
Нурлы, раушан, яҡтылыр.
Тулыр илгә батырҙар
Аҡ шоңҡарҙай аҡындар,
Арыҫландай айҙарҙар
Әйләнеп үк ҡайтырҙар.
Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,
Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.
Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,
Өҙөлмәктер самабыҙ.

Ошондай уй-фекерҙәре *Бабичты* үҙ туған халҡының азатлыҡ хәрәкәтенә алып килгән дә инде.

1918 йылда яугир-шағир үҙенең атаҡлы шиғырҙарын ижад иткән. Бына улар: «Беҙ», «Башҡортостан», «Ҡурайҡайға», «Салауат батыр», «Башҡорт халҡына көйлө китап» һ. б. Уҡып ҡарайыҡ әле ҡайһы берҙәрен.

### БЕҘ

Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар,
Күп ырыуға баш йорттар.
Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,
Беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.

Беҙҙә ҡалын урмандар,
Беҙҙә данлы Урал бар;
Урал аҫты алтындыр,
Өҫтә шәфәк балҡыйҙыр.

Һиҙен, башҡорт, бәхетеңде,
Төшөн, башҡорт, атыңды;
Күрер өсөн тәхетеңде
Истиҡбалың алтынлы.

Ә бына «Ҡурайҡайға» шиғырынан өҙөктәр:

---

* Истиҡбал — киләсәк.

Һыҙғырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.
Һөйлә тарихыңдан, яуҙарыңдан,
Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;
Һөйлә олатайҙар хәлдәренән,
Йөрөш, торош, заңын, йолаһын...
Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан
Һуғарылды ҡара ҡан менән;
Сыҡтыҡ ҡара көстән ҡанды эскән,
Һуғарылһын инде йәм менән!

Үҙ туған халҡына һәм Ватанына гимн булып яңғырай уның «Башҡортостан» исемле шиғыры.

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан — гөлбостан,
Сөмбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан.

Ватаны — республикаһының именлеген, азатлығын тәьмин итеүҙә көрәштәштәрен уяулыҡҡа саҡырған шағир.

Алданма, аҡ күңел башҡортом,
Юллатма йыланды ҡуйыныңа,
Һарылып мәлғүндәр муйыныңа
Башыңды мөнйөрҙәр аҡыртып.

Күренеүенсә, *Шәйехзада Бабичтың* ижадында уның башҡортлоғо халыҡтың милли азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылғанға тиклем үк бик асыҡ күренә, ә шағир, яугир юлын һайлағас, үҙ халҡының киләсәге өсөн көрәштә, антына тоғролоҡ һаҡлап, ҡорбан булды.

Намыҫ өсөн, тәңрем, йәндән кисәм,
Килтер вәғәҙә... Ҡөҙрәт ҡулың бир!

Башҡортостан иҫән ҡала тиһәң,
Бер йәнемә миллион үлем бир!

Шулай итеп, төрлө сығанаҡтар *Шәйехзада Бабичтың* башҡорт халҡының вәкиле һәм үҙ халҡының яугир-шағиры булыуын раҫлай.

*«Ҡатыны икәүҙең ҡолағы тынмаҫ...»*

*Халыҡ мәҡәле*



## «ӨЙӨР-ӨЙӨР ҠАТЫН АҪРАП...»

Һуңғы осорҙа беҙҙең «Башҡортостан» һәм «Йәшлек» гәзиттәрендә, шулай уҡ күрше Татарстан матбуғатында ла күп ҡатынлылыҡтың халыҡ тормошонда зыяны йәки файҙаһы, уны тыйыу йәки рәсмиләштереү тураһында һөйләшеүҙәр эленәнәле булғылап тора. Әлбиттә, ике яҡтың да теләктәре изгелер. Ләкин был мәсьәләне ыңғай йәки кире хәл итер алдынан, халҡыбыҙҙың үткәненә күҙ ташлап, тарих һабаҡтарына таянырға кәрәктер тип уйлап, ошо мәҡәләмде уҡыусыларға тәҡдим итмәк булдым.

Һүҙҙе иң тәүҙә никахҡа инеүселәрҙең йәшенән башлайыҡ. Этнография буйынса ҡайһы бер хеҙмәттәрҙә башҡорттарҙа никах ҡороусы кейәүҙең — 15—16, килендең 13—14 (хатта 11—12) йәштәрҙә булыуҙары ғәҙәти хәл булғанын, уларҙа патриархаль мөнәсәбәттәрҙең һиҙелерлек һаҡланыуы һәм никахлашыусыларҙың йәшен дәүләт тарафынан билдәләү сараларының етерлек дәрәжәлә бойомға ашырылмауы менән иҫбатларға тырышалар. Иртә никахлашыу, йәнәһе, башҡорттарға хас күренеш.

Ләкин тарихи сығанаҡтар был ҡарашты кире ҡаға. Әйткәндәй, рус дәүләтенең никах тураһындағы 1744 йылда сыҡ-

ҡан законында төрлө дин тотоусыларҙың тормош ҡорғанда кейәүгә — 15, киленгә — 13, 1830 йылдағы законда тәүгеһенә — 18, икенсеһенә 16 йәш булырға тейешлеге ҡаралған. Был закондар башҡорттар өсөн дә мәжбүри булған. Әгәр муллалар ошо күрһәтмәнән ситкә тайпылһа, уларҙы төрлө язаға дусар иткәндәр (мәҫәлән, Себергә һөрөү һ. б.). Диниә назараты архивында был турала байтаҡ мәғлүмәттәр һаҡланған.

Быуындар тәжрибәһе никахлашыусыларҙың ғәҙәти йәштәрен үҙе билдәләгән тип уйларға кәрәк. Ир-егеттең күбеһе 18 йәштән, ә ҡыҙҙар 17 йәштән һуң никахлы тормошҡа аяҡ баҫҡан. Әлбиттә, был ғәҙәтте үтәмәүселәр ҙә табылған. 1834 йылғы мәғлүмәттәр буйынса Ырымбур өйәҙендәге 42 башҡорт ауылында 1 080 ғаилә йәшәгән. Шуларҙан 27 ауылда иртә никахлашҡан 96 ғаилә теркәлгән. Шул ғаиләләр араһында 12 йәшлек 6 килен (0,6 процент), 13 йәшлектәре — 7 (0,6 процент), 14 йәштәгеләре — 14 (1,2 процент), 15 йәштәгеләре — 14 (1,2 процент), 16 йәштәгеләре — 39 (3,6 процент) һәм 17 йәшлек 16 (1,5 процент) килен теркәлгән.

Ғаилә ҡороусы кейәүҙәрҙең йәштәре 18—30 араһында тирбәлә. Был һандар ярым күсмә тормошта йәшәгәндәргә хас булған. Ултыраҡ тормошта көн иткән Пермь яғындағы ғәйнә башҡорттарының 30 ауылының дүртәүһендә иртәрәк никахҡа инеүсе 9 ҡыҙ теркәлгән. Шуларҙың икәүһенә — 16-шар, етәүһенә 17-шәр йәш булған. Иртәрәк барлыҡҡа килгән ғаиләләр ғәйнәләрҙең 1 744 ғаиләһенең ни бары ярты процентын ғына тәшкил итә.

Ғөмүмән, иртә никахлашыуҙы халыҡ ҡабул итмәгән. Был уның тарихи йырҙарында, легендаларында һәм сеңләүҙәрендә лә күренә.

Никахлашыуҙың төрҙәре күп булған. Шуларҙың береһе — күп ҡатын алыу. Күп ҡатынға өйләнеүҙе ислам дине уйлап сығармаған. Уны тормош үҙе тыуҙырған. Мосолман булмаған халыҡтарҙа ла был ғәҙәт билдәле. Тәүтормош ҡоролошонан ҡалған был ғәҙәтте ислам дине лә таныған һәм ҡанунлаштырған; беҙҙәге сөнни мосолмандарға — 4, шиғый мосолмандарға (Тажикстан, Иран) 7 бисә алырға мөмкинлек биргән.

**Полигамия** (күп ҡатынлы ғаилә) һәм **моногамияның** (бер ҡатынлы ғаилә) нисбәте буйынса тарихи хеҙмәттәрҙең авторҙарында берҙәм ҡараш юҡ. Уларҙың бер өлөшө башҡорттарҙа күп ҡатын алыу бик ныҡ таралған күренеш икәненә ышанған. Мәҫәлән, Ырымбур экспедицияһы башлығы, башҡорт халҡының ҡан дошманы, йәллэт *И. К. Кириллов* 1735 йылда башҡорттарҙың хәрби көс ҡеүәтен бик үк ҡурҡыныс түгел, ә бына күп ҡатын алыу арҡаһында уларҙың тиҙ күбәйеүен Рәсәй өсөн хәүефлерәк тип таныған. Халыҡтың шундай үҫеүенә кәртә

ҡороу өсөн башҡорттарҙы һуғыш-походтарға, хәрби нығытмалар төҙөүгә күберәк ебәреп, уларҙың ғаиләләрен таркатырға тәкдим иткән. Тарихсы *П. И. Рычков* та халыҡ һанының артыуы сәбәбен полигамияла күргән. Тарихсы *Н. Попов* Пермь һәм Ҡурған башҡорттарының бик һирәге дүртәр, күптәре икешәр, ә ҡалғандары берәр ҡатын менән ҡәнәғәтләнгәнлеге тураһында XIX быуат башында уҡ яҙып ҡалдырған. Ҡазан гимназияһын һәм университетын тамамлаған дворяндар нәҫеленән сыҡҡан кантон башлығы *Әлмөхәмәт Ҡыуатов* та үҙ халҡының бөлөү сәбәптәренең береһен күп ҡатынлылыҡтан эҙләгән. Бөтә был авторҙар башҡорттарҙа йәшәп килгән полигамияның бик ғәҙәти һәм киң таралған булыуына ышанғандар.

Ләкин был фекер менән килешмәүселәр ҙә булған. Шулар араһында Ырымбурҙа хөкүмәткә ҡаршы йәшерен ойошма төҙөүсе, башҡорттар тормошон улар менән тығыҙ аралашыу һөҙөмтәһендә һәйбәт белеүсе шағир һәм ғалим *Петр Кудряшев* булған. Үткән быуаттың 20-се йылдары башында ул башҡорттарҙың үтә ныҡ ярлыланыуы арҡаһында бик һирәктәренең генә берәүҙән артыҡ ҡатындары булыуы хаҡында яҙған. Башҡорт байҙары — 2—3, ә ярлы-ябағалары бер ҡатын менән донъя көтөүҙәрен 1859 йылда Ырымбур губернаһы тураһындағы китабында дини семинария уҡытыусыһы *В. М. Черемшанский* ҙа һыҙыҡ өҫтөнә алған.

Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының хәлләнә барыуы менән бер рәттән, уларҙа полигамиялы ғаиләләр һаны ла арта барыуын *Н. А. Скалазубов* исемле ғалим да күҙәткән. Был ғалимдар, күренеүенсә, башҡорттар тормошонда күп ҡатынлыҡтың бик һирәк осрауын һыҙыҡ өҫтөнә алған.

Ә шулай ҙа бер үк мәсьәләгә был ике ҡараштың йәшәүе ғаилә һәм никах мәсьәләләренең фәндә һаман да хәл ителмәүе тураһында һөйләгән кеүек. Уларҙың ҡайһыһы дөрөҫләккә яҡыныраҡ икәнен ревизия мәғлүмәттәре нигеҙендә тикшереп ҡарайыҡ. Ғәҙәттә, ғалимдар башҡорт хужалығы тарихын төрлө райондарға бүлеп тикшерә. Беҙ ҙә шул йоланан ситләшмәй, тәүҙә игенселек районына иғтибарҙы йүнәлтәйек. Унда ингән Бәләбәй, Бөрө, Минзәлә, Өфө, Уса өйәҙҙәренә ҡараған 187 башҡорт ауылы тураһындағы ҡағыҙҙарға күҙ һалһаҡ, 1816 йылда уларҙа 7 530 ғаилә теркәлгән. Шуларҙың 737-һендәге йорт хужаларының һәр береһендә 2-шәр, 74 ғаиләлә — 3-әр, 5 ғаиләлә 4-әр ҡатын булған. Был яҡтағы полигамиялы ғаиләләр бөтә ғаиләләрҙең ни бары 10—11 процентын тәшкил иткән.

Ярым күсмә тормоштағы башҡорттар районына ҡараған Красноуфимск, Ырымбур, Стәрлетамаҡ, Троицк (Урал аръяғы) өйәҙҙәрендә урынлашҡан 44 ауылда 1 469 ғаилә йәшәһә,

шуларҙың 295-ендә ғаилә башлығының — 2-шәр, 12-һендә — 3-әр, 3-өндә — 4-әр ҡатыны булыуы теркәлгән. Шулай итеп, тәүге район менән сағыштырғанда, бында күп ҡатынлы ғаиләләр ике тапҡырға (20 процент) күберәк. Ләкин шуны ла өҫтәп ҡуяйыҡ: 1850, 1859 йылдарҙа уҙғарылған IX—X ревизиялар йомғаҡтары буйынса, полигамиялы ғаиләләрҙең һаны ҡырҡа кәмеүгә китә. Башҡортостанға ла капиталистик мөнәсәбәттәрҙең килеп етеүе халыҡтың киң ҡатламын ярлыланыуға һәм бөләүгә алып килгән. Ошо сәбәптәр күп ҡатынлы ғаиләләрҙең һанын да нық ҡыҫҡартҡан.

Башҡорттар менән күрше йәки бер ауылда йәшәгән татар һәм мишәрҙәр араһында был институт ниндәй дәрәжәлә таралған икән, тигән һорау тыуыуы ихтимал. Быға яуап табыу өсөн Бөрө, Бәләбәй, Өфө, Стәрлетамаҡ, Силәбе һәм Ырымбур өйәҙҙәрендә йәшәгән 11495 татар һәм мишәр ғаиләһенең структураһын ҡарап сығылды. Бына шуларҙың 1202-һендә ғаилә башлығының 2-шәр, 3-әр, 4-әр ҡатындары теркәлгән. Шулай итеп, бөтә ғаиләләрҙең 10,5 проценты полигамиялы ғаиләләргә ҡараған. Тимәк, ултыраҡ тормошта йәшәгән башҡорттар менән татар-мишәрҙәр араһында күп ҡатынлыҡтың таралыу даирәһе бер үк кимәлдә булған (10,8 һәм 10,5 процент). Шул уҡ ваҡытта ултыраҡ тормошта йәшәгән һәм игенселек менән шөғөлләнгән мосолмандар араһында полигамиялы ғаиләләр һаны ярым күсмә тормоштағыларҙыҡына ҡарағанда әҙерәк булған. Бындай хәлде ярым күсмә малсылыҡ хужалығының үҙенсәлеге менән аңлатып булыр ине.

Үрҙә килтерелгән статистик мәғлүмәттәр тарихи-этнографик әҙәбиәттә йәшәп килгән ҡараштарҙың ҡайһыныһы дөрөҫлөккә яҡын икәнен яҡшы иҫбатлай.

Күп ҡатын алыуҙың сәбәптәре лә төрлөсә була. Мәҫәлән, ғаиләлә гел генә ҡыҙҙар тыуып торһа, йәки бөтөнләйгә бала булмаһа, моногамиялы ғаилә полигамиялы ғаиләгә әйләнеүе мөмкин булған.

Полигамиялы ғаилә уртаҡ мөлкәтте бүлгеләүгә, ғаиләнең тарҡалыуына сәбәпсе лә булған. Шуға күрә 1841 йылда Өфөләге Диниә назараты икенсе ҡатын алыусыларҙың теләген бойомға ашырғанға тиклем уларҙың матди хәлен тикшереүҙе указлы муллаларға йөкмәткән. Улар, ике ҡатын алыуға дәғүә итеүсенең мөлкәтен ҡарап сығып, уның теләген ҡәнәғәтләндергән йәки кире ҡаҡҡан танытма биргәндәр.

Күп ҡатынлылыҡтың кире яҡтары ла булған. 1864 йылда Силәбе өйәҙендәге бер кантон башлығы, башҡорттар араһында полигамиялы ғаилә төрлө бәхәстәр тыуҙыра, ғаилә мөлкәтен бүлгеләүгә килтерә, хужалыҡҡа зыян килтерә, тип яҙған. Халыҡтың ауыҙ-тел ижады ла был институттың кире һөҙөм-

тәләренә баҫым йһай. Быны халыҡ мәҡәлдәрендә лә асыҡ күреп була. Мәҫәлән: «Аты икәүҙең аяғы тынмаҫ, ҡатыны икәүҙең ҡолағы тынмаҫ», «Көндәшлегә өйҙә көн дә көйөнөс», «Өйҙәш тә бер, көндәш тә бер: ҡысҡырыш та талаш», «Көндәшлегә төн оҙон, көнлөксөгә көн оҙон». Халыҡ был ғәҙәтте ҡабул итмәй, күп бисәлеләрҙән көлә: «Кесе ҡатын — кеше ҡатыны» һәм башҡалар.

Элек күп ҡатын алыуға никахтың икенсе бер ҡалдыҡ формаһы булышлыҡ иткән. Ул — **левират.** Мәжүсилек тыуҙырған был левират никахты ислам дине ҡабул итмәгән. Ләкин был институт ҡайһы бер халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа, татар һәм мишәрҙәрҙә лә һаҡланған.

Был йола — тол еңгәйҙе ҡатын итеп алыу. Халыҡтың шаян бер йырында ла левират сағылыш тапҡан: «Ағай үлеп, еңгә ҡалһа, ебәрмәбеҙ яттарға». Еңгә кешегә дәғүә итеүселәр ҙә етерлек булған ул замандарҙа. Шуларҙың беренсеһе — мәрхүмдең ҡустыһы («Ҡәйнеш — ярты ир, ир юғында — бөтөн ир»), икенсеһе — шул ҡустыһының улы («Еңгә ҡатын — ейәндеке»).

Левираттың һаҡланыуын ғалимдар матди яҡтан ғына сығып аңлата. Әгәр тол килен ҡайтып китһә, ҡатмарлы ғаилә эш көсөнән, ғаилә мөлкәтенең бер өлөшөнән (бирнәнән) мәхрүм булыр ине. Минеңсә, был ҡараш менән килешеп, левираттың асылында шулай уҡ кешелеклелек (өлкән ағаһының балаларын етем итмәү) яталыр тип тә уйларға урын бар.

Халыҡ һанын иҫәпкә алыу ҡағыҙҙарында левират буйынса ла етерлек мәғлүмәт бар. 1816 йылда, мәҫәлән, Абзан (хәҙерге Ейәнсура районы) ауылының 18 йәштәге *Мөхәмәт Мырҙабулатовтың* 17 һәм 46 йәшлек, Барҙы-Ҡажмаҡты ауылынан (Пермь яғы) 22 йәшлек ғәйнә башҡортонда 20 һәм 48 йәштәге ҡатындар булғаны билдәле.

Никах ҡороусыларҙың йәш айырмалығы левират тураһында һөйләй. Үҙенән 15—25 йәшкә өлкән тол ҡалған еңгәйҙе алыу икенсе бер йәш ҡыҙҙы ҡатын итеп алыуға килтергән. Шуға күрә левиратлы ғаилә полигамияны барлыҡҡа килтерә.

Йәш буйынса үҙенән күпкә өлкән еңгә ҡатынды алыуҙы халыҡ үҙһенмәгән, шуға күрә бер мәҡәлдә быны нимә әйтелгән: «Ерек утын яҡма, еңгә ҡатын алма: ерек утындың ҡыҙыуы юҡ, еңгә ҡатындың йылыһы юҡ».

Дөйөм алғанда, күп ҡатын алыуға халыҡ кире ҡараште булған. Полигамиялы ғаилә кеше һанын арттырыуҙа ҙур урын тотмаған. Был мәсьәләлә хәл иткес ролде моногамиялы ғаиләләр уйнаған. Шуға күрә, ысынлап та, «өйөр-өйөр ҡатын аҫрап ҡына милләтте арттырып булмай» икәнен тарихи материалдар нигеҙендә иҫбатларға тырыштым.

*«Бер ҡорға тупланып...»*



## 1. КЕМ УЛ ТИПТӘРҘӘР?

XVII—XVIII быуаттарҙа Башҡортостанға рус булмаған крәҫтиәндәрҙең күсенеп килеп ултыраҡланыу тарихы менән һуңғы ваҡытта ныҡыраҡ ҡыҙыҡһына башланылар. Уны асыҡлау менән тарихсылар, этнографтар ғына түгел, филолог-диалектологтар ҙа шөғөлләнә. Күсмә татарҙарҙың Өфө төркөмө, шулай уҡ типтәрҙәр һәм яңғыҙлыҡта йәшәүселәр (бобылдәр) формалашыу мәсьәләһе өйрәнелә. Бында Башҡортостандың теге йәки был районына күсенеп төпләнеү ваҡыты һәм темптары ғына түгел, ә припущенниктар (килмешәктәр, этәмбәйҙәр) менән типтәрҙәрҙең сығышы, асылы, этник составы, улар менән аҫаба башҡорттарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте лә төрлө юҫыҡта аңлатыла.

Ерһеҙ элекке аҫабаларҙы һәм күсенеп килгән крәҫтиәндәрҙе Башҡортостанда припущенниктар һәм типтәрҙәр тип атағандар. Шуға күрә был терминдар һәм институттарҙың (ижтимағи мөнәсәбәттәрҙең хоҡуҡ нормаларының) килеп сығышын асыҡлау ихтыяжы килеп тыуа.

Припущенниктар, типтәрҙәр институттары — башҡорт йәмғиәтенең социаль-иҡтисади һәм сәйәси үҫешенең һөҙөмтәһе ул. Улар башҡорттарҙың үҙҙәре биләп йәшәгән ерҙәргә аҫабалыҡ (вотчина) хоҡуғы арҡаһында килеп тыуған,

Башҡортостанда Волга буйынан күсенеүселәр күренә башлауҙан алда уҡ барлыҡҡа килгән. Башҡорт община ерҙәрендә төпләнеү мөмкинлеге был илдең Рәсәй дәүләтенә ҡушылғанына ҡәҙәр булған. Ҡатайҙарҙың раҫлауынса, мәҫәлән, уларҙың ҡәрҙәштәренең бер өлөшө 1759 йылға тиклем 300 йыл элек үк бала-ҡатай башҡорттарының ерендә припущенниктар хәлендә йәшәгән. Рәсәй дәүләтенә ҡушылғас, ырыуҙар һәм түбәләр батшанан һаҡлау грамоталары алғас, уларҙың ерҙәренә кемдәрҙелер күсендереү мөмкинлеге һиҙелерлек киңәйә. Был ерҙәр һәр ваҡыт — 1917 йылға тиклем — вотчина ерҙәре тип аталған. Хәйер, улар рус феодалдары аҫабаларынан байтаҡҡа айырыла. Шул ерҙәрҙең бер өлөшө (шәхси участкалар — пайҙар) еңел генә бүленеп, һатыла, ҡалым итеп йә ҡортомға бирелә. Аҫабалыҡ хоҡуғын юғалтҡан башҡорт общинанан йә үҙе теләп сыға, йә бөлгөнлөк арҡаһында ситкә тибәрелә. Үҙ общинаһына йәки башҡаларҙыҡына бер ихата иҫәбенән йылына 10—25 тин яһаҡ йә һалымдың бер өлөшөн түләһә генә ҡабул ителә ала. Шулай итеп, аҫаба, хәҙер инде үҙе сыҡҡан йәки сит общинаға иҡтисади яҡтан бойондороҡло булып, припущенник хәлендә ҡала. Быларҙың барыһы ла аҫабалар менән припущенниктар араһында төҙөлгән договорға теркәп ҡуйыла.

Общинанан сыҡһа ла, припущенник үҙ ҡатламының кешеһе булып ҡала. 1834 йылда 392 мең башҡорт составында 66 мең ерһеҙ башҡорт-припущенник иҫәпләнә (16,8 процент); X ревизияға (1859 йыл) улар инде барлыҡ башҡорттарҙың дүртенсе өлөшөн тәшкил итә — 545 мең кешенең 135 меңе.

Башҡорт припущенниктарын, аҙаҡ Волга буйынан күсеп килгән һәм аҫаба еренә һөйләшеү нигеҙендә урынлашҡан крәҫтиәндәрҙе лә ебәрелмеш йә килмешәк, йәки этәмбәй тип атағандар.

XVII быуатта, Башҡортостанда крәҫтиән колонизацияһы башланыу менән, килмешәктәр институты артабанғы үҫеш ала. Башҡорт этәмбәйҙәре араһына Башҡортостанға күсеп килгән ерһеҙ татар, мишәр, мари, мордва, удмурт һәм сыуаш крәҫтиәндәре ҡушыла. Шул рәүешле крәҫтиәндәрҙең милли составы ҡатмарлана. Элек Волга буйында үҙҙәре йәшәгән төбәктәрҙәге общиналарҙан сығып, күсеп килгән крәҫтиәндәр аҫаба башҡорттарҙың этәмбәйҙәренә әйләнә. Әммә улар ҙа үҙ ҡатламының кешеһе булып ҡала. Мәҫәлән, татар килмешәктәре **служилый** (ғәскәри), **яһаҡ**, **сауҙа** һәм **сумаҙанлы** (почта йөрөтөүсе) кеүек бер нисә ҡатламға ҡарай. Мишәр килмешәктәре бары тик служилыйҙар ғына була. Мари, мордва, удмурт һәм сыуаш килмешәктәре яһаҡ ҡатламын ғына тәшкил итә.

Килмешәктәрҙең төп массаһынан тора-бара типтәрҙәр ойоша һәм ошо исемдә ҡатлам-сословие барлыҡҡа килә. Типтәрҙәр рус изгойҙарын ныҡ хәтерләтә. Изгой — төрлө сәбәптәр арҡаһында үҙ общинаһы һәм ҡатламынан сыҡҡан смерд-общинник ул. Изгойҙар — юридик яҡтан ирекле булһа ла, етештереү сараларының барыһынан да тиерлек мәхрүм ителгән кешеләр. Нисек тә көн итмәктән, улар феодалдарға ссуда һорап мөрәжәғәт итергә мәжбүр була, бурысҡа ер, эш ҡоралдары, орлоҡ һәм башҡа нәмәләр ала. Шуның менән күп яҡлап бойондороҡлоҡҡа дусар була. Изгойҙар шулай итеп закуптарға әүерелә («купа» — ссуда тигән һүҙ).

Башҡорт ысынбарлығы шарттарында типтәр — изгой тиерлек. Аҫабалыҡтан мәхрүм ителгән башҡорт-общинник, үҙ общинаһынан сығып, килмешәк хәлендә ҡала. Ул, типтәр булып, үҙ ҡатламынан сыға. Ситкә тибәрелгән килмешәк типтәргә әүерелә (тибеү — тибелеү — типтереү — типтер — типтәр). Типтәр — ҡағылып-һуғылған, ҡыйырһытылған, ситләтелгән кеше. «Типтәр» һүҙенең тамыры, килеп сығышы башҡорт мәҡәлендә лә раҫлана:

Иле́ типкән — ир булмаҫ,
Ташлап киткән — ер булмаҫ,
Көтөү типкән — мал булмаҫ,
Күңел типкән — йәр булмаҫ.

Күренеүенсә, айырым кешеләрҙе йөрәк һәм төйәк кенә түгел, ә коллектив та, ҡатлам да ситкә тибәрә.

Типтәрҙәр институты объектив рәүештә тыуа, әммә улар ҡатламы батша хөкүмәтенең ҡыҫылышы менән формалаша.

Тәүге типтәрҙәр, килмешәктәр һымаҡ уҡ,— ерһеҙ ҡалған башҡорттар. Башына төшкән бурысын үтәү типтәрҙәр өсөн тәүҙә әллә ни ауыр булмай. XVIII быуаттың 30—90-сы йылдарында типтәрҙәр ҡатламы формалашҡанға ҡәҙәр, улар араһында башҡорттар күпселекте тәшкил итә. Ләкин буйһонғанлыҡ ныҡлыраҡ, ыҙалыраҡ була барған һайын, башҡорт этәмбәйҙәре, үҙ ҡатламында ҡалып, типтәрҙәргә күсмәй тиерлек. Әммә типтәрҙәр араһында үҙ ҡатламы менән араны өҙгән татар, мари, удмурт һәм сыуаш килмешәктәренең һаны артҡандан арта. Шуға ла типтәрҙәр иҫәбенә Башҡортостанға күсеп килгән ерһеҙ крәҫтиәндәрҙе генә индереүсе авторҙар бигүк хаҡлы түгел.

Рус булмаған крәҫтиәндәрҙең бында күсеү ваҡыты тураһында ғилми хеҙмәттәрҙә төрлө фекер йәшәп килә. Атап әйткәндә, ҡайһы бер боҙоп күрһәтелгән фактарға таянып, Башҡортостанда киң рәүештә колонизациялауҙы XVII, хатта

яҡынса XVI быуатҡа ҡайтарып ҡалдыралар. Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылған саҡта төбәк халҡы этник яҡтан бигүк бер төрлө булмай, тип раҫларға тырышалар. Әммә таяныс булыр мәғлүмәттәр юҡ. Айырым алғанда, *Д. Б. Рамазанованың* «К вопросу о бобылях в Башкирии в XVII в.» тигән мәҡәләһендә («Исследования по историографии Татарии» исемле йыйынтыҡта, Ҡазан, 1978.) башҡорт сословиеһына күсеүсе яңғыҙаҡтарҙың этник асылы тураһындағы факттар боҙоп күрһәтелә. Документтарҙа «башҡорттар» тип әйтелһә лә, автор ихтыяры менән улар «татар» булып киткән.

*Р. Г. Кузеевтың:* «Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуына тиклем төбәк халҡы бары тик башҡорттар һәм татарҙарҙан ғына тора»,— тип раҫлауы менән дә шулай уҡ хәл. Ә ғәмәлдә, сығанаҡтарҙа XVI быуаттың илленсе йылдарында Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылған башҡорттарҙың үҙҙәренән һәм, шул актҡа тиклем, һәм унан һуң Башҡортостан сиген ташлап киткән ноғайҙарҙан тыш, этник төркөмдәр хаҡында мәғлүмәттәр юҡ.

Бик күп сығанаҡтар нигеҙендә башҡорт ерҙәренә күпләп күсенеүҙең бары тик XVII быуатта ғына башланыуы хаҡында етдиерәк һүҙ алып барырға мөмкин. 1840 йылда өйәҙ судтары тарафынан «типтәрҙәрҙең ергә хоҡуҡтары тураһында»ғы ведомостар төҙөлә. Шул саҡта кантон башлыҡтары ла ошондай уҡ ведомостар бирә, ул документтар башҡорттар менән мишәрҙәрҙең ер биләү, ерҙе файҙаланыу рәүешен өйрәнеү мөмкинлектәрен аса. Был ведомостарҙа һәм өйәҙ буйынса типтәр һәм мишәр ауылдарының һаны тураһында мәғлүмәттәр бирелгән. Уларҙа ауылдар, йорттар (ауылдар төркөмө), командалар, кантондар буйынса халыҡ һаны хаҡында статистик мәғлүмәттәр бар. Ведомостар ер биләү буйынса һәр ауылдың ниндәй олоҫтоҡо икәнен күрһәтә. Уларҙа кешеләрҙең ергә мөнәсәбәте (аҫаба, һатып алынған, ҡаҙнаныҡы, аҫаба башҡорттарҙан ҡортомға алынған һ. б.) әйтелгән. Ведомостарҙа килмешәктәр менән аҫабалар араһында төҙөлгән килешеүҙәр датаһы күрһәтелгән, шулар буйынса типтәрҙәр менән мишәрҙәрҙең күсенеү йәки уларҙың ауылдары барлыҡҡа килеү ваҡытын асыҡларға була.

1840 йылға типтәрҙәр этник яҡтан аралаш 1 075 ауылда йәшәй, был ауылдарҙа, уларҙан тыш, аҫаба башҡорттар, ғәскәри мишәрҙәр һәм яһаҡ йәки ауҙа татарҙары ла бергә донъя көтә. 416 ауылда йәшәүселәр (ауылдарҙың дөйөм һанынан 38,5 процент) ерҙе файҙаланыу тураһында документтар бирә алмай. Ҡалған 659 ауылдың (61,5 процент) 136-һына (21,6 процент) — XVII быуатта, 104-енә (15,7 процент) — XVIII быуаттың тәүге сирегендә, 324-енә (49,2 процент) — XVIII бы-

уаттың 30—90 йылдарында, 83-енә (12,5 процент) XIX быуаттың тәүге сирегендә нигеҙ һалына. Күренеүенсә, XVIII быуат барышында типтәрҙәр 428 ауылда төпләнә, был барлыҡ 659 ауылдың 65 процентын тәшкил итә. Шуның менән тикшереүселәрҙең, типтәрҙәр ҡатламы XVIII быуаттың 30—90-сы йылдарында формалашҡан, тигән һығымтаһы раҫҡа сыға. Шул уҡ һандар XVII быуатта Башҡортостанға рус булмаған крәҫтиәндәрҙең күпләп күсенеүе әле урын алмағанын бик сағыу дәлилләй. Ул XVIII быуатта башлана. Был фекерҙе бүтән мәғлүмәттәр ҙә нығыта: 1631—1632 йылдарҙа типтәрҙәр һәм яңғыҙаҡтарҙың 8 355 йорто ғына булыуы билдәле.

XVII быуат аҙағында типтәрҙәр Башҡортостандың көнбайышында (Бәләбәй, Бөгөлмә, Бөрө, Минзәлә өйәҙҙәре), төньяҡта (Уса), төньяҡ-көнсығышта (Красноуфимск өйәҙе) һәм көньяҡ (Стәрлетамаҡ өйәҙе) өлөшөндә төпләнә. 1855 йылда типтәрҙәр көнбайыш, көньяҡ һәм үҙәк өйәҙҙәрҙә йәшәй, улар 246 мең 730 кеше була, 8 меңгә яҡын типтәр — төньяҡ-көнбайышта (Йылабуға, Уса өйәҙҙәре) һәм 11 меңе көньяҡ-көнсығышта (Верхнеуральск, Ырымбур, Троицк өйәҙҙәре) көн күрә.

Типтәрҙәр башҡорт вотчинаһы (615 мең 696 дисәтинә йәки XIX быуат уртаһында улар биләгән йә файҙаланған 955 мең 916 дисәтинә ерҙең 64,4 проценты), ҡаҙна (115 мең 318 дисәтинә — 12,1 процент), рус батшаһы тарафынан бирелгән һәм һатып алынған (224 мең 902 дисәтинә — 23,5 процент) ерҙәрендә йәшәгән. Алты өйәҙҙә урынлашҡан (Бәләбәй өйәҙендә 209-ҙан 4 ауыл, Бөрө өйәҙендә 369-ҙан — 51, Минзәлә өйәҙендә 144-тән — 3, Йылабуға өйәҙендә 28-ҙән — 4, Уса өйәҙендә 11-ҙән — 6, Красноуфимск өйәҙендә 325-тән 1 ауыл) барлығы 69 ауыл (йәмғеһе 1 075 ауылдан 6,4 процент) батша бүләк иткән, XVII быуатта уҡ мариҙар һәм удмурттарға ҡараған аҫаба ерҙәрен биләгән. Был алтмыш туғыҙ ауылда типтәр аҫабалары үҙҙәренең ҡатламын үҙгәртмәй, типтәрҙәр составында ҡала.

Типтәрҙәрҙең этник составына килгәндә, 1795 йылда улар араһында 20 мең татар (барлыҡ типтәрҙәрҙең 40 проценты), 19 мең мари (38 процент), 9 мең сыуаш (18 процент), 2 мең мордва, удмурт һәм башҡорт (3 процент) ирҙәре була. X ревизия буйынса (1859 йыл) 133 мең 802 типтәр ирҙәре иҫәпләнә. Ырымбур (9 өйәҙ), Һамар (3 өйәҙ), Вятка (1 өйәҙ), Пермь (2 өйәҙ) губерналарында 70 процент (93 мең 859 йән) төп типтәр, 17 процент (23 мең 152) татар, 4,8 процент (6 мең 499) удмурт ирҙәре була. Уларҙың күпселеге айырым этник классификацияла күрһәтелмәгән. Шуны билдәләп үтергә кәрәк, 70 процент типтәр араһында (93 мең 895 ир кеше) та-

тарҙар ҙа, сыуаштар һәм башҡорттар ҙа була. Дине буйынса: христиандар — 802 (0,6 процент), мәжүсиҙәр — 29 мең 256 (21,9 процент), мосолмандар — 103 мең 744 (77,5 процент) кеше. Типтәрҙәрҙән тыш, Башҡортостанда XVIII быуат аҙағында 70—80 мең яһаҡ, ғәскәри, сумаҙан һәм сауҙа татарҙары була.

Күпселек мишәр ауылдарында — улар 181 (барлығы 331 ауылдың 54,7 проценты) — төпләнеп йәшәй башлау ваҡыты билдәһеҙ. XVII быуатта — 8 (2,4 процент), XVIII быуатта — 127 (38,4 процент), XIX быуаттың тәүге яртыһында — 15 (4,5 процент) мишәр ауылы барлыҡҡа килә. XVII быуат аҙағында Башҡортостанда ни бары 748 мишәр һәм татар (служилыйҙар) йорто була. Был мәғлүмәттәр тағы бер тапҡыр шуны иҫбатлай: төбәгебеҙҙә крәҫтиән колонизацияһы XVII быуатта башлана, әммә ул киләһе быуатта тамам көсәйә. 1781 йылда мишәрҙәр бында — 28 меңгә, XIX быуат аҙағында 94 меңгә етте.

Үрҙә әйтелгәндәр шундай һығымталар яһарға мөмкинлек бирә. Башҡортостанда крәҫтиән колонизацияһы башланған осорҙа, күсмә крәҫтиәндәрҙең ултыраҡ тормош башлауына ныҡ йоғонто яһап, ыңғай шарттар (ебәрелмешлек, припущенниктар һәм типтәрҙәр институттары) тыуған була инде. Әле беҙ файҙаланған документтар Башҡортостанға күсеп ултырыуҙың башланғысын (XVII быуат) һәм үҫешен (XVIII быуат) теп-теүәл күрһәтә. Башҡорт иленең бер генә милләтле халҡы XVII быуаттан башлап төрләнә. Типтәрҙәр һәм мишәрҙәр, аҫабаларҙың килмешәктәре булараҡ, башлыса, башҡорт община ерҙәренән файҙалана. Уларҙың дүрттән бер өлөшө — ҡаҙна ерендә, бер аҙы һатып алынған ерҙә ултыраҡлана. Типтәрҙәр һәм мишәрҙәрҙең бер өлөшө, аҫабалар булғас, төп аҫаба башҡорттарға ҡушылып китмәй, үҙҙәренең типтәр һәм мишәр ҡатламдарында ҡалыуын дауам итә.

## 2. БАШҠОРТОСТАНДАҒЫ МИШӘРҘӘР

Мишәрҙәр тураһында тарихи-этнографик хеҙмәттәр бик аҙ. Мәҫәлән, Волганың уң ярындағы мишәрҙәр тураһында 1972 йылда Мәскәүҙә баҫылған «Татары-мишари» исемле монография донъя күрҙе, авторы — этнограф *Р. Ғ. Мөхәмәдова.* Ә Башҡортостанға килеп ултырған мишәрҙәр хаҡында ундай хеҙмәт юҡ әле.

Уларҙың һаны, ғөрөф-ғәҙәттәре, ергә мөнәсәбәте һәм хужалығы тураһындағы күп булмаған мәғлүмәттәрҙе ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә генә табырға мөмкин.

Тәүҙә мишәрҙәрҙең этник сығышы тураһында тарихи-этнографик китаптарҙа осраған төрлө ҡараштар менән танышайыҡ. Хеҙмәттәрҙең береһе мишәрҙәрҙе Ока йылғаһы буйында йәшәгән мордва халҡына яҡын фин телле мещера йәки мажара исемле ҡәбиләнең татарлашыуынан барлыҡҡа килгән тип иҫәпләй. Был термин һәм этнонимдарҙың бер тамырҙан булыуын башҡалар ҙа яҡлап сыҡҡан. Тәүге фаразды нигеҙҙә ҡабул итеүселәрҙең ҡайһылары мещера йәки мажараларҙың фин телле түгел, ә уғыр телле булыуҙарын һәм уларҙан мадьярҙарҙың (венгрҙар) килеп сығыуын иҫбатларға тырыша.

Мишәрҙәрҙе урыҫтарға, көнсығыш славяндарға яҡынайтыусылар ҙа юҡ түгел. Ғалимдар араһында мишәрҙәрҙең татарлашҡан сыуаштар икәнлегенә ишара яһаусылар ҙа булған. Шулай уҡ элек һәм хәҙер ҙә мишәрҙәрҙе IX—X быуаттарҙа Волганың түбән яғында йәшәгән буртас халҡынан сыҡҡандыр тигән ҡараш та йәшәп килә. Элекке этнографик хеҙмәттәрҙә буртастарҙың мордва халҡының эрзя исемле өлөшөн тәшкил итеү мөмкинлеге хаҡында фараздар ҙа осрап ҡуя. Бындай ҡараштарҙы башҡа ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә лә табырға була.

XX быуат башында мишәрҙәр мәсьәләһе менән татар ғалимы *Ғ. Н. Әхмәров* ҡыҙыҡһына һәм, мишәр телендә боронғо төрки һүҙҙәренең һаҡланыуына таянып, уларҙың фин йәки уғыр халыҡтарынан түгел, ә төркиҙәр нигеҙендә формалашыуы теорияһын алға һөрә. Беҙҙең осорҙа ла ошо ҡарашты яҡлаусылар байтаҡ. Улар фекеренсә, мишәрҙәр антропологик сифаты яғынан һәм теле, мәҙәниәте буйынса Ҡазан татарҙарына бик яҡын тора, сөнки уларҙың икеһенең дә нигеҙен бер үк болғар ҡәбиләләре тәшкил иткән. Шуға күрә бөгөнгө көндә татарҙарҙың бер этнографик төркөмөн тәшкил итеүе теорияһына баҫым яһала.

XVIII быуат аҙағында мишәр депутаттарының яҙыуынса («Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар», 5-се том), мишәр халҡы Алтын Урҙанан сығып, 1482 йылда үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылған. Шунан һуң улар 1552 йылда рус батшаһы Иван Грозный яғында Ҡазанды баҫып алыуҙа ҡатнашҡандар. Батшаға күрһәткән ошо хеҙмәттәре өсөн уларға Волганың уң яғындағы таулы төбәктә күп ер бирелгән һәм мишәрҙәр шунда төпләнгән. Һуңғараҡ был урында Сембер, Пенза губерналары барлыҡҡа килә.

Рәсәй эсендә мишәрҙәр хәрби хеҙмәт үтәгән, шуға күрә уларҙы хеҙмәт итеүсе мишәрҙәр (служилые мишари) тип атағандар.

Ә Башҡортостанға мишәрҙәр тәүҙә батша тарафынан XVI быуаттың аҙағында күсерелә башлай. XVII—XVIII быуаттарҙа инде улар башҡорт еренә үҙ иректәре менән күсенә. Ырымбур



Башҡорт, мишәр һәм ҡалмыҡ. *XIX быуат уртаһы.*

губерна идаралығының 1800 йылдағы Башҡортостандың төрлө халыҡтары тураһында «Яҙмалары»нда ошо хаҡта түбәндәгеләр яҙылған: «Был мещеряк халҡы бында төп халыҡ түгел, улар Сембер губернаһының Алатырь һәм Сембер өйәҙҙәренән күсеп килгән һәм 1598 йылғы батша грамотаһы нигеҙендә ҡаҙнаға яһаҡ түләүҙән азат ителеп, уларға 1735 йылға тиклем Өфө ҡалаһы тирәһендә хеҙмәт итеү йөкмәтелгән». Шунан һуң мишәрҙәр Яйыҡ буйлап Ырымбур хәрби сик һыҙығында башҡорт һәм рус казактары менән бергә дәүләт сиктәрен һаҡлай.

XVIII быуаттағы башҡорт күтәрелештәрен баҫтырыуҙа батша властары мишәр старшиналарының хәрби көсөн дә йыш файҙалана. 1798 йылда мишәрҙәр йәшәгән ауылдарҙан 5 административ берәмек — кантондар (Силәбе, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө, Бәләбәй өйәҙҙәрендә) төҙөлә. Бер нисә ауылды үҙ эсенә алған йорттарҙы йорт старшиналары, кантондарҙы — кантон башлыҡтары етәкләгән. Башҡорт-мишәр ғәскәре төҙөлгәс, бөтә хәрби ҡатламдарға, шул иҫәптән мишәрҙәргә лә, Яйыҡ — Урал буйлап Рәсәйҙең дәүләт сиктәрен һаҡлау, уның һуғыш-походтарында ҡатнашыу, халыҡ хәрәкәттәрен баҫтырыу йөкмәтелгән.

Пугачев күтәрелешендә мишәр старшиналары икегә бүленә. Әгәр ябай халыҡ Боҙаяҙ ауылы (хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы) йөҙ башы, баш күтәреүселәрҙең күренекле полковнигы, аҙаҡ Рогервикта *Салауат Юлаев* яҙмышын уртаҡлашҡан *Ҡәнзәфәр Усаев* һәм Оло Аҡа ауылынан (Мәсетле районы) старшина һәм *Пугачевтың* дан ҡаҙанған баш полковнигы *Бәхтиәр Ҡанҡаев* етәкселегендә иҙеүгә һәм ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы дәррәү күтәрелһә, Исәт провинцияһындағы бөтә старшиналар — *Әбделманнап* һәм *Әбделкәрим Мөслимовтар, Баҡый Хөсәйенов, Әбделсәләм Баҡыев, Әҙелшә Азаматов, Әбдей Биктимеров* һәм Өфө провинцияһынан *Мөхәмәтрәхим Йосопов, Мәндәй Түпәев, Солтанморат Янышев, Әбләй Исмәғилев* — карателдәр яғында булалар.

Мишәрҙәр 1812 йылғы Ватан һуғышында ла әүҙем ҡатнаша. Улар тарафынан ике полк төҙөлөп, береһе французлдарҙан азат ителгән Мәскәү ҡалаһында һуғыш бөткәнсе гарнизон хеҙмәтен үтәһә, икенсеһе, данлы һуғыш юлын үтеп, Парижды алыуҙа ла ҡатнаша. 2-се мишәр полкының бөтә һуғышсылары ла икешәр көмөш миҙал: «1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн» һәм «1812 йылғы һуғыш иҫтәлеге» менән бүләкләнгәндәр.

1865 йылда, кантон идаралығы юҡҡа сығарылғас, мишәрҙәрҙе башҡа дәүләт крәҫтиәндәре хәленә күсерәләр. 1917 йылға тиклем шул хәлдә йәшәйҙәр.

Ә хәҙер мишәр ауылдары хаҡында мәғлүмәттәр менән таныштырайыҡ. Улар Ырымбур губернаһының 6 өйәҙенә таралған. 1839 йылда шуларҙың 131-е (38 проценты) — Бөрө өйәҙендә. Өфө тирәһендә — 79-ы (23 проценты), Бәләбәйҙә — 69-ы (20 проценты), Стәрлетамаҡта 36-һы (10 проценты), Силәбелә — 22-һе (6 проценты), Троицк өйәҙендә 3-өһө (0,8 проценты) нигеҙләнгән булған. Мишәрҙәрҙең өстән бер өлөшө — Өфө, дүрттән бере Бөрө өйәҙендә йәшәһә, ҡалған өйәҙҙәргә уларҙың унар проценты тура килгән.

Мишәрҙәр йәшәгән 340 ауылдың күбеһендә башҡа халыҡ вәкилдәре лә донъя көткән.

Бөтә мишәр ауылдарының 180-енең (54 проценты) ҡасан нигеҙләнеүе хаҡында һөйләүсе ҡағыҙҙар һаҡланмаған. Билдәле булғандарҙан 8 ауыл (2,4 процент) — XVII быуатта, 127-һе (38,4 проценты) — XVIII быуатта, 15-е (4,5 процент) XIX быуаттың беренсе яртыһында барлыҡҡа килгән.

Шул ауылдарҙың иң ҙурҙарының нигеҙләнеү, йәғни мишәрҙәрҙең килеп ултырыу ваҡытын күрһәтеп үтәйек. Өфө өйәҙендә: Нәсибаш (1759 йыл), Яныш (1765), Ҡырмыҫҡалы (1758), 1759 йылда Биштәкә (бөгөнгө Шайморат),— унда типтәрҙәр ҙә йәшәгән, Үгеҙ (1761), Әмин (1760), Сыуалҡип

(1781), Боҙаяҙ (1757), Солтанморат (1761), Бүреҡаҙған (1753), Ҡормаш (1715—1717), Туҡмаҡлы (1730), Ҡаратәкә (1761), Сәлих (1764), Шишмә (1742), Ҡалмаш (1742), Сәфәр (1742), Субый (1672), Тәпәреш (1733), Муса (1741); Бөрө өйәҙендә: *Батыршаның* тыуған ауылы Ҡарыш (бөгөнгө Үргә Ҡарыш, 1693 йылдың 6 июнендә), Боғҙан (1692—1693), Суртанлыкүл (1697), Ураҙай һәм Янбай (1702—1703), Насар (1703), Көндәшле (1761), Соҡалы (XVIII быуаттың башы), Тимкә (1713), Бигилде (1730), Шишмә (1743), Иштирәк (1748); Бәләбәй өйәҙендә: Саҡмағош (1738), Сырыҙбаш (1730), Өршәкбаш-Ҡарамалы (1755), Бик-Ҡарамалы (1748), Суйынсы (1762), Күсәрбай (1717), Искәндәр (1799 йыл).

Шул ваҡытта мишәрҙәр, Башҡортостанға килгәс, һан яғынан да йылдам үҫә барған. Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы *Р. Ғ. Кузеев* үҙенең «Башҡорт халҡының тарихи этнографияһы» (Өфө, 1978 йыл) исемле монографияһында түбәндәге һандарҙы килтерә:

| Йылдар | Мишәрҙәр һаны |
|---|---|
| 1743—1747 | 10,1 мең |
| 1782 | 28,7 мең |
| 1794 | 46,3 мең |
| 1833 | 73,6 мең |
| 1851 | 105,5 мең |
| 1856 | 110,5 мең |
| 1879 | 138,9 мең |
| 1912 | 150,8 мең |
| 1920 | 166,2 мең |
| 1926 | 136,0 мең |

Мишәрҙәрҙең айырым бер хәрби сословие булыуы, үҙ идаралығының оҙаҡ һаҡланыуы, сағыштырмаса бер тирәлә өйкөм-өйкөм ойошоп йәшәүе уларҙың сит халыҡ ерендә лә юҡҡа сыҡмай, һуңғы осорға тиклем айырым халыҡ булып йәшәүенә булышлыҡ иткән. Батшаға яҙған шикәйәтендә лә улар: «Беҙ — мишәр халҡы»,— тип, үҙҙәренең башҡаларҙан айырым булыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә алғандар. Хәрби ҡатлам булыуҙарына риза булып, башҡаларға күсеүгә ҡырҡа ҡаршылыҡ күрһәткәндәр. Әйтергә кәрәк, батша властары, башҡа халыҡтарҙан айырмалы рәүештә, мишәрҙәргә өҫтәмә өҫтөнлөктәр ҙә биргән. Мәҫәлән, әгәр башҡорт тархандарына батша тарафынан дворянлыҡ дәрәжәһе бирелмәһә, Башҡортостандағы мишәр мырҙалары шул дәрәжәне ала алғандар. Дворянлыҡ алған мишәрҙәр араһында Аҡсуриндар, Бигловтар, Дашкиндар, Долатказиндар, Диваевтар, Еникеевтар, Енгалышевтар, Кашаевтар, Киреевтар, Маматказиндар, Маминдар, Мәмлиевтар, Мора-

товтар, Тереғоловтар, Чанышевтар, Янбулатовтар булғанлығын әйтергә мөмкин. Ләкин кантондар бөтөрөлөү менән мишәрҙәр күп кенә өҫтөнлөктәрҙән мәхрүм ителгәндәр һәм уларҙың хоҡуҡтары башҡа дәүләт крәҫтиәндәре (мәҫәлән, татарҙар) менән тиңләшкән. Әкренләп мишәрҙәр айырым халыҡ булыуҙан да туҡтай һәм татар этносын тулыландыра. Һуңғы осорҙағы халыҡ иҫәбен алыуҙа мишәрҙәр айырым халыҡ итеп күрһәтелмәй башлай.

Башҡортостандағы мишәрҙәрҙең ер биләүе йә уны файҙаланыу тарихы ла күптәрҙе ҡыҙыҡһындыралыр. Әйтергә кәрәк, уларҙың күбеһе башҡорт еренә килмешәктәр булып килеп ултырған. Башҡорт аҫабалары менән мишәрҙәр «припуск» тураһында договорҙар төҙөгәндәр. Был документта ер биләүсе башҡорттарҙың һәм улар индергән мишәрҙәрҙең йәшәү урындары (ауылдары), һуңғыларына биреләсәк ерҙең сиктәре, индереү шарттары күрһәтелгән. 1767 йылда Башҡортостанда бөтәһе 2 253 мишәр йорто булып, шуларҙың 1 916-һы (85 проценты) ер өсөн башҡорттарға аҡсалата оброк түләгән (һәр йорттан йылына 10—15 тин). 1834 йылда 154 ауылдың мишәрҙәре Бөрө өйәҙендә — 78, Бәләбәйҙә — 56, Стәрлетамаҡта — 18, Силәбе өйәҙендә — 2 ауыл килмешәк (припущенник) хәлендә булыуын дауам иткән. 118 ауылдың халҡы — башҡорттарҙан өлөшләтә һатып алған ерҙә, 25 ауыл — башҡорт олоҫтарынан тартып алынған ҡаҙна ерендә, 9 ауыл (Байбаҡ, Субай, Янағош, Сибергән, Ҡулай, Берләс, Үләй, Иҫке Кеүәш, Мулла) батша тарафынан бирелгән «жалованная грамота»лар көсөндә нигеҙләнгәндәр. Ә 6 ауыл (Шишмә, Ҡалмаш, Сәфәр, Түбәнге һәм Үрге Тирмә, Тәпәреш) 1734—1740 йылдарҙағы ихтилалда ҡатнашҡан «боласы» башҡорттарҙан тартып алынған ерҙә барлыҡҡа килгән. Быға мишәрҙәр ул күтәреште ҡанға батырып баҫтырған өсөн ирешкәндәр. 1736 йылда уларға шул ерҙәрҙе (бөтәһе 169 700 сирек, йәғни 84 800 дисәтинә) бушлай биреү тураһында указ сыҡҡан. Губернатор *О. А. Игельстром* әйтеүенсә, мишәрҙәр боласылар биләмәһенә үҙҙәренә оҡшаған ерҙәрҙе индереп, шуға дәғүә иткәндәр. Тартыш оҙаҡҡа һуҙылған. Ләкин был ерҙәр мишәрҙәргә тулыһынса эләкмәгән. Тик 6 ауыл ғына ер алып ҡалған. Указдың үтәлмәүенә яңы башҡорт болаһынан ҡурҡыу сәбәпсе була. Губернаторҙың һорауы буйынса указ 1790 йылда юҡҡа сығарыла. Шул уҡ ваҡытта мишәрҙәр башҡорттарға ер өсөн оброк түләүҙе дауам итәләр. Тик 1832 йылғы ер тураһындағы законға ярашлы рәүештә генә (1816 йылғы 7-се ревизия мәғлүмәттәре буйынса мишәрҙәрҙең һәр бер ир затына 30-ар дисәтинә) ер бирелә. Шунан һуң ғына мишәрҙәр ер хужаһы башҡорттарға һалым түләүҙе туҡтатҡан. Бына ошонда башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғының артабан сикләнә барыуы күренә лә инде.

Ҡайһы бер тарихи хеҙмәттәрҙә уларҙың авторҙары аҫаба һәм килмешәктәрҙең асылын боҙоп күрһәтә. Мәҫәлән, килмешәктәр файҙаланған ерҙәрен киңәйтә барып, йәнәһе, аҫаба була алғандар һәм улар башҡорттарға ҡушыла, уларҙың сафын тултыра барғандар; башҡорт аҫабаһы һәм аҫаба дәрәжәһенә ирешкән килмешәктәр бер үк хоҡуҡтар менән файҙаланған. Ысынында иһә мишәр аҫаба хоҡуғы алған осраҡта ла башҡорт аҫабалары сафына күсмәгән, үҙ ҡатламында — хәрби мишәрҙәр рәтендә булыуын дауам иткән. Үрҙә әйтелгәнсә, 9 мишәр ауылы халҡы 1667—1699 йылдарҙағы батша грамоталары нигеҙендә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булғандар. Ләкин 1834 йылда ла уларҙың 3 458 аҫаба хоҡуҡлы мишәр (йәғни бөтә мишәрҙәрҙең ни бары 4,7 проценты) үҙҙәренең ғәскәри ҡатламында булыуы теркәлгән. Тимәк, ҡайһы бер авторҙарҙың фараздары ысынбарлыҡты сағылдырмай.

Ә шулай ҙа, батша грамотаһынан тыш, мишәрҙәр аҫаба хоҡуғына эйә була алғандармы икән, тигән һорау тыуыуы мөмкин. Ҡағиҙә буларак, уларҙың бындай мөмкинлектәре булмаған. Әгәр осраҡлы рәүештә күсһәләр ҙә, мишәрҙәр аҫабалар һанын түгел, ә ерһеҙ башҡорттар һанын арттырырҙар ине. Бик һирәк осраҡтарҙа ғына ҡайһы бер айырым килмешәктәр аҫаба башҡортҡа әйләнгән. Мәҫәлән, аҫаба башҡорт үҙенең килмешәген уллыҡҡа алһа йәки варис ҡалдырмаған ер биләүсенең тол ҡатынына мишәр, типтәр һәм башҡа килмешәктәр өйләнһә, шул осраҡтарҙа ғына мишәр, типтәр, татар, хатта сирмеш менән сыуаш та ҡартайған йәки үлгән аҫабаның бөтә хоҡуҡтарына дәғүә итә алған.

Дөйөм алғанда, аҫабалыҡҡа ынтылған килмешәктәрҙең алдында башҡорт аҫабалыҡ хоҡуғы ҡапҡаһы бикле булған. Шуның өсөн дә аҫаба хоҡуғы башҡортто халыҡ буларак ҡурсалаған һәм һаҡлаған. Шул хоҡуҡтың юҡҡа сығарылыуы башҡорттарҙың халыҡ буларак артабан һаҡланыуына ҙур ҡурҡыныс тыуҙырҙы. Аҫаба менән килмешәктәр араһындағы айырма — сиктәрҙең юғалыуы башҡа факторҙар менән бергә башҡорттарҙың бер өлөшөнөң башҡалар тарафынан йотолоуына юл асты. Шулай итеп, XVI—XX быуаттар араһында мишәрҙәр Башҡортостанда айырым бер халыҡ булып көн иткән. Ләкин уларҙың үҙаллылығына бик күп факторҙар ҡамасаулыҡ иткән һәм һөҙөмтәлә мишәрҙәр тулыһынса татар этносына ҡушылған. Шулай булһа ла, улар үҙҙәренә генә хас булған һыҙаттарҙы телдәрендә лә, ғөрөф-ғәҙәттәрендә лә һаман һаҡлайҙар.

*P. S.*

Ошо фекерҙәргә ҡарашын белдергән бер мәҡәләне тәҡдим итәбеҙ.

## МИЛЛӘТЕБЕҘҘЕ ТЕРГЕҘӘЙЕК!*

Күптән түгел «Йәшлек» гәзитендә Ә. Әсфәндиәровтың мишәр халҡы тураһында мәҡәләһен уҡып, ысын күңелдән шатландым. Ошоға тиклем ҡайһы берәүҙәрҙең бойороғо буйынса, мишәр милләте һәм уның яҙмышы тураһындағы мәғлүмәттәр ете ҡат бик аҫтында йәшерелеп тотолдо. Ул әле лә шулай...

Ҡасандыр коммунизм төҙөргә маташыусылар, бөтә милләттәрҙе туплап, шуларҙан бер милләтле халыҡ — кеше-роботтар, йәғни, ябай ғына әйткәндә, маңҡорттар яһарға теләнеләр. Бөгөн дә ул идея төрлө хөкүмәт структураларында һаҡланып килә.

Мин үҙемде күкрәк киреп мишәр тип әйтһәм дә, халҡымдың яҙмышының шул тиклем дә аяныслы булыуы һәм мишәрҙең милләт булараҡ юҡҡа сығарылыуы, икенсе төрлө әйткәндә, татар тигән милләттең бер диалекты ғына итеп күрергә теләүҙәре һағайта ла, әрнетә лә.

Әсәйем башҡорт, атайым мишәр ине. Ине тим, сөнки ул ғүмер буйы мишәр милләтен милләт булараҡ тергеҙеү тураһында хыялланып, теләктәренә ирешә алмай үлеп китте. Милләтем мишәр тип үлеп китеүселәр һәм бөгөн дә янып йөрөүселәр бер мин генә түгел икәнен яҡшы аңлайым. Шуға күрә лә, әйҙәгеҙ мишәрҙәрем, берләшәйек, милләтебеҙҙе тергеҙәйек, тип саҡырам һеҙҙе!

Мишәр халҡы борон-борондан ҡурҡыу белмәҫ, ҡыйыу, бөйөк халыҡ булған. Уның яҙмышы үтә лә аяныслы һәм фажиғәле. Мишәрҙең үҙ мәҙәниәте, үҙ теле, үҙ тарихы булған һәм бар. Уларҙың бөгөнгө көндә иң ойошоп йәшәгән урындары Ульяновск, Әстрхан, Саратов, Пенза, Һамар, Түбәнге Новгород, Киров, Пермь, Силәбе өлкәләре һәм шулай уҡ Башҡортостан менән Татарстан. Тағы ла шуны өҫтәп әйткем килә: юғарыла әйтеп кителгән төбәктәрҙән сыҡҡан барса мишәр балалары, ҡайҙа ғына йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, барыһы ла үҙҙәренең мишәр милләтенән икәнен белә.

Милләттәр иҫәбен алыу буйынса үткәреләсәк кампаниялар ваҡытынан алда мишәрҙе милләттәр исемлегенә индереү — беҙҙең изге бурысыбыҙ. Әлбиттә, ярҙам көтәр урын юҡ, ләкин беҙҙә сәм һәм рух көслө! Юғары баҫҡыста Башҡорт һәм Татар халыҡ үҙәктәре беҙгә ҡаршы то-

* Йәшлек. 1991 йыл, 27 ғинуар.

рор, бәлки, тик беҙ ҡыҫым-баҫымдарға бирешмәй, матбуғат биттәре аша үҙебеҙҙе танытайыҡ — ул милләтте тергеҙеүгә иң ҙур аҙым.

*В. Мостафин,*
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.

## 3. МИШӘР ДЕПУТАТТАРЫНЫҢ ҺОРАУНАМӘҺЕ*

№ 447. 1794 г. января... — Прошение мишарских депутатов Абдулкадыра Абдулкаримова с товарищами генерал-прокурору *А. Н. Самойлову* о наряде мишарского отряда на летнюю службу отдельно от башкир.

Высокородному и высокопревосходительному господину действительному тайному советнику, генерал-прокурору, двора е. и. в. действительному камергеру и разных орденов кавалеру Александр Николаевичу Уфимского наместничества мещерятского народа от депутатов нижайшее ***прошение.***

Избраны будучи от народа в сие звание и, находясь ныне под покровительством вашего высокопревосходительства, осмеливаемся представить нужды онаго:

Мещерятский наш народ прежде других иноверцев по собственному своему желанию, переселившись из Золотой Орды в Россию еще в 7001 году[1], за верныя и беспорочныя предков наших российскому скиптру службы как при взятье Казани, так и при других многих тогдашнего времяни случаях, жалованны были в разных местах на горной стороне реки Волги поместными дачами и для поселения их выгодными землями с угодьи.

А как между тем нагайские народы, не желая быть в подданстве, частыми возмущениями обезпокоивали верноподданных России, тогда предки наши командированы были по разряду с протчими великороссийскими войсками в их селения сперва для усмирения оных нагайцов и защищения вновь пришедших тогда в подданство башкирцов и огульских орд, а потом против сих самых башкирцов, в 1676 году взбунтовавшихся. По усмирению коих через трехлетнее время оставлены были предки наши между селениями их для жительства и примечания за их поступками и для безопасности города Уфимска и были разделены по волостям их башкирским с поселением на землях, занятых ими после тех бежавших нагайцов.

---

[1] 1482/83 г.

* Был документ мишәрҙәрҙең үҙҙәре хаҡында.

Во время же втораго башкирскаго бунта, произведеннаго ими в 1707 году под предводительством возмутителей своих Алдара и Кучюма, при чем первою жертвою дерзости их были предков наших жилища, кои они выжегши, скот и прочее имение разграбили, многих из семейств наших с незапным нападением побили, а молодых людей и женский пол попленя, распродали киргисцам и бухарцам для того единаго, что они навсегда в непоколебимой верности пребывали и к их начинаниям не приставали.

А по начатии в 1735 году строения города Оренбурга предки наши, быв раскомандированы из селений своих для проведения от сего вновь заводимаго города линии с устроениями крепостей и редутов до реки Иртыша, когда башкирцы открыли третей бунт, называемой Акаевским чрез сына перваго бунтовщика Кучюма[1], причинили нашему мещерятскому народу толикой же вред, как и прежде, и тем привели нас, всеподданнейших, во всекрайнейшее же раззорение с убивством и расточением немалых семейств наших.

По таковому их, башкирцов, с нами поступку, воспоследовавшему тогда, имянными е. и. в. высочайшими указами повелено: 1-м) 1736 года февраля 11 дня 1 пунктом, чтоб нам, служилым мещерякам, от башкирцов быть отделенными и за верность нашу и усердные службы земли с угодьями, те, коим мы до того времяни владели по найму от башкирцов, отдать нам вечно и безоброчно; 20-м — селиться нам, мещерякам, между русскими, а при том дать на построение домов денежное жалованье против волжских казаков, а впредь для нашего содержания под поселение и под пашню отвесть земель и протчих угодей против того, как давано уфимским дворянам и казакам. 2-м) 1739-го августа 20 дня — 10 пунктом: взятые у башкирцов земли отдать нам, мещерякам, за нашу верность, и чтоб оными землями владеть нам впредь вечно и безоброчно, и поселить как нас, мещеряков, так татар и чуваш особыми деревнями между русскими селениями.

Почему мы и поселились точно между русскими, не получая от казны вспоможения.

Потом и от Правительствующаго Сената последовавшими указами тож предписано было: 1747 года майя 26 дня — нас, мещеряков и служилых татар, в Уфимской и в Исецкой провинциях живущих, поелику все мы изстари по указам для службы накликаны и наименованы ***служивыми*** и в последнее башкирское замешательство к бунту не только не приставали,

---

[1] Имеется в виду Акай Кусюмов, руководивший восстанием на Казанской дороге в 1735—1736 гг.

но все верно и ревностно при искоренении бунтовщиков служили, и многие из нас в конец раззорены, за что по силе того имяннаго 1736 года указу велено нас наградить и земли, на которых из найму от башкирцов жили, отдать нам вечно и безоброчно, так как уже довольно аппробованным людям при всяких чрезвычайных случаях как для киргисцов, так, паче чаяния, и для башкирцов, к службам надежными и надобными; 1754-го марта 24 дня — владеть нам землями попрежнему безоброчно, как до того времяни владели, и за оную землю и за снятие земляного ясака как башкирцам, так и нам, мещерякам, велено отправлять службы.

И поелику служение возложено на нас, всеподданейших, по владению сими землями, чтобы содержать обще с башкирцами караулы по линии, простирающейся противу трех наипространнейших губерний — Уфимской, Тобольской и Колыванской, с получением на Сибирской линии жалованья, провианта и фуража против донских казаков, сменяясь со оной чрез 2 года, а на Оренбургской в однолетнее время без жалованья, получая только с 1791 года провиант, содержа себя во всем протчем на своем коште. И напредь сего наряжаемо было с нас, мещеряков, составляющих с небольшим 3800 дворов, с каждых осьми дворов по одному человеку. А с 1786 года по предложению бывшаго тогда в должности генерал-губернатора и кавалера барона *Игельстрома* служим уже с 3 дворов по человеку, не выключая при том ни чиновников наших, ни духовнаго звания людей. Башкирцы ж напротив сего, пользуясь излишними в разных местах состоящими от земель их выгодами, продажами и отдачами в наймы за немалыя деньги, равную несут с нами на тех линиях токмо службу, не чувствуя ни малейшаго в том себе отягощения, ибо сии самыя с обширных земель их доходы доставляют им все способы ко облегчению их служения. Мы же, не получая никаких доходов, кроме заселенных нами земель, имея от них одно только пропитание, пришли во всеконечное раззорение. Сверх сего, находясь как на Оренбургской, так и на Сибирских линиях, где быв обще с ними для разъездов в таком количестве, что едва может быть наших противу их шестая часть и бываем раскомандированы в разные места по самому малому количеству между башкирцами, при чем известныя их и нередкия с киргисцами беспорядочныя поступки, чрез загнание лошадей, приводят иногда наших людей в безвинное нарекание и беспокойство. А паче, что чрез такое наше с ними по всей вышеупоминаемой линии соединение, невидными остаются как верность службы нашей, так и всегдашнее усердие ко оной, да и самое смотрение за исправностью подчиненных наших и в нужных случаях пособие

по разсеянности команды по всей линии весьма удачно от должнаго наблюдения.

Каковые столь необходимо нужные для нас обстоятельствы понуждают нас испрашивать:

Не благоугодно ль будет е. и. в. повелеть нас от башкирцов отделить и по малолюдству нашему одной пятисотной мещерятской нашей команде, а не свыше, содержать караулы особо в отдаленнейшей части Сибирской линии, лежащей в Колыванском наместничестве на Иртышской линии, начиная от Ачаировскаго форпоста до Шульбинскаго на разстоянии один от другаго 700 верст, от Уфы же до того Шульбинскаго форпоста 2000 верст, с определением начальников с нашего же народа по порядку донских казачьих полков, сменяться нам с своими мещеряками с оной линии через 2 или 3 года и, оставляя наш народ на заселенных ныне землях и угодьях, представляя башкирцам большему пред нами количеству ближайшия к их жилищам посты на Оренбургской линии и по Сибирской, что в Тобольской губернии, до упоминаемаго Ачаировскаго форпоста на разстоянии менее 2000 верст, для той единственно способности, что мы по большей части жительство имеем от Оренбургской линии не в блиском, а в дальнейшем разстоянии внутри губернии между русскими народами и что содержание башкирцам Оренбургской по Уралу линии, идущей в смежности их волостей, могут они по тамошнему положению, отправляя службу в одне только летние месяцы, удобнее могут сменяться с постов и пребывать все зимнее время в их жилищах.

А хотя наше в Колыванской губернии содержание линии предпочитаться может пред башкирцами по случаю отделенности тягостнейшим, поелику там производится окладное жалованье, то не имея мы от земель своих ни малейших выгод, кроме питания, а потому предпочитаем оное отдаление от домов своих небезполезным, а особливо когда высочайше повелено будет, отделяясь от башкирцов содержать нам одним оной особой пост, чем не только избавимся от многих притеснений башкирских, но старшины наши и каждой удостоится способности доказывать ревностныя свои в служении и наивящее иметь могут за подчиненными своими смотрение, как в исправности оружия и лошадей, так и в подании им в нужных случаях надлежащих пособий, побуждая каждаго к верному исполнению своей должности с пребыванием навсегда в должном воинском порядке. И сие тем удобнее исполнять можем, что старшины и протчие чиновники единственно из нашего ж народа наряжаемы будут.

В случае ж каковых-либо нужных обстоятельств в дальнейших где местах, естьли потребно будет и большаго количества народу, то мы в таких случаях, сверх оной пятисотной нашей команды, можем их пребывающих в домех своих употреблять на службу, от которой по всей нашей возможности не отрекаемся.

В заключение сего, всенижайше просим ваше высокопревосходительство исходатайствовать представительством вашим на сию нашу прозьбу всемилостивейшее е. и. в. соизволение сим навсегда ощасливить целое наше общество.

Генваря... дня 1794 года.

Старшина порутчик Нигамит-улла Салтанмратов, походный старшина Абдулкадыр Абдулкаримов, сотник Шигабуддин Шендеев.

На л. 14 над текстом: Генваря 19-го 1794 года.

ЦГИАЛ, Непременный государственный совет, д. № 143, лл. 14 —17.

*Опубликовано:* Материалы по истории Башкирской АССР. Т. 5. М., 1960. С. 574—576.

## 4. ҺЕҘ — ӨПӘЙ БАШҠОРТТАРЫ

Силәбе өлкәһе Нәзепетровск районы Арыҫлан ауылы уҡыусылары «Йәншишмә»нең 98-се һанында (1991 йыл): «Ауылыбыҙҙың ерле халҡы башҡорттарҙан торһа ла... татар булып яҙылғанбыҙ»,— тип хәбәр итә. Улар шул сәбәпле мәктәптә туған тел сифатында татар теле уҡытылыуы, ул дәрестең ифрат ауыр бирелеүе тураһында яҙалар. Балалар быының сәбәбен дә күрһәткәндәр: улар, башҡорт халҡы булараҡ, өйҙә башҡортса һөйләшәләр. Шуға күрә мәктәптә башҡорт телен өйрәнеү теләгән белдереп, ярҙам һорағандар.

Хатты уҡығас, мине Арыҫлан ауылы халҡының үткәне, уның милли составы ҡыҙыҡһындырҙы. Байтаҡ тарихи материалдарҙы ҡарағас, ошолар асыҡланды.

Борон Арыҫлан ауылы халҡы башҡорттарҙың Өпәй ырыуына ҡараған. Заманында ул ырыу Ҡариҙел (Өфө) йылғаһының ике яғында ла киң ялан, урман, иҫәпһеҙ күл-йылғалар буйын биләгән. Ерле халыҡ Уфа (Ҡариҙел) йылғаһын һәм ҡаланы Өфө тип атай. Шуға күрә, Өфө һүҙен ҡайһы бер ғалимдар Өпәй ырыуы исеменән сығаралар: Өпәй — Өпө — Өфө. Арыҫлан ауылының боронғо исеме — Күсем.

1834 йылғы ревизия *Арыҫландың* улын ҡағыҙға теркәп ҡуйған. Ул — 1744—1824 йылдарҙа йәшәгән *Ғәббәс Арыҫланов.*

Башҡортостанда промышленность үҫеүе, яңы заводтарҙың барлыҡҡа килеүе, рус һәм башҡа милләт крәҫтиәндәренең күпләп күсеп ултырыуы өпәйҙәр, уларҙың күршеләре Оло Ҡошсо һәм Һыҙғы ырыуҙарының ер биләмәһен кәметкән. Әкренләп килеп ултырыусылар һан яғынан өҫтөнлөк алған.

XVII быуатта өпәйҙәр йәйләүе Көңгөр ҡалаһына хәтле еткән булған. Шунан һуңғы осорҙа уларҙың ерҙәре бик ныҡ кәмегән. Уларҙың биләмәләрендә Михайлов, Үрге һәм Түбәнге Һәргә (Серга) заводтары төҙөлә. Өпәйҙәр шул заводтар һәм күсеп килеп төпләнгән рус һәм татар крәҫтиәндәренең ҡамауында ҡала. Ошоноң һөҙөмтәһендә, Өпәй башҡорттарының бер өлөшө суҡындырылған, ә икенсе өлөшө татарҙар менән ныҡ аралашҡан. Улар бер-береһенең телен дә үҙләштергән. Ҡариҙел буйлап Арыҫлан ауылынан үрҙәрәк урынлашҡан элекке Пермь губернаһының Красноуфимск өйәҙенә ҡараған Өпәй олоҫоноң төп ауылдары Шәкүр, Аҡбаш, уларҙың күршеһе Оло Ҡошсо ырыуының Үрмәкәй, Әртә-Шәһәре исемле ауылдарының башҡорттарында ла шул уҡ хәл. Бөгөн улар өйҙә үҙ (башҡорт) телендә һөйләшә, мәктәптә татар телен өйрәнә. Өфө-Шәһәре ауылында татар телен Борай районы ҡыҙы уҡыта. Уның әйтеүенсә, уға телде уҡытыуы ауырға тура килә, сөнки балалар ата-әсәләре менән туған башҡорт телендә һөйләшә.

Бөгөн Башҡортостандың Мәсетле районында урынлашҡан Теләш, Ишәле һәм Тәкә исемле Өпәй ауылдары балалары ғына туған башҡорт телендә уҡый.

Өпәйҙәрҙең данлы тарихы бар. Улар Рәсәй батшалығының иҙеүенә ҡаршы башҡорт яуҙарында бик актив ҡатнашҡан. XVIII быуаттың беренсе яртыһында Өпәй башҡорттары Ҡараһаҡал һәм башҡа етәкселәрҙең боласылары араһында ла булған.

Бына ошо ихтилалдарҙы баҫтырыу һөҙөмтәһендә, өпәйҙәрҙең бер өлөшө карателдәргә ҡол итеп өләшелгән, икенселәрен суҡындырғандар, өсөнсөләрен башҡа ҡатламдарға (сословиеларға) күсергәндәр. Һуңғылары араһында Арыҫлан ауылы башҡорттары ла булған. Тәүҙә улар татар, шунан һуң типтәр ҡатламына күсерелгән.

Элекке Красноуфимск өйәҙендә 25 типтәр ауылы булған. Шуларҙың икәүһе Өпәй олоҫона ҡараған. Икәүҙең береһе — Арыҫлан ауылы.

Ихтилалда ҡатнашҡан башҡорт ауылдарын типтәр йә башҡа ҡатламға күсереү йыш ҡына булған. Мәҫәлән, элекке

һыҙғы олоҫонда урынлашҡан (хәҙерге Свердловск өлкәһе), беҙҙең Дыуан районына күрше, Ҡариҙел буйындағы Үрге Боғалыш ауылы типтәрҙәре араһында 1840 йылда — 62, Урта Боғалышта — 11, Боғалыш Тамаҡта — 27, Яманйылғала — 33, Йүәлә 53 ир заты башҡорттарҙан булған.

1834 йылда Арыҫланда типтәрҙәрҙән 120 ир заты йәшәгән. Уларҙың башҡорт икәнен башҡа факттар ҙа раҫлай. Мәсәлән, 1832 йылғы батша законы буйынса, типтәрҙең һәр ир затына 30 дисәтинә ер тейгән. Тимәк, 120 типтәргә һәр береһенә 30-ар дисәтинәнән бөтәһе 3 600 дисәтинә ер тейеш булған. Ләкин улар 92 730 дисәтинә ер биләгән. Был инде норманы 26 тапҡырға артып киткән.

Бындай хәл Башҡортостандың бер төбәгендә лә күҙәтелмәгән. «Эш нимәлә һуң?» — тип һорарһығыҙ. Баҡтиһәң, «татар типтәре» тип аталған Арыҫлан халҡы этник сығышы буйынса башҡорт булған. Шуға күрә лә уларға ер-һыу күп тейгән. Хатта бөтә Өпәй волосының биләмәләре улар ҡарамағында һаналған. Арыҫландарҙың сығышы ташҡа баҫылған ҡағыҙҙа ифрат асыҡ күрһәтелгән: «По первобытному их состоянию в башкирском сословии в Упейской волости имеют грамоту от великих ... царей Ивана и Петра Алексеевичей от сентября 7 103 (1694) года». Нәҡ ошо йылда икәүләп батшалыҡ иткән ағалы-ҡустылы *Иван* һәм *Петрҙан* (буласаҡ Петр Беренсе) Өпәй олоҫо аҫабалары — ер хужалары, үҙ ерҙәрен башҡаларҙан ҡурсалап, «жалованная грамота» алғандар. Ошо батша грамотаһы өпәйҙәрҙең башҡа ауылдарында түгел, ә уларҙың төп нигеҙендә — Арыҫланда һаҡланған. Ошо сәбәпле, ирек һөйөүсе Арыҫлан халҡы көсләп башҡорттан — татарға, татарҙарҙан типтәргә күсерелһә лә, шул грамотаның хужаһы булып ҡалған һәм күп ерҙе биләгән.

Һығымта шул: Арыҫлан халҡы — боронғо Өпәй ырыуы башҡорттары. Уҡыусылар теләге нигеҙендә тарихи дөрөҫләк ята.

## 5. ИЛ ЭШЕН АЛДАН ҠУЙЫП

Республикабыҙҙың райондарында һәм ҡалаларында башҡорт ҡоролтайҙары ойошторола башланы. Шуларҙың береһендә, Тәтешлелә үткәнендә, миңә лә ҡатнашырға насип булды.

Райондың ауылдарынан һайланған алтмышлап делегат алдында хакимиәт башлығы урынбаҫары *Герасим Кандеев* сығыш яһаны. Ул Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында Тәтешле башҡорттары исеменән ҡатнашҡан делегаттарҙың төрлө секцияларҙың эшендә әүҙем сығыш яһауҙары, оло фо-

румдың бөтә милләт өсөн әһәмиәте хаҡында һөйләне. Шул уҡ ваҡытта уҡыу-тәрбиә мәсьәләһенә ҡағылып, Башҡортостан тарихын, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен удмурттар өсөн — удмурт, татарса уҡығандар өсөн — татар, мариҙар өсөн мари телдәрендә баҫтырып сығарыу тыуған төйәккә, республикаға бирелгән патриоттар тәрбиәләүҙә ифрат файҙалы бер сара буласағына ышаныс белдерҙе.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе, тарих фәндәре докторы, Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, Рәсәй Гуманитар академияһының академигы *Нияз Мәжитов* ҡоролтай делегаттарын ҡайнар ҡотлап, уның эшенә уңыштар теләне. Оло Ҡоролтай ҡарарҙарын үтәү юлында Башҡарма комитетының штаты, эшләү урыны һәм төрлө комиссияларҙың булдырылыуы, уларҙың тәүге аҙымдары хаҡында мәғлүмәт бирҙе, районды иҡтисади, социаль, мәҙәни үҫеше буйынса киләсәккә арналған 10—20 йылға план-программа төҙөү кәрәклегенә, был яҡтарға тимер юл, газ үткәреү мәсьәләһенә, хатта башҡортса гәзит-журналдарға яҙылыу, башҡортса уҡытыу, кадрҙар тәрбиәләү, үҫтереү проблемаларына ла туҡталып үтте, төрлө һорауҙарға яуап бирҙе.

Ҡоролтай эшендә Президент хакимиәте вәкиле *Рәшит Ғәли* улы *Насиров* та ҡатнашты. Ул үҙ сығышында милләттәр татыулығын нығытыу, мәҙәниәтте үҫтереү һәм балаларҙы үҙ туған телендә уҡытыу — заман талаптары икәненә баҫым яһаны.

Башҡортостан тарихын, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен уҡытыу һәм туған телде өйрәтеү мәсьәләләренең торошо тураһында район мәғариф бүлеге мөдире *Хәлил Ниғмәтйәнов* сығыш яһаны. Туған телде өйрәнеү ҡатнаш ауылдарҙа бик етди торған мәсьәлә икән. Мәктәптәрҙә айырым төркөмдәр ойоштоурола. Шундай башланғыстарҙың береһенә миҫал да килтерҙе: район үҙәге Үрге Тәтешлелә 1-се синыфҡа килгән 75 баланың 15-е ата-әсәләрҙең теләге буйынса башҡорт телен өйрәнә башлаған.

Шуны ла әйтергә кәрәктер: ҡайһы бер сығыштарҙа башҡорт телен уҡытыу милләте башҡорт булған өсөн түгел, а Башҡортостанға исем биргән халыҡтың теле булған өсөн өйрәнеү тураһында барған кеүек булды. Ниңәлер был турала ла бигүк асыҡ һөйләшеү булманы. Ә Тәтешле районында борон да, бөгөн дә төп һәм күпселек халыҡ — башҡорттар, 1989 йылда Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса Тәтешле районында йәшәгән 26 мең 200 кешенең 53,6 процентын — башҡорттар, ҡалғандарын удмурттар (22,4), татарҙар (21,1) урыҫтар (1,4), мариҙар (1,3) һәм сыуаштар (0,1)

тәшкил иткән. Ә элегерәк, бер-ике быуат алда — был ерҙең иң күп ауылдары ла башҡорттоҡо булған.

Хәҙерге Тәтешле районы территорияһын башҡорттарҙың Ирәкте (көнсығыш Ҡара-Табын ҡәбиләһенән), Урман-Гәрә һәм Ҡыр-Танып ырыуҙары биләгән. XVI быуаттың икенсе яртыһында улар олоҫ исемдәрен алған.

Ирәкте олоҫона ҡараған башҡорт ауылдарын һанап үтәйек. Һәүәләй (1795 йылда 9 йортта — 47 башҡорт, 1920 йылда 111 йортта 496 башҡорт һәм типтәр йәшәгән, һуңғылары 1850 йылда ҡабул ителгән, 31 ерһеҙ башҡорт аҙаҡ типтәр ҡатламына күскән), Аҡсәйет (башҡорттар 1747 йылда ҡабул ителгән типтәрҙәр менән бергә йәшәгән), Сорғолдо (Аҡсәйеттән айырылған), Мәмәтәй (башҡорттар үҙ ауылына 1774 йылда типтәрҙәрҙе индергән), Яңы Мәмәтәй, Ҡоҙаш, Яңы Ҡоҙаш, Зиримзи һәм Иҫке Соҡор, яңы Ирәкте ауылдарында башҡорт аҫабалары көн күргән. Һуңғы өс ауыл Соҡорҙан айырылған. Соҡор — XIX быуаттың икенсе яртыһында йәшәгән күренекле башҡорт шағиры *Ғәли Соҡоройҙоң* тыуған ауылы. Ул — Ирәкте олоҫо старшинаһы *Шәрип Кейековтың* бүләһе, *Ғәли Соҡорой:* «Беҙ урман башҡорто буламыҙ», — тигән. 1996 йылда уның тыуыуына 170 йыл тула.

Ҡыр-Танып олоҫона Ҡайпан (Иҫке, Яңы), Бүләгәрт-Ҡайпан (башҡорттар, мишәрҙәр), Кәлтәү, Иҫке һәм Яңы Шарҙыҡ, Сикияз (Түбәнге) ауылдары ингән һәм уларҙа аҫаба башҡорттар йәшәгән.

Урман-Гәрә олоҫонда Шүлгән, Ҡашҡаҡ, Аҡбулат ауылдары булған. Һуңғыһында 1807 йылдан бирле типтәрҙәр ҙә йәшәгән. 100 йылдан һуң улар айырылып, Яңы Аҡбулатҡа нигеҙ һала.

Күренеүенсә, ирәктеләрҙең Аҡсәйет, Сорғолдо, Мәмәтәй ауылдарында — башҡорттар, типтәрҙәр, ә ҡыр-таныптар Бүләгәрт-Ҡайпанда мишәрҙәр, урман-гәрәләр Аҡбулатта (Яңы) типтәрҙәр менән көн иткән.

Бынан тыш, XX быуат башында һәм 1920, 1925 йылдарҙан һуң барлыҡҡа килгән 27 ауылда ла тик башҡорттар донъя көткән. Шулай итеп, башҡорттар — 55 ауылда, типтәрҙәр — 4, мишәрҙәр — 1 ауылда аҫабалар менән, удмурттар — 22, урыҫтар 5 ауылда йәшәгән.

*Ғәли Соҡоройҙоң* улы шағир, мәғрифәтсе *Ғарифулла Кейеков* үҙ нәҫеле һәм яҡташтары тураһында «Беҙҙең башҡорт тоҡомо тыйнаҡ ҡына халыҡ. Шулай булһалар ҙа, уҡыуға бик булдыҡлылар», — тигән.

Халҡыбыҙ алдындағы бөгөнгө бурыстар менән ауаздаш, әле лә заманса яңғыраған уның шиғри юлдарын да килтереү яҙыҡ булмаҫ.

Ҡәрҙәшлекте
танымаһаҡ,
Халҡыбыҙҙы һөймәһәк,
Бауы өҙөлгән тәсбих
Кеүек таралырбыҙ,
дуҫтарым.
«Бүленгәнде бүре ашар,
Айырылғанды айыу ашар», —
Тигәндәр боронғолар —
Бик дөрөҫтөр,
дуҫтарым...
Милләт өсөн ҡайғырған,
Ил эшен алдан ҡуйған
Халыҡтар алға киткән,
беҙ
Ҡалғанбыҙ, дуҫтарым...

Бына ошолар хаҡында әйттем мин үҙ сығышымда. Башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһендә тарихи нигеҙебеҙгә күҙ һалыу һис шикһеҙ ғәҙел булыр ине.

Халыҡтың ихласлығы, тарих, шәжәрәләре менән ҡыҙыҡһыныуы һорауҙарҙа асыҡ күренде. Ә Иҫке Соҡор ауылынан колхоз рәйесе *Рәдис Латиповтың* шағир *Ғәли Соҡоройҙоң* буласаҡ оло юбилейына әҙерләнеүҙә беҙҙең мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, Яҙыусылар ойошмаһы, Министрлыҡтарҙың һаман да булһа ҡыл ҡыбырлатмауҙары, битарафлыҡтары хаҡындағы ысын күңелдән сыҡҡан борсоулы ғәҙел һүҙҙәрен ишетеү еңелдән булманы. Ҡасан һуң ошо ойоу-йоҡонан уянырбыҙ икән, тигән уй һаман борсой беҙҙе.

Район ҡоролтайы үҙенең эш органын — 7 делегаттан район бүлеге советын — төҙөп һәм киләсәккә план ҡабул итеп, эшен тамамланы. Хәйер, оло эш башланып ҡына тора.

## 1989 ЙЫЛДА БӨТӘ СОЮЗ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУҘЫҢ ЙОМҒАҠТАРЫ БУЙЫНСА БАШҠОРТОСТАНДЫҢ РАЙОН ҺӘМ ҠАЛАЛАРЫНДА БАШҠОРТТАР ҺАНЫ*

| Райондар | Дөйөм халыҡ һаны | Башҡорттар | Проценттарҙа |
|---|---|---|---|
| Архангель | 20,8 мең | 8508 | 41,8 |
| Асҡын | 23,5 | 14842 | 63,3 |
| Ауырғазы | 39,1 | 4173 | 10,7 |
| Баймаҡ | 58,1 | 46583 | 79,6 |
| Баҡалы | 32,2 | 2716 | 8,4 |
| Балтас | 25,0 | 5500 | 22,1 |
| Бәләбәй | 16,5 | 670 | 4,0 |
| Балаҡатай | 22,0 | 8909 | 40,4 |
| Белорет | 34,9 | 18941 | 57,5 |
| Бишбүләк | 27,9 | 2896 | 10,4 |
| Бөрө | 18,9 | 815 | 4,3 |
| Благовар | 24,4 | 1899 | 7,8 |
| Благовещен | 46,6 | 3491 | 9,3 |
| Бүздәк | 30,4 | 8001 | 26,2 |
| Борай | 30,0 | 11738 | 39,5 |
| Бөрйән | 14,1 | 13525 | 95,3 |
| Ғафури | 36,8 | 14816 | 41,6 |
| Дәүләкән | 39,3 | 10455 | 27,0 |
| Дыуан | 29,7 | 5447 | 18,2 |
| Дүртөйлө | 56,6 | 13652 | 24,2 |
| Йәрмәкәй | 18,0 | 2057 | 11,3 |
| Ейәнсура | 27,1 | 17843 | 65,7 |
| Йылайыр | 18,7 | 9048 | 48,4 |
| Иглин | 48,5 | 7789 | 17,9 |
| Илеш | 36,0 | 22946 | 63,2 |
| Ишембай | 25,5 | 17965 | 69,7 |
| Ҡалтасы | 27,9 | 885 | 3,2 |
| Ҡариҙел | 30,6 | 10524 | 34,8 |
| Ҡырмыҫҡалы | 46,5 | 10471 | 22,9 |
| Ҡыйғы | 18,9 | 6791 | 35,9 |
| Краснокама | 42,6 | 10273 | 24,1 |
| Күгәрсен | 31,7 | 15079 | 47,8 |
| Күмертау | 23,7 | 8401 | 35,8 |
| Кушнаренко | 28,2 | 1582 | 5,5 |
| Мәләүез | 26,7 | 9154 | 34,5 |
| Мәсетле | 23,6 | 12042 | 51,4 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Миәкә | 30,2 | 7708 | 25,3 |
| Мишкә | 28,5 | 1523 | 25,5 |
| Нуриман | 23,4 | 6579 | 28,6 |
| Салауат | 26,9 | 15533 | 58,9 |
| Стәрлебаш | 21,6 | 5935 | 27,4 |
| Стәрлетамаҡ | 33,5 | 4537 | 13,5 |
| Тәтешле | 26,2 | 13962 | 53,6 |
| Туймазы | 30,2 | 9588 | 31,3 |
| Өфө | 52,6 | 4381 | 8,3 |
| Учалы | 32,1 | 24122 | 75,4 |
| Федоровка | 19,8 | 2772 | 14,0 |
| Хәйбулла | 29,9 | 19888 | 66,0 |
| Саҡмағош | 32,7 | 6107 | 18,7 |
| Шишмә | 45,6 | 5760 | 12,7 |
| Шаран | 23,9 | 1525 | 6,4 |
| Яңауыл | 49,9 | 17611 | 36,3 |
| Әбйәлил | 39,6 | 32976 | 84,8 |
| Әлшәй | 47,5 | 12364 | 26,5 |
| Ҡалалар | | | |
| Өфө | 1.082,0 | 122,026 | 11,3 |
| Бәләбәй | 53,5 | 4155 | 5,5 |
| Белорет | 72,5 | 14464 | 16,4 |
| Бөрө | 34,8 | 2780 | 8,0 |
| Ишембай | 69,9 | 16107 | 22,9 |
| Благовещен | 27,7 | 1719 | 6,2 |
| Күмертау | 67,5 | 9136 | 13,4 |
| Мәләүез | 53,5 | 10632 | 20,0 |
| Нефтекамск | 106,8 | 22601 | 20,6 |
| Октябрьский | 104,80 | 9322 | 9,4 |
| Салауат | 149,7 | 22858 | 15,2 |
| Сибай | 48,3 | 20245 | 41,0 |
| Стәрлетамаҡ | 247,8 | 27663 | 11,2 |
| Туймазы | 87,7 | 12748 | 14,4 |
| Учалы | 32,4 | 14247 | 40,3 |
| Республика буйынса | 3943113 | 863,808 | 21,9 |

## БАШҠОРТОСТАНДАН СИТТӘ ЙӘШӘГӘН БАШҠОРТТАР ҺАНЫ

| Республика, өлкә, ҡала | Башҡорттар һаны |
|---|---|
| Һамар өлкәһе | 7495 |
| Ҡурған өлкәһе | 17548 |
| Ырымбур өлкәһе | 53339 |

| | |
|---|---|
| Пермь өлкәһе | 52326 |
| Һарытау өлкәһе | 4087 |
| Татарстан | 19106 |
| Екатеринбург өлкәһе | 41500 |
| Төмән өлкәһе | 41059 |
| Силәбе өлкәһе | 161169 |
| Яҡутстан | 4190 |
| Новосибирск өлкәһе | 3500 |
| Мәскәү | 5000 |
| Санкт-Петербург | 4000 |
| Украина | 7402 |
| Үзбәкстан | 34771 |
| Ҡаҙаҡстан | 41347 |
| Грузия | 380 |
| Әзербайжан | 580 |
| Ҡырғыҙстан | 4026 |
| Тажикстан | 6821 |
| Төркмәнстан | 4678 |
| Латвия | 630 |
| Литва | 420 |
| Эстония | 370 |
| Әрмәнстан | 145 |
| Молдова | 610 |
| Беларусь | 1250 |
| Кемерово өлкәһе | 4369 |
| Удмурт ССР-ы | 5217 |
| Амур өлкәһе | 2289 |
| Коми ССР-ы | 1513 |
| Чита өлкәһе | 2138 |
| СССР-ҙа башҡорттар | 1.449157 кеше |
| РСФСР-ҙа башҡорттар | 1.345527 кеше. |

* Башҡортостан. 1991 йыл, 5 декабрь.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


*Авторҙан бер кәлимә һүҙ* ........ 5
«Берлектә — тереклек» ........ 6
Ата-бабаларыбыҙ аманаты ........ 6
«Үҙ аҫаба ер биләмәһен яҡлап, башҡорттар йыш ҡына баш күтәрҙе һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбан бирҙе» ........ 15
1. Эндрәй ҡаҙнаһы ........ 15
2. Батша һәм ислам дине ........ 18
3. Пугачев полковниктары ........ 23
4. Кинйә абыҙ ........ 32
5. Ҡасҡын полковник Һамаров ........ 38
6. Яҡутстандағы башҡорттар ........ 43

«Тыуған илдәй ил булмаҫ»

1. Ауылдар ҡасан барлыҡҡа килгән? ........ 63
2. Бер ауылдың тарихы ........ 77
3. Мәңге бурыслыбыҙ һиңә, Тыуған илем! ........ 79

«Мәғдән ауырыуы» йоҡҡан кешеләр

1. Мәғдән эҙләүселәр һәм рудопромышленниктар ........ 82
2. Башҡорттарҙың поташ заводтары ........ 93

«Йыр йырлаһам эсем бушайҙыр»

1. «Ҡыуат та ғына тигән, ай, сәсән ир...» ........ 97
2. «Буранбайҙың яҙған хатын уҡып...» ........ 103
3. «Ҡышҡынайын ҡайҙа ҡышлайым?» ........ 108
4. «Маклашка»ны кемдәр йырлаған? ........ 110

«Башҡортомдан батыр юҡ икән...» ........ 117

1. «Парижды ла күрҙек беҙ...» ........ 117
2. Ҡаһым түрә ........ 132

«Уҡымышлылар үҙебеҙҙә лә юҡ түгел»

1. Белем һуҡмағынан ........ 137
2. Тәүге уҡымышлылар ........ 148
3. Мирсаяф Бейешев ........ 152

«Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар»

1. Башҡорттоң аҫылдары ........ 158
2. Тарихи документтар эҙенән ........ 166
3. Шәйехзада Бабичтың нәҫел-нәсәбе ........ 179

«Ҡатыны икәүҙең ҡолағы тынмаҫ»

«Өйөр-өйөр ҡатын аҫрап...» ........ 193

«Бер ҡорға тупланып»

1. Кем ул типтәрҙәр? ........ 198
2. Башҡортостандағы мишәрҙәр ........ 203
3. Мишәр депутаттарының һораунамәһе ........ 211
4. Һеҙ — Өпәй башҡорттары ........ 215
5. Ил эшен алдан ҡуйып ........ 217
1989 йылда Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыуҙың йомғаҡтары ........ 221

# Схема управления
## Башкирско–Мещерякским (с 1855 г. Башкирским) войском
## в 1798–1865 гг.




Численность по данным 1826 г.

| | Башкирск. | мещ. |
|---|---|---|
| Юрт. | 375 | |
| Аулов | 1804 | 356 |
| Дворов | 42832 | 7652 |